# АҒИҘЕЛ

Өфө,
апрель
2012

4(1068)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Хәзиева *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 03.04. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 560 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0051.12.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2012 (4,1068)**

# БЫЛ ҺАНДА:


ШИҒРИӘТ

**Таңһылыу Ҡарамышева.** «Рәхмәт яуһын, рәхмәт яуһын!» Шиғырҙар. ....................5
**Ләйсән Кәшфи.** Онотма мин барын. Шиғырҙар. ....................13
**Шәүлиә Зөлҡәрнәева.** Кемдәр улар. Шиғырҙар. ....................20

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Раят Вәлиев.** Күләгәле утрау. Мажаралы повесть. Аҙағы. ....................26

ӨМӨТЛӨ ҠӘЛӘМ

**Мәүлиҙә Әхмәтйәнова.** Әлпе юғалған йыл. Хикәйә. ....................93

ПУБЛИЦИСТИКА

**Рәйсә Күзбәкова.** Милли мәғариф: мөмкинлектәр һәм бурыстар. ....................100

*1812 йылғы Ватан һуғышына — 200 йыл*

**Рафаэль Зинуров.** Башҡортостан юлы. Эпик поэманан өҙөк. ....................105
**Азат Ярмуллин.** «...Парижды ла күрҙек беҙ» ....................107

ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ

**Мөнир Иҡсанов.** Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә жанр. .........115

*Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл*

**Римма Ғәлимова.** «Аҙ-маҙ һинең менән күрешкәне...» Шиғырҙар. ....................123
**Зилиә Ҡужабәкова**. Хат. ....................125

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Бибинәғимә Хажиева.** Гөлбаныу. Повесть. ....................127

ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Ноғман Мусин.** Динис юлы. ....................150

ИМАН НУРЫ

**Рәшиҙә Ғиззәтуллина.** «Урал батыр» — Ҡөрьән аяттарында. ..157

ЯҘМЫШТАН ҺЫҘМЫШ ЮҠ

**Ишмөхәмәт Шарапов.** «Ошо йырым булыр уҡаһы». ....................178

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:


ПОЭЗИЯ

**Т. Карамышева, Лейсан Кашфи, Ш. Зулькарнаева.** *Стихи.*

ПРОЗА

**Р. Валиев.** Остров в тени. *Приключенческая повесть. Окончание.*

ПРОБА ПЕРА

**М. Ахметьянова.** Год, когда исчез Альпи.

ПУБЛИЦИСТИКА

**Р. Кузбекова.** Национальное образование: возможности и обязанности.

*200 лет — Отечественной войне 1812 года*

**Р. Зинуров.** Путь Башкортостана. *Отрывок из эпической поэмы.*
**А. Ярмуллин.** «...И Париж мы видели».

ТЕОРИЯ ЛИТЕРАТУРЫ

**М. Иксанов.** Свойства жанра в современной башкирской поэзии.

*80 лет со дня рождения народного поэта Башкортостана Р. Гарипова.*

**Р. Галимова**. *Стихи*; **З. Кужабекова.** *Письмо.*

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Б. Хажиева.** Гюльбану. *Повесть.*

ЛИЦА ДРУЗЕЙ

**Н.Мусин.** Путь Дениса.

СВЕТ ВЕРЫ

**Р. Гиззатуллина.** «Урал-батыр» — в аятах Корана.

ЭТО — СУДЬБА

**И. Шарапов.** «Пусть останется песня моя...»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...


---


**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)



● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Таңһылыу**
**ҠАРАМЫШЕВА**

## «Рәхмәт яуһын, рәхмәт яуһын!»

### *Килә йәшәгеләр*

*Бөтәһе лә артта түгел әле.*
*Алда ла бар һыуҙар — эселмәгән,*
*Һулап бөтөлмәгән һауалар бар,*
*Тойғолар бар — әле кисерелмәгән.*

*Зарығылмай ҡалған сәғәттәр бар —*
*Бар йәштәр ҙә әле түгелмәгән.*
*Һағынылмай ҡалған яҡындар бар,*
*Әрнештәр бар — әле түҙелмәгән.*

*Ҡанмай ҡалған теләк, танһыҡтар һуң?*
*Илап тороп улар ҡалһынмы ни?*
*Һөйөп бөтөлмәгән был донъялар*
*Эйәреп тә арттан барһынмы ни?*

*Күреп бөтөлмәгән күрәһеләр,*
*Эсеп бөтөлмәгән эсәһеләр...*
*Бөтәһе лә артта түгел әле!*
*Ғүмер биргәс, килә йәшәгеләр.*

---

*Таңһылыу Ҡарамышева (1948) Бөрйән районы Байназар ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Оҙаҡ йылдар Башҡортостан матбуғатында, телевидениеһында эшләне. Күп кенә шиғри йыйынтыҡтар авторы. БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

## *Оҙон юл*

*Эй, барамын, барамын.*
*Арығанмын, талғанмын.*
*Әйләнеп тә артҡа баҡһам,*
*Энә буйы барғанмын.*

*Еттем, тиеп үҙ-үҙемә*
*Ышанғанмын юҡҡараҡ.*
*Үҙеңә юл — оҙайлы юл!*
*Бүтән юлдар ҡыҫҡараҡ.*

*Белеп һаман бөтә алмайым*
*Мөғжизәле «мин»емде.*
*Сырамытам ғына һаман,*
*Танымайым үҙемде.*

*Кем мин? Ҡайҙан? Ҡайҙа юлым?*
*Төшөнәһе бар ҙаһа!*
*Йәһәт кенә етеп булмай:*
*Китеп барам Аллаға.*

## *Ышаныс*

*Ағыҙмайым мин бит йылғаларҙы—*
*Мин уларҙан һыуҙар эсеүсе,*
*Эсәр һыуым эсеп бөткәнемсә*
*Ер йөҙөндә ғүмер итеүсе.*

*Яуҙырмайым мин бит болоттарҙы —*
*Мин уларҙан хуш еҫ һулаусы,*
*Һулар һауам һулап бөткәнемсә*
*Күктең аҫтындағы юлаусы.*

*Башаҡтарға дымды мин бирмәйем,*
*Үҫтермәйем хатта әремде —*
*Ейер ризыҡтарым бөткәненсә*
*Аҫ(ы)раусы мин тик йәнемде.*

*Тәндә йәнем барҙа, ғүмер барҙа,*
*Ҡулланыусы мин тик әҙерҙе:*
*Файҙаланам ғына тәбиғәттән*
*Һәм күрһәтәм уға ҡәҙерҙе.*

*Хоҙай теләмәһә, ағастағы*
*Япраҡ та бит хатта һелкенмәй.*
*Үҙ ағышы менән бара донъя:*
*Минән рөхсәт талап ителмәй.*

*Минең ихтыярға бәйле түгел —*
*Ҡанундар бит һәр саҡ үҙ аллы.*
*Миңә ҡала бары ышанырға,*
*Күтәрергә генә Алламды.*

## Кеше аша

Кеше аша алайыҡ.

**«Урал батыр» эпосынан**

*Бер Алланың барлыҡ уйлағаны*
*Кеше аша аша бойомға.*
*Кеше теләктәре, хыялдары*
*Ғәмәлләшә, Алла бойорһа.*

*Ҙур йыһанда барлығы бер Алла*
*Һәм барлығы тик бер Кешелер.*
*Тик бер аңлы йән эйәһе — Кеше!*
*Ҡалғандары кейек ишелер.*

*Тик бер генә торлаҡ Кешенеке,*
*Кешенеке — беҙҙең Ер шары.*
*Кеше өсөн яна беҙҙең Ҡояш,*
*Беҙҙең көстөң ҡайнар усағы.*

*Бөтән көстәр, бөтән йыһандарҙа*
*Юҡ Кешеләр — аңлы эйәләр.*
*Кеше аша бирелә бар ҡанундар.*
*Кеше аша төшә сүрәләр.*

*Пәйғәмбәрҙәр аша — изге китап!*
*Ҡанун тәүҙә көстә ярала.*
*Кеше аша һәм тик Кеше өсөн*
*Бирә уны берҙән-бер Алла.*

*Ни күрергә теләй был донъяла,*
*Кеше күҙе аша ул баға.*

*Ниндәй үрҙе ул алырға теләй,*
*Кеше аша ғына алала!*

*Кешенән тыш Алла Алла түгел.*
*Кеше Кеше түгел Аллаһыҙ!*
*Бер-беренән улар айырылғыһыҙ.*
*Тоташ улар һис бер ялғанһыҙ.*

## *Ҡан*

Ҡан ҡыймылдай башланы,
Серҙе һөйләй башланы.

**«Урал батыр» эпосынан**

*Ҡабил Һабилды үлтергән —*
*Туған туғанын үлтергән.*
*Кеше кешене үлтергән:*
*Ергә яуызлыҡ килтергән.*

*Ҡанундарҙы боҙған кеше —*
*Тыйылынған ҡанды эскән:*
*Дошманлыҡты барлыҡ иткән,*
*Һуғыштарға барып еткән.*

*Ҡарайып бөткән яу ҡанын*
*Ҡоҙғон да эсмәй башлаған,*
*Ер ҙә күтәрмәй башлаған:*
*Фәрештә кешене ташлаған.*

*Ҡан ҡыймылдап киткән шул саҡ,*
*Табан аҫтында эркелеп:*
*Бысрап бөткән йәндәрен*
*Таҙартһын, тип, кешелек.*

*Ер тетрәнеп киткән шул саҡ.*
*Ҡорбан таптырған туфандар:*
*Татыулашһын, тип, туғандар.*
*Ҡан ҡоймаһын, тип, уландар.*

*Ҡан эсеүсе кешелеккә*
*Яуап бирер сәғәт еткән:*
*Әҙәм үҙен ҡотҡарһын, тип*
*Тәбиғәт тик сәбәп иткән.*

## *Бабаларым тыуған ерҙә*

*Бабаларым тыуған ерҙә —*
*Кендек ҡаны тамған ерҙә,*
*Олатам кейәү булған ерҙә,*
*Өләсәм килен булған ерҙә*
*Тыуған булыр инем мин дә,*
*Булмағанда илдә бер ҙә*
*Бәндәләргә дошман бәндә:*
*Күпме бабам һөйәктәре*
*Сереп ята Себерҙәрҙә.*
*Туңып ята Төмәндәрҙә*
*Ғәйепһеҙҙән һөргөндәрҙә.*
*Бабаларым тыуған ерҙә*
*Тыуырға мин тейеш инем.*
*Бүтән ерҙә тыуғанмын мин,*
*Һеңлеләрем, ағай-энем.*
*Бүтән төбәк — минең илем.*
*Атам кейәү булған унда,*
*Әсәм булған унда килен.*
*Бабаларым төйәгендә*
*Тыумағанға әрней күңел:*
*Залимлыҡҡа разый түгел!*
*Йәнем шуға көл дә күмер.*

*Ерҙә тамуҡ булһа әгәр,*
*Шул тамуҡты үткән олатай.*
*Кулак яһалып, гулагта*
*Булған хатта сабый — атай.*
*«Халыҡ дошманы» балаһын*
*Кем аяй, йә, кем һуң яҡлай?*
*Шул балалар хаҡынамы*
*Тамуҡтан да ҡайтҡан ҡарттай.*
*«Халыҡтарҙың атаһы»нан*
*Тик бер Алла уны һаҡлай.*
*Шуға ла бит нәҫел иҫән!*
*Заманалар уны аҡлай.*

*Заман бүтән.*
*Заңдар бүтән:*
*Йәшә, әйҙә, тыуған ерҙә!*
*Олатайҙар торған ерҙә!*
*Әсә ҡарынынан сығып,*
*Ер ҡарынын тойған ерҙә!*

*Бейек күктең аҫтарында*
*Һиңә йондоҙ бирелгәндә*
*Тәнеңә — йән, иңдәреңә*
*Фәрештәләр ҡунған ерҙә!*
*Кәүҙәң-матдәң эстәренә*
*Изге рухың тулған ерҙә!*
*Йәшә, золом кисермәйсә,*
*Хоҙай биргән ғәзиз илдә!*

## *Большевизм*

*Әйтергә бит тейеш тәүбә һүҙен*
*Гонаһтарға батҡан большевизм!*
*Ғәйептәрен ҡасан өҫтөнә алыр?*
*Ҡасан таныр? Көтә — халыҡ түҙем.*

*Ҡыҙыл террор өсөн яуап көтә,*
*Ҡанға күмгән өсөн мәмләкәтте,*
*Фашлау көтә фашизмға тиңдәш*
*Кешелеккә ҡаршы сәйәсәтте.*

*Өмөт итәм мин дә. Минең дә бит*
*Күпме бабам — золом ҡорбандары:*
*Сереп ятҡан һөйәктәре өсөн*
*Һөргөн тупраҡтары — юрғандары.*

*Һуғыштырған өсөн граждандарын,*
*Туғандарын туған һуйған өсөн.*
*Хөкөм ителергә тейеш бит ул*
*Йәһәннәмде ерҙә ҡорған өсөн.*

*Ҡасан да бит таныр большевизм*
*Яҡшы илде яман иткән мәлен,*
*«Халыҡ дошмандары» иткән өсөн*
*Яман илдең яҡшы кешеләрен.*

*Алла урынына кешегә табынып,*
*Байраҡ иткән өсөн дәһрилекте,*
*Ғәфү үтенмәгән большевизм,*
*Һаман алмаған бит бәхиллекте!*

*Таянғаны өсөн мәнфәғәткә,*
*Таянмаған өсөн мәрхәмәткә.*
*Ышана бит донъя ҡасан да бер*
*Большевизм яуап бирәсәккә.*

## Ирек

*Бұләк түгел, күктән төшмәй ирек,*
*Ул һәр ваҡыт яулап алына.*
*Ирек өсөн көрәшергә кәрәк,*
*Риза булып ҡалмай барына.*

*Үҙ ирегең таныр, башҡаныҡын*
*Танымаусы — ул бит ҡол һаман.*
*БыҒауҙарҙың аяҡ-ҡулыбыҙҙан*
*Башҡа күсеүҙәре бик яман.*

*Бәйелһеҙлек беҙҙең хаттин ашты,*
*Өҫтән төшкән ирек беҙ алҒас:*
*Туйындырыр, кейендерер кәрәк —*
*Азатлыҡ ул ас һәм яланҒас!*

*Ә беҙ көттөк әҙер табын, байрам,*
*Әҙер муллыҡ, әҙер байманлыҡ.*
*Донъя малы — дуңҒыҙ ҡаны ла бит,*
*Килеп сыҡмай ул да ҡайҙандыр.*

*Аҡ тирмәгә ҡара төрмәләрҙән*
*ҺаманҒаса сыҒа алмайбыҙ.*
*Азатлыҡҡа ҒәйепаҮҙарабыҙ,*
*Үҙебеҙҙе һаман алдайбыҙ.*

*Тотҡонлоҡтан һаман сыҒалмайбыҙ:*
*Дөрөҫ ҡулланмайбыҙ иректе.*
*Төйөлдөк тә бұләк азатлыҡҡа,*
*Йоталманыҡ тейеш өлөштө.*

*Ирекле ккә һаман киҙәнәбеҙ,*
*Киҙәнгәндәй өлөш бөтөнгә!*
*Күпме кеше илдә бәхетһеҙ баш —*
*Азат булалмаҒан өсөнгә.*

## Донъя көҙгөһө

*Көҙгө кеүек күрһәт мине,*
*Күрһәт мине үҙ-үҙемә:*
*Ниндәймен мин? Матур? Ямаҡ?*
*Ҡара, донъя, йә, йөҙөмә!*

*Ҡара минең күңелемә —*
*Күрһәт минең кемлегемде:*

*Моңһоҙлоғом, моңлолоғом,*
*Көйһөҙлөгөм, көйлөгөмдө!*

*Күрһәтһәнә, танытһана:*
*Йәшермәйем кемлегемде.*
*Пәрәнжәм юҡ һинең алда,*
*Ҡапламайым мин үҙемде.*

*Йөҙөм берәү, икәү түгел!*
*Шул йөҙөмдө килә күрге.*
*Күрһәтмәһәң һин, әлбиттә,*
*Бер ниндәй ҙә түгел көҙгө!*

*Танытмаһаң кемлегемде,*
*Һин, әлбиттә, донъя түгел!*
*Көн дә бағам һин-көҙгөмә!*
*Үҙем өсөн. Данға түгел.*

## Рәхмәт яуһын

*Яғыулығы һис бөтмәһен —*
*Күк сырағы бер үк янһын.*
*Ҡояшты бар итеүсегә*
*Рәхмәт яуһын, рәхмәт яуһын!*

*Сығанағы ҡоромаһын —*
*Алҡынһын һыу, тамсы тамһын.*
*Даръяны бар итеүсегә*
*Рәхмәт яуһын, рәхмәт яуһын.*

*Тонсоҡмаһын — тереклектең*
*Үпкәләре һулыш алһын,*
*Һауаны бар итеүсегә*
*Рәхмәт яуһын, рәхмәт яуһын!*

*Барһын алған ҡәҙер белһен —*
*Аҡылынан һәр саҡ ҡанһын.*
*Үҙен Кеше итеүсегә*
*Рәхмәт яуһын, рәхмәт яуһын!*



Ләйсән
**КӘШФИ**

## *Онотма мин барын*

*Шатлыҡтан шашҡанда күңелең,*
*Дуҫтарың күп булһа яныңда,*
*Тын ғына һөйөнөп йөрөрмөн,*
*Борсомам бәхетле сағыңда.*

*Дуҫтарың бер ваҡыт ташлаһа,*
*Һағышҡа мансыһа моң-зарың,*
*Хәсрәттәр ишелә башлаһа,*
*Онотма донъяла мин барын.*

*Мең дауам йөрәгем түрендә,*
*Ҡайғыңды нур өрөп таратам.*
*Мең ҡояш яналыр күңелдә:*
*Яратам, яратам, яратам.*

## *Ашығыу*

*Тормош — ярыш,*
*Күҙҙәр-баштар тоноп,*
*Бәреләорола алға сабабыҙ.*
*Абынабыҙ, һөрлөгәбеҙ шунда,*
*Юғалтабыҙ, ниҙер табабыҙ.*

*Ләйсән Кәшфи — БДУ-ны тамамлай. Филология фәндәре кандидаты. «Кызыл таң» гәзите редакцияһында эшләй.*

*Ашығабыҙ. Ваҡыт арттан ҡыуа,*
*Уйҙа ла юҡ намаҙ-ғибәҙәт.*
*Пенсияға сыҡҡас, килер, тибеҙ,*
*Беҙҙең холоҡҡа ят бул ғәҙәт.*

*Ваҡыт семетәбеҙ аҡшамдан һуң —*
*Хәмер сәкәштерер табынға.*
*Йәстү ине. Тештәр ҡыҙа ғына,*
*Түңкәрәбеҙ тағы, тағы ла.*

*Заманы шул, тибеҙ. Аҡланабыҙ,*
*Хөкөм итмәй беҙҙе хөкүмәт.*
*Түрәләрҙең түрендә лә шул уҡ,*
*Дөрөҫ йәшәйбеҙҙер беҙ, тимәк.*

*Бер көн һөрлөгәбеҙ — түңкәрелеп,*
*Серек ағас кеүек ауабыҙ.*
*Иҫкә төшә Тәңре, доға, яҙмыш,*
*Күҙ алдында — Әҙәм-Һауабыҙ.*

*Иҫкә төшә Хоҙай, мендәр аҫҡа*
*Ҡыҫтырабыҙ Ҡөрьән сүрәһен.*
*...Һәйбәтләнгәс, гонаһ онотола,*
*«Күрәсәкте, — тибеҙ — күрәһең».*

*Сабабыҙ беҙ шайтан эйәрендә,*
*Тағы йөҙ ҡат ауыҙ бешкәнсе,*
*Ҡурғаш тауы ҡәҙәр гонаһ йыйып,*
*Тамуҡ ҡаҙанына төшкәнсе.*

## Күңелдә йыр ҡала

*Яҙҙар килә ергә, яҙҙар китә,*
*Өмөттәрҙе өҙөп урталай.*
*Йәшкә мансып ерҙе, йәшлек китә,*
*Күңелдәрҙә бары йыр ҡала.*

*Мәңгелеккә ғашиҡ булһаҡ та беҙ,*
*Кеше ғүмере сикһеҙ түгел дә.*
*Һағыштарға һалып һөйөү китә,*
*Бары йырҙар ҡала күңелдә.*

*Күҙ килһә лә, йәшлек яҙҙарыбыҙ*
*Ғүмер буйы әйҙәп баралыр.*
*Ҡайһы саҡта өмөт уты һүнә,*
*Күңелдәрҙә бары ҡала йыр.*

*Наҙлы яҙҙар, йәшлек, һөйөү менән*
*Йәнәшәбеҙ кеүек бөгөн беҙ.*
*Бары ғүмер генә осоп үтә,*
*Йыр — мәңгелек, һөйөү — үлемһеҙ.*

## *Дуҫлыҡ күпере*

*Ыҙғышырға була туҡтауһыҙ,*
*Уҡлау менән һәм дә уҡлауһыҙ,*
*Ғүмер буйы яғалашырға,*
*Өҙөшкәнсә тартҡылашырға.*

*Йыртышырға була, туларға,*
*Ирек биреп аяҡ-ҡулдарға,*
*Сәс йолҡорға, йөҙҙө йыртырға,*
*Ашығыс ярҙам саҡыртырға.*

*Һалҡын һуғыш була башларға,*
*Гәзиттәргә яҙып фашларға,*
*Шыпырт ҡына аҫтан киҫергә*
*Йәки араларҙы өҙөргә.*

*Була үпкә һаҡлап йөрөргә,*
*Ярты илде дошман күрергә,*
*Йөҙәп больницаларға инергә*
*Һәм ваҡытһыҙ сирләп үлергә.*

*Һаҡланайыҡ бындай хатанан,*
*Беҙ бит тыуған әсә-атанан.*
*Һауыҡтырыр кеше күңелен —*
*Гөлдән үргән дуҫлыҡ күпере.*

## *Ҡайын һыуы*

*Ҡайын һыуы — яҙҙарымдың ғәме,*
*Бала саҡтың һутлы шәрбәте,*
*Ирендәге тәүге һөйөү тәме,*
*Тәбиғәттең хәйер-хөрмәте.*

*Ҡайын һыуы — Ер-әсәнең һөтө,*
*Ҡар һыуының татлы ҡаймағы,*
*Ожмах ғәмен таты, тигән төҫлө*
*Кешелеккә яҙҙың айҙары.*

*Юҡ, күҙ йәше түгел ҡайындарҙың —*
*Мәңге китмәҫ йәшлек шифаһы.*
*Гүзәллеген һиңә вәғәҙә итә*
*Ап-аҡ ҡайындарҙың зифаһы.*

*Йәшлегемдең яңғырауы булып*
*Ҡағылаһың һаман уйыма.*
*Яҙҙың һутлы сағын юғалтмайыҡ,*
*Әйҙә, киттек ҡайын һыуына.*

## Башҡорт теле

*Бик тә нәфис, йомшаҡ, наҙлы башҡорт теле,*
*Туғанлыҡты ололаған аҡ йорт теле.*
*Бер-береһен һөйөп һайрар ҡоштар теле,*
*Ауыр саҡта ҡулын һуҙған дуҫтар теле.*

*Ебәк кеүек еләҫ елдә тирбәнәһең,*
*Һүҙҙәреңдең йылыһына киңәнәһең.*
*Ауаздарың йәнгә рәхәт биреп тора,*
*Уңып бешкән бауырһаҡтай иреп тора.*

*Селтер-селтер ағаһың һин шишмә кеүек,*
*Был донъяға илаһи нур, һөйөү түгеп.*
*Һеңгән һиңә ҡурай моңо, дала йыры,*
*Дошманыңа һин аяуһыҙ, ҡырыҫ, ҡоро.*

*Теүәл дә һин, ғорур ҙа һин, мәртәбәле,*
*Һиндә — батырҙар һулышы, улар йәне.*
*Төркөйҙәрҙең һин иң һылыу туғанылыр,*
*Балдай татлы, һөттәй йылы булғанылыр.*

*Тамырҙарың — тыуған ерҙең кендегендә,*
*Ҡәҙерләһең мең йыл элек һәм бөгөн дә.*
*Теймәһен, тим, һиңә үсал заман еле,*
*И мөҡәддәс туғанлыҡ һәм дуҫлыҡ теле.*

## Күңел гөлөм

*Тыуған көнөң менән ҡотлайым тип,*
*Күңелемдә гөлдәр үстерҙем.*
*Яҙҙар наҙы менән иркәләнем,*
*Йәйғор нурҙарынан төҫ бирҙем.*

*Ҡабул ит һин минең бүләгемде,*
*Саф күңелең менән ҡабул ит.*
*Бер илатһын, бер йырлатһын гөлдәр,*
*Гәлсәр хистәреңә ҡағылып.*

*Күңел гөлөм алып һиңә барам,*
*Аҡ теләктәр — уның таждары.*
*Күрешеүҙәр — үҙе оло бүләк,*
*Бергә булыу беҙгә яҙманы.*

*Гөлләмәләр шиңеп һулығанда,*
*Күңел гөлөм ҡоймаҫ сәсәген.*
*Мин быйыл да тыуған көнөң менән*
*Һине ҡотлар өсөн йәшәнем.*

## Онота алыу

*Тәҙрә шаҡып башҡа йөрөмәмен*
*Һинең йорт эргәһендә,ҡар йырып.*
*Ҡерпек ҡаҡмай төндәр оҙатмамын,*
*Көндө ҡаршыламам ҡаңғырып.*

*Һиңә атап башҡа йыр сығармам,*
*Ҡулъяулыҡтар сикмәм бүләккә.*
*Былай ҙа бит нисә яра һалдың,*
*Нисә ямау һалдым йөрәккә.*

*Һин үҙең дә онот инде, йәме,*
*Юҡһынам, тип хәбәр һалма һин.*
*Ябай күңелем тағы бер ҡуҙғалып,*
*Тағы бер ымһынып ҡалмаһын.*

*Онота алыу — ҡаһарманлыҡтыр ул,*
*Бөйөк солох, иман билгеһе.*
*Ғәйепләмә онота алғандарҙы,*
*Үҙ яҙмышы менән килешеп.*

## Шиғыр ҡәҙере

Туҡай көнөнә

*Күп яҙабыҙ хәҙер шиғырҙарҙы,*
*Хистәр тулыша ла түгелә.*
*Тиҙерәк баҫтырырға ашҡынабыҙ:*
*Шедеврҙыр, бәлки, кем белә?*

*Ҙур яңылыҡ асҡанбыҙҙыр төҫлө,*
*Бөйөк фекер тыуған — күрегеҙ!*
*Беҙҙең мәшһүрлеккә баһа юҡ, тип*
*Һыҡрап-рәнйеп йөрөй күбебеҙ.*

*Яҙғаныңды кеше уҡығанса,*
*Йәнәшә ҡуй Туҡай, Таҡташҡа,*
*Нимә өҫтәй алдың оҫталарға,*
*Шуны уйла, дуҫым, һин башта!*

*Ниндәй хәҡиҡәтте ярып һалдың,*
*Кемдең күҙен астың, намыҫын,*
*Шиғри бизмәндәргә һалдың мәллә*
*Заман борсоуының барыһын?*

*Күңелдәргә уҡтай үтеп керһен*
*Фекереңдең үткер, ғәҙеле.*
*Төшөрмәйек әле һүҙ баһаһын,*
*Юғалмаһын шиғыр ҡәҙере.*

## Яуап көтмә

*Минән яуап көтмә мөхәббәттә,*
*Мин яуапһыҙ ғына яратырмын.*
*Диңгеҙҙәрҙән иҫкән елдәр булып,*
*Хистәреңде һинең яңыртырмын.*

*Минән яуап көтмә мөхәббәттә,*
*Һоҡланырмын йыраҡ-йыраҡтарҙан.*
*Күңел аҡлығымды һин танырһың*
*Йәшеллеккә яуған ап-аҡ ҡарҙан.*

*Минән яуап көтмә мөхәббәттә,*
*Яуап бирер һиңә бөтә ғәләм.*
*Бар диңгеҙҙәр зәңгәр ҡара булһа,*
*Бар ағастар булыр шиғри ҡәләм.*

*Минән яуап көтмә мөхәббәттә...*

## *Яҡташтар йылыһы*

*Ҡолағым онотҡан иң йылы һүҙҙәрҙе*
*Күп йылдар уҙғастын ишеттем.*
*Бер йылы тамсынан ирей ҙә китә шул*
*Өшөгән күңеле кешенең.*

*Гөлдәргә төрөнгән йәшлегем йылдарын*
*Сит-яттар ҡарашы көйҙөргән.*
*Ярай ҙа, моң ҡалған, ярай ҙа, нур ҡалған,*
*Гүйә, йән ҡыҫаһы тимерҙән.*

*Донъяға нур һибеп, селтерәп көлһәң дә,*
*Болотҡа төрөрҙәр күңелең,*
*Бер кем дә ишетмәҫ, сит-яттар иш итмәҫ,*
*Тапарҙар, һытырҙар кемлегең.*

*Ярай ҙа, донъяла тыуған яҡ әле бар,*
*Яҡташтар күңеле яп-яҡты.*
*Уларҙың ихластан яратып ҡарауы*
*Күшеккән йәнемде уятты.*

*— Һин һаман шундайҙыр, саялыр, тырыштыр,*
*Тауышың яңғырай елдәрҙә!*
*— Күнсөлдәр һөрөмөн нур өрөп таратам,*
*Яҡташтар, донъяла һеҙ барҙа.*



Шәүлиә
ЗӨЛҠӘРНӘЕВА

## *Кемдәр улар*

Үҙ аллы уйлауҙың тәүге шарты —
эшләгән эште һөйөү.
**Иҫәнбикә Туған**

*Кемдәр улар шағирҙар?*
*Ниндәйен кешеләр,*
*Шағирҙар... Ауыҙлы,*
*Эсендә теше бар.*

*Иң ҡаты есем ул*
*Кешелә был тештәр.*
*«Тел» тигән есемде*
*Һаҡлаусы ул көстәр.*

*Шул теле — шағирҙың*
*Берҙән-бер ҡоралы,—*
*Ҡүтәрә, төшөрә,*
*Йығылта торғаны.*

*Теленән шағирҙы*
*Һөйәләр, һиҙәләр.*
*Артынан юлына*

*Шәүлиә Зөлкәрнәева (1946) Учалы районы Ахун ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай, уҡытыусы булып эшләй. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Учалы ҡалаһында йәшәй.*

*Көл, сип-сар... Юҡ, түгел! —*
*Гөл-сәскә һибәләр.*

*Шағирҙың халәте —*
*Яңғыҙлыҡ. Үҙаллыҡ.*
*Уйҙарҙан уйылып*
*Донъяны күҙаллау.*

*Шағирҙың яҙмышы —*
*Яҙыныу, ҡаҙыныу.*
*Мөҡәддәс һүҙ эҙләп,*
*Шиғырға табыныу.*

*Барыһын һөҙгөсләр*
*Шағирҙа йөрәк бар,*
*Кешелек таҙартыр*
*Иманлы теләк бар.*

*Тағы ла башы бар —*
*Бик хәтәр ҡоролош.*
*Тарихта был баштар*
*Эшләгән боролош.*

*Баш уйлай. Уйҙарҙан*
*Һүҙҙәрең «бешәләр».*
*Ләззәтле емештәр*
*Ҡағыҙға төшәләр.*

*Мөкиббән шағирҙар*
*Шиғриәт эшенә.*
*«Ҡамыт»ын алышмаç,*
*Алтындар бирһендәр.*

*Шағир ул — бер ҡәлғә*
*Ай-һайҙар инеүе...*
*Шағир ул — яңғыҙ ҡош —*
*Осоуын белеүе.*

## *Көрәш*

*Күреп киләм — текмә артында,*
*Баҡсамдың эсендә — сит бауыр.*
*Оҙаҡҡа һуҙылды килмәүем,*
*Ингәндер шуға ла әҙмәүер.*

*Яҡынға етәрәк күрәмен:*
*Кәрешкә төҫөндә күлдәктә*
*Ә буйы... Буйҙары, ай-һай-һай!*
*Һөйкөмлө былайын күрмәккә.*

*Күкрәге — яландай, буй — мыҡты,*
*Йыраҡтан күҙәтә атлашым.*
*Әйтерһең, сәләмләй ҡыуанып,*
*Күргәндәй бер яҡын яҡташын.*

*Сәстәре бөҙрәһен ел тарай,*
*Арҡаһын терәгән текмәгә.*
*Этлектең сығырға уй ҙа юҡ —*
*Инеүе түгелдер тикмәгә.*

*Ул ҡарай, ҡарашы ялмауыр,*
*Иманһыҙ, күҙ быуа — арбай бит.*
*Шулай ҙа күҙҙән тыш күңел бар —*
*Шик һымаҡ бер нәмә ҡалмай бит.*

*Бирсәткә кейелгән ҡулдарым*
*Яулыкты рәтләгән булалар.*
*Тирәктән ҡалҡынып, шул ваҡыт*
*Сәпсектәр йүкәгә ҡуналар.*

*Буйына һынаулы һирпелеп,*
*Ҡаршыһына яҡын киләмен.*
*Тирә-йүн — үрмә гөл, раузалар,*
*Аяҡ аҫты — үлән келәме.*

*Уйымда бер теләк — әрһеҙҙе*
*Нисек тә еремдән ҡыуырға.*
*Кем ҡушҡан йоҙаҡлы йорт-ергә*
*Хужаһыҙ ваҡытта керергә.*

*Иҫәнлек бирәйем шулай ҙа,*
*Тигәндә алдында абындым.*
*Ҡосағына ауҙым, күҙҙәремә*
*Йәшел төҫтәр генә сағылды.*

*Эләктереп алды йәһәт кенә —*
*Ҡулдары, әйтерһең, ҡыпһыуыр.*
*Ҡосағы яндыра — йөҙ ватт бар —*
*Лампочка тоҡаныр ут тыуыр.*

Ә ҵпкән ирене? Уй, зәһәр!
Әйтерһең, ялҡында яндыра:
Бейетә ҡандарҙы тондороп,
Хатта ки күҙ йәшен тамдыра.

Ҡапылда эләккән был хәлгә
Баҙайым да төшәм, ҡойолоп.
Йүнһеҙҙең ошондай ҡылығын
Сәпсектәр күрәләр оялып.

Битемдең янғанын тоямын,
Беләктә, әйтерһең, мең ҡаяу.
Күрһәләр күршеләр, көлөрҙәр —
Телдәргә бер төшһәң, юҡ аяу...

Улай ҙа итәмен, былай ҙа
(Һөйәк тә түгел шул еңелдән),
Был ҡәһәр төшкәндең ҡулынан
Булаһым килмәй шул еңелгән.

Тырышам нисек тә еңергә:
Башҡаса бер әмәл тапмағас,
Тартамын бер үҙәк тамырын —
Тотҡандай бер эҫе табағас.

Әрнеүгә түҙалмай был «ғифрит»,
Ялбыр-йолбор килеп сайҡала.
Ул ара тырнаша, семетә —
Өнһөҙ көрәш бара, айҡалаш.

Ғәйрәтемә ҡөҙрәт — билдән алам,
Әллә нисек быға көс еткән?!
Саяланып тороп тартҡаныма
Ауып китте
Тауҙай кесерткән.

## Өфө – Учалы юлдары

Һигеҙ сәғәт урман араһынан
Автобуста елеп бараһың.
Юл буйына бөтә эшең бераү —
Шылған һүрәтләмә ҡарайһың.

Анау төштә Ирәмәле ҡалды,
Түбәһендә һаман ҡар ята.

*Тауҙар, тауҙар... Ҡаҙап ҡуйған кеүек*
*Ҡарағайҙар япҡан һәр яҡтан.*

*«Ҡәйнә теле» эргәһендә — упҡын,*
*Шыршы башы аҫта сайҡала.*
*Ҡайҙа аҫҡа ҡарау, йөрәк — уста,*
*Тел өйөрә бер һүҙ: «Ай, Аллам!..»*

*Имен генә, ярай, үтеп киттек,*
*Ә түбәндә яна машина.*
*Кемдең ғәзиздәре икән осҡан,*
*Бәлә килде кемдең башына?*

*Урман коридоры аша — үргә,*
*Бында һалҡын еңел кейемдә.*
*Бейек нөктә. Самолетта кеүек*
*Ҡолаҡ сыңлай, ҡайнай мейең дә.*

*Тулҡындарҙа йөҙгән карап кеүек*
*Йә тауҙарға ашып, йә төшөп,*
*Матурлыҡты күҙҙәр менән эсеп,*
*Эй, eлә6еҙ бешеп йә өшөп.*

*Туйҙыралыр әгәр көн дә күрһәң,*
*Електерә хатта сибәр йөҙ.*
*Тик тәбиғәт һәр саҡ күҙ һөйөмө —*
*Ялыҡтырмай, туймай күреп күҙ.*

## Бағышлауҙар

*Иман төшөнсәһе ҡасҡан илдә —*
*Холоҡһоҙлоҡ. Юҡ бер тоғролоҡ.*
*Һин бер утрау. Ҡалай һаҡландың һин?*
*Ихласлығың йырға торорлоҡ.*

***

*Мөхитемдең рухи һандығының*
*Зиннәттәрен яйлап талайҙар.*
*Ошоларҙы күреү, һиҙеү ауыр —*
*Башҡа өсөн был хәл ҡалайҙыр...*

* * *

*Һоҡланамын булмыш-сифатыңа,*
*Бейек һинең күңел донъяһы.*
*Рухың бейеклеген, аҡыл асылыңды*
*Аңлайһы бар әле, аңлайһы.*

* * *

*Тура һүҙле сая замандашым,*
*Тотанаҡлы, ғәҙел фекерле!*
*Булмағаның өсөн ике йөҙлө*
*Һине яратамын түгелме?*

** *

*Сей утын, мыжыҡ ир, илаҡ бала —*
*Ҡатындарҙы ошо ҡартайта.*
*Йыш банкеттар, бәйһеҙлек, импотент —*
*Ир-заттарын ошо ҡалтайта.*

## Тыйнаҡ матурлыҡ

Өфөләге «Нефтсе» мәҙәниәт йортона
ҡаршы юл аша мөйөштә ағаслыҡ бар.

*Был ағасты күптән шәйләгәнем —*
*Ышыҡ ҡына ергә ылыҡҡан.*
*Күргәндәрем булды томра йәйҙә,*
*Иңендә ҡар — ҡышҡы һыуыҡта.*

*Бер миҙгелгә аҡ шау булып ала,*
*Ҡыҫан ерҙә балҡып бер үҙе.*
*Сәскә атмаҫ башҡа араһында*
*Ул бер үҙе һомғол, иң төҙө.*

*Ағас урауында сабыр ғына*
*Тора. Күҙгә кермәй оҙон йәй.*
*Селләләрҙә ҡоштар ҡунып китә,*
*Күләгәгә ята эт, бесәй.*

*Август еткән. Бөгөн үтеп барам:*
*Алмағасым ҡыҙыл «ут» булған!*
*Япраҡтарҙан күбе емештәре —*
*Алмалары бешеп, һут тулған.*

*Баш ҡаланың үҙәк урамында*
*Машиналар саба, кешеләр.*
*Бер мөйөштә торған мөғжизәне*
*Күрә микән берәй өфөләр?*

Раят
ВӘЛИЕВ

# КҮЛӘГӘЛЕ УТРАУ*

### Мажаралы повесть

**18**

Диуана, иҫәр, ахмаҡ, ауһар, хыялый, туңбаш, дөндөк, иҫәүән, ағас, буш ҡыуыҡ, һыумейе, алйыу... Халыҡ телендә әҙәм балаһының аң-фиғелен үлсәүсе һүҙҙәр байтаҡ. Әммә улар түбәнгә йә юғарыға илткән үҙ-ара бәйләнешле һикәлтәләр хасил итмәй, имеш. Йәғни диуананы иҫәүәндән аҡыллыраҡ йә, киреһенсә, иҫәрерәк тип сағыштырып булмай. Хыялый ахмаҡ булмағандай, туңбаш та алйыу түгел. Был төшөнсәләр бер үк күлдең төрлө утрауҙары кеүек. Ҡыҫҡаһы, юғарыла теҙелгән һәр һүҙҙең асылында анығ төшөнсә ятҡанын иҫәпкә алғанда, ул сифаттарҙы үҙендә бергә йыйып, дөйөмләштерергә ирешкән инсандың һын-ҡиәфәтен, холоҡ-фиғелен күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын.

Тик Геннадий Самуилович Шприц шул һығымта менән риза түгел. Сөнки һуңғы көндәрҙә ошо сифаттарҙың барыһын да үҙендә тойоп йөрөй. Талап алған хазинаның дәүмәл-дәрәжәһен шутлап сығарғандан бирле шундай хәлгә килде ул. Ундағы мөлкәт иҫ киткес ҙур булып, бер яҡтан, шиғәлсенең күңелендә сикһеҙ ҡомһоҙлоҡ уятһа, икенсе яҡтан, оло шом ҡуҙғатты. Бер кем менән дә бүлешмәйенсә, хазинаны тик үҙендә генә йомдороп ҡалғыһы килде уның. Әммә был – бик сетерекле мәсьәлә. Сөнки табышы тураһындағы имеш-мимеш төрлө яҡҡа тарала башлаһа, бурҙар ҡормошонан «общак» тип килеп тә етәсәктәр. Ә улар сама белмәй. Тағы ла: ул хәбәр бурҙар ҡанундарын танымаған башы боҙоҡтарҙың ҡолағына керһә, уларҙың алҡымға бысаҡ ҡуйып, бер тин ҡалдырмай һыпыра тартып алырға маташыуҙары мөмкин. Генка Шприц бурҙар араһында исем-шәрифһеҙ, теш-тырнаҡһыҙ түгел дә, тик ундай осраҡта ишәй-ҡушайһыҙ япа-яңғыҙ ҡалыу өмөтһөҙ. Ә инде терәк эҙләп, сереңде кемгә әшкәртһәң дә, тапҡан малды бүлешергә кәрәк буласаҡ. Шуға ла әлеге хазинаны бер кемгә лә белдермәй генә тартып алыу мөмкинлеге булып та, шуны ҡулдан ысҡындырыуына үкенде Геннадий Самуилович. Ашығыуҙан булды барыһы ла, күҙ алдына килеп ятҡан мөлкәтте

*Аҙағы. Башы 3-сө һанда.

ысҡындырыуҙан ҡурҡты. Әйтмә лә, яңғыҙы ғына аңдып, яңғыҙы ғына тартып алғанда, әлегеләй башы ла ауыртмаҫ ине бит. Яланда яңғыҙ үҫкән сауҡалай йәш ҡыҙҙы үҙе генә «һындыра» алмаҫ инеме ни? Ә ул Борька-электрик, Витька-гусарҙы эйәртеп алды. Яңы ғына төрмәнән сыҡҡан был икәүгә, телегеҙҙе тыймаһағыҙ, ҡырҡып алып үҙегеҙгә һоғондорам, тип янағайны ла, барыбер ышаныс юҡ ул әрәмтамаҡтарға. Етмәһә, теге мент килеп ҡыҫылды. Көтмәгәндә. Әлбиттә, хазина талау тураһында күрәләтә ғауға сығарып, законлы нигеҙҙә тикшереү башларға башына тай типмәгән уның. Ниңә тигәндә, беренсенән, хазина табыуҙы иҫбатлаусы дәлилдәр табыу бик ситен булһа, икенсенән, менттың йөрәгендә Әминә исемле ҡәҙерле «сөйәл»е бар. Геннадий Самуилович, сәбәбе сыҡһа, шул сөйәлгә тағы баҫасаҡ. Ләкин ул саҡта, менттың һарыуы ҡайнап, хазина хаҡында бурҙарға шыбырлауы мөмкин. Бурҙар тормошон үҙ донъяһылай белгән мент өсөн ауыр түгел был. Нисек кенә булмаһын, уның ауыртҡан еренә ара-тирә баҫып, иҫкәртеп тороу фарыз. Был уны Геннадий Самуиловичтан алыҫтараҡ йөрөргә мәжбүр итәсәк. Шул уҡ ваҡытта, был йәһәттән, һаҡһыҙ ҡыланып, уның асыуына ныҡлы тейергә лә ярамай. Мөхәббәт – көслө хис, ул ҡурҡаҡтан да батыр яһай. Кисерештәренән аҡылын юйып, әйткәненсә, атып китеүе лә бар. Ә Борька менән Витькаға килгәндә инде… Уларҙың булмышы хазинаның бер тәңкәһенә лә тормай. «Общак» хаҡында һүҙ генә сыҡһын әле. Әйткәндәй, килер бәлә сәбәбен алдан алып, юҡ итеүгә етмәй инде… Ә инде, төндә тәҙрә ҡағып, тупһа тапай башлаһалар, һис шикһеҙ, аяҡ терәп һатыулашыу мәғкул. Хазинаға алмаш итеп ата бур дәрәжәһе биреүҙәрен талапларға кәрәк.

Геннадий Самуилович, өҫтәл артынан тороп, тәҙрә янына килде. Күрсәле, ямғыр яуа, имеш. Ҡала өҫтөнә килеп менгән мендәрҙәй генә болоттан, оҙон сәс толомолай ишелеп, ергә тамсылар оса. Болот ситенә йәбешкән ҡояш, ямғыр тамсыларын теҙеп, болоттан ергә аҫылынған көмөш ептәр һуҙа. Кафе алдындағы саң, ҡатламдары кинәт баҫҡан һыуға ебеп өлгөрмәйенсә, асфальт буйлап аға. Ямғырҙан ҡасып кешеләр йүгерешә. Юл аша сығып барған таяҡлы ҡарсыҡ усына йыйған йылы ямғыр тамсылары менән битен сылата, янына туҡтап сигнал иткән машинаға иғтибар ҙа итмәй.

Кафеның асыҡ ишеге артында торған йылмаяҡ Витька-гусарҙың ҡулында шешә йылтыраны. Борька ла шунда. Боҫоп ҡына хәмер эсәләр. Геннадий Самуилович залға сыҡты. Һатыусы ҡыҙ, кафе бушауҙан файҙаланып, өҫтәлдәрҙе һөртөп йөрөй ине. Хужа кеше, бар алдындағы бейек ултырғысҡа ҡунаҡлап, ҡыҙҙы янына саҡырып алды.

– Теге әрәмтамаҡтарға хәмерҙе һин бирҙеңме? – тип һораны ул ҡыҙҙан, Витька менән Борьканы күҙаллап. Ҡыҙ, яҙыҡ эштә тотолғандай, ҡыйынһынып, ҡулдарын алъяпҡысына һөрттө.

– Бирҙем шул, – тине ул, иҙәнгә ҡарап. – Быуалар бит… Янайҙар, етмәһә. Мин уларҙан ҡурҡам. Кискә, кеше күбәйгәс, хаҡын ҡайтарырмын әле…

Геннадий Самуилович кеҫәһенән аҡса сығарып, ҡыҙға һондо.

– Эш хаҡың. Башҡаса бында килеп йөрөмә.

Ҡыҙ, күҙҙәрен зәһәр ҡыҫып, хужаға ҡараны ла йөҙөнә төшкән сәс шәлкемен тыны менән ситкә өргәс, аҡсаны алып, салбар кеҫәһенә тыҡты.

– Аллаға шөкөр, ҡотолдом был йылан ояһынан…

Ҡулындағы сепрәкте барға атып, алъяпҡысын һалғас, матур баҫып ишектән сығып китте.

Эш хәмерҙә түгел, әлбиттә. Үткәндә әлеге һылыуҙы үҙе туҡматып ғәрип иткән әүәлге мент Олег менән бергә шәйләп ҡалғайны ул. Нисек осрашып

танышҡандарҙыр, билдәһеҙ, әммә аралары бик йылы тойола. Бигерәк тә ҡыҙ күбәләктәй осоп йөрөй коляскалағы ғәрип янында. Тегеһе, уңайһыҙланып, йә ағара, йә ҡыҙара... Уҙған аҙнала, көтмәгәндә генә, менттар килеп баҫып, «һул»дан кергән ун йәшник хәмерҙе һатыуҙан тыйып, тауарҙы бикләп киттеләр. «Боҙоҡ» хәмерҙең бер шешәһен дә һатып өлгөрмәгәйнеләрсе... Тимәк, кемдер шикәйәт иткән. Әлеге ҡыҙыйҙың эшелер, тип шикләнде хужа. Нисек кенә булмаһын, менттар менән сыуалған кешене эштә тотоу ҡуйынында күрәләтә йылан аҫрау менән бер. Йәл, эшкә ихлас ине...

Геннадий Самуилович бүлмәһенә кереп, өҫтәлдәге дәфтәрен асты. Бушаған урынға яңы эшсе табырға кәрәк. Күпмелер ваҡыт элгәре эш һорап килгән берәүҙе теркәп ҡуйғайны дәфтәренә.

Шул саҡ ишектә Ванька-гусар күренде.

– Геннадий Самуилович, унда һеҙгә кемдер килгән, – тине ул, ишек артына ымлап. Гусар ҡушаматы Ванькаға кәүҙәһен һәр ҡайҙа ла уҡтай төҙ тотоп йөрөгәне өсөн йәбешкән. Әле лә, хәбәрен әйткәс, эйәген һоноп, үксәләрен бергә терәп ишек янында ҡатып ҡалды. Хужа ҡулындағы кеҫә телефонын өҫтәлгә һалып, беҙҙәй осло ҡарашын яранына ҡаҙаны.

– Кем ул?

– Исемен әйтмәй. Миненсә, ситтән килгән булһа кәрәк.

– Эш ваҡытында хәмер эсеп, иҫерек йөрөгәнегеҙ өсөн Борька менән икегеҙгә меңәр һум штраф, – тине ҡулдарын түшенә ҡаушарып ултырған хужа.

Ванька-гусар, керпеген дә һелкмәй, шым ҡалды. Әйткәндәй, уның һын-ҡиәфәтенә ҡарағанда, командиры алдында торған һалдаттай үксәләрен шаҡылдатып, «баш өҫтө» тиеүенә бер ҙә ғәжәпләнмәҫ ине Геннадий Самуилович. Ҡарап тороуға баҫҡан ерендә абынып, һеперелеп йөрөгән әрпеш Борька-электрик менән Ванька-гусарҙы йәнәш ҡуйырлыҡ та түгел. Шуға ҡарамаҫтан, был икәү, Ишәй менән Ҡушай һымаҡ, бер-береһенең артынан ҡалмайҙар.

Бүлмәгә килеп кергән урта буйлы әҙәмдең өҫтөндә зәңгәр төҫтәге ҡыҫҡа еңле елбәҙәк күлдәк менән һорғолт иркен салбар. Һары сәстәре ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған. Ҡорһағы юҡ, беләктәре тулы, тупаҡ бармаҡ быуындарының тиреһе ҡалын. Һын-ҡиәфәте менән хәрбиҙәрҙе хәтерләтә. Был кешенең бар булмышында бер ҡарауҙан иҫтә ҡалырлыҡ һыҙат булмай, ул, тәҙрә быялаһылай, төҫһөҙ, билдәһеҙ ине. Өҫ кейемен алмаштырһа, уны икенсе күреүҙә танмыясағына шикләнде Геннадий Самуилович. Ундай кешеләрҙе, ғәҙәттә, шымсылыҡта файҙаланалар. Геннадий Самуилович һағайҙы. Теге әҙәм, башын бормай ғына, зәңгәр күҙҙәрен йүгертеп, бүлмәне «тенте»не. Бер айҙан һорағанда ла, бүлмәләге бар әйберҙең урын-торошон һис шикһеҙ хаталанмай һүрәтләп бирәсәктер. Геннадий Самуилович, бүлмәләге йәшерен видеокамераны тоҡандырыу ниәте менән, өҫтәл аҫтына беркетелгән кнопканы һәрмәне.

– Кәрәкмәй, – тине теге кеше, өҫтәл янындағы ултырғысҡа ҡунаҡлағас. – Уның менән һеҙ тик үҙегеҙгә генә зыян итәсәкһегеҙ...

Хужа, ҡулын иҙәп, Ваньканы бүлмәһенән ҡыуаланы.

– Енәйәтсе даирәләрендә һеҙҙең исем-шәрифегеҙ билдәле, – тине ҡунағы, томанлы ҡарашын кафе хужаһына төбәп. – Шуға ла был йомошом тап һеҙгә тәғәйенләнә. Һеҙгә Зиннур Таипович Камалов менән осрашып һөйләшергә кәрәк. Ул ҡуртымға алған утрауын башҡа кешегә бирергә тейеш. Камалов киреләнә. Уны ыҡҡа килтереү фарыз.

– Һыу менәнме? Йә ут менәнме?

Геннадий Самуиловичтың уйынлы-ысынлы биргән ошо һорауы ҡунағының телен артабан сисеүгә йүнәлтелгәйне.

– Әлегә һүҙ менән генә, – тине теге, әйткәненә баҫым яһап. – Һөйләшегеҙ, тинем бит. Артабан да киреләнһә, сиратта ут менән һыуға тарыясағы хаҡында иҫкәртегеҙ.

– Һөйләшергә була, әлбиттә, – тине хужа рыя ғына. – Һүҙ әйтеү ҡағыҙ яҙыу түгел. Тик һәр мәшәҡәттең үҙ хаҡы бар…

Алдында ултырған әҙәмдең дәүләт даирәләренән икәнлеген һиҙенгәйне Геннадий Самуилович. Мент, ахыры. Тик әлеге йомошоноң дәүләт эшеме йә кемдеңдер үҙ хәстәреме икәнлеге аңлайышһыҙ ине. Шуға ла, бер ҡарауға һуңғы һүҙҙәренең асылы ябай тойолһа ла, уларҙың төбөндә йәшерен «капкан» ята ине.

Ҡунағы кеҫәһенән бер бәйләм аҡса сығарып өҫтәлгә һалды. Геннадий Самуиловичтың эсенә йылы керҙе. Тимәк, был дәүләт һағауылының әлеге мәлдә кемдеңдер шәхси йомошон үтәп йөрөүе. Киреһенсә булһа, түләмәҫ ине.

– Баш өҫтө, иптәш полковник, – тине хужа, серле генә көлөмһөрәп. – Юғиһә, миҙал вәғәҙәләү менән генә сикләнерһеңдер, тип эсем боша ине.

Теге хужаға уҫал ҡараш ташлап, башҡа бер һүҙ әйтмәй сығып китте. Эсенә төшкәнде оҡшатманы, ысынлап та, полковник, буғай…

Шуныһы ҡыҙыҡ: ул, юғары белем алып, фиҡғы һөнәренә эйә булһа, әлеге мәлдә ни тормошло булыр ине икән? Тәфтишсеме, адвокатмы, прокурормы? Үҙҙәрен закон менән тормош араһына ҡуйған ҡағыҙ ҡорттарының тотонор ере бушаҡ, баҫкан ере тайғаҡ. Хоҙайым һаҡлаһын… Ҡағыҙҙың тик бер төрөн генә ихтирам итә Геннадий Самуилович: кеҫәлә ҡыштырҙағанын.

Ишекте шар асып, Борька-электрик керҙе. Маймыл да маймыл – ул да маймыл. Терһәгенән төҙәйтеп, ҡулын һуҙһа, сүгәләмәй ҙә иҙәнгә таянырҙай.

– Унда берәү килгән, – тине ул тамаҡ төбөнән ғырлап сыҡҡан тауыш менән.

Ишектә һомғол буйлы йәш егет күренде. Асыҡ иҙеүенән күренгән ҙур миңе түшенә ҡаҙалған үрмәксене хәтерләтә. Теге килгәнендә үк егетте аш бүлмәһенә сығарып, һөнәренә имтихан ҡылғайны инде Геннадий Самуилович. Бысаҡ-ҡалаҡҡа оҫта булып, аш-һыуға ла ҡулы килешеп тора. Йөҙ-ҡиәфәте лә килешле генә. Тимәк, барға һатыу итергә ҡуйырға ла була үҙен.

**19**

Ҡала урамдарында таңғы томан йыртыҡтары күсеп йөрөй. Күл өҫтөндә томандан ап-аҡ тау хасил булған. Хакимиәт бинаһы янында үҫкән ҡайын япраҡтары араһында шәлкем-шәлкем һары таптар бар. Ҡыҫҡа ғына йәйгә танһыҡтарын ҡандырып өлгөрмәгән ағастар, етеп килгән көҙҙөң һалҡын тынынан өшөгәндәй, ысыҡҡа күшегеп ултыралар. Август.

Асыҡ тәҙрәнән бүлмәгә еүеш һауа ағыла. Василий Петрович, биленә өргән һалҡын ипкендән һаҡланып, тәҙрәнән ситкәрәк күсеп баҫты.

Ишектә йыйыштырыусы Зоя пәйҙә булды:

– Бар, сығып тор, – тине ул, хакимиәт башлығына ҡарамай ғына. Василий Петрович, алтмышын ҡыуалаған ҡатындың зәңгәр халаты аҫтынан йәш сағында ҡосаҡлап ятҡан ҡыҙҙың гүзәл һынын эҙләгәндәй, өнһөҙ генә тегегә ҡарап тора бирҙе. Зоя, эшен ҡуйып, яурыны аша ғына уға күҙ атты.

– Нимәгә таҫырайҙың?

– Әҙәп һаҡлап, хакимиәт башлығы менән иҫәнләшер инең?

– Башлыҡ, имеш… Васька һин минең өсөн – Васька-кудряшка…

– Бесән башында аунашҡанебыҙҙа мине шулай тип иркәләй торғайның шул… Иҫеңдәме, мин дә һине ныҡ яраттым, төн буйы өҫтөңдән төшмәй, илатып бөтәр инем!

Василий Петрович, үҙе лә һиҙмәҫтән, усы менән башын һыйпап ҡуйҙы. Эх, ҡайҙа булған ул бөҙрәләр.

– Ятраҡан, ти, берәү… Алмалай ҡыҙҙы боҙоп, уйнатып-сыйнаттың да, ауыл балаһын тиңгә һанамай, нәчәлник ҡыҙын алдың.

Василий Петрович ишеккә йүнәлде.

– Һиңә өйләнһәм, ғүмерем тормошта һыйыр ҡойроғонан да матурыраҡ нәмә күрмәй уҙыр ине.

– Уҙмаһа тағы… Һиндәйҙәр батмай, бер нәмәкәй һымаҡ, барыбер өҫкә ҡалҡып сыға. Һин мут, хәйләкәр. Васька-кудряшка, ҡыҫҡаһы…

«Ҡыҙҙар шундай матур, гүзәл булалар. Ә ямаҡ бисәләр ҡайҙан килеп сығалар икән һуң?» тип аптыраған, ти, бер байғош…

Сәркәтип ҡатын урынында юҡ ине. Билдәле, әхирәттәре янына, таң менән ғәйбәт сәйнәргә киткән. Ҡаршылағы тәҙрәнән төшкән көн яҡтыһы оҙон коридорҙың ялтыр иҙәнендә сағылып, күҙҙе ҡамаштыра. Хакимиәт башлығы, аяҡ аҫтында «янып» ятҡан иҙәнгә һалмаҡ баҫып, теге осҡа йүнәлде. Уның өҫтөндә бөгөн ҡоҙғон ҡанатылай ялтырап торған ҡара костюм, ҡарҙай аҡ күлдәгенә ҡыҙыл галстук бәйләнгән.

Ишек асылыуға бүлмәләге өс ҡатындың береһе йәһәт кенә шкаф артына йәшенде. Ҡабалан ғына өҫ-башын йүнәтеп аҙапланған йәш ҡатындың ҡаршы стеналағы көҙгөлә сағылған текә имсәктәренә ҡарап Василий Петрович бер аҙ тәьҫоратланып торҙо. Бүлмәләгеләр быны шәйләмәне. Йомшаҡ диванда бот сәнсеп ултырған сәркәтибе Ғәлиә ханым, йәһәт кенә ҡуҙғалып, хакимиәт башлығына ҡәһүә ҡойҙо.

– Ултырығыҙ, Василий Петрович, – тине ул, иркә йылмайып. – Рәхим итеп, ҡәһүәнән ауыҙ итегеҙ. Бик тәмле, эсеп туйғыһыҙ!

Тәненең күҙгә күренгән һәр еренә алтын элгән оло йәштәрҙәге йыуантыҡ ҡатын хакимиәт башлығы менән баш ҡағып ҡына иҫәнләште лә өҫтәлгә биҙәкле кәнфит тартмаһы сығарып ҡуйҙы.

– Мин һине бүтәнгә алыштырырмын, ахыры, Ғәлиә ханым, – тине Василий Петрович, ҡәһүә йотҡас, уйынлы-ысынлы ғына итеп. – Ҡасан ҡарама – урынында юҡһың…

Тегеһенең күҙҙәре шарҙай булды.

– Эш көнө башланмаған бит әле, Василий Петрович?– тип Ғәлиә ханым, бик борсолған ҡиәфәттә, кәштәләге сәғәткә ымланы. – Тулайым ете минут бар?

– Василий Петровичтың эше самаһыҙ булғас, ул ваҡытын эшкә йә ялға бүлә алмай, – тип араға төштө йыуантыҡ ҡатын. – Беҙ генә сәғәткә ҡарап ғүмер уҙғарабыҙ.

– Дөрөҫ әйтәһең, Галина Петровна, – тине Василий Петрович, шкаф артынан сыҡҡан ҡатынға һынсыл ғына ҡараш ташлап. – Минең өсөн көн ни ҙә төн ни. Ах, ҡыҙҙар, ошо нәмәҫтәнең нисек теңкәгә тейгәнен белһәгеҙ икән? – тип ул алдында ятҡан кеҫә телефонына ымланы. – Бөгәсә төндә, инде ҡатыным янына күсеп кенә ятҡайным, тызылдап барлы-юҡлы дарманымды ҡабат һүндерҙе.

Ҡатындар, бер-береһенә кинәйәле генә ҡарап, көлөшкән булдылар.

– Василий Петрович, һеҙгә беренсе урынбаҫар итеп Зиннур Таипович Камаловты ҡуйырға итәләр, имеш, тип ишеттек, – тине шунда йыуантыҡ ҡатын, сер һөйләгәндәй, тауышын баҫып ҡына. Әйткәндәй, быңдай бәләкәй генә бүлмәгә лә килеп еткән хәбәр күптән инде бер кемгә лә сер түгелдер.

– Иван Керимович Бергманды ошо хәл ныҡ борсой, ахыры. Үҙәккә бер туҡтауһыҙ шылтырата, барып килергә лә йыйына, буғай…

Ғәлиә ханым ошо һүҙҙәре менән етәксеһе алдындағы барлы-юҡлы ғәйебен бер юлы юйып ташлауын һиҙҙеме икән?

– Хыял итеүҙән мал күбәймәй…

Василий Петрович шулай тиһә лә, һуңғы арала төрлө ығы-зығы сәбәбенән, Бергманды күҙ уңынан ысҡындырыуын аңлап ҡалды шунда. Нәфсел Иван Керимович күптән инде әле биләгән эш бүлмәһен ҙурыраҡҡа һәм яҡтыраҡҡа алмаштырырға ынтыла. Ысынында иһә артын таҙа тотҡан эшлекле генә бер әҙәм булһа, әллә ҡасандан уҡ моратына ирешер ине. Ҡомһоҙлоғо, шул уҡ ваҡытта эштәге йүнһеҙлеге һемәйтә уны. Шуға ҡарамаҫтан, ырыу-затына ғына хас аҫтыртын ныҡышлыҡ менән, үҙәктә кәрәкле бәйләнештәр ҙә булдырған, буғай. Әле, ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһына ынтылып, Василий Петровичты урап ҡына, шуларҙы ҡужғытып ятыуылыр. Ниәтен тормошҡа ашырырға ныҡышып, аяҡ аҫтында бутала башлаһа, көтөлмәгән бәләләр тыуҙырып, абындырыуы ла ихтимал бит әле… Тимәк, йәһәт кенә эш итеп, алдынан алыу фарыз…

Эш бүлмәһендә яңғыҙы ултырған Цупко, ишектә хакимиәт башлығы күренеүгә, ултырғысын дөбөр-шатыр ауҙарып аяғына баҫты ла, яңы ғына хеҙмәткә алынған йәш һалдаттай, ҡулдарын буйға һоноп ҡатып ҡалды. Василий Петровичтың уға ҡарата һуңғы ваҡытта ҡулланған «тәрбиә» һөҙөмтәләре шундай күренеш бирә хәҙер.

– Етәксең ҡайҙа? – тип Василий Петрович Бергмандың урынына ымланы.

– Урамда тәмәке тарта…

– Уның Телегин урынына ҡыҙығыуын мин ниңә һаман белмәйем?

– Өлгөрмәй ҡалдым. Әле генә шуны хәбәр итергә барғайным, тик һеҙ урынығыҙҙа булманығыҙ…

Цупко хакимиәт башлығының күҙ-ҡолағы хәҙер. Ул, Камаловтан ришүәт алыуға бәйле булған хәлдәрҙән һуң, Василий Петровичтың «хәстәр»е менән үҙенә шундай яуаплы бурыс алды. Йылы урынын юғалтыу мөмкинлеген һиҙеп, хакимиәт һынлы хакимиәттән буҡлы һепертке менән ҡыуылыуҙан шөрләгән егеттең нисек тә эштә ҡалырға тырышыуынан ине был. Быға ҡәҙәре етәксеһе Иван Керимович менән ҡушарлап ҡылған ҡырын эштәренең барыһын да, шул иҫәптән Камаловты талауҙарының тарихын да, энәһенән-ебенә хәтлем бәйән итеп бирҙе ул хакимиәт башлығына. Тик утрауҙағы йорт баҙына йәшерелгән ришүәт аҡсаһының, ни ғилләменәндер, бер ҡапсыҡ баҡаға әүерелеүен генә аңлата алманы ул Василий Петровичҡа. Әммә, Камалов ғаиләһенең сит ил сәфәренә юлланыуын ишеткәс, был сергә Василий Петрович үҙе лә төшөндө. Ул мал, Хоҙай ҡөҙрәте менән, шиғәлселәр ҡулынан ҡотолоп, хужа аҙбарына кире боролоп ҡайтҡан, ахыры.

Василий Петрович хакимиәт бинаһы алдында тәмәке көйрәткән Иван Керимович менән ҡул биреп күреште лә тегенең ҡулын ҡыпһыуырҙай ҡаты ҡыҫып, үҙенә тартты.

– Телегиндың урынына өмөтләнмә, – тине ул, ҡәҙимге бер хәбәр әйткәндәй йылмайып. – Ҡара уны, аяҡ аҫтында буталыуыңды туҡтатмаһаң – тапайым.

Иван Керимович Бергмандың һимеҙ йөҙө аҡлы-ҡыҙыллы булып тимгелләнде. Фани донъяға килтерер алдынан уның һын-ҡиәфәтен әүәләгән фәрештәләр, ниңәлер артыҡ ҡабаланып, башы менән кәүҙәһе араһына муйын ҡуйырға онотҡандар, буғай.

– Ҡасандан бирле бергә эшләйбеҙ, Василий Петрович, – тине ул, күҙҙәрен йәшкәҙәтеп. – Ярҙам итер урынға, ...аяҡ салып, һуңғы мөмкинлектәремдән мәхрүм итәһегеҙ.

Василий Петрович Иван Керимовичтың тирҙән йәбешкәкләнгән ҡулын ебәреп, бишмәтенең түш кесәһенән аҡ ҡулъяулыҡ сығарҙы ла ҙур тырышлыҡ менән усын һөртә башланы.

– Кәкүк балаһы, йомортҡаны тишеп сыҡҡас та, янындағы башҡа ҡошсоҡтарҙы оянан сығарып ташлай, – тине ул, үҙ алдына һөйләнгәндәй итеп. – Оямда күрәләтә кәкүк баҫырға мин һыу сәпсеге түгел. Си ля ви…

Зиннур Таипович Камаловтың хужаһыҙ-ҡарауһыҙ утрауҙы алып, буралай һауын һыйырын яшыҡ кәзәгә алмаштырған иҫәүәндәй ҡыланыуы һиҙгер күңелле Василий Петровичты һағайтмай ҡалманы, әлбиттә. Зиннур Таиповичтың һуңғы йылда, исем-шәриф сығарып, үҙәктәге шөһрәтле әмәлдарҙар менән яҡынлашыуы ла хакимиәт башлығын күптән уйландыра ине. Нисек кенә булмаһын, иғтибарлап ситтән күҙәтеүсе өсөн ҡаланың юл һәм транспорт хужалығы етәксеһенең һуңғы аралағы эшмәкәрлеге үҙенән уҫалыраҡ һыбайлы ҡулына барып эләккән арғымаҡтың «бейеүе»нә оҡшағайны. Тик, ниңәлер, тикшереп ҡарауға, үҙәктә Камаловтың «тамырҙар»ы табылманы. Был хакимиәт башлығын ныҡлы шиккә һалды. Тимәк, улар бик төпкә йәшерелгән. Ә был, үҙ сиратында, Камалов артында торған көстәрҙең мәртәбәһен уғата арттыра ғына. Төрлөсә маташып та, дәғүәсеһенә тоташҡан сылбырҙың осон таба алмағас, Василий Петрович архив даирәләренә керҙе. Был ниәткә уны әлеге утрау тирәһендә ҡупҡан ығы-зығы йүнәлтте. Ысынлап та, ни өсөн уның урынын яуларға ынтылған дәғүәселәренең юл-юҫығы шул утрауға барып төртөлә әле? Шунда, ниһайәт, архивтағы саңлы ҡағыҙ биттәренә йәшерелгән бик хикмәтле хәл төҫмөрләнә башланы. Революциянан һуң сит илгә ҡасып киткән сауҙагәр Латиповтың Хәкимйән исемле бер туған ҡустыһы булған. Граждандар һуғышы ваҡытында ротмистр дәрәжәһендәге аҡ офицер булған Хәкимйән Зәйнулла улы Латиповтың яҙмышы билдәһеҙ тарафтарҙа юғалып ҡала. Күпмелер ваҡыт уҙғас, Хәкимйән Зәйнулла улының иҫән ҡалған ғаиләһе, төпкөл ауылда, Камаловтар исеме менән пәйҙә була. Хәкимйәндең ике улы булған. Самат исемлеһе әлеге Зиннур Таипович Камаловтың олатаһы, имеш. Ә Сәғиҙулла тигәненең тарихтағы эҙҙәре егерменсе быуаттың утыҙынсы йылдарында һыуға төшкәндәй өҙөлә. Василий Петрович урынында башҡа берәү булһа, ул тапҡанына шөкөр итеп, артабан эҙләнеүҙәргә ҡул һелтәгән булыр ине. Ысынлап та, ниңә тағы соҡсонорға, ти, Камаловтың утрауҙы алып, ата-бабаларының әүәлге мөлкәтен үҙенә ҡайтарып алырға тырышыуы асыҡланды. Тик Василий Петровичтың маҡсаты утрау тарихы түгел, ә дәғүәсеһенең артындағы көстәрҙе асыҡлау ине. Ул, Сәғиҙулланың артабанғы яҙмышын белеү ниәте менән, эске эштәр идаралығында эшләгән танышына барҙы. Барҙы ла, таныш полковниктың серле генә итеп ҡолағына шыбырҙаған хәбәренән шаңҡып, байтаҡ ваҡыт иҫен йыя алмай ултырҙы.

Аҡ офицер Латипов Хәкимйәндең улы Сәғиҙулла бөгөнгө заманда бар илгә яманаты сыҡҡан ата ҡараҡ Искәндәр ҡарттың атаһы булып сыҡты.

Эйе, булған заманалар… Ил халҡы ярым-яртыға бүленеп, ата – улды, әсә ҡыҙҙы танымай, ҡырылышҡандан һуң – еңелгәндәр, артабанғы эҙәрлектән ҡотолоуҙың бер сараһы итеп, исем-аттарын, зат-ырыуын бутарға мәжбүр булған. Шул сәбәптән әлеге саҡта тамырҙарын юлларға керешкән күп кенә әҙәмдәр, ғәрәсәтле заманға еткәс, дауыл ҡыйратҡан урманға кергәндәй, аҙашып, туҡтап ҡалалар. Ә ата-бабалары ҡыҙылдарға ҡаршы көрәшкән кешеләрҙең зат-быуынын юллатыу уғата сетерекле. Сөнки тиҫтәләрсә йылдар уҙған, шаһиттар гүр эйәһе булған, быуындар алмашынған, ҡағыҙҙар буталған, янған…

Шулай итеп, әүәлге сауҙагәр Латиповтың заттары – ҡаланың юл һәм транспорт хужалығы етәксеһе Зиннур Таипович Камалов менән ата ҡараҡ Искәндәр ҡарт – шым ғына ҡушарлашып, утрауға ғына түгел, ҡалаға хужа булырға йыйынып яталар, имеш.

Тап шунда Василий Петровичтың башында бик йәтеш уй тыуҙы ла инде. Быға ҡәҙәре арҡаланған үҙәктәге абруйлы яҡлаусыларынан яҙып, ике яҡтан ҡыҫа башлаған дәғүәселәре алдында япа-яңғыҙы ҡалыуын аңлағайны инде ул. Уның урынын көҫәгән үҙәктәгеләр менән һөйләшеп-килешеү мөмкин түгел, сөнки уларҙың төп маҡсаты – уны урынынан йолҡоп алып, шунда менеп ҡунаҡлауҙан ғибәрәт. Яңғыҙаҡ Василий Петровичты улар иҫәпкә лә алмай. Ә Зиннур Таиповичҡа килгәндә, ул һаман ҡала хакимиәте башлығының йоғонтоһонан арынмаған әле. Шунан файҙаланып, Камаловты беренсе урынбаҫар итеп күтәргәндә, ҡалаға хужа булырға уҡталған көстәр араһында ярайһы уҡ хикмәтле хәл килеп тыуасаҡ. Шуларҙың иң мөһиме булып әлеге саҡта япаяңғыҙ ҡалған Василий Петровичтың Искәндәр ҡарт йөҙөндә йәшерен яҡлаусы табыуынан ғибәрәт. Юҡ, ул Искәндәр алдына баҫып, кәпәсен сисергә йыйынмай. Уға ата ҡараҡтың үҙен түгел, шәүләһен дә күрмәмешкә һалышыу фарыз. Искәндәр ҡарттың хәстәр-йомошон уның беренсе урынбаҫары Камалов йөрөтәсәк. Ә ул быға ҡамасауламаҫ. Кәрәк сағында, бәлки, ярҙамы ла тейер. Ошо хәл Искәндәр ҡартҡа килешмәҫме ни? Әлбиттә, күпмелер ваҡыттан Искәндәр ҡарт үҙенең туғанын уның урынына хакимиәт башына ҡуйыр. Әммә уға ҡәҙәре Василий Петрович әлеге ваҡытта тулып ятҡан күп кенә эштәрен түңәрәкләп өлгөрөр. Шул ғына кәрәк уға.

Ҡайһы яҡтан ҡараһаң да, Камаловты үҙ янына алыуы бик отошло булмаҡсы. Ҡыуаныҫҡа, хакимиәт башлығының был ниәте үҙәктә ярайһы уҡ ыңғай ҡабул ителде. Эшлекле Камаловты әлеге урынбаҫары – «хыялый» Телегин менән сағыштырыу ҙа ауыр. Телегин йәш әле, уға Камаловта булған хужалыҡ итеү тәжрибәһе етмәй. Телегинды Камалов урынына, йәғни ҡаланың юл һәм транспорт хужалығының етәксеһе итеп күсереү фарыз. Өйрәнһен. Ысын тормош өҫтәлдә ятҡан ҡағыҙ битендә түгел, урамда. Президент булырға ла өлгөрөр, киләсәге үҙ ҡулында. Ә Василий Петрович хакимиәт башлығының бар эшен егәрле Камаловҡа йөкмәтеп, үҙе иркендә ҡаласаҡ. Өйрәнһен Камалов. Ә теге утрауға «төртөлөп», көрсөкләнгән инвестицияға килгәндә инде…

Телегин бүлмәһенең ишек тотҡаһына ҡулын һуҙған Василий Петрович, мейеһендә кинәт кенә хасил булған томанлы фаразды тотоп ҡалырға теләгәндәй, бармаҡтарын маңлайына терәп, туҡтап ҡалды. Шунан, килгән юлынан кире боролоп, коридорҙа үтеп-һүтеп йөрөгән төрлө хакимиәт хеҙмәткәрҙәрен күҙенә лә, ҡолағына ла элмәй, бесәйҙәй һаҡ ҡына баҫып билдәһеҙ юҫыҡҡа йүнәлде. Әлеге лә баяғы Латиповтар утрауы, тигәндән, сит ил инвесторының шул утрауға ни ҡыҙығы ҡупҡан һуң әле? Архивтан билдәле булыуынса, революциянан һуң ғаиләһе менән сит илгә ҡасып киткән сауҙагәр Латиповтың ике улы, бер ҡыҙы булған. Бынан күренеүенсә, Латипов Кәрим Зәйнулла улы мөлкәтенең күп өлөшөн һаҡлап ҡалып, үҙе менән ситкә алып сығыуҙы булдырған, ахыры. Ҡалаға вәғәҙәләгән инвестиция мәсьәләһен шул утрауға терәп, утрауҙы үҙенә биреүҙе ныҡышҡан сит ил эшҡыуары сауҙагәр Латиповтың заты-ҡото түгелме икән? Бынағайыш… Шулай булмаһа, ул байға ус аяһылай ташландыҡ утрау ни бысағыма?

Әлеге фаразы раҫлана ҡалһа, унан сығасаҡ иҫәпһеҙ ыңғай мөмкинлектәрҙе тойоп уйға сумған Василий Петрович үҙенең эш бүлмәһенә ҡайтҡас ҡына иҫенә килде. Зоя ишек алдында иҙән һөртә ине.

– Әле йәшәйбеҙ икән, – тине лә хакимиәт башлығы, малайҙарса шуҡ йылмайып, йыйыштырыусы ҡатындың йомро осаһын усы менән шапылдатты. Сарбайлап, ҡулындағы иҙән сепрәге менән киҙәнгән Зоя, хакимиәт башлығы менән күҙҙәре осрашҡас, күңелле генә итеп көлөп ебәрҙе. Шул саҡ уның йылдар иҙгеләгән һырлы йөҙөндә йәш саҡтағы һылыу ҡыҙҙың күреп туймаҫлыҡ иркә ҡарашы балҡып ҡалғандай тойолдо Василий Петровичҡа.

Ҡала өҫтөнә аҫылынған ялбыр томан пәрҙәһе, ниһайәт, таралып, тәҙрәләр аша үткән сағыу ҡояш нурҙары эш бүлмәһендә уйнап, бар нәмәне яҡтырта, балҡыта башлағайны.

## 20

Ике ҡатлы был бина әүәле балалар баҡсаһы булған. Ҡасандыр ул шуға тәғәйен итеп төҙөлгән дә. Заманалар боларып торған саҡта уны, төҙөкләндереү һылтауы менән, япҡандар. Япҡандар ҙа ҡабат асмағандар. Шунан бирле был тарафтарҙа балалар тауышы ишетелмәй. Унда төрлө эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән кешеләрҙең эш урындары урынлашҡан хәҙер. Ә кескәйҙәр, кеҫәләренә бәйләм-бәйләм аҡса һалған ата-әсәһе менән етәкләшеп, ни ғилләмендер һаман ябылмай ҡалған башҡа баҡсалар ишегенә сиратҡа баҫҡандар.

Бина әйләнәһендәге ҡайын, ҡарағай ағастары бейегәйеп, үҙҙәренең үләндәй сибек саҡтарын онотҡан инде. Баҡсасының тимер ҡайсыһы кәртә буйында үҫкән йәшел ҡыуаҡтарҙы рәтләп, тигеҙләп кенә тора. Бина алдындағы майҙансыҡта торған машиналарға ҡарап, хужаларының мөлкәт-мәртәбәһен һис яңылышмай үлсәргә була.

Сатураның офисы әлеге бинаның бер ҡанатын биләй. Уның ҡулы аҫтында һораусыларҙы фиҡғы ғилеменең төрлө даирәләрендә хеҙмәтләндергән егермеләп белгес эшләй. Офис ишеге янындағы кескәй бүлмәлә – аҡ күлдәкле, ҡара салбарлы әзмәүерҙәй ике һаҡсы. Майҙансыҡта торған ҡара машинала шундай уҡ һын-ҡиәфәтле шофер ултыра. Икенсе ҡатта урынлашҡан етәксе бүлмәһенең тәҙрәләре ике тарафҡа ҡарай.

Өҫтө асылмалы ҡыҙыл машинаһы бар Сатураның. Ҡалала бер генә ул. Шул машинала урамдан уҙғанда, бар халыҡ әйләнеп ҡарап ҡала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул машина һыуһылыуҙай хужаһын йөрөтөү шатлығын һирәкләп кенә татый.

Эске телефон шылтыраны.

– Сатура Исламовна, һеҙгә Зиннур Таипович Камалов исемле кеше килгән, – тине һаҡсы.

– Үткәрегеҙ.

Күрешеүҙе һорап кисә үк шылтырата ине Камалов. Таң менән килеп тә еткән. Сатура көҙгө алдына килде. Ул бөгөн көрән төҫтәге ҡырыҫ эш кейемендә ине.

Ишекте шаҡып кергән Камаловтың өҫ-башы ярайһы уҡ таушалған. Ғаиләһен сит ил сәфәренә оҙатып, ҡатын тәрбиәһенән яҙғанғамы икән. Ауылда һикһәнен ҡыуалаған әсәһе сирләү сәбәпле, ғаиләһенән тороп ҡалғайны ул. Ғөмүмән, һуңғы тапҡыр күрешкәндән һуң Камалов төҫкә-башҡа нығ ҡына бирешеп, ябыҡҡан, хатта сәстәре лә һирәгәйгәндәй.

Сатура, танышына мөләйем генә ҡарап, күн креслоға ымланы. Тегеһе, ҡырыҫ костюмдағы ҡыҙҙы ҡапылдан танымағандай, ишек төбөндә бер аҙ тапанып торғандан һуң, төпкә уҙып, креслоға ултырҙы. Быға ҡәҙәре осрашҡандарында Сатура гел еңел-елпе кейемдә була торғайны шул.

Баҡһаң, Камаловтан утрауҙы бүтән кешегә биреүҙе талап итәләр икән. Тәүҙә

уға үҙәктән кеше ебәреп өгөтләгәндәр. Утрау өсөн быға тиклем биргәндән икеләтә артыҡ хаҡ тәҡдим иткәндәр. Һуңынан, ыҡҡа килтерә алмағас, уның янына ҡалала яманаты сыҡҡан бурҙы ебәреп, ҡүрәләтә янағандар. Шулай ҙа утрауға үҙе хужа түгеллекте тегеләргә әйтмәгән Камалов.

– Белеүемсә, ул утрауға иҡтисад, сәнәғәт, хатта сәйәсәт мәсьәләләре бер юлы барып тоташҡан, – тине Камалов. – Мин уларға яңғыҙым ҡаршы тора алмайым. Дөрөҫөн әйткәндә, утрау миңә кәрәкмәй ҙә. Уны тоторға ла, төҙөргә лә хәлемдән килмәй. Шуға ла, хаҡын күпкә арттырып, утрауҙы һатырға тәҡдим итәм. Тик торғандан ҡулға кереп килгән мул ғына аҡсанан диуана ла баш тартмаҫ.

Камаловтың хәбәре Сатураны уйға һалды. Быға ҡәҙәре бер кемде ҡыҙыҡһындырмаған ташландыҡ утрауҙың көтмәгәндә ыҙғыш алмаһына әүерелеүе һағайтты уны. Тағы кемгә хәжәте сыҡҡан икән ул сүп өйөмөнөң? Әңгәмәсеһенең тел төбөнә ҡарағанда, был мәшәҡәт бик бейек даирәләрҙең хәстәре булырға тейеш.

– Утрауҙың төп хужаһы – Искәндәр бабай, – тине Сатура, Камаловҡа текләп. – Шулай булғас, был мәсьәләне тик ул хәл итергә тейеш. Уның һүҙенән сыға күрмәгеҙ берүк.

Камаловтың күҙҙәрендә уҫал саҡҡылар тоҡанды.

– Ҡултамға талап итеп, муйынға бысаҡ терәгәндәрен көтөргә тәҡдим итәһегеҙме? – тине ул, тамаҡ төбөнән ғырылдап. – Улар оҙаҡламаҫтар! Үткәндә, ана, ҡыҙымды нимәгә тарыттылар. Юҡ, ике ут араһында ҡалып янғым килмәй минең. Утрауҙы минән алығыҙ ҙа теләгән ерегеҙгә тығығыҙ!

Сатура тәҙрәгә бағып, бер аҙға тын ҡалды. Әлеге мәлдә Ләйсән ҡыҙы тарыған күңелһеҙ хәлдең башында торған кеше янында ултырыуын белмәй, тимәк, Камалов.

– Был хәлде һис шикһеҙ Искәндәр бабайға еткерермен, – тине Сатура, Камаловҡа боролоп. – Уларҙың был эшкә бандиттарҙы йәлеп итеүҙәре ҡулдарында законлы ысулдар булмауға ишара итә. Әммә иң тәүҙә ошо бәләнең сығанағын асыҡлау фарыз беҙгә. Әлегә һеҙгә арсыйҙар тәғәйенләргә тура килер.

Камалов бот сапты.

– Бынағайыш, өлгәштем, ниһайәт, тормоштоң асылына…

Камалов сығып киткәс, Сатура ҡул аҫтындағыларға тейешле күрһәтмәләр бирҙе. Бынан кире ике арсый Камаловтан күҙ яҙҙырмай, уны көн дә, төн дә һаҡлап йөрөргә тейеш ине. Күпмегә һуҙылыр был, әлегә билдәһеҙ. Әммә шунһыҙ булмай, сөнки был меҫкенгә бысаҡ ҡуйып, ҡулына ҡәләм бирһәләр, утрауҙан ҡолаҡ ҡағыуҙы көт тә тор. Унда Искәндәр бабай ғәфү итмәҫ. Сатураның һиҙеүенсә, утрауға, дәүләт исеменән сығып, үҙ хәстәрен юллаусы бик һиммәтле кешеләрҙең ҡыҙығы төшкән. Уларҙың мөмкинлектәре сикләнмәгән. Сөнки улар, асылында үҙ моҡсайҙарын ҡайғыртһа ла, ҡылғандарын дәүләт хәстәренә һылтарға һәр саҡ булдыра ала. Шуға ҡарамаҫтан, улар ниңәлер асыҡтан-асыҡ эш итергә ҡыймай, бандиттарҙы йәлеп иткәндәр. Тимәк, ҡылыр эштәре бик мөһим һәм бик ҡырын. Бер ҡарауға, был уларҙың һалпы яғы һымаҡ. Әммә Камаловта уларға ҡаршы торорлоҡ көс тә, теләк тә юҡ. Ә утрауға ысынында иһә ата бур Искәндәр ҡарт хужа булғанды белеп ҡалһалар, дәүләттең бар ҡеүәтен уға ҡаршы йүнәлтеп, уны бер юлы тапап-иҙергә тырышасаҡтар. Дәүләткә асыҡтан-асыҡ ҡаршы баҫырға Искәндәр ҡарт һармаҡ түгел. Нисек кенә булмаһын, көтмәгәндә тыуған был сетерекле мәсьәләне хәл

ҡылыуҙың ике юлы бар. Уларҙың береһе – утрауға ҡарата ҡупҡан хәжәттең сәбәбен асыҡлап, уны юҡ итеү. Икенсеһе – утрауҙы һатыу. Камаловтың, икеләтә артыҡ хаҡ бирәләр, тиеүе дөрөҫ булһа, шул ҙур отош түгелме ни? Кесә лә тулы, баш та тыныс.

Сатураның уйҙарын бүлеп, кесә телефоны шылтыраны. Кәрим...

– Мин ҡайттым, һөйөклөм, – тине күгәрсен гөрләүен хәтерләткән йомшаҡ ирҙәр тауышы. – Шундай һағындым һине...

Уйҙар шәүләһе баҫҡан ҡыҙҙың йөҙө шул мәлдә үк балҡып китте.

– Мин дә, – тип шыбырҙаны ул, телефонын алһыу ирендәренә терәп.

– Кискә осрашырға ине. Тәүҙә ресторанға, һуңынан миңә ҡайтырбыҙ. Тәҡәтем ҡороно, йәнем, аңла мине.

– Минең дә...

Кәрим тағы ниҙер һөйләне. Әммә Сатура уның һүҙҙәрен тыңламаны ла, аңламаны ла. Ул телефондан ишетелгән тауышты бар булмышы менән, моңло көйҙәй ҡабул итә ине. Ҡыҙ, телефонын ҡолағынан алмай ғына, йомшаҡ креслоға күсеп, күҙҙәрен йомдо. Йомдо ла үҙен сикһеҙ йыһан киңлегендә итеп тойҙо. Уны тирәләп бихисап йондоҙҙар өйөрөлә, әлеге тауыш, йыһан моңо булып, тик уға ғына өндәшә, тик уны ғына наҙлай, иркәләй...

Уларҙың мөхәббәтенә бер миҙгелдән ашыу инде. Сетерекле хәлгә тарыған эшҡыуар ир фиҡғы ярҙамы һорап бында килгәйне. Уның күҙҙәре арбаны Сатураны. Уларға, гүйә, бар йыһан йондоҙҙары менән бар ғаләм тыныслығы һыйған. Ә уларҙан ағылған йылылыҡ... Ирҙәрсә матур йөҙө йылмайғанда уғата ла һөйкөмлө, иркә була. Тулҡынланып торған ҡара сәстәре ебәктәй йомшаҡ. Әммә унда артистәргә хас булған яһалма матурлыҡ юҡ. Кәримдең матурлығы тормошсан. Һомғол кәүҙәһен иркен тотоп, һалмаҡ ҡына баҫып атлаған сағында, уның һын-килбәтендә ниндәйҙер йәшерен көс төҫмөрләнә. Шуғалырмы, ҡайҙа йөрөһәләр ҙә, ҡаршыға килгәндәр ситкә баҫып уларға юл бирер, арттарынан һоҡланып ҡарап ҡалыр ине.

Сатураның балҡып торған һылыулығы быға тиклем уға бәхет килтермәне. Киреһенсә, әшәке әҙәмдәр ҡулына тарып, ауыр фажиғә кисереүенең сәбәбе булды ул. Шуға ла ҡыҙ, йөрәгенә ҡырҡ йоҙаҡ элеп, мөхәббәт хисенән ваз кискәйне. Тик Кәримдең шауҡымы, яҙын сәскә атҡан муйыл еселәй, кәртә-бикте белмәй ине. Ҡыҙҙың яңғыҙлыҡтан арып, саф хистәргә сарсаған мәле лә булғандыр, бәлки. Әлегә ҡәҙәре башҡа ҡалала йәшәгән Кәримдең дә ҡатыны менән айырылышып, яңы урында башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөгән сағы ине. Бер аҙҙан, ғишыҡҡа һыуһаған ике йөрәк айлы төндө бергә уҙғарғас, аралағы кәртәләр бөтөнләй емерелеп юҡҡа сыҡты. Кәрим Сатураның бар ғәмен белә. Ҡыҙ йәне менән дә, тәне менән дә матур иргә сикһеҙ ылығып, йөрәген бәхет ҡошолай елпеткән татлы минуттарҙы тик уның ҡосағында ғына табыр булды... Кәрим ҡатын-ҡыҙ менән уларҙы тик түшәккә һалыр өсөн генә мауыҡҡан ирҙәр затынан түгел ине. Шул уҡ ваҡытта ул бик үткер кеше булып сыҡты. Уны һөйгәненең тормошо, эше, дуҫ-иштәре ҡыҙыҡһындырҙы. Осрашҡан саҡтарында ул Сатураның көндәлек мәшәҡәттәре тураһында бик тәфсирләп һорашыр булды, сетерекле хәлдәрҙә ярҙам тәҡдим итте. Сатураның сер йомғағы Кәрим алдында аҡрынлап тағатыла барҙы. Ҡыҙ быны һиҙә ине, әммә мөхәббәт шауҡымынанмы, әллә ни борсолманы. Ысынлап та, ғишыҡ ләззәтенә

бирелгән мәлдәрҙә ара-тирә ауыҙҙан сыҡҡан өҙөк-йыртыҡ хәбәрҙән нимә аңларға мөмкин?

Ҡыҫҡаһы, Кәрим менән танышҡан көндән алып Сатураның тормошонда иң бәхетле миҙгел башланды.

Кәрим һуңғы ике аҙнала кәсеп мәшәҡәттәре менән ҡаланан ситтә йөрөнө. Шул сәбәпле уларҙың күптән осрашҡандары юҡ ине. Һуңғы ваҡытта һөйгәненең шашып иркәләүенә күнеккән ҡыҙға йәнен дә, тәнен дә ялмаған ғишыҡ утын баҫыр өсөн көн һайын бер нисә ҡат телефондан һөйләшеү генә етмәй ине, әлбиттә. Ул Кәримдең матур йөҙөн, иркә ҡарашын, бер ҡағылыуҙан һушынан яҙҙырып, әйтеп бөткөһөҙ ләззәткә батырған наҙлы ҡулдарын үлеп һағынғайны. Ниһайәт, бөгөн ул һөйгәненең ҡуйынында иреп, был хәшәрәт тормоштан бик аҙға ғына булһа ла ҡотоласаҡ, ожмах рәхәтен татыясаҡ…

– Мөмкинме, Сатура Исламовна?

Сатура диванда ултырған килеш, ләззәтле хыялы шауҡымынан, үҙе лә һиҙмәҫтән, ойоп уҡ киткән, имеш. Ул урынынан тороп, өҫ-башын рәтләне.

Нотариус булып эшләгән йыуантыҡ ҡатын уның алдына бер нисә ҡағыҙ һалды.

– Был һеҙҙе ҡыҙыҡһындырыр, тип уйлайым…

Нотариус үҙенең эшендә үҙе баш та үҙе түш, әлбиттә. Әммә, үҙ-ара ғына һөйләшеп ҡабул ителгән һәүетемсә килешеү буйынса, ул иғтибарҙы йәлеп итерҙәй «ҡыҙыҡ»лы хәлдәрҙе Сатураға еткереп торорға тейеш ине. Сөнки нотариус мисәте һуғылған ҡағыҙҙарға йыш ҡына бик ҙур мөлкәт эйәреп йөрөй.

Был ҡағыҙҙарға мисәт һуғылмағайны әле. Уларҙан күренеүенсә, һикһәнгә еткән ҡарсыҡтың ейәне әбейҙең ҡаланың бик йәтеш ерендә урынлашҡан ике бүлмәле фатирын үҙ исеменә күсерергә ниәтләнә. Фатирҙа икәүһе генә теркәлгән.

Сатура бүлмәһенә ҡарсыҡты саҡырып алды тәүҙә. Көйәнтәләй бөксәйгән таяҡлы ҡарсыҡтың йәшәрлек кәре ҡалмағаны бер ҡарауҙан күренеп тора ине. Камзолына Хеҙмәт даны ордены ҡаҙаған. Ейәне өләсәһенең фатирын һатып, уға ауылдан йорт алырға, ә ҡалған аҡсаға үҙ кәсебен башларға йыйына икән. Әбейҙең ейәненән башҡа яҡын туғандары юҡ.

– Мин ауыл балаһы бит, – ти әбекәй, йәшкәҙәгән күҙҙәрен селт-селт итеп. – Миңә ауылда йәшәү фарыз. Һыйыр, һарыҡ, кәзә тотормон, тим. Кәзә бәрәстәре шундай шуҡ, шаян булалар, уларҙың уйнағандарын ҡарап ултырыу үҙе бер мәрәкә…

Тәү ҡарауға хәбәрен дөп-дөрөҫ сурытҡан ҡарсыҡтың ҡартлыҡтан зиһене сыуала башлағанын һиҙҙе шунда Сатура. Бер һелкенеүҙән һөйәктәре ҡойолоп төшөргә торған ҡарсыҡҡа ниндәй кәзә-һарыҡ ти ул? Көндәре һанаулы бахырҡайҙың…

Ҡарсыҡтың ейәнем тигәне утыҙға ла етмәгән шөмтөр егет булып сыҡты. Яурынына төшкән ҡара сәстәре күптән инде һыу ғына түгел, тараҡ та күрмәгән. Һөйәктәре томорайып торған сибек аяҡ-ҡулдары, сиселгән арҡандай, хәлһеҙ, быуынһыҙ. Иҙеү-яғаһы ҡайышланып бөткән йәшел күлдәгенең еңдәрен, ҡашыҡ һөйәгенә тиклем төшөрөп, төймәгә элгән. Ҡул һыртарында тимгелләнеп торған ваҡ ҡына яралар бар. Шприц эҙәһенең тишектәре. Аҡтыҡ сиккә еткән наркоман был. Фатирҙы һатып, кәсеп башларға, өләсәһенә ауылдан йорт алырға йыйыныуы тураһындағы хәбәре күҙ буяу ғына, тимәк. Фатир аҡсаһын

наркотиктарға тәләфләп, притонда дөмөгәсәк ул. Ҡарсыҡҡа килгәндә инде…

Сатура, һөйләшеп тә тормай, наркоманды бүлмәһенән сығарып ебәрҙе лә ишек алдындағы һаҡсыларҙың өлкәнен телефондан саҡырып, күрһәтмәләр бирҙе.

– Ҡарсыҡтың фатиры беҙгә ҡалырға тейеш, – тине ул. – Вафат булғансы уға ҡараусы тәғәйенлә. Фатирҙы беҙгә күсереү тураһындағы ҡағыҙҙарҙы бөгөндән йыя башлағыҙ. Бөтә ҡағыҙҙар ҙа тик закон нигеҙендә тултырылырға, уларҙа күҙгә әләгерлек тә хата булырға тейеш түгел. Әйткәндәй, улары – үҙебеҙҙең эш.

– Ә ҡарсыҡтың ейәнен нишләтергә?

Сатура, тәҙрәгә ҡарап, бер аҙға ғына уйға ҡалды.

– Теләгәнен биреп торооғоҙ, – тине ул. Һуңынан, һаҡсыға боролоп. – Уға был тормошта башҡа бер ни кәрәкмәй…

Һуңғы күрһәтмәһенең ни рәүешле итеп үтәлерен белә Сатура. Ҡарсыҡ зыяратҡа ейәненән һуң юлланыр, ахыры…

...Төпкөл ауылдан сығып, ҙур ҡалалағы юғары уҡыу йортонда фиҡғы ғилемен өйрәнгән йәш ҡыҙҙың тормошо ярайһы уҡ ҡатмарлы. Башҡа һылыуҡайҙар һымаҡ аҡылға һай булһа, уға, бәлки, еңелерәк тә йәшәлер ине. Уның ҡайһы бер әхирәттәре килеп тыуған хәстәрҙәренә баштары етмәҫтәй булһа, матур кәүҙәләренең икенсе бер өлөшөн ҡулланып бәләләрен анһат ҡына хәл ҡылырҙар ине. Ә Сатураның быға ҡәҙәре ҡайҙалыр боҫоп ятҡан тәбиғи соцлоғо уянып, тәүҙәрәк гел генә һемәйткән ауылса бер ҡатлылығын фашланы ла уны хан ҡыҙылай ғорур, уҫал һәм үткер һылыуға әйләндерҙе. Был хәл матурлығы менән ир-егеттәрҙе бер ҡарауҙан әсир иткән ҡыҙҙың мәртәбәһен уғата үҫтерҙе. Йөрәге барҙары үлеп ғашиҡ булһа, йөрәкһеҙҙәре, йәш бейәгә юлыҡҡан айғырҙай, артынан ҡалмай баҫтырып ҡапларға маташты. Бергә ғаилә ҡороға тәҡдим итеүселәр ҙә булды, араларында тормош күргән, һиммәтле ағайҙар ҙа бар ине. Әммә береһе лә Сатураның йөрәгендә гөл үҫтерә алманы. Үҙенең бәҫен белгән ҡыҙ мөхәббәтһеҙ тормош ҡорорға теләмәне. Мин яратһам – мине яратмай ҡалмаҫ, тип саф мөхәббәт эҙләүендә булды. Һис юғында, ауылда уның Әхәт исемле дуҫы бар, бик һәйбәт егет. Ул һөйгәне өсөн йәнен бирергә лә әҙер. Сатура уның тәҡдимен уҡыуын тамамлағас хәл итергә һүҙ биргәйне. Ә уҡыуға килгәндә инде, үткер ҡыҙ өсөн ул көнбағыш ярыуға тиң ине. Имтихан биргәндә, уның яуабынан сүп табып, «дүртле» билдәһе ҡуйырға уҡталған сал сәсле оло ағайҙар, ҡыҙҙың күҙҙәрен тултырып ҡарауынан күңелдәре иреп, «бишле» һуғыр булдылар. Ә уҫал апайҙар менән был мутлыҡ уҙманы. Шуға ла, уларға яуап биргәндә, Сатураның йөҙө ҡырыҫ, белеме теүәл булды.

Ата-әсәһе хәлле булһа, талиптың тормошо ла түңәрәк. Тик Сатураға ундай бәхет теймәне. Өҫтөнә арыу кейем алһа, тамағы ас йөрөр ине. Етеш ғаиләләрҙә үҫкән ҡайһы бер иптәштәре тәненең күҙгә күренгән һәр еренә алтынкөмөш тағып килерҙәр ине дәрестәргә. Юҡ, Сатура уларға көнләшмәне лә, бошонманы ла. Астың асыуы яман, тигәндәй, был хәл уны уғата сәмләндерҙе генә. Киләсәктә тормоштоң бар йәмен, зауығын үҙ ҡулы менән ҡайырып аласағын белә ине ул. Шулай килеп сыҡты ла…

Сатура һаҡсы килтергән конверт эсенән ялтыр компьютер дискыһын сығарҙы. Конвертҡа ҡәләм менән «Сати өсөн» тигән һүҙҙәр яҙылғайны.

– Кем килтерҙе? – тип һораны ул, дискыны ҡулында әйләндергеләп.

– Бәләкәй генә бер малай. Шундуҡ кире сығып йүгерҙе.

Һаҡсыны сығарып ебәргәс, Сатура дискыны компьютерға ҡуйҙы. Дискыға йәшерен рәүештә төшөрөлгән биш минутлыҡ видеофильм яҙылған булып сыҡты. Ниндәйҙер бүлмәлә ултырған өс ирҙең үҙ-ара гәпләшеүе ине был. Береһе хәрби кейемдә, полковник. Олпат күренгән икенсеһенең тулҡынланып торған сал сәстәре артҡа таралған. Өсөнсөһө… Бәй, Кәрим дә баһа?!

Сатураның йөрәге, ояһынан өркөтөлгән ҡошсоҡтай тертләп, күкрәгендә тулай башланы. Һиҙгер күңелле ҡыҙ аяҙ күктә ҡапыл ғына пәйҙә булған ямғыр болотон һуңлап ҡына күреп, бар өмөтөн ямғырҙы ситкә күсерерлек осраҡлы ғына елгә бағлаған бесәнсе хәлендә ҡалғандай булды. Сатура, бар ихтыярын йыйып, түшендә тулаған йөрәген баҫҡас, экрандағы өс ирҙең әңгәмәһен ҡабат-ҡабат әйләндереп тыңларға кереште.

«Денис Даудович, беҙ уйлағандарҙы тормошҡа атҡарыр өсөн һеҙгә тағы күпме ваҡыт кәрәк булыр?» – ти сал сәсле әҙәм Кәримгә ҡарап. Күрсәле, Кәримгә «Денис» тип өндәшәсе? Сатураның йөҙөнә эҫе ялҡын бәрелгәндәй булды.

«Мәсьәлә ярайһы уҡ сетерекле булып сыҡты. Сати бик аҡыллы, һиҙгер ҡыҙ. Унан сыҡҡан бәйләнештәрҙең байтаҡ өлөшөн асһам да, Искәндәр ҡарт ойошмаһының селтәрен тулыһынса күҙ алдына килтереү өсөн, был ғына етмәй. Миңә тағы ла ике, бәлки, өс ай ваҡыт кәрәк булыр».

«Бик оҙаҡ, – ти хәрби кейемдәге ир. – Беҙҙә кадрҙар буйынса ҙур үҙгәрештәр булмаҡсы. Һеҙ Сатиҙы «тағатып» бөткәнсе, беҙҙең аҫтыбыҙҙағы ултырғыстарҙы тартып алыуҙары ла мөмкин. Сатиға ҡарата, бәлки, ҡатыраҡ ысулдар ҡулланыу кәрәктер? Һеҙ, уның менән ғишыҡ уйнап, һылап-һыйпайһығыҙ, ә ул, иркә бесәй кеүек, мырылдауын ғына белә».

«Ашыҡҡандың ҡулы ҡалтырай. Һеҙгә еңел шул, эш урындарығыҙҙан урамға ла сыҡмайһығыҙ. Ә мин унда енәйәтселәрҙең аяҡ аҫтында йөрөйөм. Искәндәр ҡарттың шымсылары аҙ түгел. Белеп ҡалһалар, тәнемде генә түгел, төймәмде лә тапмаҫһығыҙ».

«Ризамын, – ти сал сәсле ир. – Дөрөҫөн генә әйткәндә, Денис Даудович бик ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Искәндәр ҡарттың ҡараңғы донъяһын беҙҙең өсөн ярайһы уҡ яҡтыртып өлгөрҙө. Шулай дауам итһә, бер нисә айҙан уны беҙ тулыһынса баҫып, ҡулыбыҙға ҡармап аласаҡбыҙ. Тик һеҙ, Денис Даудович, башҡа ҡатын-ҡыҙ менән сыуалмай тороғоҙ инде. Юғиһә, көнләшеп, Сати һеҙгә артын ҡуйыр».

«Сатиҙың алды ла, арты ла шәп. Ул миңә ысынлап ғашиҡ булған. Белгегеҙ килһә, уны тик ошо нәмә менән генә «ярырға» мөмкин», – тип Кәрим үҙенең бот араһына ымлай. Көлөшәләр.

Сатураның баш өҫтөндә, бар донъяны тетрәндереп, гүйә, дәһшәтле йәшен шартланы. Ул, күргәндәренән тамам албырғап, йәшендән ҡасҡан балалай ҡобараһы осоп, үҙ-үҙен тоймай, урамға йүгереп сыҡты. Сыҡты ла, йәш төйөлгән күҙҙәре менән бер ни күрмәй, ҡайҙалыр тиҙ-тиҙ атлап китте. Кемдер уға бәрелеп, әрепләшеп ҡалды, машина тормоздары әсе һыҙғырып, артынан яман һүгенгән тауыштар ишетелде. Компьютерҙан сығып, мейеһенә кергән бысраҡтан арынырға мөмкин булған урынды эҙләгәндәй, ул һаман ҡайҙалыр ашығып барҙы ла барҙы. Һуңында подвалда урынлашҡан ниндәйҙер ҡараңғы кафеға барып юлыҡты. Мөйөштәге өҫтәл артына ултырып, тағы өнһөҙ ҡалды. Кереүселәрҙе хеҙмәтләндереүсе оло йәштәрҙәге ҡатын, ҡат-ҡат өндәшеп тә шаңҡып ултырған ҡыҙҙы иҫенә ҡайтара алмағас, үҙ белдеге менән һауытҡа хәмер һалып, көсләп тигәндәй уны эсергә мәжбүр итте. Эсерҙе лә, һаҫыҡ

араҡынан сәсәп, күҙҙәренә нур ҡайта башлаған ҡыҙҙың сәсенән һыйпап, өндәшмәй генә китеп барҙы.

Зиһене яҡтырып, тирә-яғын төҫмөрләй башлаған Сатура бер аҙҙан тағы араҡы һорап эсте. Һаҫығы бырхып торған боҙоҡ эсемлек уның йән өшөткөс яңылыҡты күтәрә алмай туңып, ҡатҡан күҙәнәктәрен һиҫкәндереп, гүйә, уларға ҡабат йән өрҙө.

Уның ҡабат эшенә барғыһы килмәне. Ниңәлер, кабинетына керһә, өҫтәле артында теге өс ирҙе осратыр һымаҡ ине. Фекер йөрөтөр хәлгә ҡайтып, тынысланған ҡыҙ, бар булмышы менән күргәндәренә ҡаршы булып, уларҙы ҡабул итмәүен, ышанмауын тойҙо. Ысынлап та, ниңә ул дискыны йәшерен рәүештә генә килтереп бирҙеләр һуң әле? Ғәҙәттә, ундай мөһим хәбәр килтереүселәр баштан уҡ аҡса талап итә. Хәбәр беҙҙең заманда телдән телгә бушлай ғына күскән ләстит түгел, ул – тауар, бик ҡиммәт тора. Әлеге хәбәр өсөн, дөрөҫ булһа, әлбиттә, хужаһы, һис шикһеҙ, мул аҡса талап итергә тейеш ине бит? Күренеүенсә, теге өсәүҙе төшөрөп алған әҙәм үҙе лә шул тарафтарҙан булырға тейеш, йәғни ул да – мент. Ә менттар бер-береһен бушҡа һатмай. Тимәк? Тимәк, дискылағы кешеләр мент түгел. Инде әлеге фекер сынйырын артабан тағатып, шул йүнәлештә фараз иткәндә, уның күргән-ишеткәндәре торғаны бер сүпкә әйләнә түгелме ни? Дискылағы яҙмалар ҡайһылыр дошманының ҡулы менән яһалма рәүештә төшөрөлөп, уның тормошон бутарға йүнәлтелгән булып сыға бит?! Эйе, Сатураның дошмандары күп. Улар ирҙәр һәм ҡатындар араһында ла етерлек. Уға ғашиҡ булғандарҙың ҡайһыһылыр, Кәрим менән уның мөхәббәтенә көнләшеп, шулай итеп араларына бысраҡ ташларға булғанмы ни? Бәлки, Кәримде өмөтһөҙ яратып, көнсөллөгөнән башын юғалтҡан берәй ҡатын-ҡыҙҙың эшелер был? Үсле ҡатын-ҡыҙҙарҙың мәкеренән аҙ яфаландымы ни ул үҙ ғүмерендә. Уҡыған сағында әхирәт булып йөрөгән берәүһе уны күрәләтә мәсхәрәгә тарытты түгелме ни? Видеоһүрәттәге Кәрим дә үҙенә аҙ оҡшағандай: танауы оҙон, сәстәре ҡыҫҡараҡ һымаҡ, ҡарашы усал, ҡыланышы ла һөйкөмһөҙ… Юҡ, ул – Кәрим түгел, унда, һис шикһеҙ, Кәримгә оҡшаған бөтән кеше төшөрөлгән. Уның Кәриме һөйкөмлө, унан йылы бөркөлөп тора. Ә видеоһүрәттәге әҙәм бар булмышы менән боҙҙан ҡырҡып яһалған һынды хәтерләтә бит. Исеме лә башҡаса – Денис Даудович яңғырауы ҡолаҡ ярыһын йыртырҙай…

Ҡара урманда аҙашып, юҫығында, ниһайәт, яҡтылыҡ шәйләгән юлсылай, үҙе лә һиҙмәҫтән бар өмөтөн әлеге фаразына бәйләгән Сатураның күңеле күгенә, шулай итеп, ҡояш булмаһа ла, ай ҡалҡты.

…Кис. Ҡала баҡсаһын уртаға бүлгән һуҡмаҡ өҫтөнән зәңгәр быу ағыла. Юл тирәләп үҫкән ҡайын япраҡтарын йыуып, эре тамсылар тама. Күкте ҡаплаған ауыр ҡара болоттоң мәғрибтәге сите йыртылып, ергә киске ҡояш нурҙары һибелде. Улар ҡала өҫтөнә һаман ағылған көмөш ҡыл шәлкемеләй ямғырға сорналып, көнсығыштағы офоҡтоң ҡоромдай ҡара йөҙөндә таң ҡалдырғыс матур йәйғор хасил итте. Алыҫта, болотто телгеләп, бер туҡтауһыҙ ялағайҙар ялтырай, йылы һауаны дерелдәтеп күк күкрәй.

Сатура ҡулындағы зонттың һары сатыры, һауалағы ҡара болоттар аҫтында яҡтырып торған сәйер, кескәй генә нур утрауылай. Ҡыҙ, ҡулын һуҙып, усына эре ямғыр тамсыһын тотто. Шундай йылы. Күҙ йәшеме ни…

Баҡса ҡапҡаһында яңғыҙ һын пәйҙә булды. Баштан-аяҡ аҡҡа кейенгән ир, һаман шаулап яуған ямғыр пәрҙәһе аша еүеш япраҡтарында киске ҡояш нурҙарын уйнатҡан ағастар аҫтындағы ҡыҙҙы шәйләп ҡалғас, аҡҡоштай талпынып йүгереп китте.

## 21

Төнгө аяҙ күктә күмәстәй йомро ай баҙрай. Ул, гүйә, бихисап алтын ептәрҙән бәйләнгән сихырлы селтәрен ер өҫтөнә һирпкән дә, ҡыпыш иткәнде лә аңдып торған ғәләмәт ҙур һары үрмәкселәй, һағайып, төнгө мөхитте күҙәтә. Баш өҫтөндә ялҡынланған Ҡош Юлына төкрөкләп бармаҡ төрткәндә, бармаҡ осона тиҫтәләгән йондоҙ йәбешеп төшөрҙәй һымаҡ. Сикһеҙ ҡотоптан ер өҫтөнә бер туҡтауһыҙ йондоҙҙар ҡойола. Әйтерһең дә, йыһанды гиҙгән әкиәт һылыуы йондоҙҙарҙы тылсымлы таяғы менән берәм-берәм һуғып ергә төшөрөп йөрөй, хатта ҡолаҡ ярыларын тишерлек тынлыҡта таяғының сихри сыңы ишетелгәндәй.

Ай яҡтыһы япраҡтары һирәгәйгән ағастар араһында бер туҡтауһыҙ сәйер шәүләләр хасил итә. Улар төнгө кәсебенә сығып, шыпырт ҡына йөрөгән ен-бәрейҙәр һымаҡ. Ҡая аҫтындағы уйһыулыҡта бер шиңеп, бер күпереп ятҡан яҫтыҡтай ғына томан, гүйә, күктән ергә ҡунырға төшөп, иҙерәп йоҡлаған болоттай.

Күҙ алдында безелдәп, маҙаға тейгән яңғыҙ серәкәйҙең ултырғанын көтәм. Сыбыҡ осонда эленеп торған һары ҡайын япрағы һабағынан өҙөлдө лә, төн күбәләгеләй елберҙәп, түбәнгә осто.

Ғилман менән туғайҙағы ҡарт ҡайындың йыуан ботаҡтарына яйланған таҙғаҡта айыу көтәбеҙ. Ғилман ағастың теге яғында шымып ултыра. Мин ултырған ҡайын ботағы уныҡынан түбәндәрәк, ә ер өҫтөнән биш ҡолас самаһы бейеклектә. Таҙғаҡтың ағастары ҡыпыш итһәң дә шығырҙап, бар урманға беҙҙе һата һымаҡ. Көҙгө төн һалҡын. Йылы кейенһәм дә, көҙ һулышы, ара-тирә ҡуйыныма кереп, тәнемде дереллдәтә. Онотолоп, тәмәке артынан кеҫәмде тағы ҡапшайым да эстән генә әрләшеп ҡуям. Тәкәтте ҡоротоп тартҡы килә. Тик әлеге мәлдә тәмәке тоҡандырыу – һунарҙы тамамлау тигән һүҙ булыр ине. Йыртҡыс һиҙгер. Мороно тәмәке еҫен тойһа, килгән юлынан шундуҡ кире боролор.

Октябрь башында ауыл малына айыу эйәләне. Билдәле, урмандағы аҙығы наҡыҫланғас, ҡышлыҡ майын еткерә алмай йөрөгән януар инде. Тау-таш араһындағы төпкөл ауыл халҡы мал көтөүҙе бар тип тә белмәй. Малҡайҙар йәй буйы туйынға үҙҙәре китеп, һауынға ла үҙҙәре ҡайтып йөрөйҙәр. Йыртҡыс тәүҙә Фатима еңгәнең оло һыйырының арҡаһын һыҙырып ҡайтарҙы. Ни ғилләә менән тырнағынан ысҡына алғандыр, мәхлүк. Унан һуң Ғәлиә апайҙың танаһы ҡайтмай юғалды. Һаман эҙләп тә таба алмайҙар. Биш көн элек, эңерҙә, бар ауыл малы үкерешеп, урмандан тағы өркөп ҡайтты. Ғилмандың ала башмағы шул көндән ғәйеп булды. Өсөнсө көн, урман ҡыҙыра торғас, башмаҡтың емтегенә Сәйпән ҡаяһы аҫтындағы шырлыҡта барып юлыҡтыҡ. Януар табышының яртыһын ашап, ҡалғанын ергә күмеп киткән. Тимәк, кире килеп, тағы туйынырға ниәтләнә. Малын ҡыҙғанып, януарға үсе ҡыҙған Ғилман, миңә күҙ ҡыҫып, һуҡ бармағын иренենә терәне. Ләм-мим булайыҡ, йәнәһе, башҡа бер кем дә белмәһен. Кисә көн буйы, шыпырт ҡына, һунарға йыйындыҡ. Мунсала йыуындыҡ, Ғилман икебеҙҙең дә йылы, таҙа өҫ кейеменә бурһыҡ майы һөрттө. Үҙенә теркәүле ҡушкөбәген алды, миңә аҙбарҙа йәшергәнен сығарып бирҙе. Бөгөн, киске эңерҙә, еҫләнә башлаған башмаҡ үләкһәһенән егерме аҙымда торған ҡарт ҡайынға килеп, арлы-бирле таҙғаҡ ҡорҙоҡ та шунда менеп ҡунаҡланыҡ. Беҙҙең был кәсепте ауылда бер кем дә аңғармай ҡалды шикелле. Әйткәндәй, бәләкәй генә ауылда ҡыл ҡыбырлатһаң да ишетелеп, шәйләнеп тора, ауыл халҡының ҡолағы һаҡ, күҙе үткер…

Мин әле ваҡытлы ялда. Хазинаға бәйле мажараларҙан һуң эшкә булған аҡтыҡ дәрт-дарманым һүнеп, яҡты донъяға тик шешә аша ғына ҡарай башлаған мәлемдә, бүлек етәксеһе Владимир Иванович, артыма тибеп тигәндәй, ялға оҙатты. Мине, бәләгә тарымаҫ борон, ҡырғараҡ олаҡтырып торорға булғандыр шулай. Августа ғына эштә өс тапҡыр эсеп тотолғайным шул. Минең урында булдыҡһыҙ берәү булһа, һис шикһеҙ, буҡлы таяҡ менән шунда уҡ эштән ҡыуырҙар ине.

– Эсмәгән милиционер – милиционер түгел,– тине Владимир Иванович. – Ә эскесе милиционер – кеше түгел. Ялыңда шул хаҡта һәйбәтләп уйларға кәңәш итәм.

Шул хаҡта «уйланыу»ҙарыма айҙан артыҡ инде. Әсәйемдең әсе балынан уйҙарым уғата тәрәнәйә генә бара. Эш йәһәтенән ялтыр зәм-зәмен сығарһа, атайым да миңә ҡушылып «уйлана» башлай. Атайыма әсе бал килешмәй, эсһә, бәҙрәфкә илткән һуҡмағы таҡырая уның.

Минең буйҙаҡ тормошомдо сикләү мәсьәләһе һуңғы саҡта әсәйемдең бар ғәмен биләне. Ауыҙынан сыҡҡан ике һүҙенең береһе шул хәлгә ишаралай. Йәтеш кенә кәләш тә ҡарап ҡуйған ул миңә. Уныһы Фәниә апайҙың быйыл ғына урта мәктәпте тамамлаған Фәриҙә исемле ҡыҙы, имеш. «Кәләш»ем минән ун бер йәшкә кесерәк. Юғары уҡыу йортона керә алмағас, ауылда ята икән. Мине тирләтеп, юҡ-бар һылтау менән әсәйем янына килә лә етә. Ҡыҙый төҫ-башҡа нисауа былай, күҙ-ҡарашы ла ҡыйыу, һаҡ ҡына. Ул килһә, солан күтәрмәһендә, ғәҙәтенсә, тәмәке көйрәткән атайым ҡаты итеп тамаҡ ҡыра башлай. Ә минең аҙбар артында быҒаса онотолоп торған эшем иҫемә төшә.

Көҙгө бысраҡҡа ҡалдырмай ғына бәрәңге алдыҡ.

Әллә ни ҡомарым булмаһа ла, эшһеҙ торғанда, көн уҙғарыу һылтауы менән, йылғаға балыҡсыларға төшкәйнем. Беҙ малай саҡта баштүбән сумған тәрән ятыуҙар әллә ҡайҙа булып бөткән. Һай, тип муйынға хәтлем кисеп йөрөгән шаршылары ла, тауыҡ атлап сығырҙай булып, сөбөрҙәп кенә ята. Ярты көн буйына сирек дәүмәлле ун бөртөк бәрҙе тотоп, кәртә артлап ҡайтып килә ятһам, ауыл осонда йәшәгән Әсмә әбейҙең баҡсаһында бәрәңге ҡаҙып йөрөгән йәш кенә ҡатын саҡырып алды. Һынған көрәген һаплауҙы һорай. Һапланым инде. Шул көндән һуң балыҡ ҡармаҡларға әүәҫләнеп киттем. Яр башындағы әрәмәлә ултырған Әсмә әбейҙең мунсаһы артындағы шаршыла бәрҙе бигерәк шәп ҡаба ине. Теге ҡатынҡай ҙа әбейҙең кәртүген ике аҙна буйы ҡаҙҙы. Йәтеш кенә үҙе. Ауылға өләсәһен күрергә килгән, имеш. Эскегә һалышҡан иренән айырылған, өс йәшлек ҡыҙы бар. Ҡалала ике бүлмәле фатирҙа торам, теләһәң, бөгөндән яныма йәшәргә кер, көтәм, ти…

…Шул саҡ ҡаршылағы дөм-ҡараңғы әрәмә ышығынан ниндәйҙер шәүлә осоп сыҡты ла беҙ боҫоп ултырған ҡайын алдындағы аҡланға төштө. Ябалаҡ, имеш. Ул да булманы, суҡышына сысҡан тешләгән төнгө аусы ҡарт ҡайындың мин ултырған ботағы осона менеп ҡунаҡланы. Һунарына мауығып, беҙҙе шәйләмәй ҙә ҡалған, ахыры. Таштай ҡымшанмай ҡалып, төн ҡошон күҙәтәм. Өкө, үҙен кемдер күҙәткәнде һиҙеп ҡалһа ла, ҡайҙан ҡурҡыныс янағанды аңламай, йомро башын ян-яҡҡа мәрәкә борғолап, ай яҡтыһында шәмдәй янған ҙур, һары күҙҙәрен аҡшайтып, ботаҡта ултыра бирҙе. Һуңынан, төндә яҡтырған пар тәҙрәләй күҙҙәрен миңә төбәп, бер мәл генә аҙап ултырғас, көтмәгәндә, баш киткес ғәжәп мажараға тарыған әҙәмдәй «о-һо» тигән ауаз сығарып, күләгәләй тауыш-тынһыҙ осоп китте.

Ҡаты ағас өҫтөндә иҙелгән артымды ҡуҙғатып, йәпләберәк ултырҙым.

Ғилмандың өн-тыны сыҡмай. Әллә йоҡлай инде? Ҡулымдағы мылтыҡтың майланған ҡушкөбәге ай яҡтыһында һүрән генә ялтырап тора. Боронғо замандала эшләп сығарылған оҙон көбәкле ҡорал. Хәҙерге мылтыҡтар күпкә ҡыҫҡараҡ. Иллә-мәгәр сәпкә бик төҙ ата. Заманында күп януарҙың тиреһен тишкәндер был тамуҡ таяғы. Януарҙы ғына булһа ярай ҙа…

Ғилмандың урамында, әлеге һунарға йыйынып йөрөгәнемдә, хужа менән ҡатынының ҡолағыма салынып ҡалған әрепләшеүе иҫемә төшкәс, үҙем дә һиҙмәҫтән, эстән генә көлөмһөрәп ҡуйҙым. Аласыҡ янындағы утынлыҡта ошо мылтыҡты таҙартып аҙаплана инем. Ғилман ҡатыны менән аласыҡта. Бер мәл тегеләрҙең тауышы шәбәйеп, хәбәрҙәре ҡолағыма керә башланы. «Ниңә һунарыңа Таһирҙы эйәртәһең? Ул милиция бит?» – ти ҡатыны, ауыҙынан шашып сығырҙай тойолған тауышын баҫырға тырышып. «Булһа ни?» – Быныһы Ғилмандың алыҫтан сыҡҡан йәшендәй гөрләп торған тауышы. «Бәй, тәкә менән төкөштөңмө әллә? Браконьерҙы тоттом, тип бикләп ҡуйһа үҙеңде? Етмәһә, йәшерен мылтығыңды күрәләтә сығарып биргәнһең үҙенә? Хәмер менән ҡуша мейеңде эстеңме әллә?» Шунда ниҙер «дөп» итеп ҡалды ла, артынан ҡатынҡайҙың баҫылып ҡына сәрелдәүе ишетелде.

Ҡыҙыҡ, милиционерҙар дуҫ-иште лә, туған-тыумасаны ла танымай, күргәнбелгән ҡыйыш эштәрҙең барыһын да ҡағыҙға төшөрөп, закон эшкәртә башлаһалар, тормош нисек булыр ине икән?

Мин белгәндән бирле беҙҙең ғаиләлә ҡорал заты булманы. Атайымдың ауһунарға әүәҫлеге юҡ ине. Бынан бер нисә йыл элек Себерҙә эшләп йөрөгән Илнур ҡустым, ҡырҡ ҡағыҙ йүнләп, өр-яңы ҡушкөбәк һатып алды. Оҫтаҡул, айырым рәүештә, йыһазлап эшләгән ҡиммәтле мылтыҡ. Мылтығын тотоп, ҡышҡы тын юлдан кисләтеп кенә ҡайтып төшкән ҡустым. Ҡышҡы оҙон төн уҙып, таң атыуға, аранға бикләмәй, аҙбар артында ҡалдырылған өс оло кәзәне бүреләр быуып та киткән…

Мәғрибкә ауышҡан ай, ҡайындың юғары ботаҡтары артынан сығып, бар сихыры менән миңә баҡты. Ағастарҙан берәм-берәм ҡойолған япраҡтарҙың һаҡ ҡына шыбырлауына һиҫкәнеп, әйләнә-тирәгә күҙ йөрөтәм. Аҡлан уртаһына һикерәнләп ҡуян сыҡты ла, ҡойроғона ултырып, беҙҙең яҡҡа текәлде. Ваҡ януарҙы аулаусылар күмәк, шуға ла улар уғата һиҙгер, сос булалар. Был шеш ҡолаҡ та, ҡарт ҡайындың ботаҡтары араһына йәшенгән ҡурҡынысты ишетә – күрмәһә лә, мыйығы менән һиҙә, ахыры. Тап шул мәлдә уның өҫтөндә ҡара шәүлә пәйҙә булды. Баяғы ябалаҡ! Ҡуян, унға-һулға ырғандап та, өҫтөнә ябырылып килгән йыртҡыстан ҡотола алмаған, кинәт кенә беҙ ултырған ҡайын аҫтына йомолдо. Күҙҙәре ҡуҙҙай янған ялбыр ябалаҡ, шеш ҡолаҡ артынан уҡталған еренән, һауала күренмәгән селтәргә бәрелгәндәй, ялпылдап, кинәт кенә боролдо ла, уҫал ухылдап, әрәмә ышығына кереп юғалды.

Ҡулын һоноп, Ғилман йоҙроғо менән арҡама төрткөләп алды. Йоҡлама, тиеүелер. Төн таңға ауышҡан мәл, арҙаҡлы һунарсылар һөйләүенсә, айыу йәшереп киткән табышына тап ошо мәлдә әйләнеп ҡайтыусан.

Ғилман – минең балалыҡ дуҫым. Тәпәй баҫҡандан алып, тыуған төйәкте бергә гиҙеп үҫтек беҙ. Донъя көтөүгә әүәҫ кенә тилбер ҡатыны, алмалай улы менән ҡыҙы бар. Күптән түгел өмә йыйып, өй күтәрҙеләр. Көмөш тәңкәләрҙе өрләк аҫтына үҙем һалдым. Тиңдәштәремдең ғаилә ҡороп, бала-саға үҫтереүҙәренә, йорт-ҡура төҙөүҙәренә, бер яҡтан, һөйөнһәм дә, икенсе яҡтан, эсем боша. Улар тапҡанын өйөнә ташып, йәйрәп донъя көткәндә, бер мин генә тормошомдо ошо мәғәнәһеҙ дәүләт эшенә бағышлап, ыштан-күлдәктән

артыҡ мал күргәнем юҡ. Утыҙға аяҡ баҫҡанмын, ә үҙем, йортһоҙ-илһеҙ гидай һымаҡ, һаман япа-яңғыҙмын. Еләтте. Эшкә сыҡҡас, әллә теге ҡатынҡай янына барып ояларға инде? Әллә, башты иҫәргә һалып, йәш ҡыҙҙы, Фәриҙәне, алырғамы? Бынылының ҡыҙығына ҡарағанда мыжығы күберәк булмаҫмы? Йәшәп китерлек ятағым бар ҙа… Нисек кенә булмаһын, иң тәүҙә йөрәгемдәге Әминә исемле мөхәббәт сәскәһенән арыныу фарыз. Сөнки ул минең тормошома йәм бирмәй инде. Киреһенсә, түтәлгә төшкән матур сүп үләнеләй, урын ғына биләй. Мин уны күптән йолҡоп ташларға ҡыртлашам инде. Шул йәһәттән эсәм, әрһеҙләнәм, йәғни шул сәскәне тиҙерәк һулытыу уйы менән, тамырына ағыу һалам. Шуғалырмы, йөрәгем оторо ауырта ғына. Теге хазинаға бәйле мажаралар иҫемә төшһә, хурлығымдан ер тишегенә кереп, ҡасырҙай хәлгә киләм. Хоҡуҡ һаҡлаусы була тороп, һөйгәнемдең бәхетен бандиттарҙан яҡлай алманым бит. Шул хәлдәрҙе алдан күреп, һаҡлыҡ саралары күрергә тейеш инем бит мин. Һис юғында, табылдыҡ хазинаны бишкә, унға бүлеп, ваҡытлыса төрлө урынға йыйырға булған да баһа. Күпмелер өлөшө, исмаһам, ҡулда ҡалыр ине. Һуңғы өс йыл эсендә генә ата-әсәһен, кескәй энеһен юғалтып, фажиғәле тормошта яңғыҙы ҡалған ҡыҙға ҙур терәк булыр ине. Әминәне хәшәрәт Шприц ҡулынан ҡурсалап ҡалыуым да дан түгел миңә. Ул тик Хоҙайҙың хәстәре булды. Шифәлселәргә минең кеүек мөлкәт биреп ҡотолғандар аҙмы ни? Ә мин һөйгәнемдең мөлкәтен биреп ҡотолдом. Хурлыҡ… Хет хәҙерҙән аҫылынырлыҡ. Әминәкәйҙең һүҙҙәре раҫ. Һатлыҡ йән мин! Мин ул ҡыҙҙың бер ҡарашына ла лайыҡ түгелмен…

Ә мин уны шундай һағындым. Һөйгәнемдең күҙенә салынмай, боҫоп, ситтән генә булһа ла күргем килеп тик тора. Нисек кенә арынырға һуң күңелемде телгеләгән был һағыш-зарҙан?

Иллә-мәгәр ир-егет менән ҡатын-ҡыҙға мөхәббәт тойғоһо биреп, Хоҙай Тәғәлә үтә лә шаштырып ебәргән. Ҡарап ултырырлыҡ бер ҡыҙыҡ булһын, тигәндер. Үрсеү өсөн мөхәббәт мотлаҡ түгел бит. Хайуандарҙың түле, ана, ғишыҡһыҙ ҙа бик күп. Ә мөхәббәткә янып йөрөгән әҙәми зат, дөрөҫөн генә әйткәндә, бүтәндәр алдында мәрәкәгә күренеп, тик ҡыҙғаныу тойғоһо ғына уята. Сөнки ысын мөхәббәт бер ҡасан да яҡшыға илтмәй. Уның аҙағы тик юғалтыуҙан, фажиғәнән ғибәрәт.

Ысынында иһә мөхәббәт – ул әҙәми заттарҙың үрсеүгә, үҙҙәренең тамырҙарын артабан үҫтереүгә йүнәлтелгән, бөтә хайуандарға ла хас енси ынтылышы ғыналыр. Тик ул, кешеләрҙең аҡыл-фиғеленә, хис-тойғоһона сырмалып, ғәжәйеп көслө, матур һәм шомло күренеш хасил итә. Нисек кенә булмаһын, Хоҙайҙың бында ҡыҫылышы юҡтыр.

Мине йоҡо баҫа башланы. Айыу үҙе барған юҫыҡтағы бар йән эйәһен йоҡлатып килә, тиҙәр… Ай, аҫтыртын ғына мутлыҡ ҡылған шаян ҡыҙҙай, миңә ҡарап серле йылмая. Әминә лә, ҡайһы саҡта, шулай ҡырын ғына миңә ҡарап, йөҙөн балҡытыр ине… Бына, һылыуым, болоттай талғын ғына осоп, ай нурҙарынан ишелгән алтын баҫҡыстан ергә төштө. Ап-аҡ оҙон күлдәгенең үтә күренмәле итәк-таҫмалары һауала бәүелеп, йондоҙло йыһанға тоташа. Күҙ сағылдырғыс матур итеп йылмайған Әминә, аҡҡош ҡанатылай ҡулдарын миңә һоноп, аҡлан аша миңә табан атлап килә… Бына ул ҡайын янына килеп баҫты, мин, хатта уның ай яҡтыһында ялтыраған ынйылай тештәрен, күлдәй ҙур күҙҙәре өҫтөндә елпенгән керпектәрен күрәм… Шул саҡ уның матур йөҙөнә кинәт кенә ҡуйы йөн үҫә башланы ла, һылыуым аяғүрә баҫып торған ҙур айыуға әүерелде! Йөнтәҫ януар һаман ҙурая, үҫә, бына ул ырғаҡтай кәкре

тырнаҡлы алғы тәпәйҙәрен һоноп миңә ынтыла! Мин иңемдә ятҡан мылтыҡты алырға итәм, әммә мылтыҡ, ниңәлер, бүрәнәләй ҙур һәм ауыр, уны күтәрергә көсөм етмәй! Ул да булманы, януар яҫтыҡтай ҙур тәпәйе менән һелтәп, мине ҡайындан һуғып төшөрҙө!

Йыһан көмбәҙенең иң бейек осонан ҡолағандай, мин оҙаҡ-оҙаҡ ергә осам, ян-яғымда бихисап йондоҙҙар өйөрөлә, һары ай табағы, түшәмгә аҫып ҡуйылған шәмдәй, ялпылдап, баш өҫтөмдә бәүелә…

Мин ағас башынан ниндәйҙер йөнтәҫ, йомшаҡ һәм тынды ҡурғыс һаҫыҡ «мендәр» өҫтөнә ҡолап төштөм. «Мендәр» яман үкереп, минең аҫтымдан ситкә ырғыны ла, аяғүрә баҫып, ғәләмәт ҙур айыуға әүерелде. Йоҡома иҫереп, өнөммө был, әллә төшөммө тип, ҡайын төбөндә шаңҡып ултырам. Мылтығым алдымда, ҡул һуҙымы ғына ерҙә ята. Януар һөңгө башылай оҙон тештәрен айға ялтыратып, алаптай ҡыҙыл ауыҙын асты ла һушты китерерлек итеп үкереп ебәрҙе. Битемә йыртҡыстың һаҫыҡ тыны бәрелде. Мылтығымдың нисек ҡулыма килеп кергәнен иҫләмәйем. Мылтыҡ көбәген айыуҙың түшенә терәп тиерлек тәтегә баҫтым. Шул мәлдә үк, баш өҫтөмдә, бер-бер артлы Ғилмандың мылтығы дөпөлдәне…

**22**

Ломбард зәрҡәне, майланып торған оҙон ҡара сәсле, һаҡал-мыйыҡлы йәшлек егет, ысыҡтай емелдәгән гәүһәр ташлы алҡаларҙы ашыҡмай ғына, диҡҡәтләп тикшергәндән һуң, ҡаршыһында ултырған Әминәгә күтәрелеп ҡараны. Зәрҡәндең сөм-ҡара күҙҙәрендә ихтирам ҡатыш сикһеҙ ҡыҙыҡһыныу сағыла ине.

– Ғәфү итегеҙ, әммә был әйберҙең хаҡын әлегә әйтә алмайым, – тине ул, мәрйендәй аҡ, тигеҙ тештәрен балҡытып. – Рөхсәт итһәгеҙ, мин уны үҙемдән тәжрибәлерәк белгескә күрһәтер инем.

Ҡыҙҙың ризалығын алғас, зәрҡән, ҙур илтифатлыҡ менән, уны ломбард артындағы баҡсаға оҙатты ла, көтөргә ҡушып, күҙ яҙҙырҙы.

Кескәй генә баҡсала аулаҡ ине. Баҡса уртаһына ҡуйылған йыһазлы өҫтәл менән эскәмйә өҫтөнә шунда үҫкән миләштең ҡыҙарып бешкән суҡ тәлгәштәре аҫылынған. Арыраҡ балан ҡыҙара. Тар ғына таш һуҡмаҡ ҡырынан аллыгөллө сәскәләр түтәле һуҙылған. Арыраҡ үҫкән бейек ҡайын ағасы, шау һары олоно менән зәңгәр күк көмбәҙен терәгәндәй, япраҡ һелкетмәй, ҡатып ҡалған.

Көҙ. Әбейҙәр сыуағы.

Институтта дәрестәр башланыуға бер ай инде. Йәй буйы ҡайҙалыр юғалып йөрөгән курсташтары, умартаға ҡайтҡан бал ҡорттары һымаҡ, бергә йыйылғас, Әминәнең болоҡһоған күңеленә, ниһайәт, йәм кергәндәй булды. Дөрөҫөн әйткәндә, ығы-зығылы уҡыуын дауаханалағы эше менән аралаштырырға мәжбүр булған ҡыҙҙың болоҡһорға ваҡыты ла ҡалманы инде. Ә шәхси тормошҡа килгәндә, ул бөтөнләй юҡ иҫәбендә. Уны яйлар өсөн ваҡыты булмағанға һылтанып, тик үҙ-үҙен генә алдай Әминә. Ысынында иһә, дәрте лә, дарманы ла юҡ уның быны өсөн. Сөнки йөрәге буш түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быны бик һуңлап, йән дуҫын юғалтҡас ҡына, аңланы ул. Уның ҡарауы, Нәфисә әхирәтенең тормошо шаулап-гөрләп тора. Уҡыуҙар башланыуға ауылдан килеп еткән әхирәтен танымай торҙо хатта Әминә. Быға ҡәҙәре кәүҙәгә кәзәләй сибек, төҫкә лә һынһыҙ ғына ҡыҙ йәй уҙғансы үҫеп, тулышып, түш-боттары йомроланып та өлгөргән. Йөҙ-һынына түлле ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас нәзәкәтлек сыҡҡан, күҙ-ҡарашында серле шаянлыҡ яна. Килеү менән, янында бер нисә ир-егетте өйөрөлтә башланы. Һайлана үҙе. Кеҫәһе ҡалынлыраҡты

тапһам, шундуҡ кейәүгә сығасаҡмын, ти. Мөхәббәт – ул мәғәнәһеҙ енси тойғо ғына, ул була ла бөтә, уңышлы никах ҡороп, матди яҡтан етеш тормош ҡороуға етмәй, ти. Үткәндә, Әминә әхирәтенең ятаҡтағы бүлмәһендә ултырғанда, асҡаҡ йөҙлө, һомғол буйлы, ҡояшта ҡара янған егет килеп керҙе. Нәфисәнең ауылдашы икән. Тоҡлап күстәнәстәр килтергән. Нәфисә иһә, егеткәй менән йүнле-башлы һөйләшеп тә тормай, юҡ-бар һылтау табып, уны тиҙ генә бүлмәнән оҙатып та ҡуйҙы.

– Шестерка, – тине ул, мыҫҡыллы ғына йылмайып, ҡуҙғалып киткән аҡ машинаға тәҙрә аша ҡарап ҡалғас. – Йәй буйы, миңә кейәүгә сыҡ, тип йөҙәтте. Татлыны татығас ни… Уға барып, ғүмер буйы һыйыр тиҙәген тапарғамы ни? Фермер, имеш, берәү…

Әхирәтенең үҙенә төбәлгән сәйер ҡарашынан Нәфисә серле генә йылмайып ҡуйҙы.

– Эйе, булды шунда, бесән башында… Ауылда эс бошорғос күңелһеҙ булғас, үҙем йүнләнем шул мажараны. Әйткәндәй, был фермер ул аҙапҡа ярайһы уҡ шәп, имеш. Ауырға ҡалдырмағайы, тип ҡурҡып бөттөм хатта. Уның ҡарауы, күрәһеңме? – тип ул бүлмә уртаһында матур буй-һынын уйнатып, йыландай борғоланып алды. – Һиңә лә шуны кәңәш итәм… Юғалып йөрөмә.

Һуңғы ваҡытта кемдер Нәфисәне ҙур иномаркала йөрөтә. Ай-һай, аҙыптуҙып, бәләгә тарымағайы артыҡ сос әхирәте…

Өҫтәлдә кемдер ҡалдырып киткән ҡыҙыл ҡәнәфер сәскәһе ята. Теге ваҡытта Таһирҙың маңлайында ҡанһырап торған тәрән яра бар ине. Ул, йәшерергә тырышыпмы, йәрәхәтен сәс шәлкеме менән ҡаплаған булған. Таһирҙың һыҙланыу, йонсоу ҡатыш рәнйеү тулы ҡарашы һаман Әминәнең күҙ алдынан китмәй… Ә ул, бисура, дуҫының яраһын дауалап, йыуатыу урынына, уны ҡурҡаҡтан, һатлыҡтан һалдырып, өйөнән ҡыуаланы. Таһир, теленән ҡалған ыпыҡтай, йөҙө аҡлы-күкле булып, өйҙөң асҡыстарын өҫтәлгә һалды ла күләгәләй шым ғына сығып китте. Шунда ҡыҙға әллә ни булды. Гүйә, Таһир менән уның араһындағы күҙгә күренмәгән еп, йөрәген һыҙырып, аҡрын ғына тағатыла башланы. Тик һуң ине инде. Ул, түшен тотоп, дуҫы артынан уҡталған еренән диванға кире ауҙы ла, һыуҙай сәсрәп, илап ебәрҙе.

Илап күңеле бушағас, Әминәне сикһеҙ оялыу тойғоһо баҫты. Сөнки быға ҡәҙәре бер ҡасан да үҙен шундай бисура итеп тойғаны юҡ ине уның. Йән дуҫы уны ҡурсып туҡмалған, йортон һаҡлап ҡалған, вәхши әҙәмдәрҙе юлынан алған. Ә ул, дуҫын һары алтындан кәмһетеп, йөрәгенә мәңге дауаланмаҫ рәнйеү һалып, ҡыуалап сығарҙы…

Ул көттө. Йорт ҡапҡаһы шаҡылдаһа, йөрәге дөпөлдәп, тәҙрәгә йүгерҙе, кесә телефоны шылтыраһа, ашҡынып, күҙҙәре менән телефондан таныш исемде эҙләне. Шатлыҡһыҙ көндәр бер-бер артлы уҙа торҙо, күл ярындағы ялтыр тирәк япраҡтары тоноҡланып, берәм-берәм һарыға буялды. Таһир юғалды. Рәнйеүе шулай ауырмы икән ни? Яңғыҙлыҡтан алйыған бер иҫәркәйгә шундай ныҡ итеп үпкәләмәһә лә булыр ине бит. Милиционерҙар ҡаты бәғерле була, тиҙәр, улар яман һүҙҙе бар тип тә белмәй, ниңә Таһир шундай түгел? Хәлен белеп, бер генә шылтыратһа, йорт алдына килеп, тәҙрәгә ҡул болғаһа, араларындағы кәртә шундуҡ ҡойолоп төшөр ине бит. Осраҡлы ғына ла юлына сыҡмай бит, исмаһам…

Бер саҡ Әминә, бар ҡыйыулығын йыйып, телефон төймәһенә баҫты. Әммә бәйләнеш юҡ ине. Ә йөрәген һыҙырған теге еп һаман тағала ла тағала. Ҡасан осо сығыр һуң?

Күңелһеҙ уйҙарға бирелеп, онотолоп ултырған ҡыҙ, янында һаҡ ҡына тамаҡ ҡырған тауышҡа һиҫкәнеп, башын күтәрҙе. Ҡаршыһына бесәйҙәй шым килеп ултырған, салланған бөҙрә һаҡаллы карттың пеләш башында һай ғына таҡыя. Йәһүд, тимәк. Йәһүд зәрҡән булмаһа ла, зәрҡән һәр саҡ йәһүд булыр, тиеүҙәре шулдыр.

Ҡарттың төпкә батҡан күҙ тирәләрен тәрән йыйырсыҡтар ҡаплаған. Ул аҙ ғына ҡыҙға ҡарап ултырғандан һуң, беҙҙәй осло күҙҙәре менән усында ятҡан алҡаларға ымланы.

– Ҡәҙерлем, мөмкин булһа, мин тәүҙә ошо алҡаларҙы ҡайҙан алыуығыҙҙы белергә теләр инем?

– Өләсәйемдән ҡалған мираҫ был, – тине Әминә алдан әҙерләп ҡуйған яуабын.

Ҡарттың йөҙөндә һаран ғына йылмайыу сағылды.

– Аңлайым. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был алҡаларҙы беҙ ҡабул итә алмайбыҙ.

– Ниңә?

– Сөнки улар бик ҡиммәтле зәр биҙәктәренең бер өлөшө генә. Улар менән бергә ошондай уҡ муйынсаҡ, беләҙек, йөҙөк булырға тейеш. Улары ҡайҙа?

Әминә бите яна башлауын тойҙо.

– Белмәйемсе, – тине ул, ҡарашын йәшереп. – Ошо алҡаларҙан башҡа биҙәктәрҙе күргәнем булманы. Юғалғандарҙыр, бәлки…

Ҡарт, бер килкем өнһөҙ ултырғандан һуң, теүәл генә һорауҙар биреп ҡыҙҙың тормошо, зат-ырыуы менән ҡыҙыҡһынды. Үҙе лә һиҙмәҫтән, карттың әңгәмәһенә мауыҡҡан ҡыҙ кеҫәһенән һары йәшмәле нәфис беләҙек сығарып, өҫтәлгә һалды.

– Миңә аҡса кәрәк, – тине ул, ҡартҡа мөлдөрәп ҡарап. – Бәлки, ошоно алырһығыҙ?

Ҡарттың секрей күҙҙәре ғәжәпләнеүҙән түңәрәкләнеп үк киттеләр, ул, тамаҡ төбөнән аңлайышһыҙ ауаз сығарып, беләҙеккә текәлде. Быуындары төйөләп торған ябыҡ бармаҡтары менән биҙәгесте әйләндергеләп ҡараған һайын, уның йөҙөнә сыҡҡан серле шәүлә тәрәнәйә, ҡуйыра барҙы.

– Ҡәҙерлем, әгәр ҙә һеҙ, иҙәнемдә туҙып ятҡан бындай әйберҙәр менән бесәйем уйнай, тиһәгеҙ, мин, һис шикһеҙ, ышанасаҡмын, – тине ул, ниһайәт, һынсыл ҡарашын ҡыҙҙан йәшермәй…

Әминәнең быға тиклем бер ҡасан да шундай күп аҡсаны ҡулында тотҡаны юҡ ине.

Теге саҡта, хазинаны утрауҙан алып ҡайтҡас, йәшник эсендәге затлы биҙәктәрҙең йәйғор төҫтәре менән һуш китергес балҡыуына иҫереп, сабырлығын юйған ҡыҙ, шундағы бер нисә әйберҙе тағып, көҙгө алдында ҡупшыланғансы, Таһир теге йәшниктәрҙе баҡса еренә күмеп тә өлгөргәйне. Шул сәбәпле ошо биҙәгестәр өйҙә, ҡул осонда ғына, ятып ҡалды. Әминә мәктәпте тамамлау йөҙөнән атаһы бүләк иткән йөҙөктән башҡа затлы әйбер белмәһә лә, янында ҡалған биҙәктәрҙең мәртәбәһен һиҙеп, уларҙы тағып йөрөргә ҡыйманы. Күренеп тора: ул биҙәктәрҙе тағыуҙан алда, хан ҡыҙы һымаҡ итеп кейенеү кәрәк. Ә уның өҫ-башы урамға яланғас сыҡмаҫлыҡ ҡына. Эшенең аҡсаһы ла астан үлмәҫлек кенә. Баҙарға кереп, ҡулына эләгерлек берәй әйбер алһа, ашарына ла ҡалмай тиерлек. Әминәнең матур итеп кейенеп, биҙәнеп-төҙәнеп йөрөгөһө килә. Ана, ата-әсәһе хәлле булған ҡайһы бер курсташ ҡыҙҙарҙың өҫтөндә ниндәй генә кейем, ниндәй генә биҙәк юҡ. Һуңғы ваҡытта Әминә улар янына

йәнәш баҫырға ла ҡыймай башланы. Әүәлерәк ундай төшөнкөлөккә бирелмәй инесе. Яңғыҙлығы, бөлгөнлөгө баҫамы уны шулай? Шуғалырмы, янына егеттәр ҙә килмәй бит. Ир-егеттәр уттай янып торған ҡыҙҙарҙы оҡшата, ә уның бошонҡолоғо йөҙ-ҡиәфәтенә сыҡҡан, ахыры. Нәфисә әхирәтендәге һымаҡ сослоҡто, уҫаллыҡты Хоҙай уға бирмәгән шул…

Ауыр күңел көрсөгөнән ҡотолоу сараһын эҙләгән ҡыҙҙың башына әлеге биҙәгестәрҙе һатып, аҡса табыу тураһындағы уй төштө лә инде бер мәл. Ысынлап та, үҙҙәрен кеше араһында тағып йөрөргә лә мөмкин булмағас, башҡа ни хәжәте бар ул йылтырауыҡтарҙың? Шуларҙан аҡса сығарып, матур кейемһалымдан өҫ-башын йүнәтһә, тормошо ла яҡшыға үҙгәрер, бәлки. Тапҡан мөхәббәтен алтын-көмөштән кәмһетеп, кире юғалтҡас, тағы ни ҡала…

Бисуралығына баш була алмай, һөйгәнен рәнйетмәһә, бәлки, ғаилә ҡороп та ебәрерҙәр ине быға тиклем…

Шуныһы ҡыҙыҡ: гәүһәр ташлы алҡаларҙың үҙҙәре ише бүтән биҙәктәр араһынан сығыуын ҡарт йәһүд ҡайҙан белде икән? Улар әле тулайым килеш өй бүрәнәләре араһындағы йәшенмәктә, затлы ҡумта эсендә яталар. Ҡарттың йәшмәле беләҙекте күргәс тә иҫе китә яҙҙысы? Ғөмүмән, зәрҡәндең ҡыланышы бик сәйер тойолдо Әминәгә. Ул, гүйә, уның тураһында үҙенән дә күберәк белә…

Көндөң ҡалған өлөшө Нәфисә әхирәте менән бергә төрлө сауҙа үҙәктәрендә үтте. Аҡсаһын тинләп кенә сығарырға күнеккән ҡыҙ тәүҙәрәк үҙенең алдында кинәт кенә асылған мөмкинлектәрҙән ҡаушап ҡалғайны ла, әммә бер аҙҙан эстән генә үҙ-үҙен битәрләп, асыуын ҡабыҙҙы ла күҙе ҡыҙған бар әйберҙе алып, ҡапсығына тултыра башланы. Ысынлап та, буштан килгән аҡсаны ниңә ҡыҙғанырға, ти? Күпме кәмһенеп йәшәргә була?! Уның бәхет-шатлығы былай ҙа наҡыҫ ҡына, мөмкинлек барҙа ниңә кейенеп-төҙәнеп ҡалмаҫҡа? Ошоға тиклем хаҡынан ҡурҡып, тотоп ҡарарға ла ҡыймай йөрөгән матур әйберҙәрҙе һынсыл тикшереп, ҡат-ҡат кейеп ҡарағандан һуң, бәхәсләшеп тә тормай һатып алыуы үҙе бер ләззәт икән дә баһа! Башта әхирәтенә әйбер һайларға булышып, сығымға өгөтләп, алған тауарын йөпләп йөрөгән Нәфисәнең дә торабара ғәжәпләнеүҙән күҙҙәре түңәрәкләнә башланы.

– Ҡайҙан алдың шунса аҡсаны? – тип шыбырҙаны ул әхирәтенә, түҙеме бөткәс.

– Бай кейәү таптым!

Әхирәтенә лә матур бүләк яһаны Әминә. Нәфисәнең кейем-һалым һайлауға күҙе һынсыл, ул димләгән әйбер һәр ваҡыт күңелгә ятышлы, һынға килешле була.

Һуңынан, өйгә ҡайтҡас, тағы башланды көҙгө алдында сыр-сыу килеп алмаш-тилмәш сисенеп-кейенеүҙәр. Меҫкен көҙгөгә шунда йән кереп, үҙенә енес һайларға мәжбүр ителһә, ул, һис шикһеҙ, ир-ат затынан булырға теләр ине.

Ҡыҙҙар, зауыҡлы мәшәҡәттәренән тамам арығас, бер-береһенә ҡарап, көлөшөп ултырҙылар.

– Был әйберҙәрҙе «йыуыу» зарур, – тине Нәфисә һуңынан. – Бынан алыҫ түгел һәйбәт кенә кафе бар. Унда кистәрен бик күңелле була!

Кәйефе үҫкән Әминә, ялтырап торған ҡара күн костюмын кейергә булғас, Нәфисә уға бер аҙ үпкәләгәндәй итте:

– Әхирәткәйем, ябайыраҡ кейенһәңсе, юғиһә мин һинең янында меҫкен хәлендә ҡаласаҡмын бит!

Әминә, әхирәтенән уҙҙырмаҫҡа тырышып, зәңгәр джинсы костюмын кейеп алды.

Дөпөлдәк көй яңғырап торған кафела халыҡ аҡрынлап күбәйҙе. Ҡыҙҙарҙы бар алдында ҡаршы алған аҡ салбар-күлдәкле ир, Нәфисәне биленән алып, уларҙы ҙур кәрзиндә үҫкән пальма ағасы янындағы аулаҡ өҫтәлгә оҙатты.

– Шприц, – тип таныштырҙы ул үҙен, Әминәгә ҡулын биреп. – Геннадий Самуилович,

Ҡыҙ үҙенең исемен әйткәс, Геннадий Самуиловичтың күҙҙәрендә сәйер ҡыҙыҡһыныу уянды. Ул, Әминәгә бер аҙ ҡарап торғас, ниҙер аңлап ҡалғандай һүрән генә йылмайҙы ла:

– Һеҙҙе ҡайҙалыр күргәнем бар, буғай, – тине серле генә ҡиәфәттә.

– Мин һеҙҙе белмәйемсе? Әйткәндәй, исемегеҙ таныш һымаҡ… Һеҙ табип түгелме?

– Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, миңә ундай изге һөнәргә эйә булырға яҙманы…

Уларҙың әңгәмәһенә ҡолаҡ һалып ултырған Нәфисә кинәт кенә көлөп ебәрҙе.

– Йәл, исемегеҙ есемегеҙгә тап килмәгәс, – тине ул, иргә шаян ҡараш атып. – Кәрәк саҡта артҡа укол ҡаҙатырға таныш кешебеҙ булыр ине. Ха-ха!

– Миңә ҡалһа, быны өсөн табип булыу мотлаҡ түгел, – тип яуапланы Геннадий Самуилович, Нәфисәнең йомро осаһын һыйпап.

– Кафе хужаһы, – тине Нәфисә әхирәтенә, теге ир, күңелле кис теләп, уларҙы ҡалдырғас. – Дүрт бүлмәле фатиры, ҙур йортло баҡсаһы, ике машинаһы бар. Өйләнмәгән. Әйткәндәй, ул миңә битараф түгел…

Күпмелер ваҡыт үткәс, күҙҙәре уйнап торған ниндәйҙер егет, рөхсәтһеҙ генә уларҙың янына урынлашып, Әминә менән танышырға теләгеген белдерҙе. Егеттең асыҡ түшендә ҡара үрмәкселәй ҙур миңе бар. Исеме Ринат. Ошо кафела бармен булып эшләй, имеш, бөгөн ял итә. Нәфисә шул арала, уларҙың икеһен ҡалдырып, ҡайҙалыр юғалды. Бер туҡтауһыҙ тәмәке көйрәтеп, һыра һемергән Ринат, тоҙһоҙ көләмәстәр һөйләп, ҡыҙға һырыҡты. Уның әҙәпһеҙ бәйләнеүенән ҡотолорға теләгән Әминә бейергә төшкәйне, иҫерек егет тә уның янына баҫып, тиле һымаҡ борғолана, ҡыйшаңлай башланы.

Татлы шарап, дәртле көй, балҡып-һүнеп торған төрлө төҫтәге уттар ҡыҙҙың байрамға сарсаған иләҫ күңелен иҫертеп, тирә-йүндәге бар нәмәне әйтеп биргеһеҙ гүзәллеккә, хозурлыҡҡа мансыны. Үҙен елдәй еңел тойған ҡыҙ, бар донъяһын онотоп, бейене, көлдө, шаярҙы. Ваҡыт уҙғаны һиҙелмәне.

Көтмәгәндә, уйындың иң ҡыҙған ғына мәлендә, ҡайҙандыр Нәфисә пәйҙә булды ла, әхирәтен етәкләп, урамға әйҙәне.

– Бөгөнгә етте, һылыуым, һуң инде. Әйҙә, машина барҙа ҡайтып ҡалайыҡ.

Төнгө саф һауа Әминәне кинәт кенә айнытып, ҡәҙимге донъяға ҡайтарҙы. Әстәғи, сәғәт төнгө ике, имеш! Иллә әсәһе кәрәген бирәсәк иртәгә…

Ҡыҙ, күңеленә ҡайҙандыр килеп кергән шул тойғоһонан һиҫкәнеп, шыпырт ҡына беләгән семетте. Бынағайыш, әллә бөгөнгө шашыуынан тамам аҡылдан яҙып бара инде, ниндәй әсәй, ти, ул?

Ҡуҙғалып ҡына барғанда, ашығып, машинаға Ринат кереп ултырҙы.

– Ҡыҙҙар, мин дә һеҙҙең менән, – тине ул, тамаҡты ҡурғыс һаҫыҡ һулышы менән машинаны тултырып.

Кафе хужаһы Геннадий Самуилович машинаһын Әминәнең йорто алдында туҡтатты. Ҡыҙҙың артынан машинанан Ринат та төштө. Нәфисә әхирәте, ниңәлер, урынынан ҡуҙғалманы. Ул, Әминәнең саҡырыуына яуап итеп, асыҡ

тәҙрә аша ғына ҡул болғаны ла, машинанан төшмәй, китеп барҙы. Машинаның алыҫлаша барған ҡыҙыл уттарына ҡарап, Әминәнең күңеле кителде. Әхирәте менән бергә ҡуныр3ар, тип уйлағайныҫы…

Ҡыҙ шунда сикһеҙ арығанын тойҙо. Бөгөнгө мажаралар бигерәк мул булды шул. Ҡайта һалып, тиҙ генә юрған аҫтына сумырға кәрәк…

Ул, янында тәмәке тартып торған егет менән хушлашып, йорт ҡапҡаһына атланы. Ринат ҡыҙға эйәрҙе.

– Әминә, миңә бер сүмес кенә һыу эсереп сығарһаң... Тамағым кипте...

Ҡараңғыла егеттең йөҙ-ҡиәфәте күренмәһә лә, көрмәлгән теле уның лаяҡыл иҫерек булыуына дәлил ине.

– Күлгә төш, унда һыу күп…

Ҡапҡа төбөнә еткәс, иҫерек егет көтмәгәндә ҡыҙҙың беләгенән ҡаты тартып, уны үҙенә борҙо.

– Һин миңә оҡшайһың! Бергә булайыҡ бөгөн…

Әминә, асырғанып, егетте этеп ебәрҙе.

– Кит янымдан! Һин иҫерекһең!

Егет шунда ҡаты ҡулдары менән ҡыҙҙы биленән ҡармап алды ла, уҡшытҡыс һаҫыҡ тынын бөркөп, уның ирененән, битенән үбергә кереште.

– Ҡаршылашма, – шашып бышылданы ул ҡыҙҙың ҡолағына. – Мин ҡыҙҙарҙы һөйә беләм! Үҙеңә оҡшар…

Әминә тегене йән асыуы менән төртөп ебәрҙе лә, киҙәнеп, сикәһенә сапты. Төнгө тын урамда сыбыртҡы шартлағандай ауаз яңғыраны.

Әммә был ғына ҡулында йәш ҡыҙҙың саф тәнен тойоп, ғишығы уянған иҫерек егетте туҡтатманы. Ул, йыртҡыстай ажарланып, ҡыҙға ташланды ла, уның ҡулындағы аҫҡысты ҡайырып алып, ҡапҡа йоҙағын аҫҡас, тирле усы менән ҡыҙҙың ауыҙын баҫып, соланға һөйрәкләп керетте һәм, уның илай-һыҡтай быулығып, йәнтәслим ҡаршылашыуына ҡарамай, иҙәнгә йығып, оятһыҙ ҡулдары менән аяуһыҙ сисендерә башланы. Муйыны быуылған Әминәнең хәле бөтөп, уның күҙ алдарында ҡыҙыл шарҙар пәйҙә булды, әммә, ул өҫтөндәге ауыр, ерәнгес көскә бирелергә теләмәй, һаман алышты…

Шул саҡ ҡапыл ғына соланда ут ҡабынды. Нимәлер гөрҫләп көсләүсенең арҡаһына төштө. Хәшәрәт егет, сыйнап, ҡорбанының өҫтөнән ситкә ҡоланы ла, йәһәт кенә аяғына баҫып, ни еренәндер бысаҡ сығарҙы. Уның ҡаршыһында, оҙон таяҡ тотоп, Әминәнең күршеһе – ыпыҡ Рәжәп тора. Ул, дошманының иҫенә килеүен көтөп тормай, киҙәнеп, тегенең бысаҡлы ҡулына һуҡты. Ринат, һыҙланыуынан ҡаты аҡырып, бысағын ташланы ла, ауыртҡан ҡулын тотоп, ҡапҡаға йүгерҙе…

Үҙенең мәсхәрәле һәләкәттән тик мөғжизә ярҙамы менән генә ҡотолоуын аңлаған ҡыҙ, һыуҙай илап күңелен бушатҡас, тәнен дә, йәнен дә буяған ерәнгес бысраҡтан арынырға теләп, төн уртаһында мунса яғып керҙе.

Мунсанан сыҡҡас та йоҡо алманы уны. Кисерештәренән һаман йөрәге дертләй ине. Тороп, тәҙрәгә килде. Төн ҡараңғыһында ҡапҡа янындағы эскәмйәлә ултырған Рәжәптең башындағы таҡыяһы ағарып күренә. Әминә еләнен кейҙе лә Рәжәп янына сыҡты. Улар, таң нурҙары офоҡто һарғайтҡансы, бербереһенә һыйынышып, эскәмйәлә шымып ултырҙылар. Һөйләшмәнеләр…

Һуңғы ваҡытта ҡала мәсетенә йөрөргә әүәҫләнгән Рәжәп шунда эш тапты.

…Асыҡ тәҙрәнән өй эсенә һөттәй аҡ томан ағыла. Ул һалҡын, еүеш тыны менән өшөтөп, татлы таң йоҡоһонда бәүелгән ҡыҙҙы юрғанға төрөнөргә мәжбүр

итә. Йәшел тутыйғош тәҙрә тупһаһына менеп ултырған ялбыр бесәйҙең башына ҡунған да тышта йөрөгән кемгәлер сырҡ-сырҡ килә. Шул саҡ бесәй башын бороп хужаһына ҡараны, гүйә, тәҙрәгә килеп, урамға ҡарарға саҡырҙы.

Әминә урынынан тороп, тәҙрәгә барҙы. Бар донъя томан пәрҙәһе артына йәшеренгән. Томан шундай ҡуйы, уны, гүйә, ҡулға алып, мамыҡ шәлдәй, иңгә ябырға була. Тирә-йүндә сәйер һиллек. Әйткәндәй, быңдай ҡуйы томандар көҙгө көл буйының ғәҙәти бер күренеше генә.

Сеү... ҡапҡа алдындағы эскәмйәлә кемдер ултыра түгелме? Бәй, атаһы, әсәһе, Азат ҡустыһы ла баһа! Нишләйҙәр унда, ниңә өйгә кермәйҙәр?

Әминә тәҙрә аша туғандарына өндәшергә уҡталғайны, ниңәлер тауышы сыҡманы. Шул саҡ Азат ҡустыһы, әйләнеп, тәҙрәгә ҡараны ла, апаһын күргәс, йылмайып уға ҡул болғаны. Әминә уға яуапларға иткәйне, ҡулдарын күтәрә алманы, улар, әйтерһең дә, тәҙрә тупһаһына йәбешкән. Ниһайәт, атаһы менән әсәһе лә уға боролдолар. Улар, өсәүләшеп, шат йылмайып, аҙ ғына ваҡыт Әминәгә ҡарап торҙолар ҙа, һуңғы тапҡыр ҡул болғап, ашыҡмай ғына китеп барҙылар. Ниңәлер, урам буйлап түгел, күл яғына йүнәлделәр, яр башына еткәс, ерҙән айырылдылар ҙа, томанға кереп, күҙҙән юғалдылар...

Йоҡоһонан илап уянған ҡыҙ, бер аҙ ваҡыт өнө менән төшөн бутап, иләҫләнеп ятты. Өй тәҙрәләрен, ысынлап та, аҡ томан пәрҙәләгәйне. Бесәйе менән тутыйғошо ла шунда, тәҙрә тупһаһында, ултыралар... Әминә тороп, шыпырт ҡына тәҙрә аша йорт алдына күҙ һалды. Эскәмйә буш ине...

Бөгөн мотлаҡ зыяратҡа барып, туғандарының ҡәберен тәрбиәләргә кәрәк. Мәсет ҡарттарына хәйер биреп, әсәһе, атаһы, ҡустыһына доға ҡылдырыу ҙа фарыз.

Әминә, кисә алған әйберҙәрен йыйнап, зыяратҡа юлланырға ғына торғанда, ҡапҡа шаҡыныҙар. Ҡыҙ урамға ҡараған тәҙрәгә килде. Бәй, әллә ни арала йорт алдына машиналар килеп туҡтағансы? Ике тамсы һыу кеүек бер-береһенә оҡшаған машиналар ҙур, ҡоҙғон ҡаурыйылай, ҡап-ҡаралар. Уларҙы уратып ҡара кейемле, галстуклы әзмәүерҙәй ирҙәр баҫҡан. Эскәмйәлә, алдына терәгән таяғына ҡулдарын һалып, ниндәйҙер бабай ултыра. Ирҙәрҙең береһе ҡапҡа шаҡый, ә уның янында баштан-аяҡ ҡара күндән кейенгән сибәр ҡыҙ тора...

Әминәнең, гүйә, йөрәге өҙөлөп, боҙло упҡынға осто. Ҡурҡышынан ҡобараһы осҡан ҡыҙ, кинәт кенә быуынһыҙланып, тотанағын юғалтҡан аяҡтарын ҡуҙғатырға көс тапмай, тәҙрә алдында ҡатып ҡалды. Әле генә төрлө уйҙар буталған башында ҡапылдан бушлыҡ хасил булып, бар булмышын уй-хәрәкәттән яҙҙырҙы.

Шунда теге ҡыҙ тәҙрә аша Әминәне күреп ҡалды ла, мөләйем йылмайып, уға ҡул болғаны.

– Ҡурҡма, һылыуым, – тигән тауыш керҙе Әминәнең шаңҡыған зиһененә. – Һиңә кескәй генә йомошобоҙ бар. Ас ҡапҡаңды, ҡурҡма.

Нисек сығып, нисек ҡапҡаны асҡанын да белмәне Әминә. Теге бабай менән ҡыҙ өйгә кереп, түрҙәге өҫтәл артына урынлашҡас ҡына, кинәт иҫ алғандай, йүгереп йөрөп ҡунаҡтар алдына сәй ҡуйҙы.

– Сатура апайың, – тип үҙе менән таныштырҙы теге ҡыҙ. – Ә был Искәндәр бабайың булыр.

Әйтеп биргеһеҙ һөйкөмлөлөк, нәзәкәт бөркөлгән был һылыу янында Әминә үҙен аҡҡош янында йөҙгән һоро өйрәк һымаҡ итеп тойҙо.

Искәндәр бабай, өндәшмәй генә алдына ҡуйылған сәйҙе йотҡас, кинәнгәндәй, тамаҡ ҡырып алды. Бабайҙың һул ҡолағы янында ҡара үрмәкселәй ҙур миңе бар. Уның бар булмышынан ниндәйҙер шомло көс ағылыуын тиреһе менән һиҙгән ҡыҙ, үҙе лә һиҙмәҫтән, Сатураға һыйына биреп ултырҙы.

– Һылыуым, ошо әйберҙе ҡайҙан алыуыңды беҙгә һөйләп бирһәңсе?

Сатура Әминәнең алдына кисәге йәһүдкә һатҡан ҡыҙыл йәшмәле беләҙекте сығарып һалды.

Сер, ниндәй генә булһа ла, тәнде ғазаплаған йәшерен сирҙәй, хужаһының күңелен өҙләкһеҙ өйкәп торалыр. Башҡаларҙан йәшерерлек сере булған кеше үҙенең алдына күҙгә күренмәгән кәртәләр ҡора, күңел, зиһен ҡапҡаларына йоҙаҡтар элә, барған юлынан шикләнә, яҡындары менән аралашҡанда ла, үҙе генә күргән ҡыл баҫмалар аша, һәр аҙымын үлсәп баҫырға, һәр һүҙен, теш араһынан ғына һарҡытып сығарырға тырыша. Бәләкәй серҙәр, ысыҡ тамсыһылай емелдәп, хужаһын һата ла, ҡәҙере бөткәс, кибеп, эҙ ҡалдырмай юҡҡа сыға. Ҙур сер, быуала алҡынған ғәйрәтле даръялай, бер туҡтауһыҙ кәртәһен емерергә уҡталып, үҙен һаҡлар өсөн, хужаһынан ҙур көс талап итә. Билдәле, быуаһын емергән һыуҙың артынан иһә тик ҡыйралыш һәм ҡайғы-хәсрәт кенә тороп ҡала.

Әминәнең хазинаға бәйле сере лә, ҡасандан бирле шашып, ярҙары аша уҡталған ташҡындай, уның өҫтөнә эреле-ваҡлы ҡайғы тамсылары атып тормаймы ни? Шуғалырмы, ҡыҙ хазина хаҡындағы белгәнен ҡунаҡтарға бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе. Һандыҡ төбөнән табылған хат менән фотоһүрәтте лә өҫтәлгә һалды, бүрәнә араһындағы йәшенмәктә ятҡан ҡумтаны ла сығарҙы. Сатура, һуңғыһын асҡас, йөҙөнә бөркөлгән йәйғор нурҙарына күҙҙәре ҡамашҡандай булып, һоҡланыуынан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

Уның ҡарауы, Искәндәр бабай ул биҙәктәргә иғтибар ҙа бирмәне. Ул ҡулындағы иҫке фотоһүрәт менән хатты әйләндергеләп, ихлас ғәжәпләнеүен бер кемдән дә йәшермәй, ара-тирә тамаҡ ҡырып, бер һүҙһеҙ ултыра бирҙе. Бер аҙҙан ул күҙҙәрен күтәреп Әминәгә баҡты ла уны янына саҡырып алды.

– Бына һинең олатайың, – тине ул, фотоһүрәттәге йыуантыҡ кешегә бармағын төртөп. – Латипов Кәрим Зәйнулла улы. Сауҙагәр булған. Ә был кеше – минең олатайым, – бабай кәмәләге хәрбигә күрһәтте. – Латипов Хәкимйән Зәйнулла улы. Улар, ағалы ҡустылы, бер туған булғандар. Тимәк, ҡыҙым, беҙ ҙә бер заттан, туғанбыҙ… Һин минең ейәнсәрем булаһың… Вәт донъя, күпме йәшәһәң дә, хикмәте, ҡыҙығы бөтмәй…

Сатура, усында нурланып уйнаған биҙәктәрҙән күҙен алып, Әминәгә ҡараны.

– Хазинаны талап алған әҙәмде беләһеңме?

Ҡыҙ, маңлайын мәрәкә йыйырып, теге көндө Таһирҙан ишеткән исемде иҫләргә тырышты.

– Ниндәйҙер сәйер исем… Табиптарҙы хәтерләтә… Скальпель? Юҡ… Шипцы? Юҡ… Шприц! Шприц исемле!

Кинәт кенә мейеһенә бәреп ингән был исемдән тертләп, Әминә, үҙе лә аңғармаҫтан, устары менән ауыҙын баҫты ла, күҙҙәрен ҙур асып, шымып ҡалды. Кисәге кафе хужаһымы ни? Үҙен, Геннадий Самуилович Шприц, тип таныштырғайны бит?! Эй, Хоҙайым, Нәфисә әхирәте, ана, кемгә барып эләккән?

Искәндәр бабай Сатураға кинәйәле ҡараш ташланы. Сатура өндәшмәй генә урынынан торҙо ла урамға сығып китте.

Искәндәр бабай ултырған ерендә ҡуҙғалып алды.

– Әминә ҡыҙым, мин, ятып, бер аҙ серем итәйем әле. Юл йонсотҡан. Ҡарт һөйәктәр таралып бара…

Ҡыҙ йәһәт кенә бабайына яҫтыҡлап урын әҙерләне лә төпкө бүлмәнең ишеген япты. Ишек төбөнә алпамыштай кәүҙәле ике ир урынлашты. Өсөнсөһө – йорт алдында, ҡапҡа һаҡлай…

Һуңғы ваҡытта, өйөрмәләй, бер туҡтауһыҙ боларып торған ваҡиғаларҙан тамам алйыған ҡыҙ, артабан булыр хәлдәргә борсолоп, нисек ваҡыт уҙғарырға белмәй торғас, йәшелсә баҡсаһына сыҡты ла ергә ҡойолған алмаларҙы ҡапсыҡҡа йыя башланы. Галя ҡарсыҡтың сусҡаһына…

Төш етте. Әминә, тынлыҡ хөкөм һөргән өйҙә аяҡ осонда ғына йөрөп, Искәндәр бабайҙың күҙле бүкәндәй өнһөҙ ултырған арсыйҙарына берәмләп ҡәһүә эсерҙе.

Бер мәл ихата ҡапҡаһы шалтырлап асылды ла, ул да булмай, ике арсый, аҡ күлдәк-салбарлы ирҙе, аяуһыҙ өҫтөрөкләп, өйгә алып керҙе. Уларҙың артынан кергән Сатура төпкө бүлмәгә, Искәндәр бабай янына, үтте. Бер аҙҙан бүлмәнең ишеге асылды. Өҫтәл артындағы ултырған бабай янына баҫҡан Сатураның һомғол һыны, тәҙрәнән төшкән яҡтыла, ҡараташтан киҫеп яһалған һынды хәтерләтә.

Аш бүлмәһендәге Әминә, йөрәген усына тотоп, ишек аша шыпырт ҡына бүлмәләге хәлдәрҙе күҙәтте.

– Ниңә бында алып килдегеҙ уны? – тип Искәндәр бабай Сатураға ҡараны.

– Ышанмай. Беҙҙе урам хулигандары ти…

Шунда аҡ кейемле ир сайҡалып китте лә, аяғын күтәреп, бүлмәгә керергә атлаған еренән, гөрһөлдәп, иҙәнгә ҡолап төштө. Янындағы арсыйҙың уға ҡаршы ҡулланған күҙ эйәрмәҫлек етеҙ хәрәкәтенән булды был.

– Искәндәр бабай, зинһар, кисерә күр… Ышанманым шул, – тип ыңғырашты меҫкен муйынына баҫҡан арсыйҙың ялтырап торған ҡара ботинкаһы аҫтынан.

– Кем һин?

– Шприц… Генка Шприц…

– Хазиналар ҡайҙа?

– Миндә… Ышаныслы урынға йәшергәнмен. Бер тәңкәһенә лә теймәнем…

– Хазиналарҙы хәҙерҙән үк биреүең фарыз…

– Бирәм… Хәҙерҙән, тулайым бирәм…

Бабайҙың баш ҡағыуынан арсыйҙары Шприцты елтерәтеп урамға һөйрәне. Кисәге кафе хужаһының ҡурҡышынан ҡобараһы осоп, йәмһеҙләнгән йөҙөн күреп, ҡыҙҙың йөрәге тетрәнде.

Бабай, урамға сыҡҡас, артынан оҙатып килгән Әминәгә бороолдо.

– Ярай, Әминә ҡыҙым, һау бул, – тине ул, шешмәк күҙ ҡабаҡтары аҫтындағы дымлы күҙҙәре менән генә йылмайып. – Бик ҡыуандым һиңә. Хикмәтле тарихты белдем.

Шулай тигәс, ул аяҙ күк аҫтында күгәреп ятҡан күлгә ҡарап бер аҙ өнһөҙ торҙо.

– Бынан ары миңә арҡаланырһың, – тине ул, күҫәктәй ҡаты ҡулы менән ҡыҙҙың арҡаһынан һөйөп. – Ата-әсәйеңде алыштыра алмаһам да, йәбер-золомдан һаҡлармын үҙеңде. Ғөмүмән, бөгөндән һинең алдыңда ҙур мөмкинлектәр асыла, аңла шуны, ҡыҙым…

…Өйҙә Әминәнең ялбыр Мырауы өҫтәлдә ятып ҡалған зәр биҙәктәрен иҙәнгә төртөп төшөргән дә, йыһан йондоҙҙары менән уйнаған әкиәт януарылай, мас булып балаҫ өҫтөндә аунаҡлай ине.

## 23

Отпуск тамамланып, эшкә сыҡтым. Сыҡтым да, бына бер аҙна инде, өҫтәлем артында туҡтауһыҙ тәмәке көйрәтәм. Сөнки эшемә ҡулым бармай, дәртдарманым да ҡуҙғалмай. Ел ауҙарған ағас төпһәһе генә тирә-яҡтағы тормошҡа шулай битарафтыр.

Бүлек етәксеһе Серега Иванов ҡырын-мырын ғына минең яҡҡа күҙ ташлай башланы. Аңлашыла, әлеге мәүешлегем борсой уны. Артымды ултырғысымдан айырып, эшкә егергә теләгәнгәлер, тәфтишселәр менән бергә яңынан тыуып торған төрлө хәлдәрҙе тикшерергә ебәрә. Тик мин унда ла – сит күҙәтсе хәлендә, тәмәке бырлатыуҙан бушамайым. Һуңынан башҡарған эштәрҙе ҡағыҙға төшөрә алмай аҙапланам. Сөнки башымда тауыҡ суҡырлыҡ та фекер юҡ.

Ҡыҙыҡ: беҙ яҙған ҡағыҙҙар киләһе быуын тарихсыларын ниндәй һығымтаға килтерер икән? Аҡҡа ҡара менән яҙылған һүҙҙәр араһына күпме хәйлә, алдаҡ, мәкер йәшеренергә мөмкин…

Ауылдан килеү менән Олег янына керҙем. Һөйөндөм. Дуҫымдың тормошо гөрләп, балҡып тора. Янында элгәре Генка Шприцтың кафе-барында эшләп киткән Настя исемле көләс кенә ҡыҙ өйөрөлә. Фатиры ла, ҡот кергәндәй, төҙөкләнеп, таҙарып ҡалған.

– Урамда тотоп алды, – ти Олег, аш бүлмәһендә сыуалған Настя яғына ымлап. – Бер көн магазинға сыҡҡайным. Шунда күҙҙәрен шар асып, күҙен алмай мине күҙәткән бер ҡыҙҙы шәйләп ҡалдым. Уңайһыҙланып, кәйефем ҡырылды хатта. Ҡайтып килһәм, коляскам бер саҡ үҙенән-үҙе тәгәрәй башланы. Әйләнеп ҡараһам, теге ҡыҙ килә мине этәреп. Минең телде беләһең бит, битәрләп, хурлап бөттөм үҙен, тик ул барыбер китмәне. Коляска йөрөткөм килә, ти. Мәйтәм, бала тап та теләгән хәтлем йөрөт, тик миңә теймә, тим. Һин минеке, баланы ла бергә табырбыҙ, тип кенә яуапланы теге. – Олегтың зәңгәр күҙҙәре дымланды. – Шунан бирле бергәбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, Настяны минең янға Хоҙай үҙе ебәргәндер, тим…

Олег ҡултыҡ таяғы менән йөрөй башлаған. Үҙенән ян-яҡҡа йылы нур бөркөлгәндәй. Эйе, уның тормошона ла, ниһайәт, бәхет ҡошо осоп кергән. Милициянан китергә уйлауымды әйткәс, Олег бер аҙ тынып ултырҙы.

– Күҙҙәреңдә сәм һүнгәнде күрәм инде, – тине ул һуңынан, тәҙрәгә ҡарап. – Ә сәмһеҙ һунарсы булмай. Милициялағы бүтән төрлө эшкә күс, тиер инем дә, тик унда һин барыбер ҡыҙыҡ тапмаясаҡһың. Һине берәй бүлеккә етәксе итеп күтәреүҙәре лә шикле, сөнки юғарылар алдында ер һеперә, ярамһаҡлана белмәйһең. Бәлки, ысынлап та, ваҡытында китеп ҡалыуың арыу булыр? Минең һымаҡ берәй бәләгә тарымаҫ борон. Бысаҡ йөҙөнән йөрөйһөң бит…

Бысаҡ йөҙөнән дә, закон өҫтөнән дә. Береһен яҡшы, береһен яман тиерлек түгел. Әйткәндәй, уныһына ла күнегелгән инде. Һәр эштең үҙ аҙабы бар. Тик беҙҙең эштә сәмһеҙ-йәмһеҙ ҡалыу йәнһеҙ ҡалыу менән бер шул.

Бөгөн шуны хәл ҡылдым да эштән ебәреүҙе һорап яҙған ғаризамды Ивановтың өҫтәленә һалдым. Ивановтың йөҙө, сикәһенә сапҡандай булып, һытылды.

– Таһир, һин нимә, бынауы һаҫыҡ һаҙлыҡта яңғыҙымды ташлап китергә булдыңмы? – Ул таҫырайҙы миңә. Әллә, ысынлап та, үпкәләй инде? – Миңә артабан кем менән эшләргә ҡала һуң?– тип дауам итте ул, ярһып. – Бынауы һыу мейе малай-шалай менәнме ни? Иң яҡшы хеҙмәткәреңде юғалттың, тип башымды ашауҙарын теләйһеңме?

Эйе, минең эштән китеүем... әлеге ваҡытта бушарға торған бүлек етәксеһенең беренсе унынбаҫары урынына менеп ҡунаҡларға өмөтләнгән Ивановҡа «мәрәй» өҫтәмәй, әлбиттә.

– Ҡыҙғаныҫка ҡаршы, минән фәтеүә күрмәҫһең шул, – тинем. –«Һүндем» мин…

Төрлөсә өгөтләп тә, эштә ҡалырға күндерә алмағас, Сергей мине бүлек етәксеһенә алып китте.

Владимир Иванович минең ғаризама күҙ һирпеп кенә ҡараны *ла* уны, ҡулына яңылыштан килеп йәбешкән сүптәй итеп, өҫтәленә ырғытты.

– Ашығаһың, Ғәзизов, – тине ул, ризаһыҙ ҡиәфәттә. – Көтмәгәйнем быны һинән… Илде енәйәтселек баҫҡан, коррупцияға ҡаршы аяуһыҙ көрәш башланған мәлдә, һин төбө тишек караптағы күсә һымаҡ ҡыланаһың. Беҙҙән башҡа кем атҡарыр был эштәрҙе?

Полковник, өҫтәл артынан тороп, ҡаршыма килеп баҫты. Мин дә артымды ултырғыстан айырырға мәжбүр булдым.

– Аңлайым, ябай эштә урам, подъезд тапап арығанһыңдыр, – тине ул, ҡарашы менән мине ялмап. – Шулай ҙа эштән китергә ашыҡма. Сөнки һуңғы ваҡытта эске эштәр бүлеге етәкселегендә һиңә ҡарата бик хәйерле ниәт бар. Ишеткәнһеңдер, минең беренсе урынбаҫарым – подполковник Әнүәр Таһирович Хәмитов – хаҡлы ялға китергә йыйына. Тегендәгеләр риза булһалар, – полковник түшәмгә ымланы, – уның урынына майор Иванов тәғәйенләнәсәк.

Шымып ултырған Иванов, туптай ырғып, аяғөҫтө баҫты.

– Ә уның урынына бүлексә етәксеһе итеп һине ҡуйырға уйлайбыҙ. Артабанғы яҙмышығыҙ үҙ ҡулығыҙҙа. Мин дә бында мәңгелек түгел. Аңланыңмы инде? – Владимир Иванович, аяҡ аҫтында ниҙер эҙләгәндәй, иҙәнгә текләп, бүлмәһен әйләнеп сыҡты ла ҡабат өҫтәл артына урынлашты. – Юғарыла әйткәндәр бойомға ашҡас, үҙеңә фатир биреү тураһында ла ҡайғыртырбыҙ, – тип өҫтәне ул, беҙҙең тарафҡа ҡарамай ғына. – Алдыңда ниндәй яҡты киләсәк асылғанын күрҙеңме инде, Ғәзизов? Ә был ҡағыҙың, – ул минең ғаризамды өҫтәленән йолҡоп алып, ҡайҙалыр тыҡты, – әлегә миндә ятып торһон… Бар, эшеңдә бул. Ә һин, Иванов, бер минутҡа бында ҡал. Ғөмүмән, – полковник көтмәгәндә усы менән өҫтәлде шапылдатты, – һин, Иванов, хеҙмәткәрҙәреңә ҡарата йомшаҡлыҡ күрһәтәһең! Ниңә ул аҙна буйы бер ни ҡылмай, мыйығындағы беттәрен сүпләп ултыра?! – тип бүлек етәксеһе миңә һуҡ бармағын төбәне. – Эшкә ек үҙен! Юҡ-бар уйлап, башы буталырға ваҡыты ҡалмаҫ!

Коррупция, имеш… Ил көн һайын уғрылыҡтан миллиард һумлап мөлкәтен юғалтҡан саҡта, мин, ер соҡоп, ике меңлек урландыҡ кеҫә телефонын эҙләйем, меҫкен бомждарҙы баҫтырыҡлайым. Ә шул эшемдән үҙемә ял да юҡ, мал да юҡ, тигәндәй.

Владимир Ивановичтың мине бүлексә етәксеһе вазифаһына ымһындырыуы ла һыу өҫтөнә һүҙ яҙыу менән бер инде. Шулай булмаһа, быға ҡәҙәре кадрҙар бүлегендә артын йылытҡан прокурор малайын йәһәт кенә беҙҙең бүлексәгә күсермәҫтәр ине. Ысынында иһә Ивановтың урынына шуны ҡоҙаларға йыйыналарҙыр. Ә мин уларға йөк аты рәүешендә генә кәрәкмен. Кем дә булһа эшләргә тейеш тә баһа.

Урамда көҙгө ямғыр быҫҡаҡлай. Һоро болот япмаһы, гүйә, донъяла таң ҡалдырғыс матур зәңгәр күк барлығын инҡарларға теләгәндәй, офоҡтарҙы ялғап, баш өҫтөнә аҫылынған. Аяҡ аҫтындағы еүеш япраҡтарҙы тапап, төрлө төҫлө зонттар тотҡан кешеләр ҡайҙалыр ашыға. Әминәнең зонты ниндәй икән? Аллы-гөлләмө, әллә ҡарамы?

Урамдан уҙғанда, алдағы йорт мөйөшөнән ҡаршыма Әминә килеп сығыр һымаҡ тоям. Һуңғы ваҡытта... Үҙем көтөлмәгән осрашыуҙан шөрләйем, ә үҙем шуны теләйем. Диуаналыҡ түгелме шул?

Кабинет ишеге асылыуға, артыма боролдом. Әлфиә Фәнүровна, имеш. Балиғ булмағандар менән эшләүсе бүлексәнең етәксеһе. Уттай йылғыр, сос ҡатын ул. Күҙҙәре янып тора, тәтелдәп торған теле менән теләһә кемдең бауырына төшөп, аҡты ҡара, ҡараны аҡ тип танытырға тигәндә, уға ҡуш. Шуғалырмы, бүлек етәксеһе полковник Козлов эш һөҙөмтәләрен тикшереүгә арналған кәңәшмәләрҙә Әлфиә Фәнүровнаға һүҙҙе иң һуңында ғына бирә.

Әлфиә Фәнүровна бүлмәгә кереү менән, еүеш зонтын иҙәндең ҡап уртаһына киптерергә ҡуйҙы ла, иҫәнләшергә лә онотоп, ҡаршымдан урын алды.

– Бар өмөтөм һиндә генә, Таһир, – тине ул, сөм-ҡара күҙҙәре менән күн эшләпәһе аҫтынан мөлдөрәп. – Үҙәктәге әрәмтамаҡтар башымды ашарға ҡырсына.

Ҡырҡҡа етеп барһа ла, Әлфиә Фәнүровнанан нәзәкәтлек бөркөлөп тора. Йәш сағында һыуһылыуҙай матур булған, тиҙәр уны. Ысынлы-буштлы күп кенә лаҡап та артынан эйәреп йөрөй уның. Ғөмүмән, милицияла эшләгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы йәлләйем мин. Күҙҙәре йәм, йәндәре ғәм күрмәй, ҡолаҡтары матур хәбәр ишетмәй уларҙың.

– Тиҙ арала балиғ булмағандарҙы енәйәтсел эшкә ылыҡтырыусыларҙы фашлап, шуларға ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатыуҙы талап итәләр, – тип дауам итте ҡатынҡай. – Юғиһә, вазифамдан бушатыу менән янайҙар. Туғыҙ айлыҡ эшебеҙҙең һөҙөмтәләре насар, йәнәһе…

– Шулай уҡ насармы ни?

– Нишләп насар булһын, ти? – Әлфиә Фәнүровнаның матур күҙҙәре түңәрәкләнеп үк китте. – Быйылғы күрһәткестәребеҙ былтырғылар менән типтигеҙ генә! Ә уларға – һаман аҙ! Имеш, беҙ иҫкесә эшләйбеҙ, замананың яңы талаптарын үтәмәйбеҙ. Ишетәһеңдер бит, унда, – ул күҙҙәре менән юғарыға ымланы, – балалар хоҡуғын яҡлау хаҡында бер туҡтауһыҙ бөтә донъяға яр һалалар. Был бәлә шул сәйәсәттең сығанағы инде…

Беҙҙең эштә, быйылғы күрһәткестәрҙе былтырғылар менән сағыштырып, йыл аҙағында шуларҙы тигеҙләп ҡуйыу хәйләһе бар. Сөнки үткән йылға ҡарағанда артығыраҡ эш күрһәткәндә, алдағы йылда, эҫегә әлһерәгән эттәй телеңде аҫып, тағы ла шуларҙы ҡыуаларға тура килә. Әйткәндәй, был ғилләбеҙҙә генә түгелдер ҙә.

– Таһир, һинең шымсы-ошаҡсыларың күп, – тип дауам итте Әлфиә Фәнүровна, үтенес менән күҙҙәремә бағып. – Бәлки, балаларҙы ҡыйнаусылар, уларҙы енәйәткә ылыҡтырыусылар хаҡында хәбәрең барҙыр? Беләһеңме, был йәһәттән үҙемдә эшләгән кәзә тояҡлы, йоҡа сираҡлы ҡыҙҙарға өмөтөм юҡ. Улар, енәйәт асыу түгел, иҫеректәр янына яңғыҙ барырға ла шөрләй бит…

Һәм бына ҡала ситендәге ике ҡатлы баҡса йортона боҫоп, юл ашалағы күрше йортто күҙәтәбеҙ. Ҡараңғы ла төштө. Бынан бер нисә минут элек, бер ҡыҙ баланы эйәртеп, ҡаршылағы йортҡа Генка Шприц килде. Хәҙер инде беҙ «ҡунаҡ»ты көтәбеҙ. Беҙ тигәндән, бында минең менән тағы биш кеше. Ишелеп торған ҡуйы ҡара сәсле тәфтишсе ҡыҙ, юстиция капитаны Фәнилә Айратовна, папкаһын ҡосаҡлап, диванда йоҡомһорай. Кескәй ҡыҙын тағы ла өләсәһенә ҡалдырып киткәндер инде. Ире нефтсе уның, айҙар алмаштырып, китә-ҡайта ҡайҙалыр Себергә йөрөп эшләй. Балиғ булмағандар менән эшләүсе зәңгәр күҙле, алтын сәсле йәш ҡыҙ, килештереп, үләндәй нескә биленә суҡмарҙай

ҙур пистолет аҫып алған. Әлфиә Фәнүровна былдай яуаплы эшкә тәжрибәлерәк хеҙмәткәр тапманымы икән ни? Милиция сержанты Нәғим баянан бирле понятойҙар итеп алынған еңел холҡло ике урам ҡыҙы менән сырҡылдаша. Тамам теңкәгә тейгәс, екереп, бер нисә тапҡыр тыйырға тура килде үҙҙәрен. Ул ҡыҙҙар урынына, мәктәп менән килешеү буйынса, ике уҡытыусы ҡатын килергә тейеш ине. Тик улары, ваҡыты еткәс, һыуға батҡандай ғәйеп булды. Билдәле, милиция эшенә ҡатышып, бысранғылары килмәй. Шуға ла урамда арт һандарын «һатып» торған ошо икәүҙе тотоп, бында алып килергә мәжбүр булдыҡ.

Кисә Генка Шприцтың кафеһында бармен булып эшләгән Ринат исемле «шымсы»м менән күрешкәйнем. Ринат ошо көндәрҙә хужаһының тағы бер ҡыҙ баланы кемгәлер «һатыр»ға маташыуы тураһында шыбырҙаны. Хатта әшәке алыш-бирештең ваҡытын, урынын күрһәтте. Көндөҙ шул хәбәрҙе Әлфиә Фәнүровнаның ҡолағына төшөргәйнем, сат йәбеште бит теге. Бүлек етәксеһенә кереп, ошо енәйәтте асыуға айырым төркөм булдырыуҙы талап иткән. Дөрөҫөн генә әйткәндә, был сетерекле эштән ситтә ҡалырға өмөтләнгәйнем. Тик Иванов, бүлек етәксеһе Козловтың мине эшлекһеҙлектә ғәйепләгән шелтәһен иҫендә тотопмо, мине лә ошо төркөмгә беркетте. Иллә-мәгәр бала-саға менән бәйле енәйәттәр менән булашырға яратмайым мин. Ололарҙы, йәнгә тейә башлаһалар, ҡаҡҡылап-һуҡҡылап та алырға була. Ә кескәйҙәр менән ни ҡылмаҡ кәрәк? Етмәһә, улар ҡылған ҡырын эштәр йыш ҡына ололарҙыҡынан да әшәкерәк, ҡатмарлыраҡ булып сыға. Башбаштаҡ балаларын ҡурсып, өҫтөңә ҡарағоштай ташланырға торған ата-әсә менән эш итеү генә күпме көстө, сабырлыҡты ала. Балиғ булмағандар менән эшләүселәргә Хоҙай үҙе түҙемлек бирһен, ҡыҫҡаһы…

Тышта, көҙгө һалҡындан ҡатҡан үлән-ҡыуаҡтарҙы шыптырҙатып, ямғыр һибәләй. Ямғырҙан йәшенерлек бүтән урын тапмағас, ошо баҡса йортоноң ишеген ҡайырып асырға тура килде. Йорт хужаһы белеп ҡалып, янъял ҡубарһа, емерек ишек бәләһен бомждарға япһарырға тура килер инде. Уның ҡарауы, күҙәтеүгә алынған ҡаршылағы йорт ус төбөндәгеләй күренеп тора.

Шул саҡ йорт алдына машина килеп туҡтаны ла, кемделер ҡалдырып, ары ҡуҙғалды. Зонт тотҡан ҡара шәүлә тәүҙә тәмәке ҡабыҙҙы, шунан кеҫә телефонынан кемгәлер шылтыратты ла, ҡапҡа алдында бер аҙ тапанып торғас, ҡаршылағы йорт яғына ыңғайлап, күҙ яҙҙырҙы.

– Әйҙәгеҙ, йәһәтерәк булайыҡ, – Фәнилә Айратовна бейек күтәрмәле итектәре менән таҡылдап, ултырған диванынан, ел осорғандай, ишеккә уҡталды. Мин уны ҡулынан тотоп алдым.

– Туҡта, иртә әле…

– Иртә, тисе? Ҡыҙ балаҡайҙы көсләгәндәрен күрәләтә көтөп ултырайыҡмы ни!?

– Ашығып, бар эште юҡҡа сығарыуыбыҙ мөмкин. Ямғырға күшеккән ҡыҙ баланы осраҡлы ғына тап иттек тә, йылытып, торт менән һыйлап ултырабыҙ, тип ҡотоласаҡтар…

Минең һүҙҙәремдән шартларҙай хәлгә еткән Фәнилә Айратовнаның күҙҙәре ҙурайып, йөҙө аҡлы-күкле булды.

– Ни һөйләйһең һин?

– Енәйәтте дәлилләүсе билдәләр барлыҡҡа килгәнде көтөп алып, шуларҙы законға яраҡлы рәүештә теркәмәһәк, әлеге бар мәшәҡәтебеҙ буш ғауғаға, ҡағыҙ бысратыуға ғына ҡайтып ҡаласаҡ. Һөҙөмтәлә, енәйәтселәр яуаплылыҡтан

ҡотолоп, бер аҙҙан әшәке кәсептәрен артабан дауам итәсәк. Һин, Фәнилә Айратовна, тәфтишсе бит, быны үҙең дә аңлап тораһың.

– Эй, Раббым, ни эшләйем һуң әле мин был бысраҡта?

Фәнилә Айратовна минең һүҙҙәремдән аҙап, йөҙөн устары менән ҡаплап, тынып ҡалды.

Шунда мин, кемдер сикәмә сапҡандай, кинәт айнығандай булып, һиҫкәнеп киттем. Ысынлап та, ни ҡылыуым был? Әшәке әҙәмдәрҙе енәйәт өҫтөндә тотоу бәрәбәренә, сәскәләй ҡыҙ баланың яҙмышын ҡурҡыныс аҫтына ҡуям да баһа. Эйе, миңә был эштән, һис шикһеҙ, тайырға кәрәк. Әҙәмсә йөҙөмдө юғалтып, таш йөрәкле закон ҡолона әйләнмәҫ борон.

Ҡоралымды ҡулыма алып, урамға атылдым.

Артабанғы хәлдәрҙе тәфсилләп һөйләү кәрәкмәҫтер. Йорттоң ишеген ҡыйратып керҙек. Биге серек булған улай ҙа – бер тибеүҙән аҡтарылды. Нәғим ҡаршыбыҙға уҡталған Генка Шприцты һуғып йыҡты. Түшәк йәйелгән бүлмәлә орсоҡтай ғына шәрә ҡыҙ бала, ярым шәрә ир…

Мин уны бер ҡарауҙан таныным. Таныным да... шунда уҡ ҙур бәләгә тарыуыбыҙҙы аңланым…

Ә иптәштәрем быны һиҙмәне. Улар был әҙәмдең кемлеген белмәйҙәр, ахыры. Тәфтишсе Фәнилә Айратовнаның ҡулындағы фотоаппарат, йорт эсендә ҡупҡан янъял-ғауғаға ҡарамай, бер туҡтауһыҙ балҡып, әлеге әшәке күренеште эшлекле рәүештә хәтер һандығына төшөрә барҙы. Нәғим, ҡаршылашып маташҡан Генка Шприц менән теге ир кешене аяуһыҙ бәргеләп алғас, уларҙың ҡулдарына бығау һалды. Артабан тәфтишсе ашыҡмай ғына, ентекләп енәйәт урынын тикшереү тураһындағы протоколды тултырҙы: «*Мин, юстиция капитаны Ғәҙлимова Фәнилә Айратовна, милиция майоры Ғәлимов Айҙар Кәримович, Ғәзизов Таһир һәм милиция сержанты Түләбаев Нәгим Солтанович ҡатнашлығында, шулай уҡ понятойҙар сифатында алынған шундай-шундай исемле граждандар алдында, шундай-шундай урында, шунса ваҡытта булған хәлдәрҙең шундай-бындай билдәләрен теркәнем…*»

Иртәнсәк эшкә барғас, башҡаса милицияла эшләмәүемде белдем. Мин кисә үк, ғариза яҙып, үҙ теләгем менән эштән киткәнмен, имеш. Тимәк, бөгөнгө төндәге мажаралар теркәлгән тәфтишсе протоколындағы минең ҡултамғаларым законһыҙ тип табыласаҡ. Тимәк, енәйәтте теркәп, шунда яҙылған бөтә ҡағыҙҙар ҙа законһыҙ тип танылып, ҡулға алынған хәшәрәттәр язаһыҙ ҡаласаҡ.

Владимир Ивановичтың моҡсайы ярайһы уҡ ауырайғандыр бөгөн…

Әйткәндәй, былар мине башҡаса ҡыҙыҡһындырмай ҙа инде…

**24**

Сал сәсле ҡаҡса ҡарт, өшөгән себендәй аҡрын ҡуҙғалып, өҫтәл артына урынлашҡас, ҡара бишмәтенең кеҫәһенән сығарған ҡалын тирәсле күҙлеген ҡармаҡтай кәкре танауына элде лә алдындағы ҡағыҙ битенә текәлеп өнһөҙ ҡалды. Сатура урынынан тороп, тәҙрә янына килде. Бөгөн уның өҫтөндә,– көҙгө йонсоу көнгә ярашлы, һоро костюм. Урамдағы сүп-сар йәшнигендә ямғырға күшеккән хәйерсе соҡсона. Юл сатына бер-бер артлы килеп туҡтаған бихисап машиналар көҙгө бысраҡтан бер төҫкә кергән оҙон, төҫһөҙ сират хасил итә.

Ҡарттың һаҡ ҡына тамаҡ ҡырыуынан Сатура артына бороллдо.

– Революциянан һуң ғаиләһе менән сит илгә ҡасырға мәжбүр булған сауҙагәр Латипов Кәрим Зәйнулла улының исеме миңә, тарихсы булараҡ, билдәле,

– тине ҡарт, көтөлмәгәнсә көр тауыш менән. Юғары уҡыу йортондағы яландай ҙур аудиторияларҙа уҡыған лекциялар, берҙән, тауышты асһа, икенсенән, ҡолаҡтарҙы хөртәйтә. – Яңылышмаһам, Төркиәгә киткән... – тип дауам итте ҡарт, күҙлеген һалып. – Ә унда, ул замандағы хаким Ататөрөктөң бик ҡаты милли сәйәсәте һөҙөмтәһендә, ситтән килгән бик күп халыҡ әүәлге атын-затын юйырға, яңы исем-шәриф алырға, милләтен оноторға мәжбүр булған. Егерменсе быуатта беҙҙең илебеҙҙә булған һуғыш-сыуалыштар, башҡа сәйәси ваҡиғалар ҙа беҙҙең халыҡты аҙ бутамаған. Шуға ла был эш ярайһы уҡ сетерекле булмаҡсы, тимен. Мөмкин булған ҡаҙәре теүәл, аныҡ шәжәрә төҙөү байтаҡ ҡына ваҡыт һәм сығымдар талап итер, тимен…

– Сығымдар һеҙҙе борсомаһын. Ә ваҡытҡа килгәндә инде, һеҙгә был эште йәһәтерәк башҡарыу фарыз. Әйткәндәй, шәжәрә хужаһы үҙенең зат-ырыуын ярайһы уҡ яҡшы белә. Шуға ла ашығып, уның тамырын Сыңғыҙ ханға йә Аҡһаҡ Тимергә, ә «сыбыҡ осо»н әлеге ете диңгеҙ аръяғындағы үрсемле Себенстан иленең президенты менән ялғарға кәңәш итмәйем. Һәр быуын етешле рәүештә дәлилләнергә тейеш.

Ҡарт, ялтыр тотҡалы затлы таяғына ҡарағанда, хөрт йәшәмәйҙер. Таяҡланыуы ла һаулыҡ етмәүҙән түгел, ә халыҡ алдында мәртәбә үҫтерергә ынтылыуҙан, буғай. Һуңғы ваҡытта замана еленән еңелмәй, аңын-заңын һаҡлап ҡалғандар зат-ырыуын, тамыр-сыбығын барларға тырыша шул. Теге хазинаны юллап йөрөгән саҡта, көтмәгәндә тап иткән зат-туғанлыҡтан һуң, Искәндәр бабай ҙа шәжәрәһен барларға булды. Юҫығын белмәйенсә, ҡырмыҫҡа иләүенә тарыған һуҡыр һымаҡ, аяҡ аҫтымда йөрөгән туған-тыумасамды тапамайыммы икән, ти…

Сал ҡарттың артынан таяҡ туҡылдауы тыныуға, телефон шылтыраны.

– Күрешергә кәрәк, – осрашыуҙың урын-ваҡытын әйткән Кәримдең тауышы бик ҡоро сыға. – Һөйләшерлек сәбәп бар.

Сатураның былай ҙа йонсоу йөҙөнә күләгә йүгерҙе. Кәриме уның менән иҫәнләшеп тә торманы. Ҡайҙа уның әүәлге балдай татлы теленән сыҡҡан «аҡҡошом, һөйөклөм, йөрәгем» тигән һүҙҙәре? Тимәк, шылтыратыусы Кәрим түгел. Был юлы уға милиция полковнигы Денис Даудович шылтыратты, шәт. Аҡты-ҡараны күрмәй, бер ни менән дә иҫәпләшеп тормай, генерал булып мораҙына ирешергә ынтылған Денис Даудович Сәғитов… Эш бүлмәһендә яңғыҙ ҡалған Сатура, үҙе лә һиҙмәҫтән, әсе көлөмһөрәп ҡуйҙы.

Бынан бер ай элгәре Кәрим үҙенең милиция шымсыһы булыуын әйтте уға. Аҙна самаһы күрешергә форсат тапмай, һағынышып осрашҡандан һуң, төн буйы һыҙылған ғишыҡ уйыны мәлендә булды был. Кәрим үҙенең серен ҡәҙимге бер ябай хәлде һөйләгәндәй итеп асты. «Бына мин һине булдыҡһыҙ эшҡыуар сифатында һөйә башлағайным да, уның ҡарауы, милиция полковнигы дәрәжәһендә «бөтөрөп» ҡуйҙым» тип шаяртты ул ишеткәненән дә бигерәк мөхәббәт утынан иҫереп ятҡан Сатураны. Сатура, тәүҙә быға ышанмаһа ла, таң атыуға үрмәксе ауына эләккән себендәй булыуын аңлағайны инде. Кәрим аңлата белә…Ул шул көндән алып Кәримгә эшләй. Кәрим, йәғни милиция полковнигы Денис Даудович, уның ярҙамы менән Искәндәр бабайҙың енәйәтсел «батшалығы»на үтеп инергә ныҡыша. Ул, әлбиттә, яңғыҙ түгел. Уның артында торғандарҙы Сатура белмәй. Әммә уларҙың төп маҡсаты Искәндәр ҡарттың енәйәтсел ойошмаһын тар-мар итеүҙән ғибәрәт түгел. Уларҙың ынтылғаны – ойошманың үҙәгенә кереп, уны үҙҙәренә буйһондороуҙан, һәм шунда әйләнгән мал-мөлкәт ағымын үҙ кеҫәләренә «йүнәлтеү»ҙән тора.

– Беҙ килеүҙән, дөйөм алғанда, Искәндәр ҡарттың «батшалығы»нда бер ни ҙә үҙгәрмәйәсәк, – ти Кәрим. – Уның хужалары ғына алмашынасаҡ. Әгәр беҙ Искәндәр ҡартты, ярандары, эйәрсәндәре менән бергә «йолҡоп» ташлап, ойошмаға үҙебеҙ хужа булһаҡ, алдыбыҙҙа асылған мөмкинлектәрҙе әлеге мәлдә күҙ алдына килтереү ҙә ҡыйын. Бер ҡулыбыҙҙа дәүләт власы булһа, икенсеһендә бандит суҡмары буласаҡ. Ә был – тормошҡа хужа булыу тигән һүҙ!

Ләкин Сатура, Кәримдең аяуһыҙ ҡыҫымына дусар булһа ла, Искәндәр бабай «хужалығы» хаҡында белгәндәрен бик һаран ғына асты. Бөтөнләй асмаҫ ине лә, тик Кәримдең ҡулында уны ыҡка һалып, мәжбүрләрлек дәһшәтле әмәле бар шул…Әйткәндәй, Сатура Искәндәр ҡарт ойошмаһының һис юғында ундан бер өлөшөн беләме икән һуң әле? Асылда нигеҙе енәйәтселеккә ҡоролған ойошманың һәр тармағына, һәр быуынына айырым кеше яуаплы булып, ул атҡарған эштәрҙе үҙе һәм үҙенән өҫтәрәк торған башлығынан башҡа белгән кеше юҡ. Шуға ла был сеймәлсек йомғаҡты тағатырға Сатураның мөмкинлектәре сикләнгән. Тормоштоң бар ҡатламдарына һуҙылып, урмандағы үрмәксе ауылай, иҫкән елде лә, ҡыпыш иткән емтекте лә һиҙеп торған ойошманың бар булмышы, бар асылы Искәндәр ҡарт ҡулында. Һәм... уның «ҡаҙнаһы»нда. Ә һуңғыһының исем-есеме Сатураға билдәһеҙ.

Бер аҙҙан, ошо хәлде аңлап ҡалғас, Кәримдең асыуы ҡабарҙы.

– Һин нимә, Искәндәр ҡарттың бандаһын тик икәүләп генә ҡыйратырға йыйынабыҙ, тип уйламайһыңдыр? – тине ул, йөҙөн ҡарайтып. – Уны төрлө яҡтан, төрлө ысулдар ҡулланып күптәр күҙәтә. Әммә һинең генә Искәндәр ҡарт янына туранан-тура йөрөрлөк хоҡуғың бар. Шунан файҙаланып, нисек тә беҙ уның ҡаҙнаһын табырға тейешбеҙ. Шунһыҙ Искәндәрҙән арыныуҙан беҙгә фәтеүә сыҡмаҫ, сөнки уның «хужалығы» тиҙ арала ҡаҙнаһы ҡулына ҡалып, ул беҙгә ҡаршы алыш башлаясаҡ. Шуға ла был эште нисек тә тауыш-тынһыҙ ғына атҡарыу кәрәк.

– Ҡаҙнасы хаҡында ҡыҙыҡһыныуымды һиҙеү менән, телемде ҡырҡып, күҙҡолаҡһыҙ ҡалдыраса ҡтар. Искәндәр ҡарттың аяуһыҙлығын белмәйһеңме ни?

Кәрим шунда, сит кешеләй, уға һынсыл һәм оятһыҙ ҡиәфәттә ҡарап торғандан һуң, янына килде лә ҡыҙҙың иҙеү төймәләрен ысҡындырып ҡыланды.

– Маҡсатына ынтылған һылыу ҡатын-ҡыҙҙар, ғәҙәттә, баштары етмәгән эшкә арттарын да ҡушалар. Дөрөҫ булһа, Искәндәр ҡарттың енси ғәйрәте һаман һүнмәгән, тиҙәр.

Сатура шунда, ишеткәненә ышанмай, һөйгәненә күтәрелеп ҡарағайны. Шул саҡ уның күҙ алдында ҡаршыһында торған Кәримдең һөйкөмлө йөҙө тоноҡланып, уның урынына, гүйә, видеоһүрәттә күргән милиция полковнигы Денис Даудовичтың ҡырҡыу ҡиәфәте хасил булды…

Беҙ мәңге бергә буласаҡбыҙ, ти Кәрим. Искәндәр ҡартты еңеп, уның мөлкәтенә хужа булғас та һаҡлармын, яҡлармын үҙенде, ти. Үлеп яратам һине, шуға, үңәсемә терәлгән бысаҡҡа ла ҡарамай, үҙебеҙҙе ошо бысраҡ тормоштан алып, юғары, яҡты донъяға күтәрергә, хан менән ханбикәләй булып йәшәрлек иркен хаят яуларға тырышам, ти. Ә инде, ниәте килеп сыҡмаһа, ҡыҫҡа ғына ғүмеркәйҙе сысҡандай боҫоп заяға уҙғарғансы, Хоҙай биргән тормоштоң бар тәмен татып, арыҫландай алышып үлеүең үҙе бер дан түгелме ни?

Ниңә фани донъяла саф мөхәббәт һәр саҡ ҡайғы-хәсрәт, бәлә-ҡаза менән, ҡушарлап йөрөй һуң? Кешеләрҙең йөрәгендә бәхет ҡошо ҡунып, оя ҡоророҡ урын булмағанғалыр. Ҡошсоҡ өмөтләнеп ҡуна ла кеше йөрәгенә, тар урынды оҡшатмай, кире оса…

Кәрим… Денис Даудович…Сатура Кәримде ярата. Ә Денис Даудовичты

күрә алмай. Сатура, Сати… Сати ҙа Кәримде ярата һәм  Денис Даудовичты ҡәһәрләй. Ә Кәрим Сатиҙы яратамы икән? Юҡтыр… Денис Даудович, билдәле, бер кемде лә яратмай. Тимәк, Сатура ла, Сати ҙа Кәримде һөйәләр. Ә Кәрим Сатураны ғына һөйә. Тимәк, Кәримгә Сатураны ҡушабыҙ ҙа саф мөхәббәт табабыҙ! Ха-ха! Мөхәббәт формулаһы бит был! Ха-ха…

Тик был тигеҙләмәлә исеме лә, есеме лә Кәрим булған кеше юҡ шул. Уның урында, ысынында иһә, Денис Даудович Сәғитов атлы әҙәм тора. Тимәк, был формула дөрөҫ түгел…

Хоҙайым, әллә  аҡылдан шашып бара инде?

Башында ҡайнаған мәғәнәһеҙ уйҙарҙан арынырға теләгән Сатура,  өҫтәл артындағы урынынан ҡуҙғалып, ҡайҙа барырға белмәгәндәй, бер мәл генә албырғап торғас, тәҙрә алдына килеп, тағы тынып ҡалды.

Эйе, буталды ул, тамам аҙаны. Мөхәббәтенә ышаныр ине, унынһы ике йөҙлө булып сыҡты. Ә аҡылы килеп тыуған көрсөктән сығыу юлын таба алмай яфалана. Ике ут араһында ҡалыу шулай булалыр. Һиҙә Сатура: уны уңда ла, һулда ла һәләкәт көтә. Артҡа ла юл юҡ, күперҙәр янған. Алда тик ҡараңғылыҡ… Кәрим үҙенең иптәштәре менән күпме генә серәшһә лә, Искәндәр бабайҙы барыбер еңә алмаясаҡ. Ул, әлбиттә, шуны күҙаллап үҙенә артҡа сигенеү юлын әҙерләгәндер ҙә инде, ни тиһәң дә, дәрәжәле дәүләт хеҙмәткәре бит, ә дәүләт һағы буш һүҙ түгел. Ә уға эйәргән Сатураға ҡотолоу юҡ. Сөнки уның законға ҡаршы ҡылған гонаһтары асылып, кисереү тапмаясаҡ, ә унда инде һатлыҡ йәнгә асыуы ҡабарған Искәндәр ҡарттың ҡоно ла артынан ҡыуып етер… Ғәйебен танып, Искәндәр бабайҙан ярлыҡау һорау ҙа ҡотолдормаясаҡ уны… Берҙән, ҡарттың һатлыҡ йәнде кисереүе икеле булһа, икенсенән, дәүләт шул мәлдә үк,  рәсми рәүештә уға үҙенең закон эттәрен һөсләтәсәк. Ул саҡта инде хатта Искәндәр ҡарт та яҡлай алмаясаҡ уны… зымсыя булғандай итеп ҡасырғамы әллә? Әйткәндәй, быға уның әмәл-ысулы әҙер инде. Ике яҡлап та донъя ҡыҙырып эҙләйәсәктәр, әлбиттә. Тапһалар – һәләкәт…

Әлеге көрсөктән ҡотолоуҙың тағы бер ысулы бар унда. Тештәре араһына йәшерелгән, телгә лә тойолмаҫлыҡ кескәй генә быяла һауыттағы үлемесле ағыу ул…

Фани донъяла иң ышанысла нәмә – үлем, тиҙәр…

Бина алдындағы йәш ҡайын көҙгө ел-ямғырҙан һарғайып, тетелеп бөткән, уның ботаҡтарында эленеп ҡалған һирәк кенә япраҡтары аша шәрә олоно күренә. Йәнәшәһендә – йәм-йәшел бейек шыршы. Был ағастарҙы ултыртҡан кешенең күңел-кисерештәре Сатураның әлеге моң-заңы менән бер булдымы икән ни? Ҡайын – Сатура. Кәрим – шыршы. Юҡ. Шыршы Кәрим булһа, ҡайынҡай һарғаймаҫ ине…Кәрим, тисе. Уның булмышы һиңә билдәле бит инде. Ул – Денис Даудович Сәғитов, милиция полковнигы. Генерал булырға хыяллана. Уға утыҙ биш йәш. Ғаиләһе юҡ. Минең эштә ғаилә ҡороу үҙ-үҙеңә ҡапҡан һалыу менән бер, ти…

Ямғыр яуа ла яуа… Урамда, баҫҡан бер аҙымда бысраҡ, батҡаҡ, өшәнес еүешлек. Былдай көндә кибеп бөткән мәйетте лә ҡәбергә төшөрөү йәпһеҙ.

Сатура шунда кинәт кенә еүеш  табутта үҙен күргән һымаҡ булды ла ҡурҡышынан сытырайтып күҙҙәрен йомдо. Оҙон керпек аҫтарынан  ике генә йәш тамсыһы һығылып сыҡты…

Өҫтәл телефоны шылтыраны. Сәркәтип ҡыҙ йомош менән килгән һораусыны керетергә рөхсәт һораны.

Еүеш ҡара зонтигын тотоп, кабинетҡа кергән ҡатынды күргәс, Сатура шаңҡып, ҡулындағы ҡәләмен өҫтәлгә төшөрөп ебәрҙе лә, ғәжәпләнеүенән тын алырға ла онотоп, бер мәлгә албырғап ҡалды. Ҡатынҡай иҫәнләште, уңайһыҙланып ҡына уға тағы ниҙер өндәште лә күн диванға урынлашты. Шунда ғына Сатура, бар ихтыярын туплап, күңелендә ҡуҙғалған йән өшөткөс кисерештәрен йөҙөнә сығармай ауыҙлыҡлап ҡала алды.

Ни намыҫы, ни ояты етеп килгән ул бында?

Сатураның аңында, гүйә, ғәрәсәтле йәшен балҡып, әлегә ҡәҙәре бар көсө менән үҙенән дә, башҡаларҙан да хәтер ҡараңғылығында йәшереп килгән ҡот осҡос, әшәке ваҡиғаларҙы яҡтыртты.

Алдында ултырған ҡатын – Нажия ине. Студент сағындағы әхирәте. Дүртенсе курста уҡығанда Нажия ғашиҡ булды. Һөйгәне тарих факультетында уҡыған сабыр ғына холоҡло егет ине. Бәхетле йәштәрҙең аралары яҡынайып, алдағы тормоштарын бергә ялғарға ниәтләй башлаған саҡтарында, яҙмыш улар алдына көтөлмәгән һынау ҡуйҙы. Сатура... Осраҡлы ғына күрешкән бер мәлдә егеттең уға күҙе төштө лә, ул, иҫ-аҡылһыҙ булып, Сатураға ғашиҡ булды. Хоҙай шаһит, Сатураның әхирәте бәхетенә һонолорға уйында ла юҡ ине. Теге егеткә ҡарата уғата ла ҡаты тороп, уны янына яҡын да ебәрмәне. Тик егеткәй Нажияға кире ҡайтманы, уҡыуын ташлап, ҡайҙалыр китеп ғәйеп булды. Шул сәбәпле әхирәттәрҙең аралары һыуынды. Сатура үҙен әхирәте алдында ғәйепһеҙҙән ғәйепле итеп тойһа, тегеһе, һуңынан күренеүенсә, уға ҡаршы ҡуйынында ағыулы йылан аҫраған булып сыҡты.

Шул ваҡиғалар менән бер үк ваҡытта тиерлек Сатураға аҙғынлығы менән яманаты сыҡҡан бер егет ымһына ине. Егеттең ата-әсәһе ҡалала билдәле кешеләр. Уҫал ҡыҙ, әлбиттә, тегегә күҙҙәре менән тишеп кенә ҡараны ла әсе теле менән шунда уҡ билдәле йүнәлешкә оҙатты. Ә бер кистә ҡыҙ үҙенең ятаҡтағы бүлмәһендә яңғыҙ ҡалыуын һағалап өҫтөнә ташланған теге хәшәрәтте ҡыҙған үтек менән өтөп сығарҙы. Бешкән маңлайын усы менән баҫып, ҡолаҡ ярыһы шартларҙай әшәке һүгенә-һүгенә бүлмәнән осоп сыҡҡан әҙәм аҡтығының янауҙарын бар тип тә белмәгәйне ул көндө сая ҡыҙ. Аҙ ишеткәнме ни ул төрлө янауҙарҙы быға са…

Күпмелер ваҡыт үткәс, йәйге имтихандар тамамланған көндө, Нажия үҙе килеп, уны аулаҡҡа саҡырҙы.

– Ҡалала йәшәгән әхирәтемдең ата-әсәһе ҡайҙалыр китеп, ул фатирында яңғыҙы ҡалған. Кил, аулаҡта һөйләшеп ултырырбыҙ, яҡшы шарап та бар. Һуңғы арала күрешкәнебеҙ ҙә юҡ бит… Имтихандарҙы уңышлы тамамлауҙы ла билдәләп үтербеҙ.

Нажия күрһәткән фатирҙа уны иҫерек егеттәр ҡаршы алды. Сатураны шунда мәсхәрәләп көсләнеләр. Береһе үтектән өтөлгән теге хәшәрәт ине. Икенсеһе… Икенсеһе имтихандарҙы биргәндә унан енси яҡынлыҡ талап итеп, күрәләтә насар билдә менән янаған йәш доцент булды. Сатура ялыу менән ректоратҡа барғас ҡына имтиханын ҡабул иткәйне шул мөртәт.

Сатура йәшен йотоп түҙҙе, тауыш-тын сығарманы. Нажия шул саҡтан һуң уның янынан күҙҙәрен быялаландырып, өнһөҙ генә үтеп китер булды. Ә бер көндө ул уҡыу бинаһының тәҙрәһе янында йыйылған ҡыҙҙар араһында, Сатураға бармаҡ төбәп, ауыҙ ситенән генә мыҫҡыллы йылмая ине. Сатура күрҙе шуны. Күрҙе лә хәтеренә һалды…

Һәм бына шул Нажия йылмая-көлә уның алдында ултыра хәҙер. Ысынлап та, бөгөнгө көн бик хөрт булмаҡсы…

– Күреүемсә, эшеңдә ҙур уңыштарға ирешкәнһең, Сатура, – ти Нажия, күҙҙәре менән эш бүлмәһен байҡап. – Шундай матур офис, яҡты, ҙур кабинеттар, зиннәтле мебель…

– Тормошоң нисек, Нажия?

Сатура үҙ тауышын үҙе танымады.

Нажия вайымһыҙ ғына ҡул иҙәне.

– Иремдән айырылдым. Биш йәшлек ҡыҙым бар. Ятаҡта йәшәйбеҙ. Әле эш эҙләп йөрөүем. Бәлки, һиңә фиғкы белгесе кәрәктер? Танышлыҡ йөҙөнән миңә эш табырға ярҙам итер инең? Әйткәндәй, үҙеңдең тормошоң нисек, ғаиләң, балаларың бармы?

Сатура теле-телгә йоҡмай тәтелдәгән Нажияның һүҙҙәрен ишетмәй, урынынан тороп, тәҙрәгә бороллдо. Бынағайыш, ярҙам-өмөт итеп, күрәләтә дошманына килергә нимә мәжбүр иткән һуң уны? Нажияның аҡылдан яҙыуымы был, әллә башын юрамал иҫәргә һалыуымы? Әллә әүәлге әхирәтенең эшендәге уңыштарына көнләшеп, һаман ҡанмаған үсен баҫыу уйынан, үҙенсә генә шулай аҫтыртын мыҫҡыллап ултырыуымы?

Эйе, теге саҡта Сатура Нажияға ышанып, әхирәтенең ҡара мәкеренә тарымаһа, әлеге көндә уның да матур ғаиләһе, алмалай балалары булыр ине. Әхәт, хеҙмәттән ҡайтып, өйләнешергә тәҡдим яһаған мәлдә, ул теге әшәкеләрҙән йоҡҡан ауыр енси сирҙән йәшерен генә дауаланып яфаланды. Сирләмәгән хәлдә лә, ҡыҙ сафлығын юғалтҡан килеш, ни йөҙө менән үҙен фәрештәләй күреп һөйгән егет ҡосағына керһен инде?

Был бисура Сатураның Сати исемле икенсе есеме барлығын белмәй, буғай. Сати…Ошо исемде ишеткәндә, ҡурҡышынан ирендәре ағарып, телдәре тотлоға күптәрҙең…

– Ҡыҙың балалар баҡсаһындамы?

Тәҙрәнән әйләнеп бүлмәгә ҡараған Сатураның күҙҙәрен осҡонланып торған ҙур ҡара күҙлек быялалары ҡаплағайны.

– Юҡ, бер нисек тә урынлаштыра алмайым. Өләсәһе ҡарай әлегә. Үҙем көн буйы урам тапаған ни…

– Беҙгә эшкә урынлашыу алдынан һынау үтеү мотлаҡ. Ризаһыңмы шуға?

Нажия йәнләнеп үк китте.

– Әлбиттә! – тине ул, ҙур ихласлыҡ менән. – Бында миңә бик оҡшай, ошонда эшләр өсөн барыһына ла әҙермен!

Ярай, мин һинең телеңдән тартманым, тип, Сатура эстән генә уҫал көлөмһөрәп ҡуйҙы.

Нажияны сәркәтип янына оҙатҡас, ул һаҡсыларҙың башлығын янына саҡырып алды.

– Ошо ҡатынды Кирамдың гастарбайтерҙарына илтеп бирегеҙ, – тине ул, Нажия ултырған бүлмәгә ымлап. – Ике тәүлеккә. Кирам шуның иҫәбенә беҙҙең бурысты һыҙып ташлаһын.

Бына шулай…

Ә теге хәшәрәттәрҙе Сатура үҙ ҡулдары менән атып үлтерҙе былтыр. Юҡ, ҡон тотоп эҙәрләмәне уларҙы, осраҡлы ғына юлын ҡыйғайнылар. Уның ҡарамағындағы зәргәр магазиндарын талай башланылар бер саҡ. Көпә-көндөҙ баҫып, бер һаҡсыны үлтерҙеләр, икенсеһен йәрәхәтләнеләр. Сираттағы магазинды таларға килгәндәрендә үҙҙәре эләкте. Хәстрүштәр, кинолағы юлбаҫарҙар һымаҡ, ҡара күндән кейенеп-яһанып, йөҙҙәрен битлек менән ҡаплағандар. Йолҡоп алынған битлектәрҙең артында теге әҙәм аҡтыҡтары булып

сыҡты. Сатура, шиғәлселәрҙе милицияға тапшырырға ниәтләп, ҡулына телефонын да алғайны инде. Тик ике ахмаҡ, телдәрен тыйып, шым ғына ултырырға теләмәне. Иҫкене иҫләп, ҡыҙҙың йөҙөнән мыҫҡыллай башланылар. Кем ҡулына килеп эләккәндәрен белмәйҙәр ине шикелле.

Енәйәт эшен тикшергәндә магазин һаҡсыһы, шиғәлселәрҙе үҙем аттым, тип аңлатты. Ышанмаҫлыҡ түгел ине быға, сөнки һаҡсы тегеләрҙең ҡоралынан үҙе лә йәрәхәтләнгәйне. Дөрөҫөндә иһә, Сатураның ҡулынан ине ул яра… Суд, һаҡсының был эше мөлкәтте һәм үҙ ғүмерен баҫҡынсыларҙан һаҡлауға йүнәлтелгән, тип, хаҡлы булыуын таныны.

Ҡылғанына үкенмәй Сатура. Һәр кем ҡасан да булһа ла эҙләгәнен таба. Тик был эштең әлегә ҡәҙәре бер кем дә күрмәгән бер осо ҡалған булып сыҡты. Теге ваҡытта талаусыларҙың өсөнсөһө ҡотолоп ҡалған, имеш. Урамда күҙәтселәп торған. Хәҙер килеп, Кәрим… түгел, Денис Даудович шул әҙәмде тапҡан да Сатураға ғүмерлек төрмә менән янай.

Үс тоторға, ҡон ҡайтарырға ярамай, тиҙәр. Сөнки был кешеләр тормошон бөткөһөҙ ҡанға, гонаһҡа батырып, фани донъяны шайтан ҡулына бирә, имеш. Йәнәһе, Аллаһы Тәғәлә башҡаларға ҡарата яуызлыҡ ҡылған әҙәми заттарҙы үҙе язаға тарттырасаҡ. Был донъяла булмаһа, тегеһендә. Шулайҙыр. Хәҙер килеп, Сатура быны үҙ миҫалында кисереп белә. Эйе, ул, былтыр теге ике хәшәрәтте үҙ ҡулы менән гүр эйәһе итмәй, тейешле рәүештә закон ҡулына бирһә, баш китерлек бөгөнгө сетерекле хәлдә ҡалмаған булыр ине. Әйткәндәй, Сатура теге егеттәрҙән дә, әлеге Нажиянан да үс алыу ниәте менән арттарынан баҫтырыҡлап эҙәрләмәне. Осраҡлы ғына рәүештә үҙҙәре юлына тап булдылар. Хоҙайҙың Сатураны, шулай итеп, һынауы булғандыр, бәлки. Тик Сатура был һынауҙы күтәрә алманы. Ул йәшәгән даирәләр, ҡояштан ҡаҫҡан төн ҡараһылай булып, унда бүтән илаһиҙар хакимлыҡ иткәнгәлер инде.

Ғөмүмән, фани донъялағы әҙәми заттарҙың холоҡ-фиғелен, ҡылған эштәрен иғтибарға алғанда, теге донъялағы ожмах сәхрәләренең ярым буш булып, шунда әлегергә насип иткән изге йәндәрҙең эс бошорғос күңелһеҙ тормошо күҙ алдына килә. Уның ҡарауы, тамуҡтағы шайтан халҡы, ҡырмыҫҡа иләүеләй мыжғып, ярҙарына һыймаған даръялай алҡынып торалыр.

Сатураның Искәндәр ҡарт ҡулы аҫтына килеп әләгеүе лә бөгөнгө тормош күҙлегенән ҡарауға бик ябай. Прокуратурала тәфтишсе булып эшләгән ҡыҙға, уҡыған сағында, мәртәбәле уҡытыусы ағай-апайҙар ауыҙынан донъя тотҡаһылай итеп инанған, ҙурланған закондың ябай ғына баҙар тауарына әйләнеүен күҙәтергә тура килде. Закон өҫтөндә ултырып та, үҙен тайғаҡ боҙға төшкән йәш быҙауҙай итеп тойған ҡыҙ, тынғыһыҙ эшенән тиҙ үк бүгеп, шәхси кәсеп асырға ниәтләнде. Әммә әлеге лә баяғы – аҡса мәсьәләһе ҡыҫа ине. Кеҫәһендәге тәңкәтиндәрен шутлап ҡына сарыфларға күнеккән торлаҡһыҙ, мөлкәтһеҙ йәш ҡыҙ, банктан аҡса алып, ғүмерлек бурысҡа батҡыһы килмәне. Шунда уға «ярҙам ҡулы» һуҙҙылар. Ул Искәндәр ҡарттың йөнтәфи ҡулы булып сыҡты…

Ҡыҫҡаһы, шул замандан бирле Сатураның һул яурынына ултырып, уның гонаһтарын теркәп барған фәрештәнең бер нисә дәфтәре, һис шикһеҙ, тулып, алышынған булырға тейеш. Ә уң яурынындағы фәрештә, эшһеҙлектән эсе бошоп, йоҡомһорап ултыралыр. Юҡҡамы ни Искәндәр ҡарт сағыштырмаса ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уны үҙенә яҡынайтып, кәңәшсе дәрәжәһенә күтәрҙе.

Ә бөгөн милиция полковнигы Денис Даудович иптәштәре менән бергә

Искәндәр ҡартты юҡ итеп, уның хужалығына, мөлкәтенә баш булырға уйлай. Мөмкинме һуң был? Сатура шикләнә быға. Сөнки ҡара-ҡаршы баҫҡан ике көстөң дә һан-кеүәтен аныҡ ҡына белмәй. Әгәр ҙә хоҡуҡ һаҡлау органдары законлы нигеҙҙә эш итһә, Искәндәр ҡартҡа, ысынлап та, ауырға тура килер ине. Әммә, Денис Даудовичтың тел төбөнә ҡарағанда, уларҙың әлеге хәстәре закондан алыҫ булып, үҙ мәнфәғәттәрен йүнләүгә генә ҡайтып ҡала. Тимәк, уларҙың йөрөгән юлдары ла тайғаҡ, мөмкинлектәре лә сикле. Юҡ, Искәндәр бабайҙы бындай аҫтыртын ысул менән еңеп булмай. Киреһенсә, ул хәстрүштәр, арыҫлан ауыҙындағы иткә ымһынған сүл бүреһеләй, үҙҙәрен күрәләтә һәләкәткә дусар итә. Денис Даудович та һуңғы ваҡытта шуны һиҙеп ҡалды, ахыры. Шуға ла тешенә эләккән буйһөйәкте булған ҡәҙәре мулыраҡ ҡайырып алырға маташа ул. Үткәндә ул Сатуранан Камаловты ҡуртымға алған утрауын тейешле кешегә һатырға мәжбүр итеүен талап итте. Был – юғарынан алған ҡаты күрһәтмә, хеҙмәттәге артабанғы булмышымдың шуны үтәүҙән ғибәрәт булыуын белдерҙеләр миңә, ти. Әммә Зиннур Таипович көтөлмәгәнсә киреләнде.

Шуны иҫенә алған Сатура кеҫә телефонынан Камаловҡа шылтыратты.

– Утрауҙы һатыу тураһындағы күрһәтмәне үтәнегеҙме? – тип һораны ул ҡоро ғына, теге остағы телефон тоташҡас.

– Юҡ.

– Ниңә?

– Сөнки мин һеҙгә ышанмайым. Утрау Искәндәр ҡарттыҡы булғас, уны һатыу тураһындағы бойороҡто тик ул ғына бирә ала.

– Һеҙ минең ҡулым аҫтында эшләйһегеҙ. Искәндәр бабайҙың күрһәтмәләре һеҙгә минең аша еткәнде аңламайһығыҙмы ни?

Теге остағы Камалов бер аҙға шымып ҡалды. Уйлай.

– Улайһа, миңә утрауҙы һатыу тураһында һеҙҙең яҙма күрһәтмәгеҙ кәрәк буласаҡ. Шунда уҡ хаҡын да билдәләгеҙ.

Сатура шартларҙай булды. Вәт, бюрократ!

– Һеҙ нимә, көләһегеҙме әллә?! Яҙма күрһәтмәләр биреп ултырырға бында дәүләт ойошмаһы түгел бит! Әйткән һүҙ – атҡан уҡ бында, ә буйһонмағандарҙың бер көндән баштары юҡ!

Теге оста урынлашҡан төпһөҙ тынлыҡ Сатураға үҙен ҡулға алырға булышлыҡ итте. Ул алдында ятҡан ҡағыҙ битен бөгәрләп, сүп кәрзиненә атты ла сәғәтенә күҙ һалды.

– Әйткәндәй, ғаиләгеҙҙең, балаларығыҙҙың киләсәге борсомаһа, киреләнә бирегеҙ, – тине лә телефонға, бәйләнеште өҙөп, өҫтәл артынан торҙо.

Эй, Хоҙайым, нишләй ул? Ошо һүҙҙәре менән үҙенә үҙе ҡаҙған ҡәберҙе тағы ла тәрәнәйтте түгелме ни? Искәндәр ҡарт, үҙенән уҙып утрауҙы һатҡанды белеү менән, уның муйынын бороп, башын сүплеккә бырғатасаҡ бит! Ә утрауҙы, күп аҡсаға күҙе баҙлап, Камалов башбаштаҡланып һатҡан, тигәндә? Юҡ, ышанмаясаҡ Искәндәр ҡарт быға, уның күҙҙәре, бер ҡарауҙан хәнйәрҙәй тишеп, әҙәм балаһы эсендәген ярып һала.

Тимәк, килеп тыуған был хәлдә... Искәндәр ҡартты теге донъяға олаҡтырыу мәсьәләһен йәһәтләргә генә ҡала. Шунһыҙ Сатураға йәшәү юҡ. Тик ниндәй әмәл менән, күҙ күрмәҫлек, ғәйеп теймәҫлек итеп, тауыш-тынһыҙ ғына атҡарырға һуң был эште?

Ишекте бикләгәндә Сатураның күҙ ситенә бүлмә эсендә ниндәйҙер ҡара

шәүлә елпенеп ҡуйғандай тойолдо. Ҡыҙ, хатта бер мәлгә генә туҡтап, сәйерһенгән ҡараш менән бүлмәне байҡап торҙо.

Ҡала өҫтөнә күктән, гүйә, һоро болот төшкән дә бар нәмәне ян-яҡҡа сәсрәп торған һыуға мансып, бысраҡҡа батырған. Һауала осҡан томан тамсылары Сатураның кейеменә, йөҙөнә, керпектәренә йәбешә, уларҙың тәбиғи төҫөн юйып, сирҡандырғыс еүешлеккә буяй.

Магазин ҡыйығы аҫтында ямғырҙан боҫоп торған йәш кенә сиған ҡыҙы Сатураның ҡаршыһына йүгереп сыҡты ла ҡулынан тотоп алды.

– Матурҡай, сибәркәй, туҡта, ҡулыма тәңкә һал да усыңды күрһәт, уҙғаныңды аңлатырмын, бөгөнгөңдө асыҡлармын, киләсәгеңде әйтермен.

Сатураның усын ҡулына алып, шундағы юлдарға төбәлгән сиған ҡыҙының ҡарағусҡыл йөҙө ниңәлер кинәт кенә һүрәнләнде лә, ул, ярҙам һорарға теләгәндәй, сөм-ҡара күҙҙәре менән кемделер эҙләп, тирә-яғына алан-йолан ҡаранып торғанда, ҡайҙандыр бармаҡтары, ҡолаҡтары сұҡмарҙай ауыр алтынлы, өҫтөнә ҡатлы-ҡатлы бәбәйле күлдәк кейгән, көбөләй тәбәнәк йыуан сиған әбейе пәйҙә булды. Әбей, Сатураның ҡулын үҙенә алып, аҙ ғына ҡарағандан һуң, йөнтәҫ ҡаштары аҫтына йәшенгән ҙур ҡара күҙҙәрен күтәрҙе лә артына сикте, уның йөҙөндә ҡурҡыу ҡатыш сикһеҙ ғәжәпләнеү һәм ҡыҙғаныу тойғоһо сағылды.

– Ҡыҙым, бөгөн ҡояшың мәңгегә байып, айың ҡалҡыр. Әҙер бул шуға…

Ҡояшың байыр, тисе? Сатураның күңел ҡояшы әле һаман байымағанмы ни? Аяҙ күктә сағыу ҡояш балҡып торһа ла, уның көндәре һуңғы саҡта бөгөнгөләй ҡараңғы һәм төҫһөҙ бит. Ә бөгөн бигерәк тә…

Сатураның өшөгән йөрәге һөйгәне менән күрешеүҙән шәмдәй генә булһа ла йылылыҡ, яҡтылыҡ өмөт итә. Шуғалырмы уның аяҡтары хужаһының ихтыярын еңеп, билдәләнгән урынға, гүйә, үҙәренән-үҙҙәре ашыҡты. Ә аҡылы… Аҡылы иһә, аяҡтарында тороп ҡалған тышау өҙөгө һымаҡ, тигеҙ ерҙә абындырып, атларға ҡамасаулай. Ҡыҙ үҙен ниндәйҙер аңлайышһыҙ ағымға эләгеп, билдәһеҙ тарафтарға аҡҡандай итеп тоя ине. Гүйә, ул – яҙғы ташҡында ағып, ишкәктәре һынған һалсы. Алҡынып яҡкан боҙло һыуға ташланһаң да, сараһыҙҙан башыңды баҫып, һалыңдың ҡая аҫтында ажғырған упҡынға йүнәлгәнен күҙәтһәң дә, һәләкәттән ҡотолоуың шикле.

Кәрим кәйефһеҙ ине, ҡыҙға күҙ төбәп тә ҡараманы. Уның бар булмышынан ризаһыҙлыҡ, уҫаллыҡ урғыла. Улай ғына ла түгел, әйтерһең дә, әлеге мәлдә урамда хөкөм һөргән бысраҡ еүешлек тирә-йүнгә тик унан ғына таралғандай. Юҡ, Кәрим түгел, Денис Даудович был. Кәрим, һөйгәнем, ҡайҙа булдың һин? Йөҙөң, ҡиәфәт-һының янымда, ә һин үҙең юҡ…

Йөрәгенә боҙ яҡкандай итеп тойған Сатура, ҡалтыранып, кейеменә уранды. Уның иҙгеләнгән күңелен төпһөҙ ҡара һағыш сорнаны.

Ресторанда улар бер-береһенә күҙ күтәреп тә өндәшмәне. Денис Даудович өҫтәлгә ярым ятып ашаныуында булды. Уның ара-тирә үҙенә төбәлгән ауыр ҡарашынан Сатура тертләп ултырҙы. Ул үҙен тоҡкон итеп тоя ине. Нескә билле фужерҙағы яраҡкан шараптан да бөгөн ниңәлер әскелтем һеркә тәме килгәндәй.

Ресторан сәхнәһендә тамаша ҡорған күҙ буяусының йөҙө бер туҡтауһыҙ емелдәп торған яҡтылыҡ менән ҡараңғылыҡ эсендә йә балҡып торған көләс ҡиәфәт ала, йә күҙҙәре янып, тештәре ыржайған ғифрит төҫөнә керә. Сәхнәлә йыландай һырғылана-борғолана йөрөгән ярым шәрә ҡыҙ күҙ буяусының ҡулындағы ялтырап торған пәрҙәгә уранды ла уны кире тағатыуға юҡҡа сыҡты.

Сатура, үҙе лә һиҙмәҫтән, шул ҡыҙға көнләшеүен тойоп, үҙ алдына ирен ситтәре менән һүрән генә йылмайып ҡуйҙы.

Денис Даудович, ниһайәт, урынынан ҡуҙғалды.

– Һиңә барайыҡ, – тине ул, Сатураға ҡарамай ғына.

Фатирға кергәс, ул, ямғырҙан еүешләнгән кейемен һалып, ултырғысҡа ташланы ла ауыр баҫып төпкә үтте, тәҙрә янына барып туҡталды. Тәмәке тоҡандырҙы. Сатура аш бүлмәһендә ут ҡабыҙып, ҡәһүәгә һыу ҡуйҙы.

Йорт ҡыйығынан аҡҡан тос һыу тамсылары, кемделер иҫкәртергә теләгәндәй, бер туҡтауһыҙ тәҙрә тышындағы ҡалайҙы һуғып, тын фатир эсенә шомло ауаз тарата.

– Камалов утрауын һаттымы?

Кинәт кенә артында гөрһөлдәгән был тауыштан Сатура, тертләп, ҡулындағы сынаяғын төшөрөп ебәрҙе. Ал сәскә төшөрөлгән сынаяҡ, иҙән ташына бәрелеп, селпәрәмә килде.

– Юҡ әле…

Көтөлмәгән хәлдән йөрәге ҡупҡан Сатура, алйып, иҙән һеперткеһен таба алмай аҙапланды.

– Ә Искәндәр ҡарттың ҡаҙнаһыһы тураһында ни әйтерһең?

– Әлегә асыҡламағанмын…

Денис Даудович, ҡулынан ҡаты тартып, ҡыҙҙы үҙенә борҙо.

– Һин нимә, мине алдап, ике ағас араһында аҙаштырырға булдыңмы? – тип екерҙе ул, тештәрен ыржайтып. – Ниңә әйткәнде үтәмәйһең?

Ҡыҙ, күҙҙәрен сытырайтып йомоп, устары менән битен ҡапланы.

– Кәрим… Мин белмәйем… Мин нишләргә лә белмәйем бит! Камалов мине тыңламай, Искәндәр бабайҙың бойороғон көтә. Ә ҡаҙнасы тураһында, шик төшөрмәй, нисек беләйем һуң?!

Ҡобараһы осҡан ҡыҙҙың тотлоға-тотлоға һыҡтап аҡланырға маташыуы Денис Даудовичты уғата ярһытты. Ул, ҡорбанын күҙәткән арыҫландай, күҙҙәрен ҡыҙартып бер мәл генә ҡыҙға ҡарап торҙо ла, киҙәнеп, уны иҙәнгә һуғып йыҡты.

– Ниндәй Кәрим булайым, ти, мин һиңә!? – тип иҙәндән торорға маташҡан ҡыҙҙы аяғы менән тибеп ҡабат йыҡты ла, сәсенән ҡармап алып, алдына тубыҡландырҙы, ҡаты тартып, ҡыҙҙың башын һелкетте.

– Кәрим, ебәр мине, – асырғанып һыҡтаған Сатураның йөҙө, күлдәй булып, йәшкә батты. – Нишләйһең һин? Мин һине яратам бит, Кәрим, туҡмама мине!

– Һин, әшәке урам уйнашсыһы! – Денис Даудович ҡыҙҙың башын тубығына орҙо. – Кәрим тигән кеше бер ҡасан булмаған да, юҡ та! Уның урынында мин – Денис Даудович – буласаҡ милиция генералы! Ишетәһеңме?!

Сатураның танауынан ҡан китте. Быны күргән Денис Даудович ерәнеп кенә ҡыҙҙы иҙәнгә этеп йыҡты ла, уны аша атлап, өҫтәл артына барып ултырҙы. Тағы тәмәке ҡабыҙҙы.

Аш бүлмәһендә бер мәлгә тынлыҡ урынлашты. Иҙәндә ҡанға батып ятҡан Сатура ҡуҙғалманы.

– Һин нимә, дөмөктөңмө әллә? – Денис Даудович, ултырған еренән аяҡ осо менән ҡыҙҙың арҡаһына типте. – Тор, ятма бында нәжестәй булып!

Сатура ҡуҙғалманы. Денис Даудович ҡыҙҙы сәсенән тартып күтәрҙе лә, әшәке һүгенеп уңлы-һуллы сикәһенә сапҡас, йыуыныу бүлмәһенә илтте, һалҡын

һыу ебәреп, ҡаты ҡулдары менән битенә уҡмашҡан ҡан таптарын йыуҙы.

– Бер аҙна ваҡыт бирәм һиңә, – тине Денис Даудович, кире аш бүлмәһенә сығып, ҡыҙҙы ҡаршыһына ултырҡас. – Теләһәң нишлә, әммә шул ваҡыт эсендә һин, беренсенән, Искәндәр ҡаҙнаһыһын белергә тейешһең, икенсенән, Камаловтан утрауын һаттырырға. Ишеттеңме мине?

Сатура иламай инде. Уның йөҙө мәрмәрҙән киҫеп яһалғандай аҡ, йәнһеҙ ине. Денис Даудович өҫтәл аша ынтылып, ҡыҙҙың сикәһенә сапты.

– Тыңла бында! – тип екерҙе ул, йырткыс күҙҙәре менән ҡыҙҙы ашап. – Өсөнсөнән, – уның ҡулында ҡайҙандыр ампула пәйҙә булды, – ошо «дарыу» Искәндәр ҡарттың осаһына керергә тейеш. Белеүемсә, ул әлеге ваҡытта йөрәк сиренән дауаланып, уколдар ала. Беҙҙең өсөн был бик йәтеш хәл. Ошо «дарыу»ҙан рәхәтләнеп, мәңгегә йоҡоға талыр. Уның ниҙән дөмөккәнен бер кем дә белмәйәсәк.

Денис Даудович урынынан торҙо ла иҙәндәге ҡан күләүегенән һаҡланып ҡына бүлмәлә йөрөп әйләнде.

– Ҡара уны, – тине ул, таш һындай ҡымшанмай ултырған ҡыҙға бармағын төбәп. – Әгәр ҙә мәгәр һинең булдыҡһыҙлығың арҡаһында уйлаған эштәр ярты юлда тормошҡа ашмай ҡалһа, үҙеңә үпкәлә! Мине, ошо эштәр һөҙөмтәһенән сығып, генерал погондары көтә! Аңланыңмы? Теләһәң ни ҡыл, хет Искәндәр ҡарттың аҫтына, хет Камаловтың аҫтына ят, иллә-мәгәр мин әйткәндәр үтәлергә тейеш! Юғиһә, башың төрмәлә серер. Ә унан алда үҙеңде тоҡон ирҙәр янына ябырға ҡушасаҡмын. Кинәнһендәр әйҙә…

Денис Даудович шуны әйтеп һыуынғас, йыуыныу бүлмәһенә керҙе. Ҡойонорға.

Аш бүлмәһендә ҡалған Сатураның бар булмышы буш, гүйә, уны тормош ташлап киткәйне. Йәштәре ҡороған йәшел күҙҙәре тағы ла ҙурайып быялаланған, тоноҡланған. Боларған сәстәре йөҙөнә төшөп, ҡарашын пәрҙәләй. Күңеле күген һоро әңер баҫҡан, әле генә түшендә һикереп типкән йөрәге лә ҡурҡышынан ҡайҙалыр йәшенеп юҡ булғандай. Һыуыҡ… Сатураның эсендә, әйтерһең дә, ҙур боҙбармаҡ хасил булған да, ул аҡрынлап эсендәге бар ағзаларын туңдырып, уны һалҡын һушһыҙлыҡҡа дусар итә. Башында уй юҡ, гүйә, уның баш ҡапсығында ҡәбер һиллеге хасил булған.

Денис Даудович, аҡ таҫтамалға төрөнөп, йыуыныу бүлмәһенән сыҡты.

– Әйҙә, кил янйма, – тине ул Сатураға, иркә йылмайып. – Ҡатыраҡ ҡыландым, ахыры, ғәфү ит… Кил, һөйөклөм, наҙлап, иркәләп иретермен үҙеңде йылы ҡосағымда, онотолоп, ләззәт кисерерһең.

Шулай тине лә ял бүлмәһенә йүнәлде. Сатура, сихырланғандай, һаҡ ҡына ҡуҙғалып урынынан торҙо һәм, иҫерек кешеләй айҡала-сайҡала, уға эйәрҙе.

Бүлмә ишеге алдындағы ултырғыс арҡаһына Денис Даудовичтың күн бишмәте эленгән. Уның аҫтындағы кобурала пистолет тотҡаһы ҡыҙара…

Шәрә килеш диванда йәйрәп ятҡан ир бүлмәгә ингән ҡыҙ ҡулындағы ҡоралды күргәс, ҡағыҙҙай ағарып, кинәт кенә урынынан ҡуҙғалды.

– Сатура, шаярма улай… Аҡылыңа кил, был мин, Кәрим…

Тын фатирҙы ҡаты шартлау тетрәтте. Тағы, тағы… Денис Даудович, ҡан сәсрәгән түшен устары менән ҡаплап, иҙәнгә шыуып төштө.

– Сатура…Сатура…Һин мине үлтерҙең бит…

Ҡыҙ, ашыҡмай ғына уның өҫтөнә эйелеп, дерелдәгән ирендәренән үпте.

– Юҡ, Кәрим, мин һине үлтермәнем… Һин минең йөрәгемдә йәшәрһең… Мин Денис Даудовичты үлтерҙем…

## 25

Искәндәр ҡарттың сырайы күҙгә йәмһеҙ көндәй йонсоу, төҫһөҙ. Сырхап тора ул. Тәбәнәк буйлы ҡарт, йәшел биҙәкле йылы бохар еләненә уранып, дөрләп янған мейес алдындағы йомшаҡ ултырғыста, йылыға кинәнгән бесәйҙәй, шымып ҡалған. Ҙур булмаған бөхтә бүлмәлә ярым ҡараңғы, йылы. Таштан биҙәп һалынған ҙур мейестәге ут яҡтыһы ләүкеп, мөйөштәргә һырыҡҡан эңер ҡараңғыһы менән алыша, ҡарттың йөнтәҫ ҡаштары аҫтына йәшенгән күҙҙәрендә ара-тирә сағылып, уларҙа һары ут ҡабыҙа. Ҡаршыһында ултырған Сатураның йөҙө, аҡ мәрмәрҙән яһалғандай, йәнһеҙ, һалҡын.

– Камаловтың беҙҙең кеше булыуы хаҡында ла беләләрме?

Искәндәр ҡарттың тауышы, тау тишегенән сыҡҡан ауаздай, тоноҡ, шомло.

– Беләләр.

Сатура ҡымшанманы. Ул, яҡтылыҡтан боҫоп, киске эңер ҡуйырғанын түҙемһеҙләнеп көткән күләгәләй, диван мөйөшөнә һырығып ултыра.

Хөрт. Ысынлап та, быныһы Сатура килтергән бәләләрҙең иң яманылыр. Дошмандары ҡулына эләккән был мәғлүмәт күптән түгел генә ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнгән Камаловтың артабанғы үҫешенә кәртә булыуы мөмкин. Әйткәндәй, был серҙең кем ҡулына барып эләгеүе билдәле инде. Искәндәр ҡарт үҙенең ҡулы аҫтындағы кешеләрҙең тормошон ус төбөндәгеләй итеп күрергә, белергә күнеккән. Быйылғы яҙҙан алып Сатураға эйәләшкән ирҙең милиция шымсыһы булыуын да ул ҡыҙҙың үҙенән алда белде. Белде лә, «ҡойроғо»на баҫып, күҙ ҡалдырмай аңдыны, юллатты. Искәндәр ҡарт күптән инде ҡаршыһындағы битлек кейгән билдәһеҙ әҙәми зат менән шахмат уйнағандай итеп тоя ине үҙен. Ул әҙәм байтаҡтан бирле, бик ныҡышып, уның мөлкәтен тартып алырға, ойошмаһына баш булырға маташа. Уның ошо алышта ҡулланған ысулдарына ҡарағанда, Искәндәр ҡарттың үҙе ише, тәненә энә төртөп, ҡараһүрәт төшөрөлгән ябай бур түгел ине. Дәүләт көсөнә эйә булған дәрәжәле, погонлы әҙәм булырға тейеш, тип фараз итә ине, ғүмер буйы бүреләй алышып, дошманының булмышын тешенә тейгән ҡан тәменән тойорға күнеккән тәжрибәле ҡарт. Фаразы раҫҡа сыҡты. Хәҙер килеп, ул әҙәмдең төрлө ҡиәфәттәге рәсеме генә түгел, ултырған урыны, баҫҡан аҙымына хәтлем билдәле уға. Генерал. Шыма йөҙлө, төлкө күҙле. Йәштән мундирҙа йөрөһә лә, тотҡон ҡулындағы бығауҙы нисек итеп әлеп-сисергә белмәгәндәрҙән. Ҙур кабинеттарҙа ултырған ағайҙарҙың ялтыр паркет тапаған итектәрен таҙартып кеше булған да, хәҙер килеп, Искәндәр ҡарттың «хужалығы»н аҫтыртын ғына тартып алырға, шуның менән байырға ниәтләй. Дәүләт, халыҡ, закон тип эш итһә, ни үпкә. Әммә ул, шуларҙың мәнфәғәтен күҙәтеү һылтауы менән, улар биргән властан сығып, үҙ файҙаһын ҡайыра.

Искәндәр ҡарт ғүмер баҡый бурлыҡ менән йәшәне, мөлкәт йыйҙы, исем-шәрифле булды. Йәш сағында әлеге иркенлек булһа, ташып барған сикһеҙ көсөн, сәмен эшҡыуарлыҡҡа, сәйәсәткә һалып, намыҫлы эшләр, йәшәр, дан-шөһрәт ҡаҙаныр ине. Әммә ул замандарҙа Искәндәр кеүектәр өсөн ишектәр бикле, юлдар кәртәле булды. Заманалар үҙгәреп, халыҡ ҡулын бәйләгән мәғәнәһеҙ ҡанундарҙан, зиһенен бутаған ят тәғлимәттәрҙән арынғас, ул да ҡырын эштәрҙән йыйған мөлкәтенең күп өлөшөн таҙа, законлы эшҡыуарлыҡҡа һалды. Тик быуат һуҙымында бикле тороп, ҡапылдан ирекә сығарылған ас халыҡ, аҡ-ҡараны күрмәй, талаша-туҙыша туйынырға ашыҡҡан мәлдә, үҙ мөлкәтеңде һаҡлау, етәкләү, үҫтереү, ҡаты ҡулды, хатта йыш ҡына аяуһыҙлыҡты талап итә. Әлеге

генерал һымаҡ, күрәләтә кеше малына һонолоусылар күп. Ундайҙарға закон кәртә түгел. Уларҙы тик суҡмар ғына туҡтата ала.

Эйе, Искәндәр ҡарт – бур. Был – уның булмышы. Әммә генерал – уға ҡарағанда икеләтә бур. Сөнки ул – ике йөҙлө, һатлыҡ йән.

– Мин Камаловҡа утрауҙы һатырға ҡуштым, – тине Сатура көтмәгәндә, Искәндәр ҡарттың уйҙарын бүлеп.

Искәндәр ҡарт өндәшмәне. Уға Сатураның хәле асыҡ ине. Дөрөҫөн әйткәндә, дошманының йөҙөн асыуҙа, уның хәл-торошон асыҡлауҙа ошо ҡыҙҙы файҙаланды. Тик ҡыҙ был турала белмәне, мөхәббәтенә иҫереп, янында барған алышты күрмәне лә, һиҙмәне лә. Тап уның һөйәркәһе, үҙе лә һиҙмәҫтән, Искәндәр ҡартҡа дошманының йөҙөн асып күрһәтте лә инде. Айыуҙы аусы аулаһа, шымсыны шымсы һағалай бит.

Ҡыҙ йәл. Ғаилә ҡороп, балалар үҫтерер сағы ла бит, тик Хоҙай үҙенә бәхет бирмәгәс, нисек итәһең… Сәскәләй сағында әшәке әҙәмдәр ҡулына тарып, мәсхәрә ителде, унан, бынауы ике йөҙлө шымсыны осратып, тағы һемәйҙе… Мөхәббәт – ул Хоҙай бүләге, ти ҡайһы бер татлы телле хыялыйҙар. Хоҙай биргән бүләк булһа, бахыр әҙәмдәрҙе бәхетһеҙ итмәҫ ине. Хоҙай бүләге – аң, аҡыл, фиғел, шул сифаттар менән генә әҙәми заттар хайуанлыҡтан арынырға, кеше булырға насип икәндәр. Ә мөхәббәт – иблис ҡотҡоһолыр, кешене бутауға, уның аҡылын юйып, юлдан яҙҙырыуға, хайуанлыҡҡа кире ҡайтарыуға йүнәлтелгән енси тойғо ғына ул. Юҡҡамы ни, ғашиҡтар хистәренә иҫереп, аҙыптуҙып йөрөгәндән һуң, юлдарының осона еткәс, үҙҙәрен ҡара сүллектә япаяңғыҙы ҡалғандай тоялар. Күптәр, шунан сығырға юл да, көс тә тапмай, тормоштан юғала. Эйе, Хоҙай Тәғәлә әҙәми заттарға бер-береһен һөйөргә, яратырға ҡушҡан. Әммә был ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ араһындағы енси мөнәсәбәт хаҡында түгел.

Искәндәр ҡарт ырғаҡтай кәкре, йыуан бармаҡтары менән Сатура килтергән быяла ампуланы тотоп, мейес яҡтыһына ҡуйҙы. Быяла эсендәге һыуҙай төҫһөҙ шыйыҡса ләүкеп торған усаҡ утында уҫал емелдәй. Үлем…Искәндәрҙе үҙ ғүмерендә аҙ үлтермәнеләр. Аттылар ҙа, аҫтылар ҙа, тигәндәй. Бынығы – сираттағыһы… Тик ул, Хоҙай рәхмәтенән, айыуҙай тайыш табандары менән һаман тапай әле был бысраҡ ерҙе, хатта, ҡартайып, һикһәнен ҡыуалай хәҙер. Әжәлдән ҡасмай ул, йәшәрен йәшәгән, ашарын ашаған бит инде. Ә был ағыуҙан килгән рәхәт үлем – кәре бөтөп ҡартайған, йәшәүенең йәмен юғалтҡан һәр әҙәмдең хыялылыр. Тик уның йөрәгендә һәр саҡ дөрләп янған йәшәү, алыш уты бөгөн дә һүнмәгән әле. Ваҡыты сығып, һүнә ҡалһа, Искәндәр ҡарт уның һуңғы ҡуҙҙарын үҙе тапар…

Искәндәр ҡарт быға ҡәҙәре Сатураның эшенән бик риза ине. Тырыш, аҡыллы, ҡыйыу ҡыҙҙан күргән файҙа күп булды. Ысынында иһә һуңғы ваҡытта теге шымсы менән буталышыуынан килтергән зыяны ла сүптәй генә. Сөнки был хәлде күҙәтеп торған Искәндәр ҡарт килер зыянды элгәренән күреп, алдынан алып торҙо. Йәғни шымсының Сатуранан алған мәғлүмәттәре көнөндә үк иҫкереп торҙо. Сатура булмаһа, Искәндәр үҙен йөҙәткән йәшерен дошманын асып, ҡасан таныр ине әле? Тик уҫал ҡыҙ, ҡыҙыулыҡ менән унға-һулға атып, үҙен ҡотолғоһоҙ көрсөккә ҡуйҙы. Шымсы ғүмерен киҫкәне өсөн уны ҡаты ҡон көтә. Әүәле ҡылған эреле-ваҡлы гонаһтарын да табып, өҫтөнә өйәсәктәр. Ә был – ғүмерлек төрмә тигән һүҙ…Төрмәгә хәтлем йәшәргә бирһәләр әле…

– Килеп тыуған хәлде аңлайһыңмы, Сатура ҡыҙым?

– Аңлайым…

– Мин һине артабан янымда ҡалдыра алмайым. Бындай осраҡта ҡулланылған беҙҙәге тәртипте беләһеңдер бит?

– Беләм…

– Ярҙам кәрәкме?

– Юҡ. Мин үҙем…

– Туғандарыңды ярҙамымдан ҡалдырмам…

Йәл, бик йәл шундай эшмәкәр ярҙамсыны юғалтыу. Ҡыҙ бала булараҡ та йәл. Булмышы менән генә лә тирә-йүнде биҙәп йөрөгән һылыу бит. Сатураны күргән һайын уның күҙҙәре яҡтырып, күңелендә матур заң уяныр ине. Ниңә ул ҡасып китмәне, шайтан үҙе эҙләп тә тапмаҫлыҡ ергә кереп боҫманы икән? Искәндәр ҡарт уны һис тә эҙләмәҫ ине бит. Ул ғына ла түгел, хәленән килгәнсе эҙәрләүселәрҙе юлдан яҙҙырыр, уларға аяҡ салыр ине. Ә уның ҡулдары оҙон, хәле лә шөкөр…

Бүлмәлә һомғол кәүҙәле, яурындарына шәлкемләнеп төшкән оҙон сәсле ир пәйҙә булды. Өҫтөндә затлы ҡара костюм, муйынында көрән галстук. Ул ялтыр ботинкалары менән йомшаҡ келәмдән бесәйҙәй шым баҫып килде лә, ҡулды киҫерҙәй итеп үтекләнгән салбар балаҡтарын тартып, Сатура ултырған дивандың икенсе ҡырына урынлашты.

Искәндәр ҡарт ҡулындағы ампуланы оҙон сәсле иргә күрһәтте.

– Ошоно, әмәлен табып,  осаһына ҡаҙаһындар, – тине ул, дошманының исемен атап.

Нишләһен инде тағы, шунһыҙ булмай, был үлемесле  алышта кемдер еңергә тейеш. Дошманы ағыулы уғын уға беренсе булып атты. Тик яҙа атты. Хәҙер уның сираты. Ә ҡаҙауҙарына шиге юҡ. Ас менттар араһында ҙур погонлы етәкселәренең артына ағыулы энә генә түгел, тупаҫ таяҡ ҡаҙарға әҙерҙәре лә бар.

Сатура урынынан ҡалҡынды ла, йөҙө менән усаҡ йылыһын тойған һуҡырҙай күҙҙәрен ҙур асып, мейес ауыҙына текләп торғандан һуң, боролоп, тәҙрә янына китте, тәҙрә аша тыштағы эңер ҡараңғыһын тишкеләгән ҡала уттарын бер аҙ күҙәткәс, шундағы тәрән креслоға ултырып тын ҡалды.

– Тағы ла, – тине Искәндәр ҡарт, мейестәге ялҡынға текләп бер аҙ тын ултырғас. – Утрауға ымһынған сит ил эшҡыуарын табып, тейешенсә ныҡлап һөйләшегеҙ. Утрауҙан баш тартһын. Юғиһә…

Оҙон сәсле ир, ризалашып, өнһөҙ генә баш ҡаҡты ла, хужаның китергә рөхсәт биргән ымын күргәс, күләгәләй шым ғына ҡуҙғалып, бүлмәнән сығып китте.

Һәр бәләнең, түтәлгә үҫкән сүп үләнеләй, тамыры була. Уның үҫеп, һуңынан тирә-йүнгә таралған меңәрләгән орлоғон йыйып аҙапланғансы, алдан уҡ йолҡоп, ҡоротоу еңелерәк.

Бүлмәлә тәрән тынлыҡ урынлашты. Мейестә усаҡ дөрләй. Стеналағы ҙур сәғәттең һалмаҡ ҡына текелдәп бәүелгән алтын теләндә усаҡтың һары яҡтыһы сағыла. Урамда ямғыр шыбырҙай…

Искәндәр, урынынан тороп, Сатура ултырған кресло артына килде. Иҙәндәге йомшаҡ келәмдә һөйрәлгән оҙон елән итәктәре, бабайҙың тәбәнәк кәүҙәһен тағы ла шыңдереп, уны, гүйә, әкиәттәге кәрлә ҡартҡа әүерелдерҙе.

Ҡарт Сатураның башы аша тәҙрәгә ҡарап күпмелер ваҡыт тын торҙо.

– Ярай, ҡыҙым, – тине ул, һуңынан ҡыҙҙың сәсенән һыйпап. – Ебәрәм һине. Ҡас, йәшен. Үҙ көнөңдө үҙең күр. Ҡыйын хәлгә ҡалһаң, шылтырат. Ҡулдан килгәнсе ярҙам итермен…

Сатура ҡуҙғалманы. Искәндәр ҡарт кинәт һиҫкәнеп ҡулын алды ла, креслоны урап, ҡыҙҙың алдына сыҡты.

Сатура, маңлайына бөҙрәләнеп төшкән сәс шәлкеме аҫтындағы ҡаштарын ҡыйылдырып, ҡамыштай оҙон керпекле күҙҙәре менән бер аҙ ғәжәпләнгән ҡиәфәттә мәңгелеккә текәлгәйне. Уң сикәһендәге яңғыҙ йәш тамсыһы ла кипмәгән…

Искәндәр ҡарттың йөрәге һыҙып, тамағына төйөр тығылды. Әллә ниңә күңеле йомшарасы һуңғы ваҡытта. Ҡартайыуы шулдыр…

**26**

Аҙымдар саҡрымдарға ялғана. Кейек аңдып, туғайҙарҙы, әрәмәлектәрҙе баҫҡан бура-бура көрттәрҙе саңғылар менән ашыҡмай ғына һыҙмалай торғас, тороштан ярайһы уҡ алыҫайып киткәнмен, имеш. Һунарым уңды шулай ҙа. Һыу буйындағы таллыҡтан ҡуян өркөтөргә йөрөгәндә, көрт эсенән, ҡолаҡ ярыһын тишерлек тынлыҡҡа батҡан урманды һиҫкәндереп, бер туп ҡор осоп сыҡты ла яҡындағы ҡайын ботағына ҡунаҡланы. Күмәк ҡанаттар еленән тирә-йүндә ҡар өйөрмәһе ҡупты. Көтөлмәгән был хәлдән йөрәгем ҡубып, саңғыларым салышты ла, көрткә ҡоланым. Ҡарҙа ятҡан килеш берәүһен атып төшөрөргә булдырҙым улай ҙа.

Боҙ ҡоршаған йылға ярындағы ерек әрәмәһенә ҡоролған аҡ сатырым янына еткәс кенә шәйләнде. Усаҡты тергеҙеп, ҡаҙан элдем. Әтәстәй дәү ҡошто рәтенсә эшкәртеп ҡаҙанға һалғансы, шырпы буйылай ғына ҡыҫҡа декабрь көнө һүрелеп, эңер төштө. Көндөҙ әрәмәләрҙә боҫоп ятҡан әбәк-һәбәктәр урындарынан ҡуҙғалышып, ҡалын ҡар юрғаны ҡаплаған туғай-болондар буйлап күсә, оса башланы, шыпырт ҡына йәшенә-боҫа, усаҡ ләүкегән әрәмәне ҡаманы.

Мин ҡара урман ҡаплаған тау-таш араһындағы туғайҙа икенсе көн инде Ғилман дуҫымды көтәм. Ул иртәгә килеп етергә тейеш. Бына ике ай инде, милициянан киткәнемдән бирле, эшһеҙ ятам. Эшһеҙ тиеүҙән, бөтөнләй үк ҡул ҡаушарып, күҙ тупайтып тик ултырған юҡ инде. Ҡайҙа аҡса еҫе сыға, шул кәсепкә тотонам. Тыныс, иркен тормошҡа тиҙ өйрәндем. Милициялағы әүәлге эшем иҫемә төшһә, тәндәрем эҫеле-һыуыҡлы була. Ете яттарҙың бәләһен, гәйебен, гонаһын үҙеңдекеләй итеп, шуларҙың аҙабынан алйып, бысрағына батып, әллә күпме ғүмеремде бушҡа сарыф иткәнмен, имеш. Алтынлата түләргә вәғәҙә итһәләр ҙә, башҡаса унда бараһым юҡ. Ас тамағым – тыныс ҡолағым. Ҡолаҡ итемде ашаған ҡатыным да, урындыҡ тулып илашҡан балаларым да юҡ, яңғыҙ тамағымды нисек тә туйҙырырмын әле.

Әйткәндәй, ҡолаҡ итемде ашаусылар бөтөнләй юҡ, тип әйтә алмайым. Әсәйем менән атайым улар. Мине һаман өйләндерә алмай аҙапланалар. Өйҙә сағымда – торһам да, ятһам да – шул туралағы бер үк хәбәр менән теңкәмә тейәләр. Шуға ла улар янында ике-өс көндән артыҡ йәшәй алмайым, берәй һылтаумы, кәсепме табып, ситкә һыҙырға ғына торам. Билдәләнгән көндән күрәләтә алдан килеп ятыуым да шул сәбәпле. Олоғайған ата-әсәйемдең заңғәмен аңлап торам да ул. Үҙҙәре иҫән-һау саҡта буйҙаҡ улдарын башлы-күҙле итеп, яндарында тызылдашып йөрөгән ейән-ейәнсәрҙәрен һөйгөләре килә. Үткәндә атайым минең менән кесе өйгә ҡасып, әсәйемдән боҫоп ҡына алған хәмерҙе алмаш-тилмәш йотоп ултырғанда, улым, ниңә ҡатын-ҡыҙға ҡарамайһың, әллә хәлеңдән килмәйме, тип бәйләндесе.

Күп йәнемә тейһәләр, анауы Фәриҙә һылыуҡайҙы алдым ҡуйҙым. Миңә

хәҙер – барыбер. Уныһы ла, мәктәпте тамамлағас ни уҡырға, ни эшкә китмәй, ауылда ята, матур кейенеп ала ла юҡ-бар һылтау менән беҙгә килә, йәнемде көйҙөрөп, йәш тананыҡына оҡшаған күҙҙәре менән мине «ашай». Йәтеш кенә үҙе. Иллә-мәгәр баҫымсаҡ булмаҡсы… Тик нисек итеп үҙемдән ун бер йәшкә кесе ҡыҙ балаға һонолайым, ти? Кешенән оят бит…

Әминә… *Ул, таң йондоҙо һымаҡ, минең күңел күгемдә һаман балҡыһа ла, алыҫая, тоноҡлана бара.* Нишләйһең, яҙмағанды яулап алып та булмай. Ярай инде, бер минең баштан уҙған хәл түгел. Мөхәббәт шулай ул: башта уйната ла һуңынан илата. Ишетеүемсә, Әминәнең бай зат-ырыуы табылып, ул сит илгә күсеп тә киткән инде…

Ҡараңғы төштө. Ни аралалыр күк түренә менеп ҡунаҡлаған ҡыйырсыҡ ай ер өҫтөнә, гүйә, алтын ептәрҙән үргән сихри селтәрен ташлаған да, сибәрлегенә маһайған үҙ һүҙле һылыуҡайҙай, өҫтән аҫка аҫтыртын ғына ҡарап, йыһанды гиҙә. Уға, емелдәшеп, бихисап йондоҙҙар эйәргән. Урманлы тау һырттары, яткан еренән торорға ҡуҙғалышҡан ғифриттәр һымаҡ, ҡарайып, өҫтөмә ауышҡандай. Төн ҡараһы сорнаған туғай-әрәмәләрҙә, йомро көрттәр өҫтөндә сәйер шәүләләр елпелдәй. Һауала ҡолаҡ ярыларын сыңлатырлыҡ тынлыҡ хөкөм һөрә, хатта баш өҫтөндә балҡыған ғаләм усағының сытыр-сытыр килеп яныуы ишетелгәндәй…

Һәммә бөйөк эш тик тынлыҡта аткарыла, ти торғайны мәрхүм олатайым.

Усаҡ яҡтыһынан һарғайған сатырымды уратып, шомло күләгәләр бейешә. Әйләнәләге төн ҡараһынан үҙемә төбәлгән күҙҙәрҙе тоям. Кейек-януарҙан хәүефләнгән юҡ та, тик ен-бәрейҙәр ҡыҙыҡмаһын үҙемә…

Ен-бәрей тигәндән, малай сағымдағы бер хәл хәтеремә төштө шунда. Әлегеләй ҡыш ине. Төн уртаһында дөбөр-дөбөр ҡапҡа шаҡыуға шөбһәләнеп уяндыҡ. Атайыма эйәреп тышҡа сыҡтым. Сатлама һыуыҡ, аяҙ төн. Ни күрәбеҙ: тиҫтәләрсә саҡрымды сабып уҙғандай бәлтерәп, аҡ күбеккә батҡан ҡола ат сана-тәртәһе менән ҡапҡа бағанаһына бәрелеп туктаған да алғы тояҡтары менән бер туҡтауһыҙ ҡапҡаны типкеләп дөбөрҙәтә. Санала ҡатып ултырған әҙәмдең өҫ-башы, ҡарға йығып тулатҡандай, ап-аҡ булған, һаҡал-мыйығы ла боҙланып туңған. Ул, быялаланған күҙҙәрен аҡшайтып, күгәргән ирендәре менән бер туктауһыҙ низер һөйләнә, ә янына барған атайымды күргәс, «әкбәр» ҡысҡырып, балтаһы менән һелтәнде…

Күҙҙәрен ағартып, баш бирмәй тулаған атты көскә туғарып, һылап-һыйпап тәрбиәләгәс, ололар йортҡа кереп, түрбашта сәйгә ултырҙылар, мин иһә юрған аҫтына боҫоп, тегеләрҙең хәбәренә ҡолағымды ҡарпайттым. Саналағы кеше күрше ауылда торған Әхмәтгәрәй бабай булып сыҡты. Ул бөгөн бынан егерме саҡрымдағы урыҫ ауылына йомош менән барған да төнләтеп ҡайтырға сыҡҡан. Ҡәҫеҡ тигән ергә еткәс, уны ен баҫҡан. «Ни арыу килә ятһам, юлымда шинель кейгән ике һөлдә пәйҙә булды, – тип илаулап һөйләне хәбәрен бабай. – Тәнһеҙ-өнһөҙ, үтә күренмәле ике ҡара шәүлә. Берәүһе, атымдың алдына сығып, башҡайын йүгәненән ҡайыра, икенсеһе, сана башына ҡунаҡлап, дилбегәне тарта… Юлдан төшөрөп, урманға борорға итәләр. Атымдың башын тартҡан яҡҡа ҡараһам, унда... шундай уҡ шинелле һөлдәләрҙән ғәскәр теҙелгән… *Дөлдөләм* улай ҙа бирешмәне, юлдан ситкә баҫмай, тегеләргә ҡарышып, тибешеп килде. *Дөлдөләм* ҡотҡарҙы. Тәүҙәрәк ҡотом осоп, зиһенем тарҡалды, белгән доғаларымды ла онотоп, аҙап ҡалдым. Улай ҙа, бер мәлдә, *ләиләһиллалаланы* иҫләп ҡалдым, изге фәрештәм телемә һалғандыр инде, Хоҙай рәхмәте. Шуны әйтһәм, теге тамуҡ киҫәүҙәре, юлдан ситкә осоп,

артта ҡалалар. Шул ҡыҫҡа ғына доғаны бер туҡтауһыҙ ҡабатлауҙан телем тетелгәндәй булғас, тын алайым тип, бер мәлгә генә тынһам, артымдан ҡыуып етәләр ҙә тағы атыма йәбешәләр. Сирек сәғәтлек юлды өс сәғәт буйы шулай алышып килдек. Ахырында, күҙҙәрем томаланып, һушымды юя биреп тә ҡуйҙым. Дөлдөлөм ҡотолдорҙо, Дөлдөлөмә рәхмәт!

Ҡартлыҡтан саҡ ҡуҙғалып йөрөгән өләсәйем, урынынан тороп, төн буйына шыбыр-шыбыр доғалар уҡып йөрөнө, урамға ла өс ҡат сығып әйләнде.

Әхмәтгәрәй бабайҙы, шул хәлдән һуң, билгеһеҙ сырхау менән яфаланып оҙаҡ ҡына ятҡан, тинеләр. Ситтән уҡымышлы мулла саҡырып, им-том иткәс кенә, аяғына ҡабат баҫҡан. Ә Дөлдөлө мандыманы. Яҙ етеп, ҡара ергә аяҡ баҫҡас ятып үлгән меҫкен малҡай.

Ҡәҫеҡ тигән урында билдәһеҙ ҙур ҡәберлек бар, тиҙәр. Граждандар һуғышы ваҡытында аҡтар ҡыҙылдарҙымы, әллә ҡыҙылдар аҡтарҙымы шунда теҙеп-теҙеп атҡандар, имеш.

Ошо хәлде ишетеп белгән ҡайһы берәүҙәр, имеш, Әхмәтгәрәй ҡарт күҙенә күк күренгәнсе эскән дә, зиһене буталып, ҡарт атын яндырғансы юл буйына сыбыртҡылап ҡыуалаған, тип ауыҙ йыралар.

Донъялағы һәр нәмәнең ике яғы бар, ти торғайны олатайым. Яҡшыға – яман, көнгә – төн, аҡҡа – ҡара, йылыға – һыуыҡ… Яҡты донъяға – ҡараңғы гүр.

Ас ҡорһағымды бүреләй олотоп, ниһайәттән бешеп сыҡҡан кейек ҡоштоң түшкәһе янына икмәк, һуған башы, борос, ҡорот сығып ятты. Сатырҙа үҙ сиратын күптән көтөп ятҡан хәмер шешәһе лә, тәрән көрөшкәһен эйәртеп, табынға һыйынды. Шешә былт-былт, тамаҡ ғолт-ғолт итте, артынан ике ҡалаҡ ҡайнар һурпа, бер ҡабым кейек ите… Битемә, гүйә, йәннәт ҡошоноң ҡаурыйы ҡағылды…

Баш өҫтөмдә Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо менән ғаләмдең ҡап уртаһына ҡағылған күк көмбәҙе әкрен генә әйләнә лә әйләнә…

Иртәгәһенә, төш ауғас, ике этен эйәртеп, Ғилман да килеп етте. Ҡалған көндө алдағы һунарға әҙерләнеп кәрәк-яраҡты йыйнаныҡ, килеп тыуыр хәлдәрҙе күҙалларға тырышып, фараздар ҡылдыҡ.

– Ҡана, ишеттер әле миңә йыртҡыс тауышын, – тине Ғилман, ҡараңғы төшөп, усаҡ янына ашарға ултырышҡас.

– Ҡуйсәле, бигерәк тә ямаҡай яңғырай, йән өшөрлөк. Эттәрең өрөп, төн буйы йоҡо бирмәҫ…

**27**

Аҡлы-күкле ҡаргиҙәр йәйрәп ятҡан ҡар даръяһын яра. Өйөрмә буран, ер менән күкте тоташтырып, барыр юҫыҡты томалай. Күбәләктәй эре ҡар бөртөктәре, ҡаргиҙәрҙә барған кешенең ҙур күҙлегенә йәбешеп, юлды ҡарарға ҡамасаулай, тиҙлекте кәметергә мәжбүр итә.

Геннадий Самуилович ҡайырылып артына ҡараны. Уға эйәргән ике ҡаргиҙәр, йөҙ аҙымға артта ҡалып, буран аша тоноҡ ҡына төҫмөрләнә. Унда арсыйҙары менән Искәндәр ҡарт килә.

Геннадий Самуилович хәҙер инде – Искәндәр ҡарттың кешеһе. Хазинаға бәйле мажараларҙан һуң Сати уны үҙенә алды. Искәндәр ҡарттың был ҡалала мәнфәғәттәрен һаҡлауға «суҡмар тота белгән кеше кәрәк», тине ул туранан-тура. Геннадий Самуиловичтың киреләнере, һайланыры юҡ ине. Бурҙар араһы бүреләр өйөрө кеүек бит, берәҙәкте быуып ташлағандан бер кем дә яза һорамай. Ә Искәндәр ҡарттың исеме генә лә таш ҡоймалай, уның ҡулы ҡаты, ул

үҙенекеләрҙе башҡаларға йәбер-золомға бирмәй. Иллә-мәгәр эш талаплауы ла – ҡайыш сыбыртҡылай… Башта Сатиға Камаловты һаҡларға, унан Искәндәр ҡарттың ейәнсәре булып сыҡҡан Әминәне ҡурсаларға ҡушты. Башың бәрәбәренә, тип. Күлдә боҙ торғас, утрауға төҙөлөш кәрәк-яраҡтары ташыуҙы, шуларҙы һаҡлауҙы йөкмәттеләр уға. Бүтән мәшәҡәттәре лә етерлек уның хәҙер. Әүәлге һымаҡ, үҙе – баш, үҙе – түш булып, ваҡ-төйәк мәшәҡәттәр менән генә көн уҙғарыуҙар бөттө. Сөнки Искәндәр ҡарт, үҙенә генә билдәле ниндәйҙер уй менән, ныҡлы йәбеште уларҙың ҡалаһына. Башҡа бурҙарҙы ҡыҫтай, улары иһә Искәндәр ҡарттың ҡалалағы күҙ-ҡолағы булған Геннадий Самуилович менән бысаҡҡа-бысаҡ килергә еткәндәр, тик ата ҡараҡтың исемшәрифе генә әлегә ҡулдарынан тота. Әммә, урам бүлешкән эттәр һымаҡ, ҡара-ҡаршы тороп «ырылдашыу» күпкә бармаҫтыр. Бының һуғыш-талашһыҙ, ҡан ҡойошһоҙ ғына бөтмәүе билдәле. Искәндәр ҡарт та шуны көтә, ахыры, уға ҡалалағы башҡа бурҙарҙы тар-мар итеп, тулыһынса хужа булыр өсөн, һис шикһеҙ, сәбәп кәрәк. Ә сәбәп «осо»нда – ул, Геннадий Самуилович…

Сати… Геннадий Самуилович ул гүзәл затты ике тапҡыр ғына күрҙе, икеһендә лә ҡыҙҙың арсыйҙары тарафынан ергә ҡолатылып, аяҡ аҫтында ятты. Тағы һалһалар ҙа, һис йәберһенмәҫ ине ул. Сати – бөтә һын-ҡиәфәте менән балҡып торған ханбикә бит, ундай ханбикә алдында ергә тубыҡланыуҙы даншөһрәтле баһадирҙар ҙа бәхеткә һанаған… Геннадий Самуилович, шуғалырмы, хыялында ла Сати алдында тубыҡта торғандай итеп күрә үҙен.

– Ул китте, – тип яуапланылар уға, һуңғы тапҡыр телефондан шылтыратҡанда.

– Ҡайҙа китте?

– Беҙҙән сыҡҡан юл берәү, ул тик һауаға ғына илтә…

Шунан бирле уның йөрәге төбөндә, ниңәлер, һалҡын бушлыҡ хасил булып, ғүмере булмағанса, күңеле болоҡһоно, дәрт-дарманы һүнде. Ул табынырлыҡ кеше ҡалманы был донъяла.

Сати… Бер ваҡытта ла бергә булмаясаҡтарын белеп, ҡыҙ менән ара-тирә генә күрешеп торорға ла риза ине ул. Тик уҫал яҙмышы шул кинәнестән дә мәхрүм итте уны, әйтерһең дә, ғәрип балаға зауыҡлы уйынсыҡ күрһәтте лә, мыҫҡыллы көлөп, кире тартып алды…

Теге донъяла, бәлки, осратыр…

Туғай уртаһындағы кәбәндә шәйләп ҡалғас, Геннадий Самуилович ҡаргиҙәрен шул яҡҡа йүнәлтте. Шул саҡ кәбәндән кеше һыны айырылды.

Геннадий Самуиловичтың быға ҡәҙәре айыу һунарына йөрөгәне булманы. Һуңғы ваҡытта бар ғәмен яулаған бошонҡолоҡтан нисек ҡотолорға белмәй аҙап йөрөгәндә, ҡолағына өңгә ятҡан айыуҙы һатырға тырышып йөрөгән аусы тураһында хәбәр кереп ҡалды. Һүнеп бөткән дәрт-дарманын, сәм-ғәмен уятырлыҡ бик уңай әмәл тип күрҙе лә ул быны, аусы менән osрашып, һунар хаҡында килеште. Хөрмәт йөҙөнән генә сығып, Искәндәр ҡартты саҡырғайны һунарға, тегеһе, уны таң ҡалдырып, ризалашмаһынмы?! Һикһәнен ҡыуалаған ҡарт айыу һунарына барыр, тип кем уйлаһын? Хәҙер килеп үкенеп бөтә алмай телен тыймағанға. Ҡартты аңғармаҫтан берәй хәлгә тарытһа, башы китәсәк бит… Тик һуң инде, әйткәнде кире алып булмай. Ана, Искәндәр ҡарт ике арсыйы менән эйәреп тә килә инде уның артынан. Ул үҙе менән Борькаэлектрикты алды. Урманда ни булмай, ҡаргиҙәр ватыла ҡалһа ла, төҙәтергә оҫта ҡул кәрәк бит.

Һырма кейеме өҫтөнән аҡ масхалат кейгән аусының алдына ике эте абалап сыҡты. Ул да булманы, арттағылар ҙа килеп етте. Бөтәһенең дә өҫтөндә ҡышҡы урманға яраҡлаштырылған йылы кейем, тик, аусынан айырым рәүештә, масхалаттары юҡ. Ялбыр ҡара бүрегенең ҡолаҡсындарын төшөрөп бәйләгән Искәндәр ҡарт, ҡаргиҙәрҙән төшөп бил яҙғандан һуң, ҡыҫыҡ күҙҙәре менән аусыға текәлде.

– Кем тием үҙеңде, улым?

– Ғәлләм булам…

– Искәндәр бабай, тиерһең миңә. Шунан, айыу көтәме беҙҙе?

– Көтә, – тип аусы буран артынан ҡарайып күренгән тау һыртына ымланы.

– Әләйһә, ҡуҙғалайыҡ. Ҡышҡы көн ҡыҫҡа.

– Әлбиттә. Тик тәүҙә һөйләшелгән хаҡты түләгеҙ, – тигәс, аусы Геннадий Самуиловичҡа бороллдо. Геннадий Самуиловичтың, ни сәбәптәндер, асыуы ҡупты.

– Урманға кем аҡса йөрөтә? – тип таҫырайҙы ул аусыға, күҙлеген һалып. – Һунар уңып, тамам булғас ҡына…

Аусы бер мәл генә тапанып торғандан һуң, аңлайышһыҙ телдә эттәренә ниҙер бойорғайны, тегеләре беҙҙәй осло тешәрен ыржайтып, һырт йөндәрен ҡабартып, яттарға ҡаршы баҫты.

– Беҙ улай һөйләшмәгәйнек, – тине аусы тыныс ҡына. – Түләү һунар алдынан булырға тейеш. Һеҙҙе алдап ҡасырға уйым да, рәтем дә юҡ минең.

– Тый йыртҡыстарыңды! – Геннадий Самуилович ҡулына мылтығын алды. – Юғиһә, дөңкөтәм икеһен дә! Үҙеңде лә бер юлы…

Аусы, яурыны аша аҫылған мылтығын ҡулына алып, артҡа сикте. Күҙҙәрендә иблис уты тоҡанып, ярһыған эттәр хужаһының бер ымынан дошманы өҫтөнә ырғырға әҙер булып, ажарланып Геннадий Самуиловичҡа уҡталды. Ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, артҡа сигеп ҡуйҙы. Ситтә торған иптәштәре, ҡыҫылмай, был күренеште ҡыҙыҡһынып күҙәтә ине.

– Улай булғас, һунар тамам! – тип ҡыҫҡырҙы аусы эттәренең лауылдап өрөүе аша. – Хушығыҙ, һәр ҡайһыбыҙ үҙ юлыбыҙҙа булайыҡ.

Геннадий Самуилович шунда Искәндәр ҡарттың үҙенә төбәлгән сәйер ҡарашын тойоп ҡалды ла, өҫтөнә һыу һипкән усаҡтай ҡапыл һүрелеп, ҡуйынынан бер бәйләм аҡса сығарҙы.

– Мә, ал, йолҡош, – тине ул, аҡсаны аусыға атып. – Тик ҡара уны, һунар уңмаһа, үҙеңә үпкәлә…

Эттәрҙең йыртыҡ ҡолаҡлыһы, һауаға ырғып, аҡса бәйләмен эләктереп ҡапты ла, ҡойроғон болғай-болғай, хужаһына илтеп бирҙе.

Тиктәҫтән ҡупҡан ыҙғыш шул урында тамам булды. Аусы, этен ҡосаҡлап, Геннадий Самуиловичтың ҡаргиҙәренә ултырҙы. Икенсе этте Искәндәр ҡарттың арсыйы үҙенең ҡаргиҙәренә алды.

Ҡарайып күренгән тау һыртына тоҫмаллап ҡуҙғалып киттеләр.

Һөҙәк кенә башланған яланғырт тау итәге, бара торғас, һаман бейегәйә, текәрә барҙы. Юғарылай барған һайын өйөрмә буран уҫалланды, ҡайһы мәлдә, тирә-йүнде бөтөнләй күрмәҫлек итеп, һауаны томаланы. Ҡар пәрҙәһе артында, күкте терәгән бейек бағаналай булып, ара-тирә мәғрур ҡарағай олондары күренеп ҡала. Ҡаршыға осраған муйыл, тал ҡыуаҡтарын урап үтергә тура килә. Ҡаргиҙәр, геүләп, көртҡә һаман нығыраҡ бата, тәгәрмәстәре ҡарға сумып бер урында әйләнә, аусылар йыш ҡына замана атын аллы-артлы этәреп, ҡарҙан сығарырға мәжбүр. Бер аҙҙан аяҡтар аҫтында ишелеп торған тәрән көртлө тау текәһе ҡаргиҙәрҙәрҙе бөтөнләй батырып туҡтатты. Ҡаргиҙәрҙәрҙе шунда ҡалдырҙылар ҙа, тубыҡтан көрт кисеп, артабан йәйәү киттеләр. Тиҙҙән

бер-бер артлы теҙелешеп барған аусылар, ике тау бүлкәсе араһындағы уйһыуға юлығып, остары һауаға кереп юғалған бейек шыршы урманына керҙеләр. Бында, баш өҫтөнә сатырҙай булып аҫылынған ҡуйы шыршы ботаҡтары араһында, тыныс, ҡараңғы. Шунда туҡтап, арсыйҙары менән артта ҡалған Искәндәр ҡартты көтөп алдылар.

– Күпме барырға ҡалды? – тип һораны Геннадий Самуилович янында торған егерҙән. Ауыр юлдан һулышы ҡурылғанғамы, тауышы ғырлап сыҡты. Искәндәр ҡарт нисек күтәрер был сәфәрҙе?

– Ярты саҡрым самаһы.

Геннадий Самуилович, үҙ алдына ғына һүгенеп, ауыҙына йыйылған шайыҡты ергә төкөрҙө.

– Нисә айыу алдың?

Аусы янында өйөрөлгән этенең тәпәйен ҡулына алып, боҙҙан таҙарта башланы.

– Байтаҡ, – тине ул, үҙ алдына һөйләнгәндәй итеп. – Өс тиҫтәгә яҡын…

Геннадий Самуилович, ышаныргамы-юҡмы тигәндәй, һыҙғырып уҡ ебәрҙе.

– Нимә, айыуҙар урманда көтөүе менән йөрөйҙәрме әллә?

– Кемгә – көтөүе менән, ә кемгә – арты менән…

Геннадийҙың бар ғүмере ҡалала уҙҙы. Шуға ла ул, машиналар геүләп торған юл буйындағы ағаслыҡтарҙы урманға һанап, шуларҙан ары йөрөмәгәс, әлегеләй ҡара урманды күҙ алдына ла килтерә алмай ине. Һөңгөләй остары менән болоттарҙы тырнаған шыршыларҙың тығыҙ рәттәре, көн яҡтыһын тотоп, ағас араларында шомло эңер хасил иткән. Ике яҡтағы тау бүлкәстәре биттәренә ҡар ятмаҫ текә ҡаяларға олғашып, һырттарын болоттар араһына йәшергән. Тау үҙәген үтеп сыҡҡыһыҙ булып ваҡ ағас баҫҡан, ҡар аҫтынан шишмә сылтырағандай тауыш ишетелә. Унда-бында ҡаяларҙан тәгәрәп төшкән күбә дәүмәле бүкән таштар ята. Бында йәй көндәрендә айыу түгел, ҡанатлы аждаһа осратһаң да, ғәжәп түгел.

Был ер, гүйә, уның бар булмышын сағылдыра.

Ошонда сатыр ҡороп, яңғыҙлыҡ еләткәнсе ятһаң ине…

Геннадий, күңелендә кинәт кенә уянған сәйер тойғоларына ғәжәпләнеп, еүеш устары менән йөҙөн һыпырып ҡуйҙы. Аунаған шыршы төпһәһенә ҡунаҡлап ял иткән Искәндәр ҡарттың иҙеүҙәре асыҡ, өҫтөнән аҡ быу күтәрелә…

Алдан көрт ярып барған аусы, ниһайәт, ҡулын күтәреп, килеп еткәнде белдерҙе. Уларҙың ҡаршыһында йорт дәүмәле мүкле ҡая таш ҡалҡып тора ине. Ҡая аҫтына ваҡ шыршылы, бүкән ташлы текә тау ҡырласы илтә. Тирә-йүндә, ялпаҡ ботаҡтарын йәйеп, мөһабәт шыршылар үҫеп ултыра. Ҡая бите уң яҡтан мөйөш яһап артҡа борола ла ҡуйы ағаслыҡ баҫҡан текә тау ҡырына тоташа. Шул тәңгәлдә уңға тартылған тау үҙәге кинәт кенә текәләнеп, артабан бейегәйә һәм, аҡ пәрҙәле һауаға тоташып, күҙ яҙҙыра.

Ел ауҙарған ағас олононa ултырып, термостағы сәй менән ҡапҡылап алдылар. Хәмерле һауыт ҡулдан ҡулға күсте. Һырт йөндәрен ҡабартып, ҡая төбөнә уҡталған эттәрҙе аусының ҡаты бойороғо кире борҙо, улар, ырылдай-шыңшый, һунарсыларҙың аяғы аҫтында сыуалды.

– Ғәләм улым, бында йыртҡыс ятҡанды нисек белдең?

Баштан-аяҡ ҡарға һылашҡан Искәндәр ҡарттың өҫ-башы аусының аҡ кейеменән күпкә айырылмай ине. Ҡарт сәйле көрөшкәһен һауала өйөрөлгән ҡар бөртөктәренән усы менән ҡаплап ултыра.

– Үҙем ятҡырҙым…

– Нисек инде? – тип ғәжәпләнде Геннадий Самуилович. – Һыйырҙы аҙбарға япҡан һымаҡ итеп, айыуҙы ла артынан сыбыҡ менән ҡыуаланыңмы ни?

Хәмерҙән күҙҙәре майланырға ла өлгөргән Борька-электрик сыйнап көлөп ебәрҙе. Аусы, уларҙың мыҫҡыллы шаярыуына иғтибар бирмәй, ҡушкөбәкле мылтығын һындырып, көбәге аша ҡараны ла яһау ҡуйҙы.

– Айыу артынан эйәреп йөрөгәнде яратмай, – тине ул вайымһыҙ ғына. – Һиҙеп ҡалһа, аңдып тора ла баҫа. Уны, өңөнә кереп ятҡас ҡына, эҙҙәренән юллатып табыу фарыз… Ҡыҫҡаһы, минең ғүмерем урманда уҙа, шуға ла мин бында һеҙ күрмәгәнде күрәм, һеҙ ишетмәгәнде ишетәм… Хәҙер башлайбыҙ, – ул урынынан тороп, ағаста ултырғандарға бороллдо. – Өңгә ун аҙымдан ары яҡынаймаҫҡа, сөнки айыу бик йылғыр януар, ырғып сыҡһа, атып өлгөргәнсе берәйегеҙҙе йыртҡыслап та ҡуйыр. Өң алдында ҡара-ҡаршы тормаҫҡа. Яңылыштан бер-берегеҙгә атыуығыҙ ихтимал. Тәүҙә өңгә ағас тығабыҙ, унан һуң төтөн һалабыҙ, өң янында шау-шыу ҡубарабыҙ, ҡыҫҡаһы. Йыртҡыс өңөнән сыға башлаһа, эттәрҙе һөсләтәбеҙ. Берүк айыуға төҙәп кенә атығыҙ, эттәремде һәләк итеп ҡуймағыҙ! Шул.

– Ағас тығыу нимәгә?

– Өңөнән сығып килгән януарҙы тоҡтарлар өсөн. Юғиһә, ул ҡайһы саҡта бик етеҙ ҡуҙғала, атырға ла өлгөрмәй ҡалаһың.

– Ә януарҙың өңөнән сыҡмай ҡалыуы мөмкинме?

– Ғәҙәттә, ул оҙаҡ көттөрмәй. Сыҡмаһа, өңөнә керергә тура килә инде… Теләгән кеше булһа…

Геннадий Самуилович, йәҙрә яһаулы мылтығын ҡулына тотоп, ҡая мөйөшөнә һырыҡты. Ҡаяға тоташҡан тау ҡырласы ярайһы уҡ текә булып, ныҡлап аяҡ терәргә бирмәй ине. Унан аҫтараҡ, яҫы ботаҡтарын һалындырып ултырған ҙур шыршы төбөнә, арсыйҙары менән Искәндәр ҡарт урынлашты. Түбәндә, үҙәк буйында үҫкән кәкре ҡайынға үрмәләп менгән Борька-электрик, мылтығын һынған ботаҡҡа элеп, ҡулына видеокамера алды.

Ҡая аҫтына уйылып кергән өң ауыҙын ҡалын көрт баҫҡан. Өң алдында өймәкләшеп ваҡ шыршылар үҫкән. Ара-тирә, тау үҙәге буйлап, йүгерек буран шаулап уҙа. Ул, еңел ҡарҙы өйөрөлтөп, уны ағастарға, тау биттәренә һылаштыра, хәрәкәтһеҙ торған һунарсыларҙың биттәренә бәрә. Ишелеп яуған ҡар көрттә ҡалған аяҡ эҙҙәрен тиҙ арала күмеп, юҡҡа сығара.

Аусы балтаһы менән йәш шыршыны ауҙарып, өңгә тыҡты. Шул мәлдә үк өң эсенән, йөрәктәрҙе ҡалтыратып, дәһшәтле йыртҡыс үкереүе ишетелде, өңгә тығылған ағас, терелгәндәй дер һелкенеп, ботаҡ-олоно менән ҡуҙғала башланы. Аусының эттәре, йәндәре сығырҙай булып абаулап, өң алдына ташландылар. Ҡая аҫтында баш әйләндергес мәхшәр, ғауға ҡупты. Шул саҡта кемдеңдер мылтығы шартлап атылды. Тағы, тағы… Геннадий Самуилович та, башҡаларға эйәреп, мылтығын өң ауыҙына төбәп, ике көбәктән алағайымға атып ебәрҙе. Уларға йыртҡыстың йән өшөткөс ажғырыуы яуапланы.

– Атмағыҙ! – тип ҡулдарын болғай-болғай үрһәләнгән аусының ҡобараһы осҡайны. – Атмағыҙ! Туҡтағыҙ!

– Сығып килә ине! – Искәндәр ҡарттың мыйыҡлы арсыйы ашығып, ҡалтыранған ҡулдары менән мылтығына яһау тыға. – Башына төрәп тиерлек аттым. Бәлки, дөмөккәндер?

Арҡаһын шыршы олонона терәп баҫҡан Искәндәр ҡарттың йөҙө уттай янып, теремекләнгән, уның йөнтәҫ ҡаштары аҫтына йәшенгән ҡыҫыҡ күҙҙәре түңәрәкләнеп киткән. Мылтығының көбәгенән әскелтем төтөн сыға, ул да тәтегә баҫып өлгөргән, тимәк.

Сырайы ҡарҙай ап-аҡ булған аусы, ҡолаҡсынын сисеп, бер туҡтауһыҙ ер тырнап өргән эттәренең тауышы аша өңгә ҡолаҡ һалды. Ер аҫтынан сыҡҡан йыртҡыс тауышы алыҫайғайны. Аусы, һаҡ ҡына баҫып, өң ауыҙына барҙы ла эйелеп эскә ҡараны.

– Ҡан таптары күренмәй, – тине ул, ниңәлер йөҙө яҡтырып. –Теймәгән булһа кәрәк. Эх, һеҙ, һунарсы йораттары! Януарҙың өңдән сығып еткәнен көтөргә кәрәк ине!

Өң ауыҙына төтәткес ташланылар. Ер аҫтынан боларып сыҡҡан ҡуйы аҡ төтөн ҡая мөйөшөнә һырыҡҡан Геннадий Самуиловичтың танауын ярып, күҙҙәрен әсеттерҙе. Төтөн артынан өң ауыҙы бөтөнләй күренмәҫ булды. Ҡая аҫтында үкергән йыртҡыс бер мәлде кинәт кенә өң ауыҙына килеп, оҙаҡ көтөүҙән арый башлаған һунарсыларҙың һушын алырҙай итеп ажғырҙы ла тағы төпкә кереп юғалды. Эттәр ҙә, төтөнгә түҙмәй, өң алдынан китеп, алыҫтан ғына сөскөрә-бышҡыра, һауһаулайҙар ине.

Ваҡыт уҙҙы, көрттәге эҙҙәрҙе яуған ҡар тигеҙләй барҙы, әммә януар өңөнән сыҡманы. Йыртҡыс ара-тирә үкереп ер аҫтында йөрөй бирҙе.

Аусы, ҡолаҡсынын һалып, аптырыған ҡиәфәттә елкәһен ҡашыны.

– Әтнәке сыҡмаҫҡа итә, – тине ул, һунарсыларға берәм-берәм күҙ йөрөтөп. – Йәшәгән айыу булһа кәрәк… Өңө лә ҙур, тәрән, ахыры, төтөндән ҡасыр ере барҙыр. Әтнәке, ҡараңғы төшөргә лә күп ҡалманы… Белмәйем, ни ҡылмаҡ кәрәк?

– Ошоно өңгә ташлаһаҡ? – тип Геннадий Самуилович кеҫәһенән граната сығарҙы. Аусы, аңламағандай, эсенә үлем йәшерелгән һырлы тимер шарға ҡарап торғандан һуң, ниңәлер һаҡ ҡына хәрәкәт менән бүреген башына кейҙе лә артҡа сикте.

– Ай-һай, – тине ул шикле ҡиәфәттә, шомланған күҙҙәрен гранатанан алмай, – ул нәмәҫтәң шартлап, айыуҙы үлтергән хәлдә лә, унан һеҙгә ни фәтеүә? Тотонорлоҡ ерен дә ҡалдырмай, ҡанын туҙҙырып, ян-яҡҡа сәсрәтәсәк бит ул. Ни ите, ни тиреһе тигәндәй… Тағы ла шартлауҙан өң ишелеп төшһә, нишләрһегеҙ?

Һунарсылар араһында тынлыҡ урынлашты. Шуны ғына көткәндәй, өң эсенән ғәрәсәтле ауаз яңғыраны. Януар, гүйә, дошмандарынан уҫал көлөп, кемделер ҡара-ҡаршы баҫып алышырға саҡыра ине.

Шул саҡ Искәндәр ҡарттың ҡарҙан еүешләнгән һырлы йөҙөндә сая йылмайыу уянды.

– Өңгә кермәй булмай, тимәк, – тине ул, мылтығының көбәгенә өрөп. – Ишетеүемсә, боронғо заманда, әлегеләй осраҡта, беҙҙең ата-бабалар, һөңгө, хәнйәр тотоп, үҙҙәре өңгә кергәндәр… Ҡана, яҡтыртҡысыңды бир әле…

Мыйыҡлы арсыйы тун кеҫәһенән ҡара тотҡалы яҡтыртҡыс алып, ҡартҡа һондо. Ҡарт йәбешкәк таҫма менән яҡтыртҡысты ҡушкөбәгенә һыҡтырып бәйләне лә, янында бер ни аңламай торған иптәштәренә ҡарап, мут ҡына күҙ ҡыҫты.

– Ул да ҡарт айыу, мин дә… Кем-кемде, хәҙер күрербеҙ, – тине лә, көрт кисеп, өңгә табан йүнәлде.

Геннадий Самуилович, йоҡоһонда сикәһенә сабылғандай, шунда ғына Искәндәр ҡарттың ниәтен һиҙеп ҡалды ла, үҙе лә һиҙмәҫтән, тегенең салғыйынан эләктереп алды.

– Искәндәр бабай, нисек инде?! Туҡта, мин үҙем…

Ҡарттың арсыйҙары ла, иҫтәренә килеп, хужаларының юлына ҡаршы сығып баҫтылар.

– Искәндәр бабай, ғәфү итегеҙ, әммә һеҙҙе күрәләтә йыртҡыс ҡулына бирә алмайбыҙ!

– Урынығыҙҙа тороғоҙ! – Күҙҙәренән йәшендәр атып екергән ҡарттың тауышы өңдән ишетелгән йыртҡыс үкереүенән күпкә ҡайтыш түгел ине. – Бында мин баш! Минең уйыным был!

Ҡарттың һалҡын ҡарашынан үҙен йылан арбағандай итеп тойған Геннадий Самуилович, ҡымшанырға ла көс тапмай, ихтыярын юғалтып, баҫҡан ерендә ҡатып ҡалды. Искәндәр, ҡулындағы мылтығын уңайлап тотоп, ҡаяға бороло.

Тап шул мәлдә Геннадий Самуилович бар булмышы менән үҙенең артында ниндәйҙер ҙур, ҡот осҡос ҡара шәүлә ҡалҡҡанын тойҙо. Шәүлә, йәй көндәрендә тау артынан шым ғына килеп сыҡҡан йәшен болотолай, ҡая артынан кинәт кенә пәйҙә булып, бик тиҙ бейегәйҙе, үҫте һәм, тынды ҡурғыс һаҫыҡ еҫен бөркөп, уның өҫтөнә аҫылынды. Геннадий Самуиловичтың ҡаршыһында торған аусының йөҙө, ниңәлер, күҙ асып йомғансы аҡлы-күкле төҫкә кереп, ул, күҙҙәрен алартып, уның башы аша ҡайҙалыр ҡарап ҡатты ла, йәмһеҙ итеп асылған ауыҙынан бер өн сығармай, аҡрын ғына артына ҡолай башланы. Баш өҫтөндә яңғыраған дәһшәтле ажғырыуҙан Геннадий Самуиловичтың эс-бауыры ҡалтырап, бил-аяғы быуынһыҙланды, ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, мылтығын төшөрөп ебәрҙе лә, ҡулдары менән башын ҡаплап, ергә сүгәләп төштө һәм, һушын юйыр хәлдә тубығына ҡолап, алға ауналы. Шул хәрәкәте уны һаҡлап ҡалды ла инде. Ниндәйҙер аңлайышһыҙ көс, ҡапылдан хасил булған өйөрмәләй, уны тау ҡырласынан түбәнгә һуғып осорҙо. Геннадий Самуилович, ел осорған ҡош йөнөләй, ауырлығын юғалтып, үҙенең һауаға күтәрелгәнен тойҙо. Тирә-яҡтағы бар нәмә, аҡрынайтып күрһәтелгән кино һымаҡ, уның күҙ алдында өйөрөлөп, бер-береһенә бәйле ваҡ сылбырҙай, сәйер ҙә, ғәжәйеп тә күренеш хасил итте. Бына уны тауҙан һелтәп осорған кәбәндәй ҙур, ялбыр айыу арсыйҙары менән ҡаяға табан китеп барған Искәндәр өҫтөнә ябырылды. Артына әйләнгән ҡарттың ауыҙы ҡыйшайып, өҫкө яңағындағы бер рәт алтын тештәре йылтыраны. Янында барған кәкре танаулы арсыйы, өҫтөнә аҫылынған айыуҙан әсиргә алыуҙы һорағандай ҡулдарын күтәреп, арт һанына ултыра төштө. Тештәре ыржайған ҡара мыйыҡлыһы, ҡоралын йыртҡысҡа төбәп атырға иткәндә, яңылыш тотоноп мылтығын «һындырҙы», көбәктән ырғып сыҡҡан ике яһау, көҙгө япраҡтай аҡрын ғына һауала оса-әйләнә, йоҙроҡ дәүмәле соҡор ҡалдырып, көрткә сумды. Искәндәр ҡарттың башы өҫтөнә күтәргән ҡушкөбәгенән бер-бер артлы ике ут борхоно, йәҙрәләрҙең һуңғыһы мыйыҡлы арсыйҙың сикәһен сыйып үтте лә, йыртҡыстың дегәнәк япрағылай ҙур ҡолағын тишеп, күккә осто. Кәүҙәһен дә toймай тау түбәненә осоп барған Геннадий Самуиловичтың аҫтында ҡуш осло шыршы ағасы күренеп ҡалды. Ул, ошоларҙы күҙ алдынан юғалтып, һауала башы аша бер тапҡыр әйләнгәнсе, ҡая алдында бөтөнләй икенсе күренеш хасил булғайны. Ҡая төбөнә еткән йыртҡыс, йәнләнгән бесән күбәһеләй ҡуҙғалып, өңгә кереп бара. Мыйыҡлы арсый, ҡулдарын ҡош ҡанатылай йәйеп, уның артынан осоп килә, хатта, ауыҙын йырып, йылмайғандай итә. Ҙур шыршы төбөндәге көрткә сумған икенсе арсыйҙың арт һыны ҡырмыҫҡа иләүеләй ҡалҡып тора. Текә тау ҡырласынан түбәнгә, ҡаянан ыҫҡынып түбәнгә оҫкан таш бүкәндәй ҡар туҙҙырып, Искәндәр ҡарт тәгәрәй. Тау битендә баштүбән ятҡан аусы, ҡанатына ҡолап төшкән көҙгө себендәй аҡрын ҡуҙғалып, аяғына баҫырға итә, ҡулында терһәк

буйылай оҙон хәнйәр. Ҡайын башында ағас олононон ҡосаҡлап ултырған Борька-электрик, күҙҙәре атылып сығырҙай булып, ҡулында тейендәй тулаған видеокамера аша ҡая аҫтындағы мәхшәргә ҡарап ҡатҡан…

Тау аҫтындағы үҙәк буйына ҡатлап-ҡатлап өйөлгән тәрән көрт Геннадий Самуиловичты һалҡын ҡуйынына алып, мөғжизәле осоуына сик ҡуйҙы…

…Айыу һунары шунда тамам булды. Аңғармаҫтан килеп баҫҡан януар тырнағынан ни ғилләә менән генә ҡотолоп ҡалған һунарсылар, кәсептәрен артабан дауамларға хәлдәре лә, дармандары ла ҡороп, кире юлға баҫтылар. Улай-былай иткәнсе, ҡышҡы ҡыҫҡа көн дә ҡараңғы төнгә тоташты. Баш күтәрлек был мажараның эҙемтәләре ниндәйҙер мөғжизә менән сағыштырмаса еңел булып сыҡты. Искәндәр ҡарттың ике ҡабырғаһы һынған, биле ҡаймыҡҡан. Уның мылтығы табылмайынса, ҡайҙалыр көрт эсендә ҡалған. Мыйыҡлы арсыйҙың беләге һынған. Шул ғына…

Урмандан арманһыҙ булып арып ҡайтһа ла, Геннадий Самуиловичтың күҙенә йоҡо кермәне. Күҙҙәрен йомһа, көрт баҫҡан тау ҡырласы өҫтөнән һаман осоп барғандай итеп тоя ла үҙен, хәтеренә һеңгән теге күренештәр, төш һымаҡ бер-бер артлы ҡабатланып, көрткә сумған мәлендә генә тағы тертләп уяна. Сәкмәненең арты үткер бысаҡ менән ҡырҡып алғандай йыртыҡ ине, тик шуныһы ғәжәп: йыртыҡ аша күренеп торған арҡаһында себен тешләгәндәй ҙә яра юҡ… Ҡайынға йәбешкән ҡулдарын ҡурҡышынан яҙа алмай ултырған Борька-электрикты ағас башынан саҡ төшөрөп алдылар. Меҫкен, кире юлда ағас төбө һайын тиерлек сүгәләп, ҡарҙы бысратып килде үҙе, етмәһә, бер туҡтауһыҙ алан-йолан ҡаранып, башҡаларҙан ҡалғыһы килмәй, мәшәҡәте тамам булғансы янында тороуҙы һорай. Иллә-мәгәр, һыҙланыуына ҡарамай, Искәндәр ҡарттың күңеле көр. Күптән бирле шундай йәтеш итеп кәрәкте биргәндәре юҡ ине, тип көлә… Әммә, нисек кенә булмаһын, Борька маладис булып сыҡты. Бик оҫта тотоноп, һунарҙы башынан аҙағына хәтлем видеоһүрәткә төшөргәйне ул.

Бер-бер артлы стаканлап һемергән шараптан күңеле күтәрелеп, күҙҙәре асылғандай булған Геннадий, диванға ҡырын төшөп, үҙ алдына һөйләнә-көлә, шул видеоһүрәтте ҡат-ҡат әйләндереп ҡараны. Күрсәле, уның тау ҡырласынан түбәнгә осоп барыуы, күп тигәндә, төкөрөк төшкәнсе генә дауам иткән, имеш. Ә ул шуны, әллә күпмегә һуҙылғандай, оҙаҡ итеп тоя. Шул саҡта хәтерендә уйылып ҡалған күренештәр ҙә, видеоһүрәт менән сағыштырғанда, күпкә асығыраҡ та, теүәлерәк тә һымаҡ. Мәҫәлән, өңгә кереп барған януарҙың ҡатып бөткән ҡойошҡаны һаман уның күҙ алдында тора. Ә ул күренеш видеоһүрәттә юҡ.

Ҡая артынан сығып, артҡы аяҡтарына баҫҡан януар үҙен ураткан аусыларҙан кәмендә ике тапҡырға бейегерәк ине. Ҡыланышы хас та алдындағы ярым тере сысҡандарын уйнатҡан бесәйҙәй! Эйе, шундай дәү януарҙы алыу үҙе бер дан булыр ине. Йәл, һунар башында йыртҡыстың өңөнән сығып еткәнен көтөп алмайынса, ашығып атып, үҙҙәрен-үҙҙәре һемәйттеләр шул.

Геннадий Самуилович видеоһүрәттәге шул мәлде табып, шундағы күренеште яҡынайтып, диҡҡәтләп ҡарай башланы. Ҡараны ла, күҙҙәренә ышанмай, ҡулындағы шарабын төшөрөп ебәрә яҙҙы. Ҡулъяулыҡ алып, йонсоуҙан йәшкәҙәгән күҙҙәрен ыуалағас, телевизорҙың эсенә керерҙәй булып, тағы текәлде…

Ҡая төбөндәге тәрән көрт артында ҡарайып күренгән өң эсенән кеше ҡарап тора ине!..

## 28

Ғилмандың ҡара көҙҙән яттҡырған айыуы, һунар алдынан барып ҡарауға, урынында булмай сыҡты. Януар үҙен аңдығанды һиҙепме, әллә ятҡан өңөн яйһыҙ табыпмы, уны ташлап, ҡайҙалыр зымзыя булғайны. Көтөлмәгән был хәлгә ышанырға теләмәйенсә, башыбыҙға бәлә эҙләп, ҡая аҫтындағы тау тишегенә керҙек. Унын эсе, мәмерйәгә оҡшап, иркен дә, тәрән дә булып сыҡты, ҡайһы бер тәңгәлендә аяғүрә баҫырлыҡ. Төптә – өң кинәт кенә тарайып, тау аҫтына ары киткән тәкә һыйырлыҡ тишеккә тоташа. Беҙ унда керергә шомландыҡ, бәләнән баш-аяҡ… Өң эсендә ҡоро, һауаһы һаҫыҡ, тынсыу, ҡайҙа ҡарама, януар йөндәре туҙышып ята. Күренеп тора, әүәлге йылдарҙа ҡыштарын был өң буш тормаған. Тик быйыл януар беҙҙе һөмәйтте. Һис шикһеҙ, артынан аңдығанды тойған йыртҡыс ошонда килеп аусының күҙен буяған да, ул киткәс, сығып та шылған.

Өң ике ҡатлы, имеш. Баш өҫтөндә мендәр тығырлыҡ ҡына тишекте шәйләп, яҡтыртып ҡарағас, унда аласыҡ дәүмәле иркен «бүлмә» барлығын күрҙек. Ҡайҙандыр өҫтән, меңәр йылдар буйы тама-тама ташты тишкән һыу юлынан, һүрән генә яҡтылыҡ төшә…

Ошо сәбәптән ҡалала һөйләшеп килешелгән һунарҙы кире ҡағыу кәрәк ине, әлбиттә. Юҡ айыуға һунар буламы ни? Әммә, әлеге лә баяғы, ҡулға кереп килгән мул ғына аҡсанан мәхрүм ҡалғы килмәне. Эшһеҙ ятҡас, минең дә кеҫәм таҡырайғайны, ә Ғилмандың мохтажлығын аңлатып тораһы ла юҡ инде, йортло, ғаиләле ауыл кешеһенә аҡса кәрәкмәй буламы?! Шул саҡта милицияла эшләп, әҙәми заттарҙың сикһеҙ яһиллығын, мәкер-хәйләһен күреп, шуларға күнегеп бөткән зиһенемдә бер уй тыуҙы. Януарҙарҙы тик ситлектә генә күреп йөрөгән ҡала ғөләмдәренең ҡырағай урман хужаһының ҡылыҡ-фиғелен аңлап белеүе бик шикле. Йыртҡыс тауышын магнитофонға яҙҙырырға ла, ошо тау тишегенә йәшенеп, кәмит ҡорорға…

– Әммә ут төтәтеп тә, эт һөсләтеп тә айыуҙың өңөнән сыҡмауын нисек аңлатырмын? – ти Ғилман, елкәһен ҡашып.

–Аңлатыу ҙа кәрәкмәй. Үҙең дә, шул хәлдән аҙап, ғәжәпләнгән булып ҡыланырһың. Тик эттәреңде берүк өң эсенә ебәрмә!

–Тегеләр шуны талап итһәләр?

– Эттәрем ҡәҙерле, уларҙы күрәләтә йыртҡыс тырнағына бирмәйем, тиерһең, мин һеҙҙе айыуға килтерҙем, уны нисек булһа ла үҙегеҙ алығыҙ, тип талаш.

– Өңгә керергә булһалар, ни ҡылырбыҙ?

– Китсәле, баштары икеме ни? Шөрләрҙәр!

– Ай-һай, мин һөйләшкән әҙәм һис тә ҡурҡаҡҡа оҡшамаған, торғаны бер башы боҙоҡ һымаҡ!

– Һис тә булмаһа, мин өҫтәге тишеккә инеп йәшенермен. Өңдөң арғы төбөндә лә тишек бар бит, айыу шунда ҡасты, тиергә лә була. Нисек кенә булмаһын, уларҙың баштарын ҡараңғы төшкәнсе бутарға тырыш. Ҡышҡы көн ҡыҫҡа. Ә унда, йәшереп ҡуйған саңғыларыңды кейеп, шым ғына һыпыртыуың яҡшы. Тик бер үк исем-есемеңде, йәшәгән ереңде уларға әйтмә! Һораһалар, алдаштыр!

– Һиңә анһат, тау тишегендә ҡасып ятҡас, улар һине белмәй ҙә, күрмәй ҙә! Ә миңә мылтыҡ-бысаҡлы ете ят әҙәмдәр алдында әртис һымаҡ ҡыланырға кәрәк буласаҡ. Алдашҡанды һиҙеп ҡалһалар, бөттө баш!

– Нисауа, беҙ ҙә ҡоралһыҙ түгел бит. Эттәрең дә шәп…

Ғилман оҙаҡ уйламаны. Ул да, минең ише, һын ҡатырлыҡ ҡыҙыҡтан баш китерлек мәҙәк сығарырға ғына тора. Шуға ла ауылда саҡта бер-беребеҙҙән ҡалмай, тағылғандай булып йөрөйбөҙҙөр.

Төптән генә уйлап ҡарағанда, был кәсебебеҙҙең имен-аман тамамланыры бик шикле ине. Саҡырылған һунарсылар араһында урман күргән тәжрибәле аусы була ҡалһа, ул тиҙ үк был алдаҡтың асылына төшөнәсәк. Ул саҡта артабанғы хәлдәрҙең ниндәй тоҫмаҡ алыуын күҙ алдына килтереүе ауыр түгел. Ундай хәлгә тарығансы, өңөнән сыҡҡан йыртҡыс менән ҡара-ҡаршы баҫып алышыуың мең артыҡтыр… Шуға ҡарамаҫтан, ни булһа ла – мәрәкә булыр, тип баш китерлек хәүефле хәйләбеҙҙе тормошҡа ашырырға тотондоҡ.

Йыртҡыс тауышын ҡалалағы Олег дуҫым Интернеттан табып бирҙе. Ул инде һәүетемсә атлап йөрөй. Ләкин, тиҙ үк арыта, ти. Билдәле, йылдар буйы ғәрип арбаһында ултырғас, быуындары йомшарып бөткәнгә инде. Бер аҙ нығынғас, эшкә сығырға ниәтләнә. Настяһының биле йомрая башлаған. Бына ҡайҙа ул бәхет!

«Һунар» көнөндә буран сығып, бик йәтеш итте. Минең өң алдында ҡалдырған эҙҙәремде күҙ асып йомғансы һепертеп тә ҡуйҙы. «Һунар» башланғас, килештерәйем тип, айыуҙың баш тиреһенән арлы-бирле генә әтмәләнгән ҡарасҡыны таяҡ осона элеп, өң ауыҙына килгәйнем, шарт та шорт ата башламаһындармы?! Йәҙрә тейеп ҡараҫҡым ҡолап төштө, үҙем, саҡ-саҡ ҡына өлгөрөп, йәшенеп ҡалдым… Ҡараңғы өң эсендә бәрелә-һуғыла тегеләй-былай мүкәйләп йөрөй торғас, аяҡ быуындарым, билем ҡалманы, түшемә бәйләнгән магнитофонданғы йыртҡыс тауышынан ҡолаҡтарым тоноп, шаңҡып бөттөм. Тынсыу тау тишегендә бышлығып, тиргә баттым, өҫ-башым лысма һыу булды, тамаҡты ҡурғыс һаҫыҡҡа тонсоғоп, ҡасан ғына тамамланыр инде был мәхшәр, тигән хәлгә төштөм. Етмәһә, Ғилман өң ауыҙын ағас менән томалап ҡуйҙы, айыу һунарына оҡшатырға маташа инде, хәстрүш. Ул да булманы, өң эсенә төтөн борхоно, шунда инде, әсиргә төшкән һалдаттай ҡулымды күтәреп, өңдән сығырҙай булдым. Иллә-мәгәр бахыр януарҙың юҡтан ғына ене ҡыҙмай икән. Минең урында айыу булһа, был ыҙаға сабырлығы етмәй, күптән сығып ҡасҡан булыр ине. Йәҙрә «тоторға». Алҡымым көйөп, күҙҙәрем әсетеп, дөм-ҡараңғы ҡая тишегендә үҙемде һуҡыр ҡалғандай итеп тоя башланым бер мәлде. Улай ҙа, маладисмын, алдан күреп үҙем менән респиратор алырға, еүеш сепрәктәр әҙерләргә башым еткән бит! Шулар булмаһа, йә өңдән сығып ҡасырға, йә ятып үлергә генә ҡала шунда. Әлеге аусылар араһында, Ғилмандан башҡа, ҡышҡы айыу һунарының рәтен белгән тағы бер әҙәм булһа, ул, һис шикһеҙ, әлеге «һунар»ҙан бик сәйерһенер ине.

Ләкин төтөн тиҙ үк таралып бөттө. Өң иркен булғас, эреле-ваҡлы тишек-тошоғо байтаҡ, ахыры. Мейемде һелкетерҙәй итеп, үкереп, тамам аҙатҡан магнитофонымды тымыҙҙым да, өң ауыҙына яҡыныраҡ күсеп, битемә йәбешкән тир-маңҡамды һөртөп ултырһам, тышта аңлайышһыҙ ғауға ҡупты. Бер-бер артлы мылтыҡ аттылар, кемдер асырғанып ҡысҡырҙы, ер һелкетеп йыртҡыс үкереүе ишетелде. Бәй, был ни хәл, магнитофонымды һүндермәгәнмен, ахыры? Ул да булманы, яҡтырып торған өң ауыҙы ҡапыл томаланып, ян-юҫығымды күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғылыҡ баҫты. Битемә кемдеңдер һушты алғыс һаҫыҡ һулышы бәрелде, уның артынан ер тетрәткес дәһшәтле үкереү яңғыраны… Был ҡот осҡос афәттән сибек йөрәклеләр генә түгел, батырҙарҙың да күбеһе шул ерҙә ҡолап, йән биргән булыр ине. Ахыры, шунда минең йәнем дә йөрәгемдән осоп сыҡҡандыр ҙа, баш өҫтөндәге теге тишеккә

кереп йәшенгәс, үҙ-үҙенән оялып, аҫта ятып ҡалған кәүҙәһен, сәсенән һөйрәп, янына тартып алғандыр, тип уйлайым мин хәҙер. Шулай булмаһа, ни ғиллә менән өңдөң юғары ҡатына ҡасып өлгөргәнемде хәтерләр инем бит?

Артымдан ташланып, башын тишеккә тыҡҡан йыртҡыстың һөңгө башылай эре тешле алҡымына мылтығымды тығып, тәтеһенән тарттым…

Айыу өңөнә түгел, ҡәҙимге бер тау тишегенә лә бынан ары бер ҡасан да керәһем юҡ…

...Януар ғәләмәт дәү ине. Үҙ ғүмерендә өс тиҫтәгә яҡын айыуҙы алған Ғилмандың да иҫ-аҡылы китте был януарға. Төн буйы йәнтәслим килеп, ағаслы-баулы әмәлдәр менән көскә өң эсенән тышҡа һөйрәп сығара алдыҡ. Януар ятҡан өң әлеге ҡая артында, бынан йөҙ аҙым самаһы арыраҡ, шырлыҡ баҫҡан текә тау аҫтында булған, имеш. Янында ҡупҡан ғауғаға уянып, өңөнән сыҡҡан да, текә тау битәрендә ҡасыр юл тапмағас, түбәнгә йүнәлеп, беҙҙе баҫҡан.

Януарҙың тиреһен тунап, арлы-бирле эшкәрткәс, яҫы шыршы ботаҡтарынан шыман яһап, тау аҫтына һөйрәнек. Һуңынан тороҡта ҡалдырған ҡаргиҙәр менән дүрт тапҡыр килеп әйләндек. Бурандан һуң көрт йомшаҡ, ҡаргиҙәр бата, йығыла, үҙенә тағылған йөккә көсө етмәгән мәлдә мейене ҡалтыратып дыулай…

Бик мәшәҡәтле был мажара һуңында аяҡта торорлоҡ та хәлебеҙ ҡалмағайны. Күңел көрлөгө генә көс биреп, һаман йөрөтә ине беҙҙе. Иллә-мәгәр «һунар»ыбыҙ уңды бит! Кеҫәлә – тос ҡына аҡса бәйләме, алдыбыҙҙа – тауҙай айыу түшкәһе… Икмәк тотоп һөйләһәң дә, ышанмаҫтар был мажараға. «Һунар»ҙағы хәлдәрҙе иҫләп, көлә-көлә эсебеҙ ҡатты.

Ҡырҡ бәлә менән, ниһайәттән, эшебеҙҙең сигенә сыҡҡас, хәмер шешәһенә йәбештек. Һалҡын эсемлек, тереһыуҙай ағып, сарсаған эсәк-ҡарындарҙы һиҫкәндерҙе, йылытты, ҡатҡан быуындарға таралып, тәнде рәхәт иҙрәтте, күҙ алдарын яҡтыртып, йонсоуҙан буталған зиһенде асты…

– Ниңә шымдың, ыштаныңа сыстыңмы әллә?

Ғилмандың рәте сыҡҡан һайын ҡабатларға яратҡан лаҡабы был. Яңы тәпәй баҫып, теле сыға башлаған кескәй ҡыҙы ла өләсәһенә шулай тип өндәшкән. Ғилман сатыр алдындағы бесән өйөмөнә салҡан төшөп ятҡан да битараф ҡиәфәттә киске эңер пәрҙәләгән аяҙ күккә төбәлгән.

Усаҡтағы торонбаштарҙы өйөштөрөп, ут ҡабыҙҙым. Томрайып ҡатҡан бармаҡтарым бер ни тотмай, тотҡанын да һиҙмәй, ҡатҡан бил-быуындарым майланмаған ҡайыштай өҙөлөргә генә тора. Үҙемде ағастан юнып яһалған ҡурсаҡтай итеп тоям.

– Айыу тип, тағы бер ауыҙыңды асһаң икән…

– Бәй, үҙең уйлап, үҙең тапҡан мажараң бит?

Иҫкә алғандарына ҡыуанғандай, ялҡындарын дәррәү бейетә башлаған усаҡҡа утын өҫтәп, сәй элдем. Ҡаҙан ҡуйып, аш һалырға хәлдән килмәҫ, ахыры, бөгөн. Табала ит ҡурыу ҙа етер.

– Һиңә анһат…Һин саф һауала, сәхнәләге әртистәй, ҡыланып ҡына йөрөнөң. Ә миңә тәүҙә аттылар, унан дөм-ҡараңғы өң эсендә төтөнгә тонсоғоп үлә яҙҙым, аҙағынан, етмәһә, бынауы айыу килеп баҫты.

– Ыштаныңа сысһаң да ғәжәп түгел шул, ха-ха!

– Ятма бында сәйнәнеп, тор, итте тура!

Өҫ-башымдан борхоп торған ауыр еҫтән ҡотолор әмәл юҡ. Ул еҫ, гүйә, минең зиһенемә, тәнемә һеңгән, танауым шул һаҫыҡҡа күптән күнекһә лә, үҙемде ҡаҡашып бөткән бапаҡтай тоям. Эх, ҡайҙа мунсаһы, ташына шартлатҡансы эҫе

бөркөп, имән миндеге менән сабынырға ине! Йәл, тағы ла ике-өс көн уҙмай тороп, ундай ләззәтте онооторға, ошо бысраҡ-һаҫыҡҡа түҙергә тура килер инде.

Ауыл осондағы Әсмә әбейҙең ҡоромло ҡара мунсаһындағы ап-аҡ шәрә мөхәббәт хәтеремә төштө. Ул саҡта кис һайын яғылған мунсаға әбейҙең күпме утыны киткәндер. Әле булһа ине… Әҙәми заттар шуға үрсемле бит: улар, ғишыҡ тигәндә, яҙҙы-ҡышты ла көтмәй, арыу-сырхауҙы ла белмәй.

– Иртәгә таңдан тороп ҡайтырмын да, санаға ат егеп, кире килермен, – тип Ғилман усаҡ артында йоҡомһорап ятҡан эттәренә үҙенең теше батмаған ҡаты ит киҫәген ырғытты.

– Хәҙерҙән ҡуҙғалһаң да була. Ай яҡтыһы бар, ҡаргиҙәрҙең дә яҡтыртҡысы шәп.

– Юҡ, ятып ял итмәйенсә булмаҫ. Хәмер быуынға төштө.

Буран тымып, көн һыуыта башланы. Ҡарайып күренгән тау һыртына менеп баҫҡан ай, көн һайын матурлана, тулылана барған йәш ҡыҙҙай, һеҙ һаман да бындамы ни әле, тигәндәй, беҙгә ҡырын ғына ҡарап тора. Алдыбыҙҙа ләүкеп янған усаҡтың осҡондары, гүйә, күк көмбәҙенә йәбешеп, унда яңынан-яңы йондоҙҙар ҡабыҙа. Ана, ике йондоҙ, уҙышҡандай, бер-бер артлы атылып, күкте һыҙып үтте. Йомро арҡалы зәңгәр көрттәр баҫҡан туғай өҫтөндә, ҡара шәүлә булып, ябалаҡ осоп йөрөй…

Төнгө күккә күпме ҡараһаң да ялҡытмай.

Сатырға кереп ятыу менән, күҙҙәрем йомолоп, мөғжизәле йоҡо даръяһына сумдым. Уҙған көндәрҙә ҡыҙыҡ та, ҡурҡыныс та булып мейемә һеңгән күренештәр, әлегә ҡәҙәре үҙҙәрен бикләп тотҡан ысынбарлыҡ кәртәһенән ҡотолғандай, шунда уҡ шаша-буталыша төшөмдә өйөрөлә башланы. Имеш, мин айыу өңөндә боҫоп ултырам. Юҡ, был айыу өңө түгел, Әсмә әбейҙең ҡоромло мунсаһы ла баһа! Эҫе, танауҙы әсеттереп, мунса еҫе килә… Шул саҡ, мылтыҡ атҡандай ҡаты һуғып, кемдер ишекте шаҡыны. Ишекте асыуға ҡарҙай ап-аҡ тәнле, шәрә ҡатын килеп керҙе. Мин уны ҡосаҡларға тип һонолһам, ҡатынҡай күҙ асып йомғансы тауҙай дәү айыуға әүерелмәһенме! Турғайҙай осоп, мунса эләүкәһенә ҡастым. Бәй, был эләүкә түгел, өң тишеге лә баһа! Артымдан еткән айыу, бысаҡтай оҙон тырнаҡтары менән мине аяҡтарымдан ҡармап алып, өңдән тышҡа һөйрәй, йәнә ыржайып торған һары тештәре араһындағы ҡандай ҡыҙыл телен, байраҡтай елберҙәтеп, бер туҡтауһыҙ әҙәмсә һөйләнә… Бына ул мине өңдән тартып сығарҙы ла һушты алырлыҡ һаҫыҡ тынын бөркөп өҫтөмә эйелде һәм, мендәрҙәй дәү тәпәйе менән киҙәнеп, битемә һуҡты… Мин ҡулдарым менән йөҙөмдө ҡапланым да, күҙҙәремде асып, бармаҡтарым араһынан януарҙы эҙләйем. Ә унда…унда айыу юҡ инде, ул әҙәм ҡиәфәтенә кереп, миңә өҫтән аҫҡа ҡарап, тәмәке төтәтә… Генка Шприц!

Янбашыма ҡаты тибеүҙән аяғыма баҫырға булғайным, ҡабат тибеп кире йыҡтылар. Улай ҙа, терһәктәремде ҡаршы ҡуйып, һаҡланып өлгөрҙөм. Йоҡомдан арынып, ысынбарлыҡҡа ҡайта алмай буталам. Төшөммө был, әллә өнөммө? Генка Шприц ҡайҙан килеп сыҡҡан бында? Янында тағы ике иптәше бар… Баш өҫтөндә ай балҡый, тирә-йүндә – һыуҙай ай яҡтыһы. Сатырҙы, һүнгән усаҡты яҡтыртып, ике ҡаргиҙәр тора. Арыраҡ ике эт ҡанһырап ята…

Ул да булманы, тегеләр сатырға кереп йоҡлап ятҡан Ғилманды аяғынан һөйрәп сығарҙылар ҙа аяуһыҙ типкеләй башланылар. Тик шунда ғына янымдағы хәлдәр йоҡо селтәрҙәренән, ниһайәт, арынып, бар дәһшәте менән зиһенемә бәреп керҙе.

Кинәт кенә ҡуҙғалып, Ғилманды туҡмаусы ирҙәрҙең берећен аяҡ салып ергә ауҙарҙым, икенсеһен тибеп йыҡтым. Тегеләрҙең аҙап ҡалыуынан файҙаланып, ҡарҙа йөҙтүбән ятҡан дуҫымдың билендәге хәнйәрен ҡынынан һурып алдым да, торорға маташҡан ирҙе быуып, айҙай ялтыр бысаҡ йөҙөн боғаҙына терәнем.

Генка Шприц ҡулындағы мылтығын тороп ултырған Ғимранға тоҫҡаны. Миңә иғтибарлап ҡарағас, уның күҙҙәрендә сикһеҙ ғәжәпләнеү сағылды.

– Ба-а-а! Майор әфәнде, һинме ни был?! Бынағайыш, яҙмыш ҡайҙа осраштырҙы беҙҙе!

– Әллә ҡыуанаһың инде?

Мин, ҡулымда тыртанлай башлаған ирҙең муйынынан нығыраҡ һығып, бер аҙ артҡа сиктем. Быныһы – Яшка-гусар, ахыры, Генканың ҡуштаны.

– Ҡыуанмай ни! Мин һине бөтөнләй юғалтҡайным бит! Ҡон ҡайтарып булмаҫмы ни, тип бошона башлағайным хатта.

– Шприц, әлеге мәлдә, ҡон-ҡоһор юллап, эште олоға ебәрһәк, һин дә бынан иҫән-һау ҡотола алмаясаҡһың. Төрмәлә дөмөккөң килмәйҙер.

– Әлбиттә, ирекә ни етә, – тине Генка вайымһыҙ ғына. Уның өҫтөндә баштан-аяҡ йылы аҡ һырма. Генка Шприц ҡуян түгел, күк бүре шул йәйен дә, ҡышын да бер төҫтә. – Әммә, ҡон алыр өсөн быңдай уңайлы осраҡты яҙмыш миңә үҙе биргәндер, тип иҫәпләйем мин. Шуға ла, кисерә күр, бөгөн ҡан ҡойошһоҙ булмаясаҡ. Үсем ҡаты һиңә, беләһең. Башыма алтатар терәп, төрмәгә яптың, унан һуң да ҡанымды аҙ эсмәнең. Ебәр Яшканы, юғиһә иптәшеңде сәсрәтә атам!

Генка Шприцты ваҡытында туҡтатырға кәрәк, сөнки уның һүҙе бер. Яшка-гусар Ғилман дуҫымдың тырнағына ла тормай, уны һуйыуҙан юғалтыуҙар тигеҙләнмәйәсәк.

Артына ҡаты тибеп, Яшка-гусарҙы ҡулымдан ебәрҙем. Ул һөрлөгөп усаҡҡа йығылды ла, ҡуҙға бешеп, ырғанлай-сәбәләнә өҫ кейеменә тоҡанған утты һүндерә башланы. Генка Шприц ҡулымдағы хәнйәргә күрһәтеп, мылтыҡ көбәген Ғилмандан алып, миңә тоҫҡаны.

– Юҡ инде, – тинем мин, Ғилмандың алдына баҫып. – Янына ебәрмәйем…

Һиҙәм: Генка Шприц шикләнә, килеп тыуған сетерекле хәлдә нисек итеп сисергә белмәй. Ул ҙур кинәнес менән йәнемде алыр ине лә, тик эҙ ҡалдырыуҙан шөрләй. Буран тынғас, ҡар өҫтө аҡ ҡағыҙҙай булып, ҡәләм менән яҙғандай, ҡыпыш иткәнгә лә һыҙылып тора. Енәйәткә шаһит булырлыҡ сит кешеләр ҙә күп.

Генка Шприцтың ымлауынан ярандары, мылтыҡтарын беҙгә төбәп, яҡыныраҡ баҫты. Береће – Ринат, әүәлге минең ошаҡсым. Ул миңә ҡарамай, ҡарашын тик ситтә тота. Уның аша Генка Шприц тураһында күп белдем мин, бүлек етәксеһе полковник Козлов балиғ булмаған ҡыҙҙарҙы һатыуға бәйле һуңғы осраҡта мине «һатмаһа», әлеге мәлдә Ринаттың хужаһы, бәлки, төрмә ҡандалаларын туйҙырып та ятҡан булыр ине. Минең, был хәлдән нисек тә ҡотолорға теләп, хужаһына шул хаҡта һөйләремдән шөрләй, ахыры. Ҡурҡма, байғош, әлеге хәлдең ахырында мәйет сыға ҡалһа ла, уның иҫәбе икәүҙән уҙмаҫ…

Генка Шприц, усаҡ янындағы түмәргә ҡунаҡлап, мылтығын тубығына һалды ла боҙҙай һалҡын күҙҙәре менән миңә тексәйҙе.

– Нисек уйлайһың, – тине ул, кәңәш һорағандай. – Ошонда икегеҙҙе лә үҙегеҙҙең мылтыҡтарығыҙҙан дөмөктөрөп, бер-берећен атҡандар, тип милицияға хәбәр итһәк, беҙгә шик төшмәҫме икән? Аҡылдарын юйғансы эскәндәр ҙә һунар улъяһына талашып атышҡандар, тиерҙәр. Һин, әүәле милицияла

эшләгәс, төрлө хәлдәрҙе күреп, инеп-сығыр юлдарҙы һәйбәт беләһеңдер? Күрсәле, мәлғүнде, нисегерәк мыҫҡыл итеп ултырасы?

– Ә уның ни ғәйебе бар? – тип эргәмдәге Ғилманға ымланым. – Өйҙә уны ике балаһы, ҡатыны көтә.

– Ул мине алданы, – Генка Шприц ҡуйынынан фотоһүрәт сығарҙы ла аяҡ аҫтыма ташланы. – Беҙ кисә, айыу аулайбыҙ тип, ышанып йөрөгәйнек. Ә унда, өң эсендә, һин ултырғанһың магнитофон тотоп. Мин, егеттәр, һеҙгә ысын күңелдән үпкәләнем.

Фотоһүрәткә ҡарайып төшкән өң ауыҙында, аҡ тап булып, кеше йөҙө күренә. Мин… ауыҙ эсенән генә әсе һүгенеп, фотоһүрәтте Ғилманға бирҙем. Дуҫымдың йөҙө ҡанға батҡан. Былай булғас, төн йөҙөндә килеп баҫыуҙарының сәбәбе аңлашылды.

– Барып сыҡмаҫ, Геннадий Самуилович, – иҫкәртеүле яуапланым, тегенең исем-фамилияһына мыҫҡыллы баҫым яһап. – Милициялағы дуҫтарым минең мәйетем янында йөрөгәнендә белеп ҡалһа, шунда уҡ эштең асылына төшөнәсәктәр. Ә унда енәйәтте иҫбатлаусы дәлилдәр табыу... – Хәбәремде тамамламай, сертләтеп төкөрөп ҡуйҙым. – Имен-аман ошо урында айырылышып, икебеҙ ике яҡҡа ҡарап китеүгә етмәҫ.

Тынлыҡ урынлашты. Ринат менән Яшка-гусарҙың мылтыҡтары, беҙҙе күрмәгәндәй, ярты яҡҡа төбәлгән. Үҙҙәре, ҡиәфәттәренә ҡарағанда, сығырға торған афәттән ҡурҡып, ҡуяндай ҡасып китергә әҙерҙәр. Ваҡ бурҙар улар, кешегә күрәләтә мылтыҡ терәп атырға йөрәктәре етмәҫ. Өҫтәренә ырғып һаңғәҙәтә уңлы-һуллы һуғырға ла булыр ине, тик уларҙан арыраҡ хужалары ултыра. Генка Шприцтың ҡулдары ҡалтырамаҫ, ул шикһеҙ атасаҡ. Юҡ, был ҡәбәхәттән яҡшылыҡ көтөп булмай, яуызлыҡ ҡылмайынса, бөгөн бынан китмәҫ ул.

Генка Шприц уйсан ҡиәфәттә усаҡ ҡуҙында торған табанан ит киҫәге алып еҫкәне лә, йөҙөн һытып, утҡа ташланы.

– Дөрөҫ уйлайһың, майор, – тине лә, уҫал көлөмһерәп, бармағын мылтыҡ тәтеһенә һалды. – Был осрашыуҙы мин күптән көтә инем. Ҡон алыр өсөн шундай уңайлы осраҡты юғалтып булмай. Юғиһә, тағы ҡасан форсат тыуа әле… Хаҡһыҙлыҡ менән төрмәгә ябып рәнйеттең мине. Асылда мине наркота өсөн түгел, ә йәшәргә теләгәнем өсөн бикләнең һин. Һәр әҙәмдең йәшәгеһе килә, майор, был гонаһ та, енәйәт тә түгел…

– Олегтың йәшәгеһе килмәй инеме ни? Һеҙ уны үлтерә яҙғансы туҡмап, ғәрипкә ҡалдырҙығыҙ. Гонаһ та, енәйәт тә түгелме ни шул?

– Тап шуның өсөн, ғәйебемде раҫлаған дәлилдәр табып, уларҙы хөкөм барышында иҫбатлап, мине яуапҡа тарттырһаң, һиңә үпкәләмәҫ тә инем. Ә рәнйеү – әҙәм күңелендә аҡ ҡағыҙға төшкән ҡара тап һымаҡ. Ҡайһы берәүҙәр, рәнйеүҙе кисерәм тип, шул тапты юйып маташа. Әммә ҡағыҙ бите бысрай, боҙола, хатта тишелә. Тик мин улай эшләмәйәсәкмен. Һин, майор, бысраҡ ҡулың менән минең ҡағыҙыма кире тамға, йәғни «минус» һыҙҙың. Хәҙер килеп, мин шуны арҡыры һыҙып, ыңғай тамғаға, йәғни минусты плюсҡа әйләндерергә йыйынам. Ә ул – дөрөҫлөктө, тулылыҡты, бөтөнлөктө һүрәтләүсе, ҡыҫҡаһы, ярты донъя табынған әүернә Хоҙай тамғаһы.

Мылтыҡ сәбендә тороуыма ҡарамай, Генка Шприцтың хәбәренән тәгәрәп ятып көлгөм килде.

– Башы боҙоҡ фәйләсүф һин, Генка. Белгең килһә, кирене ыңғайға бороу үс алыуҙы түгел, ә кисереүҙе, ғәфү итеүҙе аңлата. Өнөңдө тыҡ, юғиһә, һинең бысраҡ тәғлимәтеңдән күңелем уйнай.

– Әләйһә, ҡасышлы уйнарға тәҡдим итәм һиңә. Һин ҡасаһың – мин баҫтырам.

Генка Шприцтан ниндәйҙер мәкер сығырын күптән көтә инем инде. Башланды шикелле…

– Урынымдан да ҡуҙғалмайым.

– Ҡуҙғалырһың. Ҡуяндай, үрле-ҡырлы ырғанлап ҡасырһың, башҡа сараң юҡ, – тип Генка Шприц кеҫәһенән алты яһау килтереп сығарҙы. – Күрәһеңме? – тине ул, яһауҙарға ымлап. – Теге саҡтағы һымаҡ, алты яһау. Барыһында ла – айыу йәҙрәһе. Һин ҡасаһың, ә мин һине ҡыуалап атам. Бәхетең булып сослоғоң етһә, ҡотолорһоң. Юҡ икән… Ә инде ыҡҡа килмәй киреләнһәң, иптәшеңде атып үлтерәм. Ғаиләһе етем ҡалыр. Тик һиңә теймәйәсәкмен. Ғүмерең буйы хурланып, намыҫ язаһы кисерерһең. Һин саф күңелле кеше бит, бәлки, ғазабыңа түҙмәй, үҙ башыңа үҙең етерһең…

– Ҡалған ғүмерең төрмәлә уҙасаҡ, Генка…

Ул, битараф ҡына яурындарын йыйырып, иренен бүлтәйтте.

– Яҙмыш булғас, нишләйһең. Мин төрмәнән ҡурҡмайым, миңә уғрылыҡтағы абруйым ҡиммәт. Әйткәндәй, уйындың шарттары насар түгел, үҙең уйлап ҡара. Беренсенән, иптәшеңде үлемдән ҡотҡараһың, һине дөмөктөргән хәлдә лә, мин уға теймәмен, һүҙ бирәм. Икенсенән, сослоғоң етеп, алты йәҙрәнән ялтанып ҡала алһаң, үҙең дә ҡотоласаҡһың.

– Ышанмайым һиңә…

– Дөрөҫ итәһең. Сөнки мин һине, һис шикһеҙ, бөтөрәсәкмен. Алты тапҡыр атыу ҙа кәрәк булмаҫ. Шунан, ни әйтерһең?

Аңлашыла, минең арттан ҡуян баҫтырғандай ҡыуалап, мәсхәрәгә һалмаҡсы, хәшәрәт. Юҡ инде, хурға ҡалғансы, гүргә ҡал... Алдымда торған ике хәстрүште уҙып, тәүҙә Генканы шаңҡытырға кәрәк. Ғилман да, моғайын, ҡарап тормаҫ, хәленән килгәнсе был икәүҙе үҙенә «бәйләһә», һуңынан уларҙы еңеү ауыр булмаҫ.

Әммә Генка Шприц, ни ғилләһе менәндер минең ниәтемде аңлап, кинәт кенә урынынан торҙо ла мылтығын күтәрҙе.

– Шаярма, майор, – тине ул, уҫал йылмайып. – Һин мине беләһең. Яҡшы саҡта «уйын»ға риза бул. Әйтәм бит, шарттар һәйбәт, Хоҙай үҙеңде һаҡлаһа, алты яһау бушағас, бигәйбә булыр. Шунан, ризаһыңмы?

Өндәшмәнем. Иллә-мәгәр үтә лә отҡор мәлғүн шул Шприц. Минең «ауыртҡан» еремде һиҙеп ҡалды. Ғилманды һәләкәттән ҡурсып ҡалыр өсөн барыһына ла әҙер икәнемде белә. Ғилман – ғаилә башы, ә мин йортһоҙ-тормошһоҙ берәҙәкмен. Дуҫым һәләк булып, үҙем иҫән ҡалһам, артабан нисек йәшәрмен?

Генка Шприц һүҙһеҙ генә мылтыҡ көбәгеғен минән алып, Ғилманға төбәне лә бармағын тәтегә һалды. Тиҙҙән йөҙөнә ҡырыҫ тәүәккәллек сыҡты.

– Ҡулың ҡысығас, мине ошонда ғына атырға булмаймы ни?

– Ҡыҙығы бөтә, – Генка Шприц миңә кинәйәле генә ҡараш ташлап, көләмһерәп ҡуйҙы. – Беләһеңме, майор, һуңғы саҡта ниңәлер эсем боша. Шунан арынмаммы тип айыу һунарына барғайным, унда ла алдашып һемәйттегеҙ. Бер кемгә лә ышанырлыҡ түгел, барыһы ла алдаша… Теге саҡта, минең йәшәргә теләүемдән көләп, мыҫҡыллауыңды бермә-бер үҙеңә кире ҡайтарырға теләйем. Үҙеңә тоҫҡалған мылтыҡ көбәгендәге үлемде артың менән тойоп, үрле-ҡырлы ырғанлап ҡасҡаныңды, ҡуяндай дерелдәп йәшенгәнеңде, йөрәгеңде усыңа тотоп Хоҙайға ялбарыуыңды күреп, кинәнгем килә. Минең өсөн дан һунар буласаҡ был. Аңланыңмы инде?

...Ҡаргиҙәрҙәрҙең тоноҡ тауышынан төнгө урман һиҫкәнеп, һауалағы ай менән йондоҙҙар, гүйә, ситкә тайшанды. Ай яҡтыһынан зәңгәрләнгән көрттәр тулҡын-тулҡын булып артта ҡала. Һалҡын һауа битемде ялмай. Генка миңә бер минутлыҡ отош бирҙе. Уның ҡаргиҙәре – һикһән ат көслө «Ямаха». Тура юлда ул миндәге утыҙ дүртле «Буран»ды эт һейгәнсе ҡыуып етәсәк, шуға ла ваҡыт барҙа, араны мөмкин хәтлем һуҙыу фарыз. Миңә нисек тә туғайҙың түбәнге осондағы таллыҡҡа етергә кәрәк. Унда йылғаның ҡаяға бәрелеп, һул ярын терһәктәй мөйөшләп боролған тәңгәлендә өйкөм-өйкөм ҡуйы тал әрәмәләре бар. Боҫа-борғолана шул әрәмәләргә ышыҡланып, Генканы күҙ уңынан ысҡындырмай ғына арттан эйәртеп йөрөткәндә, мине сәпкә алыу еңел булмаясаҡ. Тиҙлеген дә юғалтасаҡ. Уға үтәнән-үтә күренеп торған яланғас таллыҡ аша атыу ҙа ситен, сөнки йәҙрә, һис шикһеҙ, ботаҡ-сыбыҡҡа тейеп яҙа китәсәк. Генкала биш яһаулы МП-153. Туҡтамай, яһауы бөткәнсе бер-бер артлы ата ала. Шуға ла миңә уны яҡын ебәреп, асыҡ урында ҡалырға ярамай. Улай ҙа таллыҡ үҫкән ялан тигеҙ түгел, ул бер-береһенә бүлкәс-бүлкәс булып тоташҡан йомро арҡалы ҡалҡыулыҡтар, түңәрәк соҡорҙар, һай ғына йырындар менән йырмасланған. Улар Генканың ҡаргиҙәрен үрле-ҡырлы һикертеп, китеп барған килеш тоҫҡап атырға бирмәйәсәк, мине йәшерәсәк. Туҡтап атырға булһа инде, мин шул арала унан алыҫайып, боҫоп өлгөрәсәкмен.

Йылғаның һул яры буйлап һуҙылған оҙонса яландың урта тәңгәленә еткәндә, артымда ут балҡыны. Яурыным аша арҡа күҙ һирптем. Артымда һыуыҡҡа ҡатып өлгөрмәгән йәш ҡар өйөрмәһе оса. Тораҡ яғында, гүйә, ут сыҡҡан. Мине ҡыуа төшкән Генка ҡаргиҙәренең яҡтырткысы был. Барған юлыма оҙон күләгәм ятты. Ҡаргиҙәрҙең уттарын һүндерҙем. Ай яҡтыһы асыҡ яланды ҡағыҙ бителәй итеп ағартҡан, хатта ҡарҙағы сысҡан юлдары ла күренеп ята. Ҡыуалап етә килгән яҡтылыҡты тойоп, ҡаргиҙәрҙе йылға ярындағы ереклек ҡырынан ҡыуам. «Буран»ым көтмәгәндә һүнә ҡалһа – уның шундай яман «өйәнәге» бар – йәһәт кенә төшөп, ағас араһына ҡасырлыҡ булһын.

Арттан етеп килгән сағыу яҡтылыҡ, гүйә, минең арҡамды бешерә. Генка Шприц арабыҙҙы, утыҙ аҙым самаһы ғына ҡалдырып, ҡыҫҡарткайны инде. Барған юҫығымда тарбағай ҡайын менән муйыл ҡыуаҡлығы төҫмөрләнде. Шунда эҙәрләүсемдең ҡаргиҙәрен бер аҙ һулға борғанын һиҙеп ҡалдым. Артымда уйнаған ҡар буранынан китеп, мине сәпкә алыуы, буғай... Кинәт борғолап, ҡаргиҙәрҙе бер уңға, бер һулға ташлайым... Шул саҡта йөҙөмә ҡайнар тынын бөркөп, күҙ алдымдан ниҙер осоп үтте... Уның артынса икенсе йәҙрә, ҡаргиҙәрҙең ни еренәлер тейеп, шаҡылданы, әммә ҡорос атым, бер ни булмағандай, алға елеүен дауам итте. Ул да булманы, «Буран»ды кинәт кенә һулға алып, ҡайын менән муйыл ағаслығын арала ҡалдырҙым.

Күренеүенсә, Генка шаярмай. Сәбенә тоҫҡаған әҙәм генә шулай яҙа ата.

Сәсәй-бышҡыра дыулаған ҡорос атымда, ҡар туҙҙырып, төнгө ялан аша еләм. Һауала көмөштәй ай сайҡала, йондоҙҙар һикерешә. Бар нәмә, йыһан гыуаһлығында барған үлемесле мажаранан ҡурҡып, боҫоп ҡалғандай.

Генка Шприц «Ямаха»һында, ауыҙынан ут бөрккән аждаһалай булып, ҡабаттан ҡойроғома баҫҡан мәлдә генә мин, таллыҡҡа етеп, ҡуйы әрәмә ышығына керергә өлгөрҙөм. Теге артымдан төштө. Мин, яланғас таллыҡ аша эҙәрләүсемдән күҙемде алмай, әрәмәне әйләнеп йөрөйөм. Ереле-ваҡлы бихисап ботаҡтарын сатрашлап үҫкән таллыҡтың киңлеге ҡырҡ аҙымдай барҙыр. Түңәрәк таллыҡты уратып өс әйләндек. Ҡыуып та етә алмай теге, етә яҙғанда атырға ла форсаты юҡ, сөнки ҡаргиҙәре соҡор-түңгәктә бер туҡтауһыҙ аунаҡлап, мылтыҡ тоҫҡарға бирмәй.

Был әйләнсектең сиге билдәһеҙ ине. Генка Шприцтың ошо хәлдән нисек сығырға белмәй тәҡәтһеҙләнеп, теш шығырҙатҡанын ишеткәндәй булам. Ләкин ҡыуанырға иртә. Генканың атылмай ҡалған тағы дүрт яһауы бар. Мин нисек тә шуларҙы аттырырға тейешмен. Дөрөҫөндә иһә теге донъяға күсер өсөн миңә берәүһе лә етә бит.

Генка Шприц, таллыҡтың арғы ҡырында туҡтап, әрәмә аша ҡаргиҙәренең яҡтырҡысын миңә йүнәлтте. Күҙ сағылдырғыс нурҙар пәрҙәһе артында мин уны бөтөнләй күрмәйем. Мылтығым булһа, бер атыуҙан селпәрәмә сәсрәтеп, һүндерер инем дә…

Уң яғымда һай ғына соҡор бар. Һөҙәк кенә ике бүлкәс араһынан уҙған арауыҡ күршеләге таллыҡҡа илтә.

Тап шул мәлдә биш аҙымдағы әрәмә ситенә һауанан, ҡарайып, нимәлер килеп төштө. Күңелемдә ҡупҡан ниндәйҙер иҫкәртеүгә бойһоноп, ҡаргиҙәремде кинәт кенә урынынан ҡуҙғаттым да һулдағы соҡорға төштөм. Артымда, гөрһөлдәп, ут бағанаһы ҡалҡты.

Үәт, ҡәбәхәт! Граната ташланы бит!

«Буран»ымды ажғыртып, күрше әрәмә ышығына ашыҡтым. Күҙ асып йомғансы артта ҡалған ҡалҡыулыҡтар мине, үҙҙәренең ышығына алып, аҙ ғына ваҡытҡа артымдан килгән дәһшәтле яҡтылыҡтан йәшерҙе. Ниһайәт, мин ҡуйы таллыҡ артында. Утыҙ аҙым самаһы алда йығылған ағас төпһәһе ҡарая. Ул да булманы, яҡтылыҡ, күҙ сағылдырғыс шарға әүерелеп, әле генә үтеп киткән ҡалҡыулыҡ башына менде лә, тирә-яҡты ус төбөндәгеләй итеп, һалҡын нурға мансыны. Шырлыҡ мине һаҡламай ине инде. Ҡаргиҙәрҙе үкертеп, алдағы ағас төпһәһенә уҡталдым. Һауала төнгө ялағайҙай ниҙер балҡыны. Шул саҡ осамды бесәй тырнағандай булды. Икенсе йәҙрә мин ышыҡланып өлгөргән йыуан ҡайын төпһәһен сәрпәкләне.

Ҡаргиҙәрем бер нисә тапҡыр сөскөрҙө лә һүнде. Тирә-яҡты тәрән тынлыҡ баҫты. Баҡһаң, таллыҡ аръяғындағы ҡалҡыулыҡта торған Генка Шприцтың «Ямаха»һы ла эшләмәй, имеш. Осамды тотоп ҡараһам, усым ҡыҙылланды. Улай ҙа ярам ҡурҡыныс тойолмай, ысынлап та, бесәй тырнағандай ғына.

Генканың ике яһауы ҡалды. Әйткәндәй, миңә төбәп граната ташлауынан һуң уға ышаныс юҡ инде.

– Эй, майор, һин һаман дөмөкмәнеңме ни әле?

– Аллаға шөкөр!

Шыпырт ҡына ҡаргиҙәремде тикшерәм. Бер ҡарауға төҙөк һымаҡ, өҙөлгән-боҙолған ере күренмәй. Ҡабыҙырға маташып, стартерға баҫам. Йәнтәслим сабып тынына сәсәгәндәй ғыж-ғыж килде лә ҡорос атым тынып ҡалды.

– Ҡасышлыға бик сос икәнһең, майор, – тип ҡысҡыра Шприц ут пәрҙәһе артынан. – Ыштаныңды еүешләмәнеңме әле? Бошонма, тиҙҙән ҡойроғоң аҫтына ҡыҙыл нөктә ҡуйып, ыҙаңды сикләрмен!

Ул күбә бейеклегендәге ҡалҡыуҙан – беҙҙе айырған утыҙ аҙымдай таллыҡ аша ҡарап тора. Мылтығынан әлеге йыуан ағас төпһәһе генә һаҡлай мине.

– Ике яһауың ғына ҡалды, онотма!

– Яңылышаһың, майор! – Генканың һаһылдап көлөүенән тын һауа ҡуҙғалып, йөҙөмә һалҡын ел бәрелгәндәй булды. – Егерме яһауым, тағы бер гранатам бар әле!

Һүҙҙәренең раҫ икәнен белдереп, ике тапҡыр атып ебәрҙе. Йәҙрәләр башым тәңгәлендәге ағас олонон сәрпәкләне, береһе фырлап бынан ун аҙымда аҡҡан йылға шаршыһына сумды.

– Беҙ улай һөйләшмәгәйнек! Хәшәрәт һин, Генка!

– Баяғы әйткәнде иҫлә, майор! Бөтәһе лә алдаша, тинем, хәтереңдәме? Һин дә алдашаһың, һинең дуҫың да. Шулай булғас, ниңә миңә лә алдашмаҫҡа?

Стартерға ҡабатлап баҫам. Ике сөскөрҙө лә тымды. Өмөт бар әле…

– Егерме яһауҙы атҡансы тере ҡалырмын, тип юҡҡа өмөтләнмә, майор! Иптәшеңә лә етер әле.

– Генка, һинең аяҡ-ҡулһыҙ ҡалып, дөмөгә алмай ятҡаныңды күрһәм, бар мөлкәтемде хәйергә өләшәсәкмен!

Ҡаргиҙәрҙең тоташтырғыстарын борғолап-тартҡылағас, тағы ҡабыҙырға маташам. Был юлы дүрт тапҡыр «бышҡырҙы». Ҡабына ул…

– Торған еремдән генә, граната ташлап, теге донъяға олаҡтырыр инем дә үҙеңде, майор, һунарҙың ҡыҙығы бөтөр, тием. Танһығым ҡанғансы артыңдан баҫтырасаҡмын әле! Ха-ха-ха!

Торған еремдән биш аҙымға һулдараҡ – текә йылға яры, аръяҡта, ҡарлы түбәһен ай яҡтыһына ағартып, бейек ҡаяташ тора.

Сөскөрөп-бышҡырып та «Буран» тағы ҡабынманы.

– Нимә, майор, ватылдымы ни? Көт, хәҙер ярҙамға киләм…

Генка Шприц ҡаргиҙәрен ҡабыҙҙы ла геүләтеп түбән төштө һәм таллыҡтың арғы осона йүнәлде.

Стартерға баҫам. «Буран» дыулап ҡабынды ла ҡабат һүнде. Ул да булманы, Генка Шприц әрәмәнең арғы осона етеп, был яҡҡа боролдо. Тирә-йүнде һарғылт яҡтылыҡ ялманы.

Йә инде, йә ҡабын, зинһар, алкаш ҡулынан сыҡҡан ыстырам! Хужаңдың ошо ҡоторған эт ҡулынан һәләк булғанын теләйһеңме ни? Ғилманды ла ҡотҡарырға кәрәк, ғаиләһе етем ҡалһа, ҡәберемдә мәңге тулармын бит?

Йылға үрендәге ятыу ярында үҫкән ҡуш ерктә ун ике яһауы менән алтатарым йәшереүле ята. Теге саҡта Генка Шприцтың йәнен алырға көҫәгән алтатарым. Нисек тә шунда барып етергә кәрәк.

Генка Шприц, тиҙлеген өҫтәп, яҡынлаша бара. Арабыҙҙа йөҙ аҙым тирәһе генә юл ҡалды. Тап шунда ҡаргиҙәрем, өгөт-ялбарыуымды ишеткәндәй, тоноҡ ҡына геүләп тоҡанды ла, мин ҡайын төпһәһен урап, алға, әрәмә артына, уҡталдым. Дилбегә буйы ер үткәйнем, көтмәгәндә барған юлым ботаҡтарын тарбайтып арҡыры ятҡан ағас олонона төкәлде. Ҡаргиҙәр менән ағас аша үтерлек түгел. Уң яғымда – ҡуйы таллыҡ, һулымда – текә яр…

Теге тамуҡ шомлоғо артымдан етеп тә килә. Ата ла башлаған булыр ине, тик арабыҙҙағы баяғы ағас төпһәһе ҡамасаулай уға.

Ат бейеклеге яр, убылып йылғаға төшә. Йылғалағы боҙ уйылған, тик яр аҫтында ғына сана һыйырлыҡ ҡарлы арауыҡ ҡалған.

Тиҙлекте мөмкин булған тиклем кәметеп, яр башынан йылғаға шыуып төштөм. Артымда Шприц ҡаргиҙәренең тауышын ишетәм, уның яҡтыһы тирә-йүнде аҡ менән ҡараға сатрашлап, бер туҡтауһыҙ әйләндерә, өйөрөлтә, юлдан яҙҙырып башты әйләндерә. Ҡарлы боҙ өҫтөнән йылға үренә уҡталдым. Һулымда – текә яр. Уң яғымда – тулҡындарын алҡындырып аҡҡан ҡара йылға упҡыны. Ялтаныр, борғоланыр урын юҡ. Генка Шприц, яр башында туҡтап, мылтығын елкәмә терәп тиерлек ата ала. Изге фәрештәм генә ҡулына һуҡмаһа…

Йылға өҫтөндәге күләгәләрҙе ҡасырып, сағыу яҡтылыҡ һибелде. Тимәк, Генка Шприц яр башында. Шартларҙай булып дыулаған ҡорос атыма һырышып, мөмкин булғанса араларҙы алыҫайтырға тырышам. Алда, шаршы башында, боҙ ҡаплаған киң ятыу башлана, шунда барып сыкһам, барыр тарафтарым киңәйәсәк…

Шул саҡ яҡтылыҡ, елпенеп, артта ҡалды ла күпмелер ваҡытҡа мине төн ҡараңғылығына тапшырҙы. Генка Шприц минең юлымдан йылғаға төштө.

Ятыуға сыҡтым да, ҡорос атымдың бар көсөн егеп, аҡ түшәктәй тигеҙ ҡар өҫтөнән остом. Бына, ниһайәт, минең ерегем... Майлы сепрәккә төрөлгән ҡоралымды ҡулыма алғас, йөрәгем йылынды, бар булмышыма, гүйә, тылсымлы көс кереп, зиһенем асылды. Ләззәтләнеп, ҡоралымды усыма ҡыҫтым. Капут һиңә, Генка Шприц, һис шикһеҙ, капут...

Тәжрибәле аусылар, урманда ятҡанда, тораҡтарынан ситтә һәр саҡ йәшерен ҡорал тота. Урманда ни булмаҫ...

Боҙ өҫтөндә ҡарауһыҙ ҡалған ҡаргиҙәрем тағы һүнде. Йылға буйындағы сәйер тынлыҡ тик шунда ғына иғтибарымды йәлеп итте. Шылт иткән дә тауыш юҡ. Түбәндә, ҡая тәңгәлендә, күҙгә әләгерлек тә оскон күренмәй, әбәк-һәбәкле, күҙ буяҡҡыс ай яҡтыһы ғына.

Теге хәшәрәттең «Ямаха»һы һүнгән, ахыры. Шуны ҡабыҙырға маташып соҡсоналыр. Бынан файҙаланып ҡалыу фарыз. Нишләргә? Ошаҡсы Ринат менән Яшка-гусарҙы ҡоралһыҙландырып, уларҙың ҡулынан Ғилманды алырға ла ҡаргиҙәргә ултырып шылырғамы? Ул саҡта, Генка Шприцтың ярандарын ваҡытынан алда ҡужғытмаҫ өсөн, ҡаргиҙәрҙе ҡалдырып, боҫа-йәшенә генә тораҡҡа йәйәү барырға кәрәк буласаҡ. Тик Шприц ҡаргиҙәрен ҡабыҙа ҡалһа, бығa ваҡыт ҡалмауы бар. Атыш ҡупһа, уның аҙағы билдәһеҙ, Ғилман дуҫымды һәләк итеүҙәре мөмкин. Юҡ, нисек кенә булмаһын, иң башта Генканы туҡтатырға кәрәк. Бар ҡурҡыныслыҡ унан килә. Шаңҡытып бәйләргә лә үҙен, милицияға тапшырырға... Унда күптән зарығып көтәләр уны.

Әммә был ниәтемде нисек итеп тормошҡа ашырырға белмәйем әле. Генка Шприц һиҙеп ҡалһа, мине үҙенә яҡын да ебәрмәйәсәк. Әйткәндәй, мин дә уны иҫән-һау килеш ҡулдан ысҡындырырға уйламайым. Ҡаргиҙәрен төҙәтеп ултырған сағында ғына барып баҫмаһам...

«Буран», был юлы инәлдермәй генә, бер тапҡырҙан ҡабынды. Һөҙәк ярҙан яланға сыҡтым да, ҙур түңәрәк яһап, баяғы таллыҡ артынан һыу буйына яҡынлаштым. Генка Шприцты артынан барып баҫырға ине уйым. Йылғаға еткәс, ҡаргиҙәремде һүндереп, боҙға төштөм һәм бейек яр аҫтынан шыпырт ҡына юғарыға, ҡая тәңгәленә, йүнәлдем.

Бар донъяла хөкөм һөргән тәрән тынлыҡты боҙорлоҡ көс юҡ һымаҡ. Ауыҙ-морономдан сыҡҡан аҡ быу һауаға эленеп ҡала. Аяҡ аҫтында бырхыған ҡырпаҡ ҡар, мамыҡтай тауышһыҙ ғына осоп, кире ята. Ҡыйырсыҡ ай, гүйә, ер өҫтөнә түбәнәйгән дә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән нимәнелер күҙәтә һымаҡ. Ҡош юлы, бихисап осҡондар осорған ялҡындай ләүкеп, бар күкте ялмаған.

Ҡая тәңгәленә еткәс, яр мөйөшөнән һаҡ ҡына сығып, йылға үренә ҡарайым. Минең уйымса, бынан ун аҙым самаһы алда Генка Шприцтың ҡаргиҙәре торорға тейеш. Тик минең күҙҙәрем сәйер бушлыҡҡа төбәлде. Күпмелер ваҡыт ни уйларға ла белмәй ғәжәпләнеп торғандан һуң, яр башынан йылғаға төшкән баяғы юлыма яҡынайҙым. Ҡулымдағы алтатарым шыпырт иткән тауышҡа төбәп ут бөркөргә әҙер...

Ярҙан төшкән «Ямаха»ның эҙҙәре боҙ ситендәге ҡара упҡынға төшөп өҙөлгәйне. Тирә-йүндә бер ни күренмәй, ҡыпыш иткән хәрәкәт, ҡыл тирбәткән тауыш юҡ. Тик боҙо уйылған йылға ғына, алҡынып торған ҡараһыу тулҡындарын бейетеп, бер ни булмағандай аға ла аға...



**Мәүлизә**
**ӘХМӘТЙӘНОВА**

# ӘЛПЕ ЮҒАЛҒАН ЙЫЛ

**хикәйә**

Был йылда Әлпе юғалды. Ҡаҡса ғына оҙон буйлы, ерән сәсле был ирҙе әле хәтерләүселәр барҙыр, бәлки, ҡатыны ла иҫәндер әле, ул шул йылды ашлыҡ келәттәренең мөдире булып эшләне. Шуның арҡаһында китте лә инде уның башы.

Ошо йылды мин тик яттым. Башҡа ваҡиғалар ҙа хәтерҙә ҡалмаған. Ҡышҡа кергәс, оҙон бер көн мин утын ярҙым.

Әллә ҡасанғы көн бит инде, үҙе бөгөн генә булған кеүек. Ниндәй ғәләмәттер, уны иҫкә төшөрөп, ҡабаттан бермә-бер ентекләп, уйҙарымда ғына булһа ла ҡабат терелтеп, йәшәп сығаһым килә. Ул шулай итеп хәтерҙә ярылып ҡалған – әҙәм балаһының мейеһендә үткәндәрҙе һаҡлай торған урын булһа, бына ошо көн унда ситкә сайпылмай-нитмәй кереп ятҡан. Ни эшләп шулай булғанын мин бер нисек тә әйтеп аңлата алмайым, әммә шунының раҫ: ул көн, ҡыйбатлы рам эсендә торған рәсем кеүек, туҙан бөртөгө лә ҡунмайынса, күҙ алдымда ғына эленеп тора.

Бәлки, ул саҡта йәш сағым булып, был донъяла минең көс килмәҫлек бер эш тә юҡ булып тойолғанғалыр. Хәҙер шул саҡтарҙы хәтерләү генә лә үҙ-үҙемә ышанысымды арттыра кеүек. Әллә йәш саҡтағы мин-минлек, ҡартайғас, шулай һағындырамы?.. Ниндәйҙер бер сәбәбе барҙыр, һәр минутын, һәр секундын ептән үткәрәһе килә.

Ҡышҡы һалҡын бер көн. Әйтерһең дә, был донъяла бер ерҙә лә башҡа тормош юҡ. Тынысҡына йәшәп ятҡан ауыл ситендә ятҡан бер урам да һәм уны

---

*Мәүлизә Әхмәтйәнова (1960) Мәсетле районы Теләш ауылынан. БДУ-ның филология факультетын тамамлай. Мәсәғүт педагогия училищеһында уҡыта, район гәзитендә эшләй. Ямал-Ненец автономиялы округының Тарко-Сале ҡалаһында 25 йылға яҡын балалар уҡыта. Әлеге ваҡытта тыуған яғына ҡайтып, Оло Ыҡтамаҡ ауылында йәшәй. «Ағиҙел»дә тәүге тапҡыр баҫыла.*

буйлап үткән сана юлы бар. Шунан көнөнә дүрт мәртәбә малсылар йөрөй. Иртән улар фермаға эшкә китә, төшкә табан кире ҡайта, кискелеккә улар был юлды тағы бер тапҡыр урай, һәм тирә-яҡты тынлыҡ баҫа. Бары икһеҙ-сикһеҙ зәңгәр һауа, өнһөҙ ятҡан урман ҡаплаған тауҙар, ҡалын боҙ аҫтында аҡҡан йылға һәм ап-аҡ ҡар. Бөтә ер өҫтөн ҡаплаған ап-аҡ ҡар.

Мин ауылға ҡайттым. Әллә кем булып, сумаҙандар күтәреп, уҡырға керергә йыйынып сығып киткәйнем, булманы. Себер яҡтарына барып эшкә урынлашырға уйлағайным, барып сыҡманы. Бер ҡалала ниндәй генә ишеккә килеп төртөлмәйем, һәр береһендә бары бер генә һүҙ яҙылған ҡағыҙ йәбештереп ҡуйғандар, русса яҙылған ул һүҙҙең мәғәнәһе хаҡында мин бер канторҙан икенсеһенә йөрөгәндә бик оҙаҡ баш ваттым. «Ойошмабыҙ тарҡалды һәм яңынан ойошторласаҡ», тип яҙылған ине унда. Бер ергә лә кәрәкмәй булып сыҡтым. Шулай мин бер йылға һәр төрлө исемлек теҙмәләренән төшөп ҡалдым, журналдарға, ведомость ҡағыҙҙарына эш сәғәте лә, «н» ҡуйыусы ла булманы.

Үҙ иркемдә, үҙемә үҙем хужа булып йәшәгән ошо көндәрҙә мин төрлө уйҙар менән йөрөнөм, башта бик көйөндөм, аҙаҡ үҙемде шулай тынысландырған булдым: өлгөрөрмөн әле, әллә ҡайҙа ҡасмаҫ был ығы-зығылы, мәшәҡәтле, кешенең яҙмышына килгәндә уны тирмән ташы кеүек әүәләгән был донъя, бер нәмә лә булмаҫ әле, бер-ике йыл, ағымға эләккән юнысҡы шикелле, болғансыҡ һыуҙа әйләнеп йөрөмәһәм. Әлбиттә, туған-тыумасаларҙың былай тик ятыуыма эстәре бик бошто, ә мин кеше һүҙенә бик тә иҫе китә торған йәштә түгел инем, әллә нимә тиһендәр, тип уйлай бирҙем. Әсәйем дә минең өсөн көймәне, сөнки уға иҫән-һау, тамағым туҡ, өҫтөм бөтөн булһа, шул етә, ә былай уға ҡайғырырға бер сәбәп тә юҡ, төпсөгө унын эргәһендә. Мин ул саҡта бик йәш инем шул, шуға күрә мин көтәһе тормош әле бик йыраҡта кеүек булып тойолғандыр.

Көн дә иртән әсәйем, ике тәҙрә араһындағы стенаға беркетелгән календарҙы йыртып тормаһа, мин бөгөн нисәһе, аҙнаның ниндәй көнө икәнен дә белмәҫ инем. Телевизор күрһәтмәй, берәүҙәре әйтә, ҡайҙалыр нимәлер емерелгән дә, шуны төҙәтә алмайҙар, икенселәре һөйләй, имеш, беҙҙең яҡтағы бейек тауҙар ҡамасаулай икән, ә элек көн оҙоно яңғырап ултырған радио ла һөйләүҙән туҡтаған ине. Әммә быларға бер ҙә иҫем китеп барманы, киреһенсә, был рәхәт тормошҡа хатта ки өйрәнеп киттем. Кистәрен әсәйем, йылыға арҡаһын терәп, бәйләм тота, мин мейес яғам, ауыҙын асып утын өҫтәйем, күмер төшкәс, самауырҙы ҡуям, бәрәңге ырғытам, бер ярты сәғәттән өй эсенә тәмле еҫ тарала. Мейестә уйнаған утҡа ҡарап ултырғанда, һәр кеше шулай, тәбиғәттең яйына төшөп, көҙ, бер төн эсендә бөтөн донъяны ҡаплап, ап-аҡ ҡар яуған бер иҫ киткес яҡты таңды, ҡыш, яҙҙың ҡояшлы көндәрен һағынып, тыныс ҡына йәшәргә тейештер, күрәһең, тигән уйҙар тыуа. Ниндәйҙер бер эш менән көн артынан көн үтә, йоҡларға ятыр алдынан уйлап ҡуяһың: шулай-шулай иткәндә, яҡшы булыр ине, кәйефең булһа, был эште һин иртүк тороп башлайһың, булмаһа, икенсе бер ваҡытҡа ҡалдыраһың.

Ошо оҙон ҡыштың береһенә береһе бик оҡшаған көндәре араһында бары береһе хәтерҙә уйылып ҡалған, башҡалары, күрәһең, муйынсаҡтағы мәрйен шикелле, бигерәк бер төрлө булған, ә бына быныһы, көндө төн, төндө көн

алыштырған рәттән һурып, тартып алғандай, шул тиклем асыҡ булып хәтерҙә ҡалған, һауа, ҡояш, ҡарҙың ниндәй булғаны бөгөнгөләй күҙ алдында. Тағы үҙемде шундай шәп итеп тойғаным иҫтә ҡалған, нимәлер дәрт-дарман биреп торғандыр инде. Минең хәлде тикшереп торорға әллә кем юҡ инде, эргәлә бары әсәйем генә, ул да, үҙ эше менән булып, кереп-сығып йөрөй.

Ә мин утын ярам. Спортсылар, күкрәк киргән булып, мин хәҙер яҡшы формала, тип телевизорҙан маҡтаналар бит, бына мин дә тап шундай шәп инем, һәм үҙеңде шундай итеп тойоу тағы көс өҫтәп тора бит ул. Шундай саҡта үҙ-үҙемә хатта ситтән генә һоҡланып та ҡарап ҡуям. Ҡулда – үткер балта, уның ауырлығын тойоу үҙе бер дәрт өҫтәй, ул элек атайым утын ярған калун түгел, ул ауырыраҡ, еңел генә яңы балта, йоҡа бейәләй аша мин уның ҡулға уңай ғына эшләнгән һабының бөгөмөн тоям, ул минең ҡулда уйнап ҡына тора, өҫкә күтәреп алып, кире һелтәгәндә, теп-теүәл түмәрҙең ҡап уртаһына килеп төшә.

Ул утынды уйламағанда килтерҙеләр, әсәйем бер тракторисҡа ҡасандыр бер ярты биргән дә.

– Эй, онотоп та бөткәйнем...

Онотторорһоң ундай саҡта. Ҡасандыр бер күрше, мал оно килтерәм, тип шулай үтескә алған да, үҙе аҙаҡ борсаҡ оно килтереп алдап ҡуйған, шул хаҡта ул, теге кеше үлгәс тә әле, бер өс-дүрт йыл һөйләп йөрөнө...

Трактор беҙҙең эргәгә килеп туҡтау менән, беҙ тиҙ генә баҡса кәртәһен ҡаҙағынан ҡайырып бер яҡҡа һөйрәттек тә, ул кереп боролғас, бер ун буй типтигеҙ ҡайын ағасын ысҡындырҙыҡ. Бер йыраҡ кейәү тейешле кеше беҙгә уны шул уҡ көндө бысып та бирҙе, мин шунда уҡ өйөп тә барҙым, бына шул ҡар кеүек шығырҙап торған ҡайын утыны хәҙер ҙә күҙ алдында тора. Икенсе көн иртән мин шул утынды ярырға сыҡтым. Түмәрҙәрҙе шәкәр ҡомо шикелле аяҡ аҫтында ыуалып торған ҡарға баҫтырып ҡуям да ҡулыма балтамды алам, һәм... «Шалт! Шалт!» Бөтөн хикмәт шунда: баҫтырып ҡуйған бөтә түмәрҙәрҙе ярып бөтмәйенсә, әле тәгәрәп ятҡандарына тотонмайһың, балта тотҡан ҡулыңды өҫкә күтәреп һелтәйһең дә... «Шалт! Шалт!» Шунан балтаны тура килгән бер ағасҡа ваҡытлыса сабаһың да бер ҡат ярылған түмәрҙәрҙе, уйынсыҡ һалдаттарҙы теҙгән шикелле, аяҡҡа баҫтырып сығаһың. Тағы ҡулыңа балтаны ҡыҫып ҡына эләктереп алаһың да, бер ҡат... «Шалт! Шалт!» Бөтәһен дә ярып сыҡҡас, аяҡ аҫтында аунап ятҡан бөтә ағастарҙы бер рәткә теҙеп ҡуяһың. Туң ағастар бер-береһенә шаҡ-шоҡ бәрелә, уларҙан урман еҫе аңҡып тора. Шулай яйлы ғына итеп маташа торғас, минең эргәмдә ярылған утын өйөмө арттандан-арта бара. Шул тиклем онотолоп киткәнмен – ҡаршылағы күршенең беҙгә кергәнен дә һиҙмәй ҡалғанмын.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, ул көндө минең бер кемде лә күрәһем килеп, ҡыжырап тормай инем, миңә бер үҙемә лә бик тә рәхәт кенә. Эш менән булғанда ҡарап тороусылар артыҡ, бигерәк тә онотолоп китеп эшләгәндә эргәләге кешене күрмәйһең дә, ишетмәйһең дә. Етмәһә, тирә-яҡта шундай тынлыҡ, бары балта сапҡан тауыш ҡына әрәмә буйлап яңғырап китә лә туҡтай, шуға күрә, ниндәй генә яҡын күршең булмаһын, ул да артыҡ кеүек. Әммә күрше рөхсәт-фәлән һорап тормаған, минең янға килгән дә, бер йыуаныраҡ түмәр

өҫтөнә аяғын аяҡҡа һалып менеп ултырған, терһәген тубығына терәгән дә тәмәке көйрәтә. Ярар инде, ултырһын, һиңә эшләргә ҡамасауламай бит, тип тынысландырҙым үҙемде. Әртис – минең күрше, осло теле, тормошта һәр ваҡыт ирмәк күреп, халыҡты көлдөрөргә яратҡаны өсөн алды инде бындай ҡушаматты, бер ҙә юҡҡа бирмәйҙәр уны. Ул сәхнә өсөн тыуған кеше, ысын сәхнәгә сыға алмаһа ла, ауылдамы, баҫыуҙамы – халыҡтың күңелен күрҙе, колхоз механизаторҙары булһынмы, бесәнселәрме – көлдөрөп, барыһының эстәрен ҡатырҙы. Шулай, һәр кемдең үҙ сәхнәһе.

Ул әлеге көндә, инде йәше байтаҡ ҡына булһа ла, бик дәртле генә йөрөгән әсәһе Ғәлимә апай менән йәшәй ине. Йәш сағында, башҡа ауыл егеттәре кеүек, армияла хеҙмәт итеп ҡайтыу менән тракторға ултырҙы, көндөҙ ҡырҙа, төнөн ҡыҙҙар артынан сапты.

Үҙенә күрә түгел, Әртис теләһә ниндәй ҡыҙҙар менән йөрөмәне әле ул. Бер ҡыҙы мәктәпте тик «биш»кә генә уҡып бөткән. Ләйлә, был ғаиләлә балалар күп булһа ла, иң кесеһе, иң иркәһе ине. Атаһы урман ҡараусы, ауылда иң төшөмлө эштә, билдәле булыуынса, кемдең ҡулында, шуның ауыҙында, ә әсәһе ғүмере буйы мәктәптә башланғыс кластарҙа балалар уҡытты. Бик яҡшы уҡытыусы булған, тиҙәр, миңә эләкмәне, беҙҙе Мәмдүҙә апай уҡытты. Социализмда йәшәһәк тә, ауылда байҙар, ярлылар һәр ваҡыт булды инде, йәшерен-батырыны юҡ. Ләйләнең ата-әсәһе икеһе лә ай һайын ҡулдарына аҡса алып торҙо, ә колхозда эшләгәндәргә нимә, бригадир эш көнөн яҙып бара ла, көҙ ашлыҡ бирәләр, ул да йүнле түгел, малға ғына ашатырлыҡ, ә халыҡ, башҡаһы булмағас, әпәй бешерә. Ул әпәйҙең тышы кирбес кеүек ҡаты була, ә эсе – сеп-сей.

Был ҡыҙ менән бик матур ғына йөрөнөләр, тик ул ҡайҙалыр уҡып белем алды ла шунда уҡ эшкә лә ҡалды, башҡаса ауылға ҡайтманы.

Әртистең икенсе ҡыҙы ла аҡ әпәй ашаған ғаиләнән ине. Байҙың бер бөртөк ҡыҙы. Мәктәп директоры, уҡытыусы Һәҙиә апайҙың «Артек»тарҙа ғына ял иттереп, өф итеп кенә үҫтергән Зиләһе. Мәктәпте тамамлағас, апай ҡыҙын бик ауырлыҡ менән уҡырға ерәтте, тик тегеһе бер йыл уҡынымы-юҡмы, ташлап ҡайтып килде лә, шәүлә кеүек, Әртис артынан эйәреп йөрөй башланы. Йәйҙәрен егет соланда йоҡлап йөрөй, Ғәлимә апай бер төн ҡараңғы соланда Зиләнең аҡ плащын күреп ҡалған да урам яңғыратты:

«Илтеп ҡуй, кеше балаһын ни бысағыма эйәртеп йөрөтәң... Һинең башың бармы, юҡмы? Һин хут беләңме, кем балаһын алып ҡайтҡаң! Ҡайҙан алғанһың, шунда итеп ҡуй, хәҙер башыңды ярам, малай. Бына суска, ә... Юҡмы шунда үҙебеҙҙең тиңерәк берәйһе... Кемде тапҡан, ә... Илтеп ҡуй, илтеп ҡу-у-й...»

Шулай эйәртенешеп йөрөй торғас, ата-әсәләрен көйөккә батырып, өйләнеште былар. Баҡса арттарына өй һалып сыҡтылар, ул өй әле лә бар, тик буш ултыра. Уларҙың ике ҡыҙы, ике улы тыуҙы. Тик эстеләр. Тәүҙә һәйбәт кенә донъя көтөп алып киткән кеүектәр ине, йорт тирәләре матур ғына, урман эсендә ултыра, мал-тыуар, баҡса. Эстеләр шул, ҡатыны иренән арттырып ебәреп эсте. Ҡарап торһаң, матур ғына ҡатын ине үҙе, оҙон буйлы, ап-аҡ ҡына битле.

Бер заман ауылда туй бара, шул Зиләнең ҡыҙы кейәүгә сыға. Беҙ, малайҙар, шул тирәлә кемделер булһа ла көтәбеҙ. Ене атылып килеп сыҡты был бисә

ҡапҡанан, әйберен тотҡан ҡулына. Үҙе юл ыңғайына кофтаһының һәҙәптәрен эләктерә, үҙе боролоп артына ҡарай-ҡарай ауылға  табан йүгерә. Күп тә үтмәй, ҡыҙып алған ире килеп сыҡты.

– Тағы ҡастымы алкаш бисә? Бына п-пеләт, ә... Өй тулы кеше, оят бит, оят, – тип һүгенде лә, лас итеп төкөрөп, кире кереп китте.

Шунан берәйһе килеп әйтә Әртискә, Зиләң шунда-шунда ята иҫереп, тиҙәр. Барып алып ҡайта бисәһен  теге, бәргесләп, өйөнә. Шулай йәшәнеләр инде килде-китте. Ә ҡыҙҙары маладис, икеһе лә уҡып сыҡты. Һәҙиә апай булышты, әлбиттә, яҡшы ғына кейәүгә сығып, ситтә донъя көтәләр. Тик малайҙарының ғына рәте булманы, кесеһе ауылда ҡайҙан эсергә табырға икән тип баш ватҡан егеттәр менән дуҫлашып китте, олоһо ҡалала насар компанияға эләккән, тинеләр. Ауылдан сығып киткән малайҙар йыш ҡына шундай дуҫтар табып, насар юлға баҫҡас, әсәйем ҡаланы минең кеүек ауыл малайҙары өсөн әҙерләнеп ҡуйылған махсус ҡапҡан кеүек күрә ине.

Әртис Зиләһен, бер эсеп йөрөгәненән һуң, ҡәйнәһенә һөйрәкләп илтеп ҡуйҙы ла башҡа өйөнә кертмәне, кесе малайы менән генә йәшәне. Уның да эсә башлағанын күреп, аптырап, хәрби комиссариатҡа барып ҡараны, алығыҙ, тигән, армияға, бәлки, рәт сығыр, былай бөтөнләй малай юлдан сыға бит.

– Һин, абызый, юҡ менән башыңды ватып йөрөмә – тип уға малайының документтарын күрһәтәләр, баш мейеһен рентген аша төшөргән һүрәтендә ҡара тап бар икән. Шунан ул малай ҡайҙалыр юҡ булды, апаларына тағылып, ситкә сығып китте, буғай.

Шулай  Әртис бөтөнләй яңғыҙ ҡалды, был заманда ул бөгөн таралам, иртәгә таралам тип торған колхоздың ашлыҡ һалынған келәттәрендә ҡарауылсы булып тора ине.

Шунан ауыл халҡын шаҡ ҡатырған бер хәл булды. Аяҙ көндө йәшен һуҡҡандай, ашлыҡ келәттәре мөдире Әлпе юғалды. Ғүмере булмаған хәл инде быныһы. Кеше юғалырлыҡ ҙур ҡала түгел дә инде. Бөтөн ауыл аяҡҡа баҫты, эҙләмәгән ер ҡалманы, тапманылар. Машиналарға тейәлеп килеп тулған милиция Әртисте ҡулға алып, районға алып китте. Был ваҡытта уның Зиләһе иҫән ине әле, әсәләрендә торҙо, аҙаҡ уныһы ла шулай бәрелеп-һуғылып, теләһә кем менән эсеп йөрөй торғас, бөтә кешене  ах итереп, аҫылынып үлеп ҡуйҙы.

Әллә  бер ҙә юҡҡа килеп кергән тиһегеҙме, түмәр өҫтөндә, аяғын-аяҡҡа һалып, тиккә генә ултыра тиһегеҙме? Ултырыр Әртис һиңә тикмәйгә. Хәбәрен һөйләргә кеше эҙләп, эсе бошоп килеп керҙе ул минең янға. Ғәлимә апай туйған инде, уны көн һайын тыңлай торғас. Бына ярты йыл булалыр, тылҡый  ҙа тылҡый ул бер хәбәрҙе. Ә минең өсөн барыбер, һөйләһен әйҙә, эсенә һыймағас. Әле ул минең утын ярып туҡтағанды көтөп ултыра, бына өйә генә башлайым, шунан файҙаланып, тынлыҡта дауам итәсәк ул хәбәрен. Балтаны ҡуйып, ян-яҡта сасрап ятҡан  утындарҙы өйә башланым.  Ул мине иғтибар менән генә күҙәтеп, танауын баш бармағы  менән алмаш-тилмәш баҫып һемгерҙе лә һөйләй ҙә башланы.

– Аларҙы ла кеше туҡмарға яҡшылап өйрәтәләр икән, менттарҙы әйтәм. Күгәргән ере булмаһын өсөн, башта бер бетле тун кейҙертәләр, шунан ғына

бирәләр кәрәгеңде... – Аяғын-аяҡҡа һалып, түмәр өҫтөнә ҡай арала менеп ултырған тиң, тәмәкәһен дә көйрәтеп ебәргән, бөтмәҫ хәбәрен дә тылҡый башлаған. – Үҙ аяғыңда баҫып торғанда әле нисауа, малай, битеңде генә ҡулың менән ҡаплайһың да, улар һине, тоҡ тултырылған ҡапсыҡ шикелле, бер-береһенә еффәреп, бәргесләйҙәр, бына шунда оҙағыраҡ үҙ аяғыңда баҫып торорға тырышырға кәрәк. Тештәрең йәлке, әлбиттә, ныу, унырын ҡуйҙыртырға була... Ә бына инде йығылып ятҡанда башлы ботинкалары менән типкеләй башлаһалар... Бөттө башың. Бөйөр менән бауырҙы ҡуйҙыртырға ул бит һиңә теш түгел. Шулай бит?

Бик күптән ингән, ахырыһы, уның бик оҙаҡ тауыш-тынһыҙ ғына ултырыуы хатта аптыраш. Ауыҙында тештәре ҡойолоп бөткән, башындағы һирәк сәстәре ап-аҡ, таяҡҡа таянып, минут һайын ҡорх-ҡорох йүткергән минең күршегә, ҡырҡтан саҡ ҡына уҙған булһа ла, бер кем дә үҙ йәшен бирмәҫ, ватылып-ҡырылып бөткән ул шулай.

– Шулай кешенең ғәйебен таныталар, ә минең ниндәй ғәйебем бар? Нишләп Әлпене үлтерәйем, ти, инде. Ул миңә ниндәй насарлыҡ эшләгән? Бер насарлығы ла тейгәне булманы. Атамды үлтермәгән, апамдан көлмәгән. Эшкә алды. Беҙ уның менән бына шулай йәшәнек...

Күҙемдең ҡырыйы менән генә Әртистең тырнаҡтары тәмәкенән һарғайған, өҫкә тырпайған баш бармағын күреп ҡалам.

Әртискә, иғтибар менән тыңлайһыңмы уны, юҡмы – барыбер, иң мөһиме, бүлдермәһәләр – шул. Ә мин уға ҡыҫылмайым, үҙ эшем менән булам. Шығырҙап торған ап-аҡ ҡар өҫтөнә тағын бер рәт түмәрҙәр теҙеп сығам, ҡулыма балтаны тотам да: «Шарт!»

Иң мөһиме – туп-тура ғына килтереп бәрергә кәрәк, аҙ ғына ситтән алһаң, утының да ярылмай, сыйылып ҡына китә, етмәһә, аяғыңа ла килтереп бәреүең бар. Шуға мин аяҡты яурын киңлегендә айырып баҫҡанмын. Элек радионан көн дә иртән шундай тапшырыу бара ине. «Иртәнге зарядканы башлайбыҙ. Аяҡтарығыҙҙы яурын киңлегендә айырып баҫығыҙ... Бер, ике...»

Ҡаты, аунап ятҡан ағастарҙы ҡабат баҫтырып сығам. Тынлыҡтан файҙаланып, Әртис дауам итә.

– Эсә инек ҡай саҡта бергә... Ә үлтерергә...

Ҡулыма балта алғанды күреп, ул төпсөгөнән тоҡандырып, яңы тәмәке башлай ҙа хәбәренән туҡтап ҡала. Ярылған утындарҙы тиҙ-тиҙ генә йәнәшәгә өйөп, алдымдағы ерҙе таҙартып, икенсе урынға күсәм, бер-ике аҙнанан бөтә өйөлгән утындарҙы бала санаға тейәп, йортҡа ташып алырмын, аҙыраҡ елләп торһалар, еңеләйеп китә улар.

– Мин ябыуҙа ятҡан арала үҙҙәре табалар бит тегене, Әлпене әйтәм, мәрхүмде... Боҙлоҡҡа төшөрөп ҡуйғандар, тубыҡланып торған шунда. Әйтмәнеләр. Аларҙан бит тужы һорау алғандар, береһе-бер өндәшеп ҡуйһа! Бер КамАЗ ашлыҡ өсөн кешене үлтер инде, йә! Әҙәм йәне бер тин дә түгел тиң, ә... Бүлешә алмағандар. Тегеләре үҙҙәренә бушаттырырға булған, ә Әлпе бирмәгән. Улар бит барыһы ла шәптәр, һәр береһе семейныйҙар... Ә мин нимә, үҙем алкаш, бисәм – алкаш, малайым тужы алкаш, беҙҙең кеүеккә барыһын да һыларға мөмкин. Һыламай торһондар әле...

Дөрөҫөн генә әйткәндә, туйҙырҙы был күрше, яратмайым шулай һин эшләгәндә йәнәшәлә ҡарап ултырғандарын. Башҡа кеше булһа, асыуланған да булыр инем, тик Әртискә нисек асыуланаһың инде, ултырһын инде әйҙә. Йыуан-йыуан түмәрҙәрҙе күтәреп, таҙартылған урынға ташыу менән булдым.

– Әгәр шунда Йәлил брат булмаһа, мине бөтөрәләр ине. Каюк була ине абызыйыңа. Йәлилдең таныш-белеш, үҙең беләң инде, нисә йыл барыһын да дауалай. Ул мине килеп алды, ишетеү менән туп-тура эшенә алып китте. Ә менттар ҡоттары алынып, күҙҙәре тоноп килеп еткәндәр. Ярар инде, абзый, яңылыш булған, имеш. Йәлил улар менән һөйләшеп тә торманы, елтерәтеп ҡыуҙы ла сығарҙы. Минең шундай шәп брат барлығын белмәгәндәр. Белһендәр, бына... «Дело» астылар, эйе... Бына судҡа саҡырып ҡағыҙ килгән, свидетель булып барам инде. Ә миңә группа бирергә итәләр. Ныҡ имгәттеләр, туған... Һау һөйәгемде ҡалдырманылар...

Минең алда һуңғы түмәрҙәр ҡалды, мин уйнап ҡына балатамды күтәрәм дә: «Шалт! Шалт!», үлсәп ярылғандай тип-тигеҙ киҫәктәр ике яҡҡа сәсрәп китә.

Был ҡышҡы көн шундай матур. Һалҡынса ғына, утын ғына яра торған көн, күршенең хәбәре лә кәйефте төшөрмәне. Ул эсен бошорған хәбәрен һөйләп сыҡты ла, күңеле булып, ян-яҡҡа ҡарап, ашыҡмай ғына төтәтеп ултыра. Уның да ашығаһы ере юҡ, эшләрен эшләгән, тиҙҙән уға малай сағында гелән уларҙа ятҡан туғаны пенсия юллап бирергә тейеш. Ул бәләкәйҙән әсәһе һәм ҡарт өләсәһе менән генә үҫте, шуға, ҡасан ҡарама, өйөр малай булған туғандарында йөрөнө.

Һуңғы утынымды өйөп, ярылмаған түмәр өҫтөнә менеп ултырҙым, былдай төптәр байтаҡ ҡына йыйылып китте әле ул. Уларҙы иртәгә калун балта менән ярырмын инде, бәләкәй менән эш итеп килештерерлек түгел.

Ултырҙым да күккә ҡараным, мин утын яра башлағандан әллә ни ваҡыт үтмәгән кеүек тойолһа ла, инде эңер ҙә төшөп килә. Тау артында болоттар ҙа, ағастар ҙа аҙ ғына алланып тора, торбаларҙан нәҙек кенә булып, алға мансылып төтөн күтәрелә. Йәше әллә ни булмаһа ла, ҡарт бабай булған күршем дә өндәшмәне, күрәһең, һөйләр хәбәрен һөйләп бөтөрҙө.

– Һин былай ултырма, бар, өйөңә кер ҙә өҫтөңдө алыштыр, улайһа сирләп китерһең.

Әртис таяғын алды ла, һул ҡулын артына ҡуйып, ҡуҙғалып китте. Ә минең тамсы ла тораһым килмәй, шулай ултырыр ҙа ултырыр инем. Хәҙер күктә йондоҙҙар ҡалҡа башлар, улар йыраҡтан ялт-йолт килеп торорҙар. Күрше дөрөҫ әйтә, мин, тирләп ултырған кеше, тиҙ генә өшөй ҙә башланым, һикереп тороп, өс аҙымда күршемде ҡыуып та еттем. Ул миңә башын бороп ҡарап торҙо ла:

– Эх, рәхәт һиңә... – тине.

Ә миңә, ысынлап та, шундай рәхәт ине, тәнемдә ниндәйҙер еңеллек, тик яурын баштары ғына аҙыраҡ зымбырҙап торған кеүек. Өйгә кереп, өҫтәл янына ултырыу менән, әсәйем алдыма һәр береһе йомортҡа һарыһына оҡшап торған ҙур таба ҡоймаҡ килтереп ултыртасаҡ, уларҙы һап-һары майға манып, һөтлө сәй менән ауыҙ тултырып ашаясаҡмын.

## Милли мәғариф: *МӨМКИНЛЕКТӘР ҺӘМ БУРЫСТАР*

Сер түгел: әҙәм балаһы барыбер ҙә тәү сиратта үҙенең матди хәлен ҡайғыртырға мәжбүр. Күпселек тамағын туйҙырып, өҫтөн бөтәйтеп, йәшәр урынын булдырып, балаларын тәрбиәләгәндә генә тирә-йүнгә күҙ һала башлай. Эйе, үҙен, яҡындарын ҡайғыртмай, халҡын, хатта дөйөм кешелекте уйлағандар ҙа етерлек. Сократ, мәҫәлән, донъяуи мәшәҡәттәрен бар тип тә белмәй, бер ҡат тога *(өҫ кейеме)* менән генә иртәнән кискә тиклем йә майҙанда, йә күләгәлә, йә фекерҙәштәре йортонда йәмғиәткә, йәшәйешкә, кешеләргә ҡарашын белдерә йөрөгән. Йәшәү мәғәнәһен хәҡиҡәтте эҙләүҙә, тапҡанын башҡаларға еткереүҙә күргәнгә был инанысы хаҡына үлемгә барыуҙан да ҡурҡмаған. Илгиҙәр сәсән Аҡмулланың да донъя малы тип суҡынмауы билдәле. Илем, телем тип янған Рәми, эшһеҙ ҡалып, ауылға ҡайтып китергә мәжбүр булғанда ла, үҙ инаныстарынан баш тартмай – халҡына тоғро ҡала.

Күренеүенсә, бөгөн бары үҙен генә ҡайғыртырға мәжбүр, ойоған намыҫлы күпселекте иртәгә булһа ла уятыу өсөн кемдер янырға тейеш. Тап ошондай шәхестәр «Мин янмаһам, һин янмаһаң, ул янмаһа – был ҡараңғылыҡты кем сигендерер?!» тигән принцип менән йәшәй.

Беҙҙең милли мәктәптәр, тәү сиратта, тап ошондай ихтыярлы, намыҫлы, халҡы өсөн фиҙакәрлеккә барырға әҙер шәхестәр тәрбиәләүҙе маҡсат итһен ине.

Аксиомаға әйләнгән хәҡиҡәт: Рәсәй йәмғиәтенең күп милләтле булыуы илебеҙҙең социаль-иҡтисади һәм сәйәси тормошоноң бөтә яҡтарына ла йоғонто яһай. Милләттәрҙең этномәҙәни ихтыяждарына бәйле сәйәсәтте тормошҡа ашырыу иһә туранан-тура мәғариф системаһы менән бәйле. Тап ошонда тел һәм мәҙәниәтте һаҡлау, өйрәнеү, үҫтереү проблемалары хәл ителә лә инде.

Башҡортостан Республикаһында төрлө яҡлап уйланылған тел сәйәсәте үткәрелә. Дәүләт һәм туған телдәр хөкүмәт яҡлауы аҫтына алынды, уларҙың ҡулланылыу даирәһен киңәйтеү буйынса ла ҙур эштәр башҡарыла. Ошо көндәрҙә Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү буйынса маҡсатлы программа эшләнеп бөттө. Был – «Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһындағы» Законды тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән өсөнсө программа. Тәүге ике программа сиктәрендә байтаҡ эш эшләнде. Телгә алырҙайҙарынан:

- *Башҡорт теле буйынса байтаҡ электрон дәреслектәр һәм ҡулланмалар донъя күрҙе;*
- *Башҡорт телен үҫтереүҙең хоҡуҡи нигеҙҙәре формалаштырылды;*
- *Туған телен уҡыусы башҡорт балаларының һаны 99 процентҡа етте;*
- *Башҡорт теле һүҙлектәрен үҙенә туплаған электрон фонд барлыҡҡа килде;*
- *Информацион технологияларҙа башҡорт теленең бер нисә шрифты эшләнде һ.б.*

Йән башына ҡарап финанслау шарттарында милли мәктәптәр селтәрен, тулыһынса булмаһа ла, һаҡлап ҡала алдыҡ. Бөгөн милли мәғариф системаһында 578 дөйөм белем биреү мәктәбе һәм 470 филиал иҫәпләнә, был – республика мәктәптәренең дөйөм һанының 40 процентын тәшкил итә. Республикала 6 телдә белем бирелә, башҡорт балаларының – 38%, татар балаларының – 7,7%, мариҙарҙың – 16,2%, сыуаштарҙың – 8,8%, удмурт балаларының 9,5%-ы туған телендә белем ала.

Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү мәктәптәрендә 14 туған телде өйрәнеү ойошторолған. Дөйөм алғанда, рус милләтенән булмаған уҡыусыларҙың 71,4% туған телендә уҡый һәм уны предмет булараҡ өйрәнә. 2011–2012 уҡыу йылында республиканың 345 мәктәбендә һәм 332 филиалында башҡорт телендә уҡытыу алып барылды. 80 мәктәптә 540 башҡорт кластары эшләп килә. 816 мәктәптә, шул иҫәптән 176 филиалда, башҡорт теле туған тел булараҡ уҡытыла.

Рус телендә белем алыусы уҡыусылар, әлбиттә, күберәк. Был, иң беренсе сиратта, берҙәм дәүләт имтихандарының тап ошо телдә үткәрелеүе менән бәйле. Милли мәктәптәрҙә урта кластарҙа – өлөшләтә, юғары кластарҙа тулыһынса рус телендә белем алалар.

525 мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында /МББУ/ 17,5 мең бала башҡорт телендә, 326 МББУ-ла 8,5 мең бала – татар, 30 МББУ-ла 1350 бала – мари, 10 МББУ-ла 177 бала – удмурт, 32 МББУ-ла 839 бала сыуаш телендә тәрбиәләнә.

Республиканың юғары һәм урта махсус белем биреү учреждениеларында 7 тел буйынса белгестәр әҙерләү аша кадрҙар мәсьәләһе лә ярайһы уңышлы хәл ителә. Бөгөн мәктәптәрҙә 5349 туған телдәр уҡытыусыһы эшләһә, шуларҙың 4103-ө – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары. 81% башҡорт теле уҡытыусыһы юғары белемгә эйә.

Әммә проблемалар ҙа етерлек. Йәмғиәттә туған телдәргә ҡарата формалашҡан мөнәсәбәт юғары уҡыу йорттарының филология факультеттарына барыусылар һанының ҡырҡа кәмеүенә килтерҙе. Шул арҡала конкурс талаптары ла түбәнәйҙе. Был, үҙ сиратында, киләсәктә мәктәптәргә киләсәк кадрҙарҙың сифатында ла күренәсәк. Был осраҡта беҙ нимә эшләй алабыҙ һуң? Иң тәүҙә – эшебеҙҙе дауам итерҙәй балалар менән даими эшләү, уларҙы филология өлкәһенә йәлеп итеү. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа был йүнәлештә эш ныҡ һүлпәнәйҙе. Хатта үҙе башҡорт теле уҡытыусыһы булып та, үҙ балаларын туған теленә өйрәтмәй, рус класына ултыртҡан башҡорт теле уҡытыусылары хаҡында йыш ишетергә тура килә.

Хөкүмәткә үпкәләй алмайбыҙ, туған телдәрҙе уҡытыуға бәйле тейешле закондар ҡабул ителгән. Башҡортостан Республикаһы Президенты, Хөкүмәте ярҙамында, «Мәғариф» өҫтөнлөклө милли проекты сиктәрендә, профессиональ конкурстар аша ижади эшләүсе туған телдәр уҡытыусыларының хеҙмәтен баһалау ҙа, алдынғы эш тәжрибәләрен пропагандалау ҙа системалы алып барыла.

2007 йылдан бирле, БР Хөкүмәте ҡарарына таянып, конкурс үткәрелә. Яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеүсе рус һәм башҡорт телдәре уҡытыусылары билдәләнә. 5 йыл эсендә 250 дәүләт телдәре уҡытыусылары лайыҡлы баһа алды, аҡсалата ла бүләкләнделәр. 2009 йылдан премияның күләме 50 мең.

Уҡытыусыларҙың һөнәри оҫталығын үҫтереүҙә төрлө кимәлдәге конкурстар, фәнни-ғәмәли конференциялар баһалап бөткөһөҙ роль уйнай. 2011 йылғы конкурста 57 уҡытыусы ҡатнашты. «Йыл уҡытыусыһы-2011» исеменә Өфө ҡалаһынан Толомбаева Эльза Юрис ҡыҙы лайыҡ булды. Балтастан Мөҡимова Гөлсирә, Өфө ҡалаһынан Буранғолова Наилә, Әбйәлилдән Ғәлләмова Зиниә, Ғафури

районынан Мәүлетҡолов Юлай иң яҡшы уҡытыусылар тип табылды. Эльза Толомбаева туған тел уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй оҫталыҡ класында ҡатнашып, «Юғары педагогик оҫталыҡ» номинацияһында беренсе урынды яулап ҡайтты.

Рәсәйҙең мәғариф системаһын модернизациялау тенденцияларын иҫәпкә алып, 2009 йылдың декабрендә БР Президенты Указы менән республиканың милли мәғарифы үҫеше концепцияһы раҫланды. Был документ Рәсәй Федерацияһының Милли мәғариф сәйәсәте концепцияһын, шулай уҡ «Беҙҙең яңы мәктәп» инициативаһын күҙ уңында тотоп әҙерләнде. Ул ике өҫтөнлөклө таяныҫҡа нигеҙләнә: беренсеһе – ерле халыҡ теле булараҡ, башҡорт телен һәр яҡлап үҫтереү һәм икенсеһе – республикала йәшәүсе халыҡтарҙың теле, мәҙәниәте һаҡланһын өсөн шарттар булдырыу. Төп талаптарҙың береһе – туған телдә уҡытыуҙы ойоштороу, сөнки телдең һаҡланыу мөмкинлеге ошо телдә уҡыусы һәм телде өйрәнеүсе балалар һаны менән билдәләнә. Туған телдә уҡытыу юҡ икән, телде һаҡлау тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Был – бер. Икенсенән, бынан 10 – 15 йылдар самаһы элек үк ЮНЕСКО тикшеренеүҙәре баланы сит телдә уҡытыу – уның фекерләү үҫешен тотҡарлауын иҫбатлағайны. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙ һаман, бала русса һәйбәт белһә генә кеше була ала, тигән ҡалыплашҡан фекерҙән ҡотола алмайбыҙ. Рәсәйҙең «Мәғариф тураһындағы» Законына һуңғы йылдарҙа индерелгән үҙгәрештәр мәктәптәргә уҡыу пландарын үҙ аллы һайларға, эшләргә, раҫларға мөмкинлек бирә (32-се статья). Ләкин был мәктәп нисек, нимә теләй – шуны уҡыта ала тигән һүҙ түгел. Мәҫәлән, федераль исемлеккә ингән предметтар уҡыу пландарында ниндәй күләмдә бирелгән – шул кимәлдә уҡытылырға тейеш. Шулай уҡ мәктәптең уҡыу планы башҡа закондарҙың да үтәлешен тәьмин итергә бурыслы. Шул иҫәптән РФ һәм БР «Мәғариф тураһындағы» закондарының 6-сы, 7-се статьяларын. Уларҙа, мәктәп балаларға үҙ телендә белем алыу өсөн шарттар тыуҙырырға тейеш, тип билдәләнгән.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, проблеманы еңел хәл итергә яратыусы ҡайһы бер мәктәп етәкселәре, яңы стандарттарға күсеүҙе милли мәғарифты бөтөрөү тип аңлап, уҡыу пландарының рус мәктәптәре өсөн тәғәйенләнгән вариантын һайлай йәки туған телде бөтөнләй уҡыу пландарынан алып ташлай. Улар быны, ата-әсәләр теләмәй, беҙ уларҙың теләген иҫәпкә алабыҙ, тип аңлата. Элек-электән мәктәп балаларҙы ғына түгел, ата-әсәләрҙе лә тәрбиәләгән. Ни эшләп туған телдәргә бәйле беҙ быны эшләмәйбеҙ? Әсә теленең, халыҡ традицияларының, халыҡ педагогикаһының киләсәк быуынды тәрбиәләүҙә баһалап бөткөһөҙ ролен ата-әсәләргә ныҡлап аңлатаһы урынға, уларҙан ғариза йыйып ултырыусы мәктәп директорҙары бар.

Европалылар һәм американдар милләттәрҙе, телдәрҙе юҡҡа сығарыуҙың иң тәүҙә рухи үҫешкә ҙур зыян килтергәнен күптән аңланы. Бөгөн уларҙың алдынғы ҡарашлы кешеләре мәғариф системаһының төп бурысы итеп конкурентҡа һәләтле шәхес үҫтереүҙе түгел, ә туған телен, халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, тарихын, мәҙәниәтен белгән, ихтирам иткән, уларҙы артабан үҫтерергә һәләтле шәхес тәрбиәләүҙе алғы планға ҡуйыуҙы талап итә. Сөнки халыҡтың быуаттар буйына йыйған тормош тәжрибәһен инҡар итеү – ул үҙең ултырған ботаҡҡа үҙең балта сабыу. Шәжәрәләрҙе барлау ҙа ана шул быуаттар һынауын үткән традицияны яңыртырға ынтылыу ул. Йола бөткән ерҙән әҙәп тә, иман да ҡаса, тормош та ҡотһоҙлана.

Халыҡ тәжрибәһе бар тулылығында тел, тап туған тел аша ғына быуындан быуынға еткерелеүен оноторға ярамай. Туған телдән баш тартып, беҙ телдән

генә түгел, ә ошо тәжрибәнән дә баш тартабыҙ. Бөгөн Рәсәй хөкүмәте кимәлендә сығарылған байтаҡ документтар тәрбиә темаһына бағышлана. Гәзит-журналдарҙа психологтарҙың, билдәле педагогтарҙың мәҡәләләре донъя күрә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тәрбиә һуңғы ваҡытта баҙар кешеһен формалаштырыуға ҡайтып ҡала башланы, тип билдәләй улар. Ысынлап та, телевидение, унан көнө-төнө ағылған рекламалар башлыса тормоштоң ләззәттәренә генә ҡойоноп йәшәргә саҡыра. Ә мәктәп, БДИ-ны насар тапшырһағыҙ, уҡырға инә алмайһығыҙ, тип ҡурҡыта. Изгелек орлоҡтары сәсеү, ололарға итәғәтле, кеселәргә кеселекле булыу, намыҫ, әҙәп, яуаплылыҡ кеүек төшөнсәләргә иғтибар бөтөнләй аҙайҙы. Балаларҙың хоҡуҡтары тураһындағы конвенцияның 29-сы статьяһына ярашлы, тәрбиә баланың ата-әсәһенә хөрмәт, туған теленә, мәҙәниәтенә, милли рухи ҡиммәттәргә һөйөү тәрбиәләүгә йүнәлтелгән булырға тейеш. Ҡайһы бер ата-әсәләр, мәктәп етәкселәре, баланы туған теленән яҙҙырып, ошо конвенцияны боҙоуға юл ҡуя.

Шулай итеп, финанслауҙың яңы шарттарында милли мәктәптәрҙе, кластарҙы һаҡлап ҡалыу бөгөн туранан-тура үҙебеҙгә бәйләнгән. Әгәр ҙә мәктәп директорҙарының, түрәләр үҙҙәре беләләр әле, тип саф башҡорт мәктәптәрен рус телендә уҡытыуға күсереүҙәренә, мәктәптәрҙең уҡыу пландарынан туған телдәрҙе алып ташлауға битараф ҡалһа, беҙ киләсәк быуындарға телебеҙҙе тапшыра алмаясаҡбыҙ.

Күрше өлкәләрҙә йәшәүсе милләттәштеребеҙ ҙә ауыр хәлдә.

Мәҫәлән, 2006 йылда Силәбе өлкәһендә 85 мәктәптә башҡорт теле өйрәнелһә, бөгөн уларҙың һаны – 39, Ырымбур өлкәһендә был уҡыу йылында туған тел өйрәнеүсе мәктәптәр һаны икеләтә кәмене. Ҡурған, Һамар, Һарытау өлкәләрендә лә үҙгәрештәр беҙҙең файҙаға түгел. Бер үк мәлдә күрше өлкәләрҙә туған телде үҫтереүгә бар көсөн һалған мәктәптәр ҙә етерлек. Мәҫәлән, Ырымбур өлкәһенән Аллабирҙе, Иҫәнгилде, Силәбе өлкәһенән Бәжекәй, Дәрбиш ауылдары мәктәптәре ҙур эш башҡара.

Туған телдәрҙе һәм әҙәбиәттәрҙе өйрәнеү балаларыбыҙға бөтә донъя мәҙәниәттәрен һәм милли ҡиммәттәрҙе өйрәнеүгә ярҙам итәсәк, граждандлыҡ һәм патриотик рух тәрбиәләйәсәк. Һуңғы ваҡытта күптәр милли интеллигенцияның был проблеманан ситләшеүен билдәләй.

2011 йылда дөйөм белем биреүҙең яңы федераль стандарттары тормошҡа ашырыла башланы. Милли мәғариф өсөн яңы стандарттар нимә бирҙе һуң?

Беренсенән, туған телдәрҙең позициялары ныҡыны, сөнки улар мәктәптә мотлаҡ уҡытылырға тейешле предметтар тупланған федераль исемлеккә инеп китте. Ул ғына ла түгел, федераль белем биреүҙең яңы стандарттарында уҡыусыларҙың туған телде үҙләштереү кимәленә бәйле талаптар ҙа эшләнде. Тыуған яҡтың тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеү ҙә ситтә ҡалмаясаҡ, улар «Окружающий мир» тип исемләнгән предметтың йөкмәткеһенә индерелгән.

Рәсәй Федерацияһының Мәғариф һәм фән министрлығы быйыл мәктәптәргә уҡыу пландарының өс вариантын тәҡдим итте: базислы, уҡытыу рус телендә алып барылған һәм уҡытыу туған телдә алып барылған мәктәптәр өсөн. Республиканың күпселек мәктәптәре, балаларҙың төрлө милләттән булыуын иҫәпкә алып, туған телдәрҙе уҡытыу ҡаралған базислы уҡыу пландарын һайлай. Бигерәк тә Ауырғазы, Балтас райондарының мәғариф бүлектәре етәкселәренең, туған телдәр буйынса методистарҙың, мәктәп директорҙарының тырышлығын билдәләп китергә кәрәк. Был райондарҙа уҡыусыларҙың милли составы бик сыбар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, сараһын табып, туған телдәрҙе уҡытыу өсөн шарттар тыуҙырылған.

Яңы стандарттарҙың, «Беҙҙең яңы мәктәп» педагогик инициативаһының төп йүнәлештәренең береһе – һәләтле балалар менән эшләү. Был йәһәттән БР Мәғариф министрлығы тарафынан байтаҡ эш башҡарыла. Биш туған телдән, шул иҫәптән башҡорт теленән дә, республика олимпиадалары үткәрелә. Башҡорт теленән уҙғарылған быйылғы олимпиадала, мәҫәлән, йөҙҙән артыҡ уҡыусы ҡатнашты. Сибай, Нефтекама, Межгорье ҡалалары, Әбйәлил, Ауырғазы, Баймаҡ, Благовар, Ғафури, Дыуан, Дүртөйлө, Йылайыр, Ейәнсура, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Мәләүез, Мәсетле, Учалы, Хәйбулла, Туймазы, Шишмә райондары уҡыусылары яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтте.

Йыл һайын Мәғариф министрлығы тарафынан «Тыуған республикамды данлайым» тигән темаға иншалар конкурсы уҙғарыла. 2011 йылда иншалар 10 туған телдә яҙылды. Иң күп иншалар, әлбиттә, башҡорт телендә. Был конкурста Белорет, Баймаҡ, Краснокама, Салауат, Бүздәк, Учалы, Балтас, Дәүләкән, Шаран райондары, Өфө, Ишембай, Октябрьский, Нефтекама, Сибай ҡалалары уҡыусылары ыңғай яҡтан айырылып торҙо.

Башҡорт халҡының арҙаҡлы улдарының береһе, билдәле телсе Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевҡа арналған фәнни-ғәмәли конференцияға быйыл республика статусы бирелде. Унда бөтәһе 135 уҡыусы, 21 студент, 34 педагог ҡатнашты. Ике йылға бер тапҡыр «Туған тел көнө»нә бағышланған форум-фестивалдәр үтә.

«Урал батыр» эпосын яттан һөйләүселәр конкурсы иң популяр бәйгегә әйләнде. Үткән йылғы конкурста 250 бала ҡатнашты. Салауат, Хәйбулла, Учалы, Баймаҡ, Дыуан, Архангел, Әбйәлил, Илеш, Ейәнсура, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Ҡыйғы, Ҡырмыҫҡалы, Дәүләкән, Йылайыр райондары уҡыусылары бик әҙерлекле килгәйне.

Филологик һәләте булған башҡорт балалары өсөн йәйге ял-һауыҡтырыу лагеры уңышлы эшләй. Рух тәрбиәһе, туған телгә һөйөү тәрбиәләүҙә уларҙың роле баһалап бөткөһөҙ. Быйыл да был конкурстар уҙғарыласаҡ, «Һаумы, һаумы, әкиәт» конкурсын үткәреү ҙә күҙ уңында тотола.

Ғөмүмән, һәләтле балаларҙы үҫтереү, уҡытыусыларға тәжрибә уртаҡлашыу йәһәтенән байтаҡ саралар ойоштороla. Бөгөнгө шарттарҙа художестволы әҙәбиәтте тәрәнерәк өйрәнеү, тәрбиә дәрестәре итеп файҙаланыу, балаларҙа китапҡа һөйөү тыуҙырыу зарур. Бында әҙер рецептар менән эш итеп булмай. Йөрәктән сыҡҡан һүҙ генә йөрәккә етә.

Дөйөм алғанда, милли-төбәк мәғариф системаһы алдында хәл ителәһе мәсьәләләр байтаҡ. Төп бурыс – туған телен, халҡы тарихын яҡшы белгән, уның менән ғорурланған, тормошта тәбиғи һәләтенә ярашлы үҙ урынын таба алырлыҡ шәхес тәрбиәләү. Милләттең киләсәге милли мәғариф торошо менән тығыҙ бәйле. Тимәк, мәғарифҡа ҡағылышлы проблемаларҙың, тормош талап иткәнсә, үҙ мәлендә сиселеүе мотлаҡ.

**Рәйсә КҮЗБӘКОВА,**
**БР Мәғариф министрлығының**
**милли мәғариф,**
**төбәк-ара хеҙмәттәшлек**
**итеү бүлеге етәксеһе.**

**Рафаэль**
**ЗИНУРОВ**

## *Башҡортостан юлы*

*(Эпик поэманан өҙөк)*

*«Ййлы тормош хөкөм һөрә һәр урманда,*
*Таҡыр юлдар юғалмай һис аҡ томанда.*
*Тормош иһә – томанда юл... Әммә ләкин*
*Алға китмәй урынында ул торғанда...»*

*Бына шулай Наполеон уйлағандыр,*
*Египетты баҫып алғас, туймағандыр.*
*Ә Рәсәйҙә тупҡа ҡаршы уҡлы башҡорт*
*Ташланыуы аҡылына һыймағандыр.*

*Һуғыш асып илдәр баҫыу – дауыл-ташҡын,*
*Император шуға күрә була ашҡын:*
*Ҡаршы фекер аңы күптән ҡабул итмәй,*
*Таҡмағандай уксы билгә ауыр таш ҡын.*

*Башҡорт иле ҡаршы ташлай, – гүйә, ҡаплан, –*
*Егерме лә тағы һигеҙ гәййәр туплап.*
*Әмер килгәс: «Рөхсәт һеҙгә һөңгө, ҡылыс»,*
*Яугир аңлай: ҡоралдан һин үҙең йәплән.*

*Яу юлында иҫкә төшә данлы йылдар,*
*Ойошҡанлыҡ күңелдәрҙә сиртә ҡылдар...*
*Алға киткән Европаны аптыратып,*
*Уҡ-һаҙаҡты оҫта итеп тота ҡулдар.*

---

*Рафаэль Зинуров (1953) Иглин районы Түбәнге Ләмәҙ ауылынан. Юридик фәндәр докторы. Башҡортостандың Яҙыусылар, Журналистар, Рәссамдар союздары ағзаһы.*

*Элеккеләй берҙәм рухлы башҡорт-яугир,*
*Илде баҫҡан дошман өсөн була дәү гер.*
*Ҡаһым түрә фельдмаршалдан әмер ала:*
*«Тиҙҙән Париж! Шунда, Ҡаһым, алдан һин кер!»*

*Дан ҡаҙана һыбай башҡорт Көнбайышта,*
*Был яҡтарҙа уға тиң юҡ уҡ атышта.*
*Веймарҙағы тарихи бер осрашыуҙан*
*Гете аңлай: ниҙән ҡурҡыу юҡ алышта.*

*Бүләк алғас бөйөк шағир уҡ-һаҙаҡтан,*
*Тәрән хистә шиғыр яҙа ул аҙаҡтан.*
*Париждан һуң «Төньяҡтағы амур» тигән*
*Исем айыра башҡорт улын сит казактан.*

*Ҡаһым түрә Кутузовтан гел маҡтала,*
*Атлылары «любезные» тип атала.*
*Быны күргән генералдар ҡаш йыйыра –*
*Батырлыҡҡа көнләшеү хас һәр саҡта ла.*

*Өҫтәүенә, улар һиҙә: яуҙан ҡайтҡас,*
*Яңы бола еңел ҡубыр, Ҡаһым әйтҡәс.*
*Ғәйрәт тойор «яуыз башҡорт фетнәселәр»,*
*Уҡ-һаҙаҡтан Европала данға байыҡҡас.*

*Ҡаһымға тиҙ генералдар таба ағыу*
*(Был осраҡта файҙа бирмәй ситкә ҡағыу).*
*Ашҡаҙарға ҡайтмай батыр, һәләк була,*
*Юха йылан тарафынан булғас сағыу.*

*Башҡорт өсөн дан осоро хәҙер бөтә –*
*Күтәренке күңелдәрҙе ағыу өтә.*
*Ҡайтҡас инде, губернатор тарафынан*
*«Аҫабалыҡ насар» тигән ҡараш көтә.*

# «...ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК БЕҘ»

## *(«Наполеон маршы» нисек барлыҡҡа килгән?)*

*Беҙ башҡорттарҙың француз яуында ҡатнашыуы тураһында ишетһәк, гәҙәттә, 1812 йылғы Ватан һуғышын күҙ уңында тотабыҙ. Әммә башҡорттар французлар менән уға тиклем биш йыл әүәлерәк осрашып өлгөрә. Ул ваҡиға 1806-1807 йылдарҙағы рус-прусс-француз һуғышы менән бәйле. Башҡорттарҙың был хәрби кампанияла ҡатнашыуы бик тә ҡыҙыҡлы тарихи факттарға бай. Тап ошо һуғыш осоронда башҡорт полктары тәү тапҡыр күпләп ойошторола.*

Наполеон Рәсәйҙең союздашы Пруссияға баҫып инеп, уның ғәскәрен ҡыйраткас, император Александр I 1806 йылда Францияға ҡаршы һуғыш аса. Рус армияһына ярҙамға 20 башҡорт атлы полкы (10 меңләп яугир) ебәрелә[1]. Ләкин полктар һуғыштың аҙағына ғына килеп етә, һәм күптәре унда ҡатнашып өлгөрмәй. Әммә тәүгеләрҙән булып армияға килгән 1-се һәм 2-се башҡорт полктары 1807 йылдың майында французлар менән алышҡа инә. 1-се полкка күренекле башҡорт дворяндарынан поручик Буранғол Ҡыуатов, 2-се полкка старшина Айсыуаҡ Үҙебаев етәкселек итә. 10 майҙан башҡорт полктары Ырымбур казактары менән бергә Нарев йылғаһы янында француз генералдары Массен һәм Вреденың ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыша, ләкин Наполеон армияһының көслө ҡыҫымы аҫтында рус ғәскәрҙәре сигенә. Йәйәүле ғәскәрҙәрҙең хәүефһеҙ сигенеүен тәьмин итеп, башҡорт полктары казактар менән армияның һәр ваҡыт арьергардында бара. Башҡорттар үксәләренә баҫып килгән француз атлыларының һөжүмдәрен кире ҡаға. 4 июндә атаман М.И.Платовтың корпусы составында башҡорт полктары Веллау ҡалаһы янында Наполеон кавалерияһы менән бәрелештә ҡатнаша. Яу барышында сигенгән булып, башҡорт атлылары дошманын засадаға йәлеп итә лә уларҙы уҡ ямғыры менән ҡаршылай. Кире һыпыртҡан французларҙы улар байтаҡ ҡына ҡыуып бара. Ат өҫтөндә йәнфарман сабып килгән уҡ-һаҙаҡлы башҡорттарҙы тәүләп күргән французлар уларҙы боронғо грек аллаһы Амурға оҡшата. Ошо мәлдән улар башҡорттарҙы «Төньяҡ амурҙары» тип атай башлай.

Рус армияһының көсө самалы булыу сәбәпле, 1807 йылдың 27 июнендә Александр I Тильзит ҡалаһында Наполеон Францияһы менән солох төҙөргә мәжбүр була. Императорҙар ярашҡас, ике яҡ ғәскәрҙәренә бер-береһе менән яҡындан танышырға, аралашырға мөмкинлек тыуа. “*На берегу Немана, против Тильзита,*

*был расположен лагерь вновь пришедших башкирских казачьих полков. Странность наружности и обычаев их весьма занимала посещающих французов и, как эти башкирцы были вооружены, кроме обыкновенного огнестрельного и белого оружия, луками и стрелами, французов весьма занимали игрища их этим незнакомым для них оружием»*, – тип яҙа үҙенең хәтирәләрендә Сергей Волконский. Француз һалдаттары өсөн уйынсыҡтай тойолған уҡ-һаҙаҡ башҡорт яугирының ҡулында үлемесле ҡорал булған. В.М. Черемшанский ошо хаҡта былай яҙған: «*башкирцы… весьма искусно ездят верхом, мастерски владеют пикой и метко стреляют из ружей и луков – последними действуют с такою силою, что пущенная стрела на недальном расстоянии, как, например, саженях на 15* (1 сажин – 2,13 метр), *пронзает насквозь не только человека, но даже и лошадь*»[2].

Веллау янында ғәскәренең арт һабағын уҡытҡан «Төньяҡ амурҙары»н Наполеондың үҙенең дә күрһеге килгән, ахыры. 1807 йылдың июлендә Александр I уны рус армияһының иррегуляр ғәскәрҙәре вәкилдәре: казактар, башҡорттар һәм ҡалмыҡтар менән таныштыра. Был ваҡиғаны Наполеондың рәссамы Бержере өс йылдан һуң 1810 йылда төшөрөлгән картинаһында һүрәтләй. Императорҙың ҡушыуы буйынса эшләнгән булһа кәрәк был картина. Һүрәттең һул яғында, француз һәм рус офицерҙары янында, Наполеон менән Александр I урын алған. Уң яҡта бөр төркөм иррегуляр ғәскәр яугирҙары: алғы казак императорҙарға ҡулын күтәреп честь биреп тора. Унан арттараҡ баҫҡандар араһында йәшел сәкмән кейгән башҡорт сардары: уның башында бүрек (ҡалпаҡ булыуы ла ихтимал), уң ҡулына ҡамсы, һулына ҡылыс тотҡан. Янтығында уҡһаҙағы ла яҡшы һүрәтләнгән.

Француз рәссамының башҡорт сардарын алғы планға сығарып, ентекле һүрәтләүе ғәжәп түгел. Картиналағы сардарҙың кейеме башҡорт милли кейеменә бигүк оҡшап етмәүе лә аңлашыла: рәссам был һүрәтте Парижға әйләнеп ҡайтҡас ҡына төшөрә бит. Тағы шуны әйтергә кәрәк: картинала һүрәтләнгән башҡорт сардары 1-се башҡорт полкы командиры поручик Буранғол Ҡыуатов булыуы ихтимал.

Ата-бабаларыбыҙҙың Наполеон менән 1807 йылда осрашыуына тағы бер дәлил бар. Ул да булһа – башҡорт ҡурайсылары тарафынан сығарылған «Наполеон маршы». Ул тап 1807 йылда, башҡорт яугирҙары французлар менән осрашып, уларҙың көйҙәрен тыңлап, шундағы мотивтарға оҡшатып сығарылған булһа кәрәк. Француз императорын үҙ күҙҙәре менән күрмәһәләр, башҡорт яугирҙары уға арнап марш сығармаҫ ине.

*Французлар килеп ингән*
*Мәскәү тигән ҡалаға.*
*Урыҫ – башҡорт ҡыҫып алғас,*
*Сығып ҡасты далаға.*

Тильзит солохонан һуң башҡорт полктары өйҙәренә тарала. Франция менән ирекһеҙҙән солох төҙөгән Александр I яңы һуғышҡа әҙерләнергә тотона. Француз ғәскәренең бер аҙҙан Рәсәйгә яу менән киләсәге көн кеүек асыҡ була. Шуға күрә лә батша Рәсәйҙең көнбайыш сигендә торған ғәскәрҙәрен тулыландыра. 1811 йылдың апрелендә император указы менән ике башҡорт полкы ойошторола. «*Для усиления армии Нашей легкими иррегулярными войсками и чтобы приобучить на будущее время к службе…*»[3] – тиелә документта. 1-се башҡорт полкы

– 9-сы, ә 2-се полк 7-се һәм 12-се башҡорт кантондары биләмәләрендә ойоштороп, 1812 йылдың мартында улар ил сигендәге Көнбайыш армия сафына ҡушыла.

1812 йылдың 12 июнендә Наполеондың 600 меңлек ғәскәрҙәре Рәсәйгә баҫып инә. Рус армияһының көсө иһә өс тапҡырға кәмерәк була. Хәлде аңлап, рус генералдары һуғыштың тәүге көндәренән үк оборона тактикаһын ҡуллана. Башҡорт полктары Рәсәй армияһының арьергардында алыша. 1-се башҡорт полкы атаман Платовтың атлы корпусы составында 2-се Көнбайыш армияның сигенеү юлдарын ҡурсалай. 15-16 июндә Гродно ҡалаһы янындағы алышта башҡорт яугирҙары Буранбай Сыуашбаев, Ғилман Хоҙайбирҙин, Ихсан Әбүбәкеров һәм Үзбәк Аҡмырҙиндар батырлыҡ күрһәтә. 15 июлдә, Кобрин ҡалаһын алғанда, 2-се башҡорт полкынан Әйүп Ҡайыпов менән Аралбай Аҡсулпановтарҙың батырлығы 3-сө дәрәжә Изге Анна орденына лайыҡ була[4].

27 июлдә Молево Болото ауылы янында 1-се башҡорт полкынан 200 яугир казактар менән бергә французларҙың 5-се, 9-сы гусар полктарына һөжүм яһай. Флангынан дошманға Дон казактары килтереп бәрә. Һөҙөмтәлә французлар сигенергә мәжбүр була. 2000 кешелек дивизия 600 кешеһен юғалта (шул иҫәптән 10 офицер һәм 300-гә яҡын француз һалдаты әсир алына). Айырыуса батырлыҡ күрһәткән алты башҡорт яугирына хорунжий һәм зауряд-йөҙ башы дәрәжәләре бирелә.

Ватан һуғышының иң ҡанлы алышы 1812 йылдың 26 августа Бородино ауылы янында булып, унда 1-се башҡорт полкы ла була. Ошо тиңдәшһеҙ яуҙа рус армияһы үлгән һәм яраланғандар менән – 50 меңләп, французлар 40 мең самаһы кешеһен юғалта.

Рәсәй армияһын һаҡлап ҡалыу өсөн командующий М. Кутузов үҙ генералдарына сигенергә бойора. Мәскәүгә французлар килеп инә. Рәсәй империяһы пайтәхетен ҡулға төшөргән Наполеон рус императоры менән үҙенә уңайлы шарттарҙа килешеү төҙөргә ниәтләнә. Мәскәүҙән ҡолаҡ ҡаҡҡас, урыҫ батшаһы бөтөн шарттарыма ла риза буласаҡ, тип фекер йөрөтә француз императоры. Ләкин Александр I уның бөтә тәҡдимдәрен кире ҡаға.

Маҡсатына ирешә алмаған Наполеон Мәскәүҙе яндырып, кире юлға сығырға мәжбүр ителә. М. Кутузов планы буйынса, рустар дошманды йәй көнө үҙе үк талап, емереп үткән Смоленск юлына ҡыҫырыҡлай. Аслыҡтан интеккән, күп юғалтыуҙар кисергән «Бөйөк армия» сигенә. Рус казактары менән бергә башҡорттар ошо мәлдә партизан һуғышына күсә. Улар дошмандың ҙур булмаған көстәрен ҡыйрата, ылауҙарын баҫып ала. Маршал М. Кутузов башҡорт яугирҙарының батырлығын юғары баһалай. Баш сардар яугирҙар алдына сығып: «Любезные вы мои башкиры, молодцы», – тип рәхмәт һүҙҙәрен белдергәс, башҡорт яугирҙары «Любизар» йырын сығара.

1812 йылдың көҙөндә 3-сө, 4-се һәм 5-се башҡорт полктары ла рус армияһы составына килеп ҡушыла. Ноябрҙә улар генерал П.Х.Витгенштейндың корпусы менән бергә французларҙы көнбайышҡа табан ҡыуа. Сигенгән дошманды рустар өс яҡлап ҡыҫырыҡлай. Французларҙы көньяҡтан – Чичаговтың Дунай, төньяҡтан граф Витгенштейн армиялары һәм М.Кутузов етәкселегендәге төп армия эҙәрлекләй. Платов казактары менән бергә төп армия авангардында башҡорттар ҙа французларҙың үксәһенә баҫып килә.

Армияһын өс төркөмгә бүлеп, Наполеон 31 октябрҙә Смоленск ҡалаһынан көнбайышҡа сигенә. Быны күреп, Кутузов генерал Тормасовҡа Красный ҡалаһы

аръяғында французадарҙың юлын киҫергә бойора. Голицын менән Милорадович отрядтарына дошманға көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыштан һөжүм итергә ҡуша. Әммә Наполеон 4 ноябрҙә шәхси гвардияһы менән Кутьково ауылы янында рус ғәскәрҙәре сафын йырып сыға. Ләкин, Красный янында маршалдар Даву менән Нейҙың корпустары ауыр хәлдә булыуын ишетеп, Франция императоры гвардияһын кире бора. Рус армияһы өс яҡтан һөжүмгә күсеп, артта барған Нейҙың корпусын тулыһынса тиерлек ҡыйрата. Маршал бер нисә йөҙ һалдаты менән генә ҡасып ҡотола.

Өс көнгә һуҙылған алышта (4 – 6 ноябрь) 6 мең француз һәләк була, 26 меңе әсир алына, 116 орудиеһы рустар ҡулына эләгә. Үлгән һәм яраланғандар менән рус армияһы 2 меңдән ашыу кешеһен юғалта. Дошман артиллерия һәм ылауҙарын ташлап, Березина йылғаһына ашыға. Красный ҡалаһы янында ҡыйратылғандан һуң, Наполеон ғәскәре Борисово ҡалаһына (хәҙерге Белоруссия) юл тота. Березина йылғаһын ошонда сығырға ниәтләй ул. Кутузовтың төп армияһы французадарҙы ҡыуырға ашыҡмай, сөнки дошманды ҡыйратыу өсөн Витгенштейн менән Чичаговтың көстәре лә етерлек, тип иҫәпләй. Был мәлдә Чичагов Борисовта авангардын ғына ҡалдырып, төп көсө менән сигенеүсе наполеонсыларҙы Березина йылғаһының уң ярында көтә.

Был хәйләне һиҙеп, французадар ҡаланы баҫып ала, ялған манёврҙар яһап, Франция императоры Чичаговты ҡаланың көньяғына йәлеп итә. Чичагов, французадар йылғаны көньяҡтараҡ кисер, тип фекер йөрөтә, Наполеон ҡаланың төньяғында урынлашып, Студянка ауылы янында күперҙәр төҙөргә бойора. Француз һалдаттарына ноябрь һыуығында йылғаға свайҙар ҡағып, күпер ҡорорға тура килә. 14 ноябргә күперҙәр әҙер булғас, ике көн буйы Витгенштейн һәм Чичаговтың тарҡау отрядтары менән һуғыша-һуғыша, наполеонсылар йылға аша сыға. Иртәгәһен Кутузов авангарды – атаман Платов менән генерал Ермоловтың ғәскәрҙәре Борисов ҡалаһына бәреп инә. 16 ноябрҙә йылғаның ике яғында ла һуғыш ҡыҙа. Чичагов Березинаның уң яғында нығынған француз ғәскәрен алып ташларға тырыша. Витгенштейн ғәскәрҙәре йылғаның һул яғындағы Виктор корпусына ташлана.

Күперҙәрҙең тарлығы, ылауҙар һәм кешеләрҙең бер урынға өйкөлөшөүе, рус ғәскәрҙәренең ҡыҫымы тыуҙырған ҡурҡыу арҡаһында, французадарҙың өстән бер өлөшө генә (25 меңләп кеше) йылға аша сығып өлгөрә. Рус армияһы ҡыуа төшөүҙән ҡурҡҡан Франция императоры ғәскәрҙәре сығып бөтмәҫ борон уҡ күперҙәрҙе емерергә бойора. Ҡалған французадар (50 мең самаһы) алышта һәләк була, туңып йәки батып үлә, байтағы әсир алына. Березина йылғаһы янындағы алышта генерал Витгенштейн армияһы составында 5-се башҡорт полкы ла була. Ошонда әсир эләккән француз офицеры хәтирәләрендә былай тип яҙа: «*Караңғы һәм болотло төндә бер нәмә лә эшләп булманы, үҙебеҙ ҙә белмәйенсә, аңъармаҫтан рус ъәскәрҙәре тарафынан уратып алынъан инек... таң атыу менән бөтә тарафтан да «ура» ҡысҡырьан тауыштар ишетелде. Казактар менән башҡорттар беҙҙең тирәлә йән-фарман сабып йөрөй. Ошоноң менән улар беҙгә үҙҙәренең еңеүсе икәндәрен күрһәтә ине. Беҙ әсирлеккә төшкәнебеҙҙе белә инек, шуъа күрә лә ҡоралдарыбыҙҙы ергә һалып, беҙҙең менән ниҙәр булырын көтә инек...*»[5].

Шулай итеп, Березина буйында француз ғәскәре тулыһынса тиерлек ҡыйратыла. 24 ноябрҙә, ябай офицер кейемен кейеп, Наполеон «Бөйөк армия»һын

ташлап, Францияға табан ялтырата. 3 декабрҙә рус ғәскәрҙәре дошманды Рәсәйҙән тамам ҡыуып сығара. Ошоноң менән 1812 йылғы Ватан һуғышы тамамлана. Артабанғы яуҙар тарихҡа рус армияһының 1813 – 1814 йылдарҙағы походтары исеме аҫтында ингән.

Ватан һуғышының аҙағына рус армияһы сафына тағы ла 15 башҡорт полкы – 6 – 20-се полктар килеп ҡушыла[6].

*Француздарҙы еңгәндә*
*Ер емертеп йөрөнөк беҙ.*

Рус ғәскәрҙәре, дошманға хәл алырға ирек бирмәйенсә, артынан ҡыуа. 20 февралдә (яңы стиль менән 4 мартта) генерал-адъютант А.И.Чернышевтың отряды иртәнге 6-ла Берлинды ала. Французлар ҡаланы ташлап китә. Отряд составында Дон казактары менән бергә 1-се башҡорт полкы ла була. 1813 йылдың октябрендә Лейпциг алышында (ул тарихҡа «Халыҡтар һуғышы» исеме менән ингән) ҡыйратылғандан һуң, 1814 йылдың ғинуарына Висла, Одер, Эльба йылғалары буйындағы ҡәлғәләрҙең гарнизондары ҡорал һала. Тик Гамбург менән Магдебург ҡәлғәләре генә союздаш ғәскәрҙәргә баш бирмәй. Башҡорт полктары ла ошо ҡәлғәләрҙе ҡамауҙа ла ҡатнаша. 1-се, 5-се, 7-се полктар Данцигты ҡамауҙа ҡатнашһа, 1-се, 4-се, 14-се, 15-се полктар Дрезден алышында була, 1-се, 2-се, 4-се, 5-се, 9-сы, 11-се, 14-се башҡорт полкы Лейпциг янында француз ғәскәрҙәрен тар-мар итеүгә үҙ өлөшөн индерә. 8-се, 12-се, 13-сө, 16-сы полктар Глогау ҡалаһын ҡамауҙа ҡатнаша.

1813 йылдың 27 ноябренән генерал-майор К.А.Крейцтың отряды составында 11-се башҡорт полкы Магдебург ҡәлғәһен ҡамай. Артабан был хәрби операция менән генерал-лейтенант граф П.А.Толстой етәкселек итә. Магдебург гарнизоны 1814 йылдың 8 майында ғына баш һала. Гамбург ҡалаһы өсөн һуғыштар 1813 йылдың мартында уҡ башланып, уны ҡамау менән союздаштарҙың Төньяҡ армияһы командующийы Бернадот етәкселек итә. 1813 йылдың ноябренән ҡаланы дошмандан таҙартыу бурысы Польша армияһы командующийы кавалерия генералы Л.Л. Бенигсенға йөкмәтелә. Үҙ сиратында, Бенигсен операцияны атҡарыуҙы генерал-лейтенат Марков етәкселегендәге корпусҡа тапшыра. 1814 йылдың ғинуарынан был корпус составында 11-се һәм 15-се башҡорт полктары ла Гамбургты ҡамауҙа ҡатнаша. Башҡорт яугирҙары ҡала тирәләй ҡуйылған һаҡта тора, бер үк ваҡытта французлар һағына һөжүм итеүҙә лә ҡатнаша. Хатта йәйәүләп төнгө атакаларға ла сығырға тура килә. Апрелдә союздаштар Гамбург гарнизоны начальнигы маршал Даву менән һөйләшеүҙәр башлай. Был ваҡытта инде «Бөйөк армия» ҡыйратылып, Францияның баш ҡалаһы Париж яулап алынған була. Францияның яңы короле Людовик XVIII бойороғо буйынса, маршал Даву 1814 йылдың 11 майында баш һала. Рус ғәскәрҙәре составында 19 майҙа башҡорт полктары ла Гамбургҡа инә.

1814 йылдың 17 мартында союздаштарҙың Пруссия менән берлектәге 100 меңлек (65 меңе – рустар) ғәскәр Францияның баш ҡалаһына яҡынлаша. Парижды 45 меңлек) француз гарнизоны һаҡлай. Баш ҡаланы алыуҙа 1-се, 2-се, 5-се, 9-сы, 12-се, 13-сө, 14-се һәм 19-сы башҡорт полктары ҡатнаша[7]. Рус ғәскәрҙәре 18 мартта, көслө һөжүм яһап, Париж янындағы Бильвиль ҡалҡыулығын баҫып ала ла, артиллерияһын шунда урынлаштырып, баш ҡалаға туптарҙан ата башлай. Сәғәт биштәр тирәһендә Парижды уң яҡтан обороналаусы ғәскәрҙәр башлығы маршал О.Мармон, баш һалырға ризалашып, император Александр I

илселәр ебәрә. 19 мартта төнгө 2-лә О.Мармон капитуляцияға ҡул ҡуя. Иртәнге 7-лә французлар ҡаланы ҡалдырып, көндөҙгө 12-ләрҙә Парижға рус һәм прусс ғәскәрҙәре инә.

Башҡорт полктары казактар менән бергә Елисей яланында һәм Булон урманында урынлаша. Парижға ингән башҡорт яугирҙары ҡала халҡының, айырыуса француз ҡатын-ҡыҙҙарының, иғтибарын яулай. Наполеонға ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан рус офицеры, шағир Ф.Н. Глинка (1786 –1880) хәтирәләрендә былай тип яҙа: «*... И вот башкиры въехали в Париж и все горожане удивлялись их внешнему виду, и француженки спали с ними*». Ә билдәле рус шағиры Н.К.Батюшков ваҡиғаға шиғри юлдар арнай:

*Кипел бульвар в Париже так:*
*Народы праздными толпами,*
*Когда на нем летал с*
*нагайкою казак*
*Иль Северный амур*
*с колчаном и стрелой*[8]*...*

Б.П.Виллевальде исемле рәссамдың «Император Александр I в лагере башкирского войска на Бельвильских высотах, в Париже в 1814 г.» тигән полотнолары бар. Тимәк, башҡорт полктарының байтаҡ өлөшө Париж янында урынлашып, унда император Александр I килеп киткән булып сыға.

## *Гёте һәм башҡорт уҡы*

1813 – 1814 йылдарҙың ҡышында бер нисә башҡорт полкы Веймар ҡалаһында туҡтала. Ислам дине һәм Көнсығыш мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынған бөйөк немец аҡыл эйәһе, философ Гёте тыуған ҡалаһында тәүге тапҡыр мосолмандарҙы – башҡорт яугирҙарын – күреп хайран ҡала. Ул был хаҡта дуҫына ошолай яҙа: «*Бынан бер нисә йыл элек, беҙҙең протестант гимназияһында мосолмандар намаҙ ҡылыр һәм Ҡөрьән сүрәләре уҡылыр, тип кем күҙ алдына килтерһен инде. Шулай ҙа был ваҡиғаның шаһиты булдыҡ. Беҙ башҡорттарҙың намаҙ уҡығанын ҡарап торҙоҡ, уларҙың мәлиген (принц) театрҙа тәбрикләнек*»[9].

1814 йылдың 22 мартында бөйөк Гёте Ғосман Ғүмәров исемле башҡорт сардарын (полк командирылыр, моғайын) ҡунаҡҡа саҡыра. Ғосман Ғүмәров рәхмәт йөҙөнән философҡа уҡ-һаҙағын бүләк иткән булһа кәрәк. 11 йылдан һуң, 1825 йылда, Гёте башҡорт сардарының бүләген ҙур ғорурлыҡ менән дуҫы И.П.Эккерманға күрһәтә. Әйткәндәй, был ҡомартҡы менән бәйле тағы бер ваҡиға тураһында яҙып үтмәй булмай. Үткән быуаттың 80-се йылдары башында, «Төньяҡ амурҙары» романы өсөн мәғлүмәт туплау уйы менән, күренекле яҙыусы Яныбай Хамматов ГДР-ға бара һәм Веймар ҡалаһында башҡорт сардарының Гетеға бүләк ителгән уҡ-һаҙағын эҙләй[10]. «1814 йылда башҡорттар Гетеға бүләк иткән уҡ-янды һораша башлағайным, был хаҡта бер кем бер нәмә белмәй, – тип яҙа Хамматов. Бөйөк немец шағиры Гетеның секретары И.П. Эккерман ҡалдырған яҙмаларға таянып, төрлө дәлилдәр килтерҙем. Уҡты табырға ныҡышыуымды күргәс, күрше урамда йәшәгән бик оло бер ҡартты саҡырып килтерҙеләр.

– Төньяҡ амурҙарының Гетеға бүләк иткән һуғыш ҡоралы ҡыҙыҡһындырамы һеҙҙе? – тип һораны ҡарт.

Ул һөйләгәндәрҙе тәржемәсе миңә аңлата барҙы:

– Был ҡарт бик күп йылдар элек ошо музейҙа хеҙмәт иткән. Күп нәмәләрҙе әле лә онотмаған икән. Париждан ҡайтып барышлай, башҡорт яугирҙары башлығы бүләк итеп биргән уҡты бынан 50 – 70 йылдар самаһы элек музейҙан алғандар. Ул заманда иҫкергән башҡа ҡоралдар ҙа алынған. Складта һаҡланмаймы икән, ти.

Мине стеналары яртылаш ергә һеңгән бик иҫке складҡа алып барҙылар. Бөйөк немец шағирына иҫтәлек итеп бирелгән ваҡ-төйәк араһында оҙаҡ йылдар ятып серегән уҡтың ҡалдыҡ-боҫтоғон тапҡас, тәнем әҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ваҡыт тигән нәмә шәфҡәтһеҙ шул. Заманында иң ҡәҙерле һаналған тарихи ҡомарткыны бөтөнләй юҡҡа сығарған».

Яныбай Хамматовтың сәйәхәте быны менән генә тамамланмай. Уға Веймарҙан алыҫ түгел Шварц ауылындағы сиркәү көмбәҙендә башҡорттарҙан ҡалған уҡ барлығы хаҡында һөйләп бирәләр. Яҙыусы ошо ауылға юл тота. «Урманлы тауҙар теҙмәһе менән уратылған Шварц ауылы киң уйһыулыкта урынлашҡан. Ауыл ҙур түгел. Күренеше күркәм. Шварц йылғаһының аҫкы өлөшөндә икешәр ҡатлы өйҙәр теҙелеп киткән. Ауылдың ҡап уртаһында, йылғаның уң яҡ ярында, сиркәү һерәйеп тора. Уның күккә һонолған көмбәҙендә «Төньяҡ амурҙары»ның уғы күренмәгәс, төшөнкөлөккә бирелдем», – тип яҙа әҙип. Сиркәүҙең священнигы «Шварц ауылы тарихы» исемле китаптан әлеге башҡорт уғы менән бәйле ваҡиға тураһындағы тарихты уҡып ишеттерә: «...Наполеон ғәскәрен ҡыйратып, Францианан ҡайтып барған рус ғәскәрҙәре Шварц ауылы аша егерме тапҡыр үтә. Казактар менән башҡорт яугирҙары ғына һуғылмай, һәр саҡ ситләтеп уҙа.

«Төньяҡ амурҙары»н күрмәйенсә тынысланмаясағын аңлап, Шварц ауылынан алты саҡрым алыҫлыҡтағы ерҙә ялға туҡтаған башҡорттарҙы кенәз Карл Гюнтер үҙенә ҡунаҡҡа саҡыра. Сапҡын ебәреүенә күп тә үтмәй, рус генералы Щербаков рөхсәте буйынса килгән һыбайлы башҡорт егеттәре төркөмө йәнфарман сабышып килеп еткәс, Шварц халҡы сиркәү алдында йыйыла. Ғорур ҡиәфәттәге «Төньяҡ амурҙары»ның – башҡорттарҙың өҫ-кейемдәрен, һөңгөләрен, яурындарына аҫҡан уҡ-һаҙаҡтарын оло ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп, улар үҙ-ара оҙаҡ шаулаша.

– Уҡ тигәндәре ҡамыштан эшләнгәнме әллә?

– Ағастан юнылған, тиҙәр.

– Ундай ҡоралдан ни файҙа?

– Ҡарамаҡҡа үтә ябай күренһә лә, сикһеҙ үлемесле, тиҙәр!

– Эйе, «Төньяҡ амурҙары» атҡан уҡ атты тишеп үтәнән-үтә сығыуын мин дә ишеттем!

– Булмаҫ!

– Ә мин ышанам! Ул уҡ үлемесле булмаһа, французлар үлә яҙып ҡурҡыр инеләрме?..

Кенәз Карл Гюнтер ҙа үтә ябай һуғыш ҡоралының үлемесле икәнлегенә ышанмаҫ, Рәсәйгә ҡушылғандан бирле сит ил дошмандарын күп ҡыйратҡан уҡ-һаҙаҡтарын кәмһетеүҙәренә һәм уны һанға һаҡмауҙарына ғәрләнеп сәмләнгән башҡорт егеттәре бер-береһенә ҡарашып ала ла:

– Уҡ-һаҙағыбыҙҙы хурлар өсөн саҡырҙығыҙмы? – тип асыу менән һорайҙар.

«Төньяҡ амурҙары»ның ярһыуы бер аҙ баҫылғас, кенәз Карл Гюнтер сиркәүҙең күккә һонолған оҙонса көмбәҙенә күрһәтә.

– Атығыҙ шуға!

Башҡорт яугирҙары католик сиркәүенә атыуҙы әҙәпһеҙлек һанап, кенәз Карл Гюнтер эргәһендәге рухани Киоте Фридрих Августҡа төбәлә. Тимер башаҡлы ағас уҡ сиркәүгә зыян килтермәйәсәгенә ышанған рухани рөхсәтен алғас, һуғышсыларҙың береһе керешкә һалыу менән тоҫҡамай-нитмәй атҡан уҡ, ҡалын көпмәне тишеп, оҙонса көмбәҙҙең ҡап урта өлөшөнә барып ҡаҙала һәм шунда тороп ҡала».

Был ваҡиға 1814 йылдың 14 апрелендә булған, һәм Шварц ауылындағы уҡты 9-сы башҡорт полкы яугирҙары ҡалдырған булһа кәрәк, тип яҙа тарихсы Р. Рәхимов. Байтаҡ ваҡыт үткәс, ағас уҡ сереп, ергә килеп төшкән. Шул осорҙағы бәхәстең иҫтәлеге итеп, Шварц ауылы халҡының һорауы буйынса, 1814 йылғы башҡорт уғы урынына ҡорос уҡ ҡуйыла. Я.Хамматов килер алдынан ике-өс ай элек көмбәҙҙәге ҡорос уҡ та тәүгеһенең яҙмышын ҡабатлай. Шуға күрә лә яҙыусы уны сиркәү көмбәҙендә күрмәй. Ул Шварц ауылына килгән көндө уҡты янғын һүндереүселәр ярҙамында сиркәүҙең көмбәҙенә ҡабат беркетеп ҡуялар. Шулай итеп, башҡорт уғы иҫтәлегенә алмашҡа ҡуйылған ҡорос уҡ Шварц ауылы сиркәүенең көмбәҙен биҙәй. Быны Германияла йәшәгән яҡташыбыҙ Нәсүр Йөрөшбаев «Сена буйында ҡурай моңо» фильмында бик матур итеп сағылдырған. Башҡорт уғының үҙенә килгәндә, ул Германияның Рудольштадт ҡалаһында Хайдексбург дәүләт музейында һаҡлана. Бына шундай тарих ҡалдырған ата-бабаларыбыҙ. Ошо тарихты онотмау, киләһе быуынға еткереү – беҙҙең бурыс.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**

**Ҡулланылған сығанаҡтар:**


[1]*Усманов А.Н. «Башкирский народ в Отечественной войне 1812 года». Уфа, 1964 г.С.20.*

[2]*«Любезные вы мои...»: [сборник] /сост. А.З.Асфандияров. Уфа, 1992 г. С.227.*

[3]*Усманов А. Н. «Башкирский народ в Отечественной войне 1812 года». Уфа, 1964 г. С.19.*

[4]*Асфандияров А.З. «Кантонное управление в Башкирии (1798–1865 гг.)». Уфа, 2005 г. С.20.*

[5]*Наполеон в России в воспоминаниях иностранцев. 2 кн. М., Захаров. 2004 г. www.hrono.ru*

[6]*Рахимов Р.Н. «Башкирские полки в 1812 – 1814 годах: некоторые вопросы истории». (журнал «Ватандаш», 2010 г. №12. С.20.)*

[7]*Башкирская энциклопедия. Т. 3. Уфа, 2007 г. С.9.*

[8]*Усманов А. Н. «Башкирский народ в Отечественной войне 1812 года». Уфа, 1964 г. С.96.*

[9]*Воинская слава башкирского народа /сост. А.Ш. Ярмуллин. Уфа, 2007 г. С.24.*

[10]*Янығбай Хамматов. «Төньяҡ амурҙары». Өфө, 1983. 380 – 382-се биттәр.*

# ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ШИҒРИӘТЕНДӘ ЖАНР

Хәҙерге шиғриәттә жанрҙар мәсьәләһе тураһында һүҙ сыҡҡанда, иң тәүҙә «Жанр проблемаһы бармы?» тигән һорау тыуа. Ошонан, поэтик һүҙ жанр булараҡ таныламы, уны ниндәй сифаттар буйынса танырға мөмкин, тигәндәре ҡалҡыуы ихтимал.

Теорияға ярашлы, белгестәр жанрҙы бер телмәр торошо (речевая установка) булараҡ таный. Йәғни, әйтелгән һүҙ, фекер, ғөмүмән, жанрһыҙ була алмай – телмәр булһа, жанр ҙа була[1].

Яңы жанрҙар теорияһы күберәк проза нигеҙендә эшләнгән. Лириканы тикшереү иһә икенсе йүнәлештәрәк киткән. Шиғыр төҙөлөшөн өйрәнеү жанр проблемаһынан ситләштергән. Һөҙөмтәлә хәҙерге шиғриәт ниндәйҙер рәүештә жанр телен юғалтҡан. Әҙәбиәт ғилеме айырым жанрҙарҙың үҙгәреүен күҙәтә, әммә жанрҙар теорияһын конкрет поэтик әҫәргә ҡулланыу мәсьәләһе асыҡ ҡала.

Жанр – автор һәм уҡыусы өсөн дә ритм кеүек үк мөһим төшөнсә.

Ритмды ғына үҙләштереп шағир була алмаған кеүек, жанрҙы белеү генә шиғыр ижад итеүҙе еңелләштерә алмай. Шуның өсөн жанр проблемаһының ике аспекты күҙәтелә. Жанрҙы билдәләү генә етмәй, ә шағирҙың жанрлы фекерләү кимәлен айырыу ҙа әһәмиәткә эйә.

Жанрҙы тоймау бигерәк тә башлап яҙыусылар һәм йәш шағирҙар араһында күҙәтелә. Шиғырҙарында сағыу образдарҙың күп булыуы айырым юлдарҙы баҙыҡландырып ебәреүенә ҡарамаҫтан, ул образдарҙың бер-береһенә өҫтәлеүе бер өйөмдә барлыҡҡа килтерә.

*Йә ап-аҡбыҙ. Йә ҡарабыҙ.*
*Уйҙарҙа буталсыҡлыҡ.*
*Ҡайҙа ҡатлам? Ҡайҙа тормош?*
*Ҡайҙа һуң ысынбарлыҡ?..*
*Алһыу күҙлектән ҡотолоп*
*Алһаҡсы беҙ һөйләшә.*
*Ата-әсәңде хөрмәтләп*
*Ҡыуаныста гел йәшә.*

(Рәсилә Ғарипова. “Кыуаныста гел йәшә”)

Был шиғыр 5 строфанан ғибәрәт, ләкин айырым, логик яҡтан бәйле булмаған фекерҙәрҙең бер-береһенә өҫтәлә барыуы икенсе строфанан уҡ күренә башлай. Йәш шағирә абстракт формала кеше донъяһының эске проблемалары тураһында уйланырға, дөйөмләштереүҙәргә килергә тырыша. Әммә бала күңеле барыбер балаларса булып ҡала. Шиғырҙағы урынһыҙ ҡулланылған һуңғы ике юл ошо хаҡта һөйләй.

---

[1]*Медведев П.Н. Формальный метод в литературоведении: М.Лабиринт, 2000. С.306.*

Был миҫал ярҙамында күрһәтелгән проблема – бөгөнгө шиғриәт өсөн хас күренеш. Жанрлы фекерләүҙе профессиональ шағирҙарҙың әҫәрҙәрендә асыҡ күрергә мөмкин. Мәүлит Ямалетдиндың "Һуҡмаҡ" китабындағы һәр бер әҫәре билдәле бер жанр үҙенсәлектәренә ҡоролоп ижад ителгән.

"Культура", "Сәнғәт", "Мәҙәниәт", "Символдар", "Ғәзиз Дәүләтбирҙинға", "Назар Нәжми", "Сәйәсәт", "Азатлыҡ", "Көрәш", ике юллыҡтар, "Батырша монологы", "Аҡмулла монологы", "Шаңдауҙар" (пародик поэма) тип исемләнгән әҫәрҙәр ошо хаҡта һөйләй.

Жанрҙар ярҙамында билдәле бер әҙәби рәттәргә теҙелгән шиғырҙар китаптың төҙөк композицияһын барлыҡҡа килтерә. Шуның менән бергә, традицияға таянғанда ғына, яҡшы шиғыр килеп сығыуы мөмкин, тигән һығымта тыуа. Традиция менән бәйләнеш өҙөлгән осраҡта һүҙ поэтик кимәлгә күтәрелә алмай.

Поэтик теүәллектең һәр саҡ билдәле бер жанр формаһы була. Әммә элек жанр формаһы күпселек осраҡта шиғыр төҙөлөшөнән сығып билдәләнһә, хәҙерге шиғриәт өсөн жанрҙы аңлау башҡасараҡ.

Жанр формаларының сиктәре актив рәүештә юйыла барыуы әҙәбиәттең билдәле бер тарихи осорона тура килә. XIX быуат башында, мәҫәлән, рус әҙәбиәтендә жанр системаһының тарҡала башлауы күҙәтелә. Автор теге йәки был поэтик һүҙҙе жанрға ҡарап түгел, ә теманан сығып һайлай башлай. Был бигерәк тә Пушкин теленән күҙгә ташлана. Башҡорт шиғриәтендә бындай күренеш һиҙелерлек итеп Аҡмулла, артабан Бабич әҫәрҙәрендә күҙәтелә.

Әҫәр, ниндәй жанрҙа яҙылыныуына ҡарамаҫтан, фольклор менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Юғары стиль һаналған ғәрәп, фарсы телле һүҙҙәргә башҡорт һөйләштәрендә ҡулланылған һүҙҙәр килеп ҡушыла. Шиғриәттең артабанғы үҫешендә һүҙ иркенлеге, һүҙ азатлығы көсәйә генә бара. Бер һүҙ менән күпте әйтергә тырышыу иһә фрагменталлек күренешенә алып килә. Фрагмент жанрын әҙәбиәткә романтиктар индерә: "Боронғоларҙың күпселек әҫәрҙәре фрагментҡа әйләнгән. Ә яңы дәүерҙең күпселек әҫәрҙәре – баштан уҡ фрагменттар", – тип яҙа Ф. Шлегель[2]. Рус әҙәбиәте ғилемендә фрагмент жанры тураһында беренселәрҙән булып Ю.Тынянов һүҙ ҡуҙғата: "Поэма кеүек ҙур әҫәрҙә юғалып ҡалған айырым һүҙҙәр бәләкәй генә фрагмент эсендә көслө мәғәнә бирә… Фрагменталлек төп стилистик күренештәрҙең береһенә әүерелде"[3]. Ике томлыҡ "Әҙәбиәт теорияһы" авторҙары билдәләүенсә, фрагмент – "романтик шиғырҙар тыуҙырған лирик шиғырҙың яңы тибы"[4].

Лирик шиғырға фрагменттың эстетик-фәлсәфәүи нигеҙе йоғонто яһай. Романтиктар донъяны сикһеҙ һәм мәңге серле тип таный. Һөҙөмтәлә бер өлөш эсендә бөтөнлөк, теүәллек һынландырыла[5]. Шиғыр йөкмәткеһе күпкә ҡыҫҡара. Әҫәрҙәрҙә хис-тойғолар кисерештәренең бер мәлгә генә бәйле булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына, сөнки мәл – ваҡыттың минималь фрагменты.

Фрагменталлек лирик шиғырҙың үҫешенә йоғонто яһаусы күренеш тә булып тора. Фрагмент жанры аша лирик әҫәргә фәлсәфәүи эстетика, ижад итеү философияһы сфераларынан идеялар үтеп инә. Фрагменталлек күпселек башҡорт шиғырҙары ижадына хас. Динә Талхинаның бер нисә шиғырына иғтибар итәйек.

---

[2]*Шлегель Ф.Фрагменты // Шлегель Ф. Эстетика. Философия. Критика. Т.1.М.: Искусство, 1983. С.290.*

[3]*Тынянов Ю.Н.Вопрос о Тютчеве // Тынянов Ю.Н. Поэтика. История литературы. Кино, М.: Наука, 1977. С.43.*

[4]*Теория литературы. В 2 тт. / Под ряд Н.Д. Тамарченко. Т. 1.М: Академия, 2004. С. 432.*

[5]*Одоевский В.Ф.Русские эстетические трактаты первой трети XIX века. Т.II. М.: Искусство, 1974. С. 160.*

*Ҡулым беште,*
*Йәнем өрөлдө.*
*Уйҙарымда иркәм терелде.*
*Туғайҙарҙа бергә өйөрөлдө.*
*Ҡулым беште,*
*Йәнем өрөлдө…*

(«Йәнем өрөлдө»)

Бында кисерештәрҙең бер мәлгә генә ҡабыныуы һиҙелеп тора.

*Ах, һинең күҙҙәрең…*
*Әйтелмәгән һүҙҙәрем.*
*Ах, һинең ҡулдарың…*
*Мөхәббәтһеҙ йылдарым.*
*Ах, һинең ҡосағың –*
*Үкенестәр усағы.*

Лирик герой тормошта үҙе кисергән хәл-ваҡиғаларҙы әйтеп бөтмәй, улар күҙ уңында ғына тотола.

*Беләм, донъя миңә лә*
*Йөҙө менән боролор.*
*Баш осонда йәйғорҙан*
*Сағыу сатыр ҡоролор.*
*Һуыҙ үлән иркәләр*
*Йүгерек аяҡтарҙы,*
*Төштә генә күрермен*
*Таяныр таяҡтарҙы.*

(«Беләм»)

Шиғырҙың башы уй-фекерҙәр дауамы булып күҙ алдына баҫа.

Ошо жанр һыҙаты күп авторҙарҙың ижадын уртаҡ итә.

Фрагменталлек Әхмәр Үтәбай, Азамат Юлдашбаев, Ғилман Ишкинин, Морат Солтанов, Фәнил Бүләков һ.б. шағирҙар ижадына хас.

Фрагменталлек ритмик, композицион төҙөклөккә ҡапма-ҡаршы тормай. Ул ни бары лирик шиғырҙың үҙенсәлекле поэтик күренеше булып тора. Ул аңдағы ҡағыҙға төшмәгән билдәле бер контекстан тартып алынған, әммә үҙе поэтик теүәллекте тәшкил итә. Ул теүәллек уҡыусы аңында тулы кимәлдә кәүҙәләндерелә.

Лирик әҫәрҙе фрагмент булараҡ ҡабул итеү поэтик телмәрҙәге фекерҙәр теҙеменең ҡайһы бер өлөштәрен төшөрөп ҡалдырыуҙы ҡағиҙәләштерә, шағирға артыҡ күренгән һүҙҙәрҙе алып ташларға булышлыҡ итә.

Жанрҙар системаһы тарҡалыуының икенсе этабы “семантик поэтика”ның барлыҡҡа килеүе менән бәйле[6]. Рус әҙәбиәтендә был күренеште О.Мандельштам, А. Ахматова ижады сағылдыра. “Семантик поэтика”ның асылы шунда: һүҙ “мәғәнәләр төйөнө” булараҡ ҡабул ителә. Шиғри юлдағы һүҙҙең бер нисә мәғәнәһе үҙ-ара мөнәсәбәткә инеп, йәнә ниндәйҙер көтөлмәгән мәғәнә барлыҡҡа килтереүҙәре ихтимал[7].

Д.Сегал тигән ғалим, В. Жуковский һәм О.Мандельштам шиғырҙарын сағыштырып, шуға иғтибар йүнәлтә: тәүге авторҙың шиғырҙарында поэтик “маҡсат” ҡуйыла, ошонан сығып һүрәтләү саралары һайлана; икенсе авторҙың әҫәрҙәрендә “йомаҡтар поэтикаһы” күҙгә ташлана. Д.Сегал билдәләүенсә, семантик поэтика уҡыусының активлығын талап итә. Уҡыусы һоҡланыу, тетрәнеү

[6]*Роднянская И.Б.Свободно блуждающее слово. К философии и поэтике семантического сдвига //Роднянская И.Б. Движение литературы. В 2 тт. Т.I. М.: Языки славянских культур. 2006.С.257.*

[7]*Шунда ук. С.125.*

кисерергә генә түгел, ә тәү сиратта тексты аңларға тейеш[8]. Тикшеренеүсе О.Мандельштамдың шиғырын анализлағанда, "һәр йомаҡ сиселеше яңы йомаҡты барлыҡҡа килтерә" тигән һығымтаға килә[9]. Тимәк, поэтик һүҙ шиғырға сикһеҙ һанлы мәғәнә һыйҙыра ала.

*Ҡар яуа –*
*кемдер сафлыҡ күрә,*
*кемдер муллыҡҡа юрай,*
*һәм тағы…*
*Шул сафлыҡты,*
*шул муллыҡты*
*күтәрә алмай,*
*шартлап һынды ерек ботағы…*

(Азамат Юлдашбаев)

Сафлыҡ, муллыҡ менән ассоциацияланған "ҡар" һүҙе яңы мәғәнәлә асыла. Әҫәрҙә объект (ҡар) һәм субъект (ерек) мөнәсәбәте мөһим. Ерек ағасына яҡшылыҡ (сафлыҡ, муллыҡ) бирелә, әммә ул мәғәнәһеҙ, ағасҡа уның кәрәге юҡ, сөнки ерек ул яҡшылыҡтан үлемгә генә дусар була. Сафлыҡ, муллыҡтың ялған булып сығыуы бар.

Ҡарҙы күтәрә алмаған "ерек ботағы" образына ла бер нисә мәғәнә һалырға мөмкин. Ул – тормош ҡорбаны ла, муллыҡтан аҙып үҙен үлемгә килтереүсе лә.

Йәнә бер миҫал:

*Таймерҙағы мина –*
*Остоҡ йөрәк*
*Серт-серт сиртә*
*Ваҡыт ҡылдарын.*
*Кисергәндә*
*Меңәр хистәремде,*
*Күкрәк өҫтәрендә*
*Ҡулдарым.*

(Фәнил Бүләков)

Автор мәғәнә яғынан бер-береһенә тап килмәгән һүҙҙәрҙе сағыштыра. Мина – үлем, йөрәк – йәшәйеш сығанағы. Әммә йөрәкте таймерҙағы мина менән сағыштырыу "мәғәнәләр төйөнө"н барлыҡҡа килтерә. Мина әле шартламаған, тимәк, ғүмер дауам итә, ләкин таймерҙың ваҡытты һанауы һәр саҡ үлем тураһында иҫкәртеп тора. Шул уҡ ваҡытта ҡасандыр минаның – йөрәктең – ғүмер сығанағының шартлауы – юҡ ителеүе менән хәүефһеҙ тормошҡа юл асыласаҡ. Лирик герой хис-тойғолары (йөрәге) менән бүлешеп түгел, киреһенсә, күкрәген ҡулдары менән ҡаплап башҡаларҙы үлемдән ҡотҡарырға теләй кеүек.

Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә семантик потенциалды ошо рәүештә файҙаланыу шаҡтай уҡ киң таралыу алған, тип әйтеп булмай. Бындай әҫәрҙәр башлыса Азамат Юлдашбаев ижадына хас. Шулай уҡ семантик поэтиканың айырым өлгөләрен Фәнил Бүләков, Рәшит Зәйнуллин, Ғилман Ишкинин, Рита Фәтҡуллина, Дамир Шәрәфетдинов, Рәйес Түләктәрҙең ҡайһы бер шиғырҙарында осратырға мөмкин.

Әгәр ҙә фрагмент теүәл поэтик һүҙ традицияһы менән бәйле булһа, "мәғәнәләр төйөнө" булараҡ ҡабул ителгән һүҙ – сағыштырмаса яңы күренеш. Ләкин икеһе лә хәҙерге шиғриәттең парадигмаларын тәшкил итә. Фрагмент

---

[8] *Сегал Д.М. Русская семантическая поэтика двадцать пять лет спустя // Сегал Д.М.Литература как охранная грамота. М.: Водолей, 2006. С.215,225.*

[9] *Шунда уҡ, 227-се бит.*

поэтикаһы синтагматик рәүештә бәйле булған уй-фекерҙе күҙ уңында тота, ә һүҙ-“төйөн” бер үк ваҡытта бер нисә контекста ҡулланыла, был осраҡта һүҙҙәр һәм образдарҙың парадигматик бәйләнеше күҙаллана.

Юғарыла һанап үтелгән авторҙарҙың ижадында ике күренеш тә осрай.

Бына Азамат Юлдашбаевтың фрагмент жанрында ижад ителгән шиғыры. Уның эсендә философик лирика традицияһына хас булған конструкция сағылыш таба.

*Малъа бесән ташлайым,*
*үҙем уйлайым:*
*был мал аҙыъы*
*Ҡасан ъына үлән үә сәскә ине,*
*шаъир шиъыр арнар,*
*ъашиҡтар таждар үрер,*
*йырсы йыр баъышлар…*
*Бал ҡорттары наҙ эсә ине.*
*Әле*
*Һыйыр көйшәй ъәмһеҙ генә.*
*…ә иртәгә?*

Шиғырҙа өс ҡатнашыусы: лирик герой йәки поэтик аң (“мин”), “сәскә”, “һыйыр”. Әҫәрҙә ҡайнар, көсөргәнешле хис-тойғолар кисереше юҡ. Лирик геройҙың талғын уйҙар теҙмәһен генә күҙәтергә мөмкин. Бындай һүрәтләү тибы философик поэзия традицияһына ҡайтара. Шул уҡ ваҡытта шиғырҙа күп нөктәләр менән поэтик уй-фекерҙең, тасуирлауҙың фрагменталь булыу һыҙыҡ өҫтөнә алына. Йәғни шиғырҙан “артыҡ” һүҙҙәр алып ташланған. Фрагменталлек образдарҙы кәрәк булмаған контекстарҙан азат итә. Философик поэзия шул образдарҙы бер-береһе менән бәйләй, донъялағы өҙлөкһөҙ хәрәкәтте, алмашыусанлыҡты сағылдыра. Авторҙың икенсе шиғырынан миҫал:

*Аҡыл ҡарар уҡый.*
*Үҙхөкөм:*
*ъәйепле, үтә бер ҡатлы.*
*Башты – аҫҡа.*
*Үҙъяза:*
*башҡаса*
*көлмәҫкә үә иламаҫка…*

*Тәмәкең төтөнө – дүңгәләк,*
*Һүнгән лампаъа оса*
*Яңъыҙ күбәләк.*
*Был бисара – ишара…*
*Ҡуҙъал:*
*ишектә ҡыңъырау –*
*әллә өн, әллә төш тамам.*
*Үҙең менән –*
*хыял менән тулы күңел һәм буш янсыҡ,*
*тышта иһә – танһыҡ таң һәм һуңъы ысыҡ.*
*Сыҡ:*
*яурынына һалып салъыһын,*
*көтә тилмереп ҡара ҡарсыҡ.*

Кеше үҙ-үҙенә хөкөм сығара һәм яза тәғәйенләй. Фекер төйөнөн төрлө контекстан сығып ҡарарға кәрәк. Бындай шиғырҙы уҡыу парадигматик принципҡа нигеҙләнә. Уҡыусы шартлы рәүештә образдарҙы бер нисә бағанаға теҙеп сыға.

Төрлө бағанаға бер үк һүҙҙәр инергә мөмкин. Быңдай әҫәрҙәрҙе жанр йәһәтенән анализлау үтә ҡатмарлы. Шиғырҙың йөкмәткеһенән сығып, уны, элегияға тартым, тип әйтергә була.

Жанр теорияһында “жанрҙар көрәше” төшөнсәһе лә урын алған. Әҫәрҙәге жанрҙар көрәше күренешен теоретик яҡтан рус формалистары, М.Бахтин тикшерә. Жанр хәрәкәт итеүсән система булараҡ күҙ алдына баҫа. “Жанрҙы статик система булараҡ ҡабул итеү мөмкин түгел”, сөнки автор ҡулына ҡәләм алыу менән традицион жанрҙар менән осраша һәм унда үҙ индивидуаллеген индерә[10]”. Шайтанов билдәләүенсә, һәр әҫәр теге йәки был жанрға индерелеп ҡалырға ғына тейеш түгел, ә жанрҙар көрәше булараҡ ҡаралырға тейеш[11]. Был көрәштең асылы ниҙә? Бахтин яҙыуынса, һәр жанр – теүәллекте төҙөүсе һәм булдырыусы үҙенсәлекле тип, әҫәрҙе композицион яҡтан түгел, ә нәҡ тематик йәһәттән теүәл итергә кәрәк[12]. Тимәк, шиғырҙа бөтөнлөктө, теүәллекте булдырыу хоҡуғы өсөн барған жанрҙар көрәшен күрергә тейешбеҙ.

Башҡорт әҙәбиәте ғилемендә Ғ.Хөсәйенов жанрҙар системаһының был үҙенсәлегенә иғтибар иткәйне. Уның фекеренсә, әҫәрҙә жанрҙар бер-береһе менән һәр ваҡыт “ярышта” була. Үҙенә күрә конкурентлыҡ барлыҡҡа килә. Әҫәрҙә бер жанр өҫтөнлөк итеүе, ә уға икенсе жанр буйһоноп килеүе ихтимал. Өҫтөнлөк иткән жанр төп функция башҡарһа, ҡалғандары уға ярҙамсы ролен үтәй[13]. Ғ.Хөсәйенов был фекерҙе хәҙерге шиғриәткә генә ҡайтарып ҡалмай, ә, жанрҙар көрәше һәр тарихи осорға хас булған күренеш, тип билдәләй. Мәҫәлән, боронғо көнсығыш әҙәбиәте йоғонтоһонда үҫешкән күләмле эпик дастан, ҡисса кеүек жанрҙар эсендә бәләкәй жанрҙар урын алған[14].

Жанрҙарҙың үҙ-ара ярышыуы поэтик әҫәргә үҙенсәлекле төҫ өҫтәргә булышлыҡ итә.

*Төштәрҙә бәхет эҙләүсе,*
*Һиңә ҡайнар сәләмем.*
*Атлайбыҙ ғорур күтәреп*
*Хыялыйҙар әләмен.*

*Ғүмеребеҙ – ололоҡто*
*Балаларса иҫбатлау;*
*Уңға боролорға ҡушҡас,*
*Һул яҡҡа табан атлау.*

*Сәғәт телен артҡа бороп,*
*Яңыртам үткән көндө.*
*Артыҡ бер ни ҙә булманы. –*
*Тик аҡтыҡ өмөт һүнде.*

(Морат Солтанов)

Шиғырҙағы тәүге ике строфа йыр жанрына тартым. Унда хис-тойғоларҙың күтәренке булыуы һиҙелеп тора кеүек. Ләкин ысынында күтәренке кәйеф бер битлек рәүешендә генә. Уның артында көсөргәнеш, тынғыһыҙлыҡ ята. Лирик герой алға атлай, шул уҡ ваҡытта хыялы буш булыуын аңлай, сөнки бәхетен “төштәр”ҙә эҙләй. Икенсе строфала көсөргәнешле тойғолар һиҙелә төшә. Лирик

*[10] Тынянов Ю.Н.Литературный факт.//Тынянов Ю.Н.Поэтика. История литературы. Кино, С.257*

*[11] Шайтанов И.О. Классическая поэтика неклассической эпохи // Веселовский А.Н. Избранное: Историческая поэтика. М.: РОССПЕН, 2006.С.35.*

*[12] Бахтин М. Фрейдизм. Формальный метод в литературоведении. Марксизм и философия языка. Статьи. М.: Лабиринт, 2000. С.306.*

*[13] Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. I т. Өфө: Китап, 542-се б.*

*[14] Шунда уҡ.*

герой ысынбарлыҡ менән килешмәй, уға ҡаршы торорға тырыша. Өсөнсө строфала иһә яҡты хистәр бөтөнләй юҡҡа сыға. Лирик геройҙың 2-се затҡа йүнәлтелгән “ҡайнар” сәләме үҙе хаҡындағы уйланыуҙар менән алмашына. Йыр артында йәшеренгән элегия жанры шиғырҙағы юл менән асыла.

Салауат Әбүзәрҙең “Даға” исемле шиғыры ете строфанан тора. Тәүге өсәүһе эпик сюжетҡа, хикәйәләүгә ҡоролған, бәйет жанрын хәтерләтә. Тормош юлынан бара-бара өмөт-аттың дағаһы ҡубып төшөүе лирик геройҙы уйланыуҙарға илтә:

*...Әллә инде дағa итеп*
*Йөрәктеме ҡағаһы!..*

*Әгәр йөрәкте ҡуптарһам,*
*Бәреп тормош ташына,*
*Берәйһе, тим, ҡағыр әле*
*Уны ҡапҡа башына.*

Шиғырҙың ҡалған дүрт строфаһында элегия жанры өҫтөнлөк итә. Әҫәрҙә ике жанрҙың синтезға инеүе поэтик образды тулыраҡ асырға булышлыҡ итә. Жанрҙарҙың көрәшеүе асылда гармониялы бәйләнешкә әйләнә.

Шиғырҙы жанрҙарҙың көрәш майҙаны булараҡ тикшереү был “көрәш”тә ҡатнашҡан жанрҙарҙы исемләү проблемаһын үҙәккә ҡуя.

Шиғырҙағы жанрҙар көрәше автор тарафынан аңлы рәүештә ҡулланылған алым түгел, был иһә жанрҙарҙы атауҙы тағы ла ҡыйынлаштыра.

Динә Ниғмәтуллинаның бер шиғырына күҙ һалайыҡ.

*Төнгө ауыл. Әбей намаҙ уҡый,*
*Ихлас теләк теләп донъяға.*
*Кисерештәр булып күңеленән,*
*Ил хәсрәте булып, моң аға.*

Ауылдағы көндәлек тыныс тормош-көнкүрештең һүрәтләнеүе (әбейҙең намаҙ уҡыуы) – әҫәрҙә тәүге мотив. Ул шиғырҙың жанр нигеҙе булып тора. Артабан икенсе мотив килеп сыға:

*Тап шул саҡта тышта, айға ҡарап,*
*Бер эт олой йәнгә шом һалып.*
*Сәждәләрҙән тороп ултыра ла*
*Инәй тыңлай төҫлө тын ҡалып.*
*Тыңлай ҙа ул, тарих битен аса:*
*Ҡанға батҡан яуҙар араһын.*
*Әбей батша, Тәфтиләүҙәр килеп,*
*Ерен талап һалған яраһын.*

Был мотив тәүгеһенә ниндәйҙер рәүештә ҡапма-ҡаршы ҡуйыла. Эттең олоуы халыҡтың үлемесле афәтенә ишара булып тора. Шулай икенсе мотив эсенә өсөнсөһө һалына. Ләкин был мотивтар көндәлек тормош-көнкүреште боҙмай, намаҙ уҡыған әбейҙе уйланыуҙарға ғына илтә:

*Бүре саялығын алған халҡым*
*Күтәрерме илен, үҙаңын,*
*Көрәш менән быуған быуаттарҙың*
*Ҡағырмы, – тип, – бер саҡ туҙанын.*

Һуңғы строфала иһә ике мотив бер-береһенә ауаздаш булып тора.

*Төнгө ауыл. Әбей тәсбих тарта,*
*Доғаларын һалып хыялға.*
*Әйтерһең дә, олой баш бүребеҙ,*
*Сал тарихын һөйләп хилалға.*

Әбейҙең донъяға теләгән теләктәре үҙенең бер яҡты хыялы булып сыға. Эттең олоуы иһә оран төҫөн алған бүре олоуына әйләнә.

Жанр шиғырҙағы мотивтар комплексы менән генә түгел, ә уларҙың үҙ-ара бәйләнешкә инеү һөҙөмтәһе менән дә билдәләнә. Мотивтар жанр нигеҙе статусына "үҫеп етергә" мөмкин. Жанр нигеҙе иһә әҫәрҙе тамамлауға йүнәлеш бирә. Мәҫәлән, ҡаралған шиғырҙа тыныс тормош, дини мотивтар әҫәрҙе оптимистик рухта тамамлауҙы һорай. Тарихи мотивтар иһә көсөргәнешле кисерештәр, һағыш менән тамамлауға этәрә. Әҫәрҙә хикәйәт жанрына тартым тасуирлау алымына эпитафия жанры элементтары ҡушыла. Һуңғы строфала ике жанрҙың бергә уҡмашыуы күҙәтелә. Легендаларҙан килгән "баш бүре" образы хикәйәт жанрын нығыта. Бүренең олоуы иһә бер үк ваҡытта һағыш та, оран да булып яңғырай.

Лирик сюжеттың ошондай констурцияһын башҡа авторҙарҙа ла осратырға мөмкин. Ринат Сөләймәновтың бер шиғыры оҡшаш мотивтар менән башланып китә:

*Тышта ҡойон уйнай. Өйҙә*
*Әсә орсоҡ өй(ө)рөлтә.*
*Яуҙа ятып ҡалған улын*
*Хыялында терелтә.*

Тормош-көнкүреш мотивы һуғыш мотивы менән үрелеп килә. Әгәр ҙә тәүге әҫәрҙә конфликт эт олоуы аша бирелһә, бында ҡойон уйнау мотивы аша сағылдырыла:

*Ямғыр ҡатыш ҡупҡан ҡойон*
*Үткән һуғыш енеләй.*

Ләкин был шиғырҙа "Ҡойон" образы тәүге мотивҡа ла барып инә:

*Хас та ғына ҡойон һымаҡ*
*Өй(ө)рөлә ҡулда орсоҡ…*
*Көҙөлдә лә ҡойон уйнай,*
*Һуғыш хаттарын уҡып.*

Яуҙан ҡайтмаған улы өсөн ойоҡбаш бәйләгән әсә образы һуғыш мотивына ҡаршы тора, шул уҡ ваҡытта лирик геройҙың кисерештәрен генә түгел, тарихи ваҡиғаның ниндәй аяныслы булыуын да тулыраҡ асырға мөмкинлек бирә.

Контраст образдар аша автор кире күренеште бар трагизмында һүрәтләүгә өлгәшә:

*Бәйләмен алып ҡулына,*
*Ярһып тамам бойоҡҡас,*
*Һуҙһеҙ юғалған улына*
*Бәйләй йөндән ойоҡбаш.*

Шиғырҙы формаль рәүештә лирик субъекттың тыныс көнкүреше тамамлай. Бындай тамамлауҙы автор аңлы рәүештә һайлай, сөнки шиғырҙың эпик сюжеты ошоно талап итә. Ләкин әҫәрҙең аҙағы лирик субъекттың трагизмын, киреһенсә, көсәйтә генә.

Был әҫәрҙә шулай уҡ эпитафик элементтар урын алып тора. Ләкин, нигеҙҙә, бәйет жанры ята, тип әйтергә була. Бында бәйет асылын тормош-көнкүреш, һуғыш мотивтарынан да күрергә була.

Шулай итеп, әҙәбиәт ғилемендә "жанрҙар көрәше" тип билдәләнгән күренеш асылда – жанрҙарҙың гармоник рәүештә синтезға инеүе, бер-береһен тулыландырыуы. Ул әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен тулыраҡ асырға булышлыҡ итә.

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

*Башҡортостандың халыҡ шағиры*
*Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл*



**Рәми**
**Ғарипов**
(1932 - 1977)

**Римма**
**ҒӘЛИМОВА**

* * *

*Аҙ-маҙ һинең менән күрешкәне*
*Үҙен-үҙе даһиламаҡ була,*
*Ҡулъяҙмаңды уңға-һулға болғап,*
*Яҡыныңды яһилламаҡ була.*

*Алтмышының аръяғына сыҡҡан*
*Хәтерендә аяҡ йыуҙырмаҡсы,*
*Мостайын да, Бикбайын да ҡушып,*
*«Шағирә» тип фекер тыуҙырмаҡсы.*

*Бөйөктәрҙән-бөйөк һүҙҙәр һөйләп*
*Ҡала мәктәптәрен урап сыҡты.*
*Ялған һүҙҙән хатта ер ерәнеп,*
*Февраль аҙағында буран сыҡты.*

*Имандарын һатҡан ҡәләмдәштәр*
*Һәр заманда булған, буласаҡмы?*
*Һинең һымаҡ тел ҡәҙерен белгән*
*Меңгә берәү генә тыуасаҡмы?*

*Көтөү-көтөү «дуҫ-иштәрең» хәҙер*
*Күләгәңә йөрөй эйәреп шул,*
*Намыҫ боҙоп хәтер тапалғанда,*
*Көймәҫ ерҙәреңдән көйөрһөң шул!*

*Тәмәкене бергә көйрәткәндәр,*
*Бер табында күмәк ултырғандар,*
*«Этлек» ҡылғаны ла — баҫмаларҙы*
*Хәтирәләр менән тултырғандар.*

*Хәтер һандығының төптәренән*
*Килеп сыға «ағы», «ҡараһы» ла...*
*Йылдар үтеү менән баҫылырмы*
*Киткәндәрҙең йөрәк яраһы ла?!*

## *Сирҡанам*

*«Рәми ағай» тиеп һүҙ әйткәнгә*
*Әйтер һүҙем: «Етер, ялҡыттығыҙ!*
*Йырын, ғүмерен дә шул саҡ түгел,*
*Ниңә бөгөн генә балҡыттығыҙ?*

*Дауылдарҙа ҡайҙа инегеҙ һеҙ,*
*Уның «Табыныу»ын аҡлаусылар?*
*Өйөрмәләр уҙып, йыр өҙөлгәс...*
*Төйөр тығылмаймы, яҡлаусылар?*

*Изге булып ҡыланмағыҙ хәҙер,*
*Ҡуҙғатмағыҙ уның тулы йәнен...*
*Һеҙҙең шәфҡәт тынлыҡ боҙған саҡта,*
*Сирҡаныуҙан өшөй йылы тәнем».*

*Беҙҙең быуын мәрхәмәтле булһын,*
*Тауышымды ишет, ижади дуҫ?!*
*Әйтер һүҙең булһа, үлгәс түгел,*
*Тере саҡта килеп ҡулымды ҡыҫ!*

* * *

Эй, кешеләр, үҙе иҫән саҡта
Белһәгеҙсе шағир ҡәҙерен.

**Рәми ҒАРИПОВ**

*Китә шағир, ҡала йырҙары*
*Маҡтап йылғаларҙы, ҡырҙарҙы...*
*Ҡапма-ҡаршы яҡтың ярҙары,*
*Ярты юлда өҙгән йыр-зары.*

*Туҙан баҫҡан юлдар табыла:*
*Шиғыр сыға, китап баҫыла.*
*Иҫтәлеккә тула гәзиттәр,*
*Кемдер өсөн шағир асыла.*

*Һүнгән кисерештәр, өмөттәр*
*Һуңғы юлдарына түгелгән.*
*Белмәгәндәр уның ҡәҙерен —*
*Йыры йәшәй, үҙе күмелгән.*

*Һуңламайса, иҫән сағында*
*Ишетәйек шағир йәберен.*
*Үлмәҫ элек белһә ине ул*
*Кемдәр тигеҙләрен ҡәберен!..*

## ХАТ

Редакция архивын барлағанда бер хатҡа юлыҡтыҡ. Дөрөҫөрәге, хат эсендәге хатҡа. Моғайын, Рәми ағайға бәйле булыуы иғтибарҙы йәлеп иткәндер...

**Редакция.**

*«Ҡәҙерле яҙыусылар!*

*Һеҙгә ғүмер буйы партбилет урынына йөрөтөлгән хаттың күсермәһен ебәрәм. Ул — Рәми Ғариповтың хаты. Бына ун бер йыл уҡыйым, шул хәтлем ҡәҙерле, йылы, яҡын, дөрөҫ һәм талапсан. Ә унан һуң кемдәрҙән генә хат алманым — барыһы ла ҡоро ла формальность. Ә Рәми Ғариповтың был хатын башлап яҙыусыларға өндәмә урынына ҡулланырға мөмкиндер, тип уйлайым. Һәр хәлдә уның ошо матур һүҙҙәре юғалмаһын, бик булмаһа, архивҡа булһа ла һалып ҡуйырһығыҙ...*

*Барығыҙға ла һаулыҡ, илһам,*

*ижади уңыштар теләйем.*

**Зилиә Ҡужабәкова,**
**Ҡаҙағстан».**

Рәми Ғариповтың яуап хаты:

*«Ҡәҙерле Зилиә һылыуҡай.*

*Иң элек һине Әсә булыуың менән ҡотлайым, үҙеңә әсәлек бәхете, эшеңдә, тормошоңда ҙур уңыш теләйем, ғаиләгеҙ күркәм, татыу булһын!*

*Редакцияға ебәргән шиғырыңды уҡып мин бик уйға ҡалдым. Уларҙан, быға саҡлы шиғыр яҙғаның булмаһа ла, һинең бик шиғри күңелле булыуың, донъяны үҙеңсә күрә белеүең, өмөт-хыялдар менән йәшәүең күренеп тора. Ләкин был эшкә ысынлап тотонор өсөн бик һуң түгелме икән? Һигеҙ класты бөткәнеңә лә алты йыл үтеп киткән, тормоштаһың. Тимәк, һиңә артабан уҡыу мөмкинлеге бик икеле. Ә шулай ҙа уйлайһың, хыялланаһың, өмөт итәһең, үҙеңдең йәшәүеңдән нимәлер эҙләйһең. Шуларҙың «саҡ ҡынаһын» да кешеләргә еткереү өсөн һинән бик күп нәмә талап ителә шул, һылыуҡай. Шиғриәт ул иҫ киткес ауыр эш, ул үҙе өсөн бөтә нәмәңде ҡорбан итеүҙе һорай. Быны өсөн һиңә бөтөнләйгә яңынан йәшәй башларға кәрәк булыр ине. Ләкин һин хәҙер һигеҙенсе класҡа әйләнеп ҡайта алмайһың бит?*

*Ярай, «Өмөт» кеүек бер-ике шиғырыңды бер аҙ төҙәткеләп баҫып та сығарҙыҡ, ти («Өмөт» тигән шиғырың баҫып та сығарырлыҡ). Ә унан һуң ни? Бөгөн Бөтә Союз кимәленә күтәрелгән башҡорт шиғриәтенә һин ниндәй яңы фекерҙәр, ниндәй яңы образдар, бығаса күрелмәгән ниндәй яңы шиғри шәхес алып килә алаһың?*

*Поэзияның бына ошо төп талаптарынан сығып ҡарағанда, бер-ике шиғыр яҙған кеше генә түгел, хатта бер-ике китап сығарған әҙиптәребеҙ ҙә әле быға яуап бирә алғаны юҡ. Сөнки һәр ысын шағир – үҙе бер донъя, үҙе бер дәүләт бит ул! Уның был дәүләтендә ул тик үҙе генә ҡорған тәртиптәр бар. Уға бер кем дә ҡыҫыла, тығыла алмай. Уны, әлбиттә, ҡайһы берәүҙәр танымаҫҡа ла мөмкин. Ләкин ул бар икән, ҡасан да бер таныясаҡтар. Ысын шиғриәт бер ҡасан да юғалып ҡалмай. Тик бындай шиғриәткә – үҙ дәүләтенә ысын талант тау-таш юлдарҙан ялан аяҡ ҡанлы эҙ ҡалдырып ҡына килә ала.*

*Ә мин һиңә, үҙеңә шундай юл ярып кил, тип әйтә аламмы һуң, Зилиә һылыуҡай? Был бик шәфҡәтһеҙлек булыр ине. Был юлда ниндәй генә таланттар балҡып һүнмәне!..*

*Әлбиттә, бер-ике шиғыры ғына йыр булып ҡалғандар ҙа бар. Ғилмияза үҙ йырын үҙе сығарған бит. Әгәр ҙә йөрәгеңә һандуғас оялаған икән, һайраһын, күңелеңде, тормошоңдо биҙәһен. Уй-хыял, шиғри хис менән йәшәү – үҙе бер бәхет бит әле. Яҙмайынса булдыра алмайһың икән, яҙ, һылыуҡай, йырла. Тик башҡаларҙың йырына ла ҡолаҡ һал, күп уҡы, өйрән, шиғыр серҙәренә ныҡыраҡ төшөнөргә тырыш.*

*Яҙғандарыңды миңә ебәрергә теләһәң, Башҡортостан Яҙыусылар союзына ебәр.*

*Сәләм менән –*

*Рәми ҒАРИПОВ.*

***1977 йыл, ғинуар».***

*Әсәйем Бибинәгимә Хажиева ғүмерен кешеләрҙе дауалау эшенә бирһә лә, бөтә күңеле менән ижадҡа, әҙәбиәткә тартылып йәшәне. Уның шиғырҙар, поэмалар, хикәйәләр яҙғанын беләм. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, нишләптер, әҫәрҙәрен үҙендә тотмаған, әхирәттәренә таратып биргән. Был Сталин репрессияһы шауҡымылыр, тим, сөнки медицина техникумында бергә уҡыған дуҫ ҡыҙҙарының күбеһенең яҡындары (улар араһында күренекле яҙыусылар ҙа бар) ошо ҡанһыҙ режимдың ҡорбаны булған.*

*"Әҫәрҙәрен төрлө конкурстарҙа яттан һөйләп, беренсе урынды алған яратҡан шағирҙарым ҡапыл ғына халыҡ дошманына әйләнде лә ҡуйҙы. Шуҡ малайҙар: "Бында тағы бер дошман ҡалған бит",– тип мине үсекләй торғайны. Әҫәрҙәремде баҫтырһам, миңә лә көн күрһәтмәҫтәр ине", – тигәндәре хәтеремдә.*

*Саҡ ҡына буш ваҡыты булһа, ҡулында йә китап, йә ҡәләм булыр ине, әммә әсәйем әҫәрҙәрен, билдәле сәбәптәр арҡаһында, баҫтырырға тырышманы. Шулай ҙа, һәр бер ижадсы кеүек, уларҙың донъя күреүен теләгәндер, тип уйлайым. Хикәйәләре "Ағиҙел"журналында, "Башҡортостан", "Йәншишмә"гәзиттәрендә донъя күргәйне инде. Латин хәрефтәре менән яҙылған, «1939 йыл» датаһы ҡуйылған әлеге мираҫы ҡул теймәй байтаҡ ятты. Ниһайәт, уны әҙерләп, редакцияға тапшырырға булдым. Вафатынан саҡ ҡына алда әсәйемдең ғүмерлек әхирәте Ғилмиә апай ебәргәйне уны. Повесҡа тартым был әҫәр әсәйемдең һөйөклө тыуған төйәге – Шишмә районының Иҫке Ябалаҡлы ауылына, уның алсаҡ күңелле, эшһөйәр халҡына бағышланған. Әҫәр, минеңсә, социаль-тарихи, этнографик йәһәттән дә бик ҡыҙыҡлы.*

***Әҫәрҙе матбуғатҡа әҙерләүсе –***
***Әлисә НИҒМӘТУЛЛИНА.***

Бибинәғимә
ХАЖИЕВА

# ГӨЛБАНЫУ

## ПОВЕСТЬ

### I

Тигеҙ йәшеллек уртаһындағы оҙон күлде Ологүл тип йөрөтәләр. Ҡуйы толомдарын һыуға һалындырған муйыл, талдар, әҙ генә елгә лә ҡушылып йырларға торған шыҡандаҡ ҡамыштар уратҡан был күлдән тыш, Дим туғайында эреле-ваҡлы күлдәр һәттәй үк: Шымакүл, Усаҡлыкүл, Алтынкүл, Ярсүгермәк, Түңәрәккүл... Әммә иң дәүе, иң күрмәлеклеһе – Ологүл. Ике башы менән дә әҙ генә Димгә етмәй туҡтаған ул, һәм күренеше менән һис кенә лә күлгә оҡшамаған. Ҡарттар һөйләүенсә, ҡасандыр Дим ошонан аҡҡан. Йылдар үтеү менән йылға үҙенә яңы юл алған, иҫке үҙәк Димдән айырылған һәм «үле йылға» булып ҡалған. Ошо үле йылға яҙ һайын терелә лә үҙенең ҡасандыр ысын йылға булыуын иҫенә төшөрә: юлын быуып ятҡан ҡоршауҙарҙы емереп, тышауҙан арынған йәш тай шикелле сабырһыҙланып, ҙур һыуға табан уҡтала. Туғайлыҡтарҙағы ваҡ-ваҡ күлдәр, ҡар һыуҙары ағып төшөп, ярҙары мөлдөрәмә тулғас, йәндәй күргән туғандарына ашыҡҡандай, уға табан атлыға. Аҫау айғырҙай ҡотороноп, Дим дә ярҙарынан ташып сыҡҡас, киң туғайҙар, болондар урынында ажарлы бер даръя барлыҡҡа килә. Өйөрөлөп-өйөрөлөп, ярһып, хатта ҡайһы саҡ яһилланып аҡҡан был ҙур һыуға һоҡланып та, бер аҙ һағайып та баға кешеләр. Тик берәү ҙә зарланмай: тәбиғәттең сая был ҡылығы үҙ һәм яҡын башҡорт балаһына. Шуға күрә лә күрше ауылдарға йомоштары төшһә, эһ тә итмәй, кәмәгә ултырып сығып китәләр. «Аллаға шөкөр, таҙара күлебеҙ, балыҡҡа байый»,– тип һөйөнөп туя алмайҙар.

Күп урындарынан шишмәләр сығып ятҡанға ла, тәмле, йомшаҡ һыулы, тәрән ул Ологүл. Күлдәр ауылын, көтөү-көтөү малдарын һуғара. Төбө ваҡ таш, ҡомдан торғанға, һис ҡасан болғанмай, бысранмай. Унда йыл әйләнәһенә балыҡ тоталар, өҫтәүенә, йәйҙәрен ул аҡсарлаҡтарҙың, өйрәк-ҡаҙҙарҙың да тамағын туйҙыра, текә ярҙарында ҡара ҡарлуғастарға ла төйәк бирә.

Йәй башындағы иртәләрҙә айырыуса һөйкөмлө был күл. Йәнтеүәл тауы артынан йылмайып килеп сыҡҡан ҡояш: «Наҙланып ятма, тор»,– тигәндәй, ипләп кенә күл өҫтөндәге ебәк сымылдыҡты тартып ала. Шуны ғына көткәндәй, эшкүрем иртәнге ел ҡамыш, ағас, ҡыуаҡтарҙың сәстәрен тарап уҙа, күлдең тулҡынын сайпылтып, ялбырбаш талдарҙың тыңлауһыҙ толомдарын сайҡай, һыу төбөнән ҡалҡып, көндө һағыныуын йәшермәй, йәш аралаш көлөп торған ап-аҡ томбойоҡтарҙың йәшен һөртә. Төнө буйы ғашиҡтарҙы иләҫләндереп, әҙәм балаларының күңелен яҡты нурға ҡойондороп моңландырыусы һандуғастар, яңы көнгә һөйөнөп, телһеҙ ҡала...

Күлдәр ауылы һыу буйлап ике саҡрымға һуҙылған. Тирә-яғында ҡалын урмандар булмаһа ла, бай, күркәм, данлыҡлы ауыл. Ул ҙур өс урамдан тора. Тимер һәм таҡта менән ябылған бейек өйҙәр, буялған ҡоймалар, йәмле баҡсалар, таш

амбарҙар, ҡушарлап-ҡушарлап һалынған аҡ келәттәр ауылдың байлығы, тормоштарының муллығы хаҡында һөйләй. Оло урамдың урта тошондағы йәшелгә буялған ике мәсет – ауылдың иң ҙур күрке. Унының алтынланған айҙары төндәрен дә әллә ҡайҙарҙан уҡ ялтлап күренә.

Ауылдың көнбайышында – йыраҡҡа, әллә ҡайҙарға һуҙылып киткән далалар. Унда өйөр-өйөр йылҡылар, меңәрләгән ҡуйҙар, туҡ, һимеҙ һыйырҙар сәхрәлә кинәнеп йөрөй.

Көнсығышта, Ологүл менән Дим араһында, ҡамышлы, бөҙрә таллы түңәрәк күлдәр һибелгән. Ҙур зәңгәр күҙҙәргә оҡшаш был күлдәрҙә ҡаҙ-өйрәктәр, аҡҡоштар ҡара көҙгәсә рәхәт ғүмер кисерә. Туғайҙа турғай башы ҙурлығындағы eләктәр бешә, өйөрмә талдарының эсенә барып инһәң, һутлы ҡара бөрлөгәндәр томрап ултыра, һыу тартымында суҡ-суҡ булып үҫкән ҡарағаттары, муйыл, баландары «мине йый» тип юлыңды бүлә. Күҙҙең яуын алып торған сәскәләргә күмелеп ятһаң, Ер-әсәнең һаҡ ҡына тауышын да тояһың: «Балам, йәмле донъяның ҡәҙерен белеп, изгелеген күреп, үҙең дә изгелек ҡылып, ҡыуанып йәшә»,– тип әйтә һымаҡ ул.

Йәй урталары. Көн кисәүләп бара. Ҡояш инде һүрелгән, һауа талғын ғына булып ҡалған. Уҫаҡлыкүл өҫтөндә кәмәлә халыҡ геүләй:

– Уратығыҙ, урат шул яҡлап!

– Ҡайҙа китте һуң Аҙнабайҙар – көслөрәк йәштәр?

– Улар тегендә – Ҡарауыл ауыҙында...

– Олатай, ҡара әле, бер ҙур балыҡ күренеп ҡалды, әллә һыу инәһеме икән? Ана, сумды!

– Балыҡтарҙың батшаһы эләккәндер, улым.

– Олатай, һыу инәһе балыҡ батшаһынан да көслөрәк буламы?

– Бөтәһенән дә көслөрәк була. Ул маңҡа танаулы ҡара малайҙарҙы ярата, сыҡҡан көйгә эләктереп ҡуймаһын тағы.

– Йылымға уралған булһа ламы? Ул минең арттан етә алмаҫ, Һаратты менеп ҡасырмын.

– Кинйәғол ағай, ике боттар самаһы булыр, елле бит, әй!

– Булыр, ни тикле тулай, йылымдың аҫтын-өҫкә килтерә!

Ир-ат, йылымды һөҙәк ярға һөйрәп сығарғас, балыҡтарҙың төрө, уҫаллыҡтары хаҡында ишеткән-күргәндәрен һөйләй-һөйләй, эләккән табышты сүпләп ала башланылар. Балыҡ, ысынлап та, күп һәм төрлө ине: бәләкәй ауыҙлы, һары тәңкәле яҫы табан балыҡтар, йәшкелт һыртлы, түңәрәк ҡанатлы ҡарабалыҡтар, йыртҡыс суртандар, көмөш төҫөндәге йыуаш сабаҡтар, йәшкелт-ала тәнле, сәнскеле алабуғалар, ҡурҡаҡ ҡыҙылғанаттар – бөтәһе лә бар. Шулар араһында киң ялпаҡ ауыҙлы, шыма тәнле тәкәббер йәйен, йыртҡысланып, мыйыҡтарын һикертә, ҡойроғо менән бәргеләнә. Балыҡсылар, балыҡтарҙы йылдам сәнсеп, йүкә тоҡтарға тултыралар, үҙҙәренә оҡшағандарын бер яҡҡа – бешерергә алып ҡуялар. Ете йәштәрҙәге, көнгә янған түңәрәк йөҙлө йыуантыҡ Аҙнағол, ҡыҙыл ыштанының балаҡтарын теҙҙән юғары ҡайтарып, улар араһында өйөрмә һымаҡ бөтөрөлә, серәкәй тешләгән ерҙәрен тырнай-тырнай:

– Һыу инәһе төшөп ҡастымы ни, йылымды йыртҡанмы әллә? – тип бөтәһенән дә һораша, ләкин уға берәү ҙә рәтле яуап бирмәй. Ҙур аҡ һаҡаллы, ҡыҙыл ыштан, аҡ күлдәк кейеп, биленә киндер алъяпҡыс бәйләгән олатаһы Кинйәғол,

йәмшәйгән кейеҙ эшләпәһен елкәһенәрәк этәреп, бойороҡтар биреп йөрөй. Шундай уҡ алъяпҡыслы ир-ат уның ҡушҡанын ашығып үтәй.

– Йәмәғәт, ҡайһығыҙ балыҡтарҙы алып ҡайта?

– Миңлеғол инде, уның ҡар баҙы ла ҙур, – тине Аҙнабай.

– Бөтә мәшәҡәт Миңлеғолға, – тип йөҙөн сирылтты тегеһе.

– Эш бөтәбеҙгә лә етә, улым, – Кинйәғол, егетте тынысландырып, ҡулын уның елкәһенә һалды. – Хәҙер бөтәһен дә килешәбеҙ. Һин алып ҡайт та ҡар баҙыңа урынлаштыр. Иртәгә билдәләнгән кешеләр килеп алыр ҙа баҙарҙа һатырҙар. Ә теге һыу тәкәһен үҙ-ара бүлешербеҙ, һимеҙ ул, һурпаһы арыу булмаҫсы...

*Һикерҙем ситәндәрендә,*
*Йүгерҙем, етә алманым.*
*Ни булды икән был телемә:*
*«Һау бул»,– тип әйтә алманым.*

Һыу аръяғынан килгән йырға ҡарттар әһәмиәт бирмәһәләр ҙә, йәштәрҙең ҡолағы ҡарпайҙы: эшләпәләрен күтәрә биреп, еләктән ҡайтыусы ҡыҙҙарҙы күҙләп, шымып ҡалдылар. Аҙнабай әллә ҡайҙан уҡ оҙон ҡара толомло, зифа буйлы Гөлбаныуҙы таныны. Йәнкиҫәге бөгөн уға айырыуса һөймәләкле, айырыуса яҡын. Итәкләп тегелгән ситса күлдәге лә, ситеге лә матурлығын арттырып, үҙенә килешеп тора тағы, тауышы ла моңло. Егет бирелеп тыңланы, йырҙың бар ялҡынын, бар моңон йөрәгендә кисерҙе. Һөйгәне уның өсөн генә йырлай һымаҡ тойолдо уға.

«Йырлай, Гөлбаныу йырлай. Шул, үҙе», – тип уйланы Аҙнабай, арғы яҡтан күҙен ала алмайынса. Оҙаҡламай ҡыҙҙар һөрәнләй ҙә башланы:

– Кинйәғол бабай!

– Олатай! Беҙҙе сығып алығыҙ!

– Ҡара һин шилмаларҙы, уйна, Хөснулла, ҡурайыңды! – тине ҡарт. – Буштанбушҡа кәмә ҡыуып булмаҫ.

Хөснулла – ауылда ғына түгел, тирә-яҡта данлыҡлы ҡурайсы – инәлтеп торманы. Еҙ ҡурайын алды ла өҙҙөрөп бейеү көйөн уйнап ебәрҙе.

Ҡыҙҙар хәлгә тиҙ төшөндө: һауыттарын сиҙәмгә ҡуйып, көлә-көлә тыпырҙап бейергә керештеләр. Өс-дүрт кәмә бер юлы аръяҡҡа йүнәлде. Ҡурай һаман уйнаны, ҡыҙҙар, осҡон сәсрәтеп, йәшел сиҙәмдә йәнле сәскә булып әйләнде. Кәмәләр ҡомло ярға килеп төртөлгәс, Гөлбаныу, күнәген алып, Аҙнабай янына һикереп менеп ултырҙы, ике әхирәте лә уға эйәрҙе. Егет юрый кәмәне ҡыйығайтҡайны, ҡыҙҙар «Сый-й-й!» итеп ҡалды, Гөлбаныу, йығылыуҙан ҡурҡып, Аҙнабайҙың беләгенә сат йәбеште. Тегеһе, шау-шыуҙан файҙаланып, ҡыҙҙы биленән алды, үҙенә табанырак тартты: «Ҡурҡма», – тигән булды. Был хәл йәшен тиҙлеге менән булғанға, бер кем һиҙмәне, шулай ҙа оялыуҙан, тулҡынланыуҙан ҡыҙҙың яңаҡтарына ут ҡапты. Ул, һиҙҙермәҫ өсөн, башын эйҙе, ҡулын һыуға тығып, тулҡындар менән шаярғандай итеп барҙы. Аҙнабай, уны тынысландырыу өсөн, башҡалар менән шаярҙы, ҡыҙыҡ һүҙҙәр әйтеп көлдөрҙө, үҙе күҙ ҡырыйы менән генә йәнекәйен күҙәтте: «Асыуланмаһа ярар ине...» Гөлбаныуҙың асыуланырға уйында ла юҡ ине, ул үҙҙәре менән йәнәшәләге кәмәләгеләргә һыу сәсрәтергә керешә. Тегеләре лә яуапһыҙ ҡалманы – китте ике арала сәмле алыш. Күҙҙәре осҡонланып янған, күлдәге һомғол тәненә һылашҡан, ҡалын толомдарынан

тамсылар тамып торған йәнкисәген ҡосаҡлап алыуҙан саҡ тыйылды егет. Ошо һоҡланғыс минуттарҙы оҙағыраҡ һуҙырға тырышты: һынсыл ҡарттар күҙенән ҡасып, кәмәне өйөрмә талдың һул яғына сығарҙы. Лысма һыу булған йәштәрҙең юрамал әрепләшеүе, ғауғалашыуы араһында, ваҡыт табып, бер нисә һүҙ әйтә алды:

– Бөгөн сығырға тырыш.

Ҡыҙ ҙа яуапһыҙ ҡалманы: ең эсенән бөтәрләнеп бөткән хат кисәген алып төрттө лә, мәғәнәле йылмайып, әхирәттәренә ҡушылды. Аҙнабай шатлығынан ни эшләргә лә белмәне. Уғаса булмай, ҡарттар тауыш бирҙе:

– Балалар, килегеҙ беҙҙең менән балыҡ ашарға!

– Рәхмәт хөрмәтегеҙгә, кис була!

– Үҙегеҙгә рәхмәт, күңелдә астығыҙ!

Аҙнабай эшләпәһен тултырып еләк йыйып алды, ҡыҙҙарҙы уйын һүҙҙәр һөйләп көлдөрөп, тыҡрыҡҡа ҡәҙәр оҙатып ҡуйҙы, аҙаҡ ҡулын яндырып барған хатты уҡымай түҙмәне.

– Һе, ҡыҙҙар күҙләп, балыҡтар иҙелеп бөткән, – тип кет-кет көлөп ҡаршы алды уны Хөснулла ҡарт. – Күңел, бисараҡайың, ҡартаймай шул. – Көлөшә-көлөшә күнәкте усаҡтан алдылар ҙа, түңәрәкләп ултырып, һурпа эсергә, балыҡ ашарға керештеләр. Кәйефе күтәрелгән Аҙнабай:

– Ялан ашы иллә тәмле була икән, Кинйәғол бабай,– тине.

– Әйтерең бармы! – Ҡарт һүҙ ҡушҡан егеткә шикләнеңкерәп күҙ һалды. Аҙнабай алдан уҡ быға әҙер ине: ҡыҙарманы, ҡаушаманы, ҙур ҡабып ашауында булды. Кинйәғол уның көнгә янған, эшсәнлек бөркөлөп торған тығыҙ, таҙа беләктәренә, киң күкрәгенә күҙ төшөрөп, эстән генә: «Малай яҡшы,– тип ҡуйҙы, шунда уҡ Гөлбаныуҙы һоратыуын, үҙенең ризалыҡ бирмәүен иҫләп, шөбһәләнде: – Бөгөн Гөлбаныуҙан күҙ яҙлыҡтырмайһы булған икән дә, был нәмә ҡыҙҙың башын әйләндеререргә лә күп һорамаҫ. Заһиҙулла хәҙрәт менән ҡоҙалыҡты емереп ҡуймаһындар, танауына еҫ кергәнсе оҙатырға кәрәк. Ҡарсыҡ ауырыу, килен йомшаҡ».

Ҡарт өндәшмәҫ, күндәм улын иҫәпкә лә алманы. Ҡыҙыҡһынып һүҙ башланы:

– Аҙнабай улым, балыҡсы булырға теләйһеңме?

– Юҡ, ағайым урынына ғына килдем, Дурасауға киткәйне.

– Нимә, балыҡ һатамы әллә урыҫтарға?

– Бирәүгә мунса бурағайныҡ, шуның хаҡын алырға тейеш.

– Ағайыңдар ҡаршыһындағы бураң да зәһәр. Уныһын да һатаһыңмы?

– Үҙемә өй күтәрергә самалап торам.

– Хуп, бик хуп,– ҡарт балыҡсы шулай тиһә лә, күңеленә йәнә шик төштө, «Туйҙы йәһәтләргә кәрәк» тигән ниәт мейеһендә ныҡлы урын алды.

– Балыҡсы булмайым тиһең инде.

– Йорт эшен эшләргә, мал-тыуар ҡарарға ла кәрәк бит.

– Шулай шул, улым, дөрөҫ,– тине Кинйәғол аталарса. – Балыҡ менән генә мандырмын тимә. Минең олатай мәрхүм бик бай старшина булған. Көтөү-көтөү малының иҫәбен-хисабын йүнләп үҙе лә белмәгән. Улын, йәғни атайымды, өҫ тапҡыр Ырымбурға кадет корпусы тигән һиммәтле урынға уҡырға алып барып урынлаштырған, ҙур кеше итергә өмөтләнгән, ә атайым гел ҡасып ҡайта ла Дим, Уҫаҡлыкүл, Ологүлдә балыҡ ҡармаҡлап тик йөрөй икән. Көтөү-көтөү

5*

малдарҙан нимә ҡалғаны үҙегеҙгә мәғлүм инде. Малды тырышып, ҡәҙерләп ҡараһаң ғына мал ул.

Көнө буйы һыу кисеп, балыҡ аулап асыҡҡан балыҡсылар «Шулай, шулай» тигәндәй баш ҡағып, ашауында булдылар, берәү ҙә ас ҡарынға һүҙ сурытырға теләмәне.

Аҙнабай, бөтәһенән алда туйып, тороп китте. «Осло морондар ҡотороп китте» тип бер ҡосаҡ ҡоро сатыр-сотор йыйып, усаҡҡа ташланы. Сүгәләп, усаҡтағы утындарҙы рәтләштерҙе, үҙе яңы ғына булып үткән ваҡиға, Гөлбаныуҙың хаты хаҡында уйланды. Хат былай ине:

«Аҙнабай!

Мине Төркмән ауылы Заһиҙулла муллаға икенсе ҡатынлыҡҡа бирергә йыйыналар. Олатайымдар риза, ҡалым хаҡында ғына тартыш бара, буғай. Әле асыҡтан-асыҡ әйтмәйҙәр, еңгәм Айһылыу арҡылы ғына белдем. Ысынлап бирергә уйлаһалар, һин әйткәнгә ризамын. Гөлбаныу». «Ниндәй матур, аҡыллы һүҙҙәр»,– тип уйланы егет. Йөрәге сығынсы ат шикелле ярһып тибергә кереште. Гөлбаныуҙың һомғол кәүҙәһе, оҙон керпектәре аҫтынан серле йондоҙ һымаҡ балҡыған ҡара күҙҙәре йәнә күҙ алдына килеп баҫты...

Табында әңгәмә ҡуйырып китте: данлы арғымаҡтар, уҫал юлбаҫарҙар, ен-пәрейҙәр – береһе лә ҡалманы. Ен-пәрейҙәр хаҡында иң күп белеүсе – Хөснулла. Ул йөрәккә үтерлек серле, аҡрын тауыш менән һөйләй. Таҡыр башы киске шәфәҡ нурында ялтырай, һирәк кәзә һаҡалы һелкенә, ҡарағусҡыл йөҙө ут яҡтыһында ниндәйҙер селтәр ептән үрелеп яһалған һымаҡ булып тора, ҡара күҙҙәре осҡонланып яна. Тыңлаусыларға ул ҙурая, ҡабара, ябыҡ сандыр ҡарттан ендәр менән көрәшеүсе батырға әйләнә бара һымаҡ. Хәҙер генә күккә күтәрелер ҙә енпәрейҙәр иленә ҡарай тауҙар аръяғына осор кеүек. Еҙ ҡурайын бер уйнау менән бөтә шайтандар, хатта ендәр батшаһы үҙе лә ҡалтырап ҡалыр шикелле.

Ауыҙын аса биреп Хөснулла ҡарттың алдына уҡ килеп ултырған Аҙнағол, саҡ иҫен йыйып:

– Ендәр бөтәһе лә көслө буламы?– тип һораны.

– Улар көслө, әммә Хоҙай Тәғәлә кешене мең тапҡыр көслөрәк итеп яралтҡан.

– Һин уларҙы күргәнең бармы, бабай?

– Булмаймы һуң, ер сүбе кеүек осрай улар. Төрлө сүрәткә инә алалар: ҡайһылары эт, бесәй булып күҙгә күренә, кеше рәүешендә лә йөрөй. Минең олатайымдың олатаһының әсәһенең олатаһын ендәр урлаған бит.

– Нисек?

Барыһының да ҡыҙыҡһыныуҙарын күргәс, Хөснулла, кәйефләнеп, ҡалҡына биреп ҡуйҙы ла һөйләргә кереште:

– Олатайымдың олатаһының әсәһенең олатаһы бик бай булған. Малдары һин дә мин, ә бына көтөүселәре һәр көн юғалып тик торған. Ахыр быға көтөүсе табылмай башлай. Бик күп аҡса биреп, ике кеше яллаған алай ҙа. Яҡшы кейендергән, яҡшы ҡоралландырған: тағы юғалғандар. Аптырағас-алйығас, ҡарт үҙе киткән. Арлы-бирле йыртҡыстан һаҡланыр өсөн тип, кәбән башына менгән дә йоҡламаҫҡа тырышып ултырған. Һиҙмәҫтән ойоп киткән. Бына бер заман дағалы ат тояҡтары тупылдауын, тимер арбалар шылтырауын, һай-һыулап ат ҡыуыуын ишетеп, тороп ҡарайым тиһә, тора алмай, доға уҡыйым тиһә, тауышы сыҡмай – теле әйләнмәй икән. Тегене ендәр сихырлап өлгөргән. Шулай итеп,

быны төндә урлағандар ҙа ете урман, ете диңгеҙ аръяғындағы бейек тауҙағы мәмерйәгә алып килгәндәр. Бер ниндәй кеше лә унда бара алмай, ти. Ҡулдарына эләккән әҙәм балаларын ендәр теләһә ни эшләтәләр икән. Ҡайһы ваҡыт, төрлө әшәке нәмәләргә өйрәтеп, кире килтереп тә ҡуйғылайҙар. Унда «бисмилла» тип әйтергә ярамай, бөтә ашамлыҡтар тиҙәккә әйләнә лә ҡуя, ти. Быны төшөнөп алғас, олатайым, Хоҙайҙан ярҙам һорап, белгән доғаларын уҡырға тотонған. Ендәр асыуланалар, өҙгөләргә етешәләр, ә ул, бөтә күңелен һалып, уҡына ла уҡына. Мәлғүндәрҙең барса ашантыһы эшлектән сыға. Аптырағас, тамам йонсоп, үҙҙәре эҙләп алған бәлә ҡамытын кире килтереп ташлайҙар.

– Ә убырҙар ниндәй була?

– Убырҙар улар ут булып мөрйәнән инәләр, табан аҫтынан кешенең эсәктәрен һурып үлтерәләр.

Хөснулла ҡарт, баҙрап ятҡан ҡуҙҙарға текләп, шымып ҡалды. Уның үткер күҙҙәре берәм-һәрәм ҡоро-һарыны ҡомһоҙланып ялмаған ялҡын телдәрендә башҡалар күрмәгән нимәнелер күрә төҫлө ине. Ҡатыны вафатынан һуң яңғыҙы ғына йәшәгән был әҙәмгә ауылда әллә нисә ҡушамат тағылған. Ҡарттың оҫталығына ғашиҡтар – «Ҡурайсы Хөснулла», мал-мөлкәт йыймай, тапҡан-таянғанын йәлләмәй таратҡанға аптыраусылар «Хоҙай бирә Хөснулла», хатта «Ыштанһыҙ Хөснулла» тип ебәрә. Ул, ысынлап та, ҡулындағын, ҡурай моңо кеүек үк, йәлләмәй түгә, аҡыл өйрәтеүселәрҙең ауыҙын бер үк яуап менән яба: «Байлыҡ моңмо әллә? Хоҙай бирә ул». Был һүҙҙәрҙе ул шул ҡәҙәр ышаныс менән әйтә – әллә ниндәй бәйләнсектәрҙең дә өнө тығыла. Хәйер, ауылда уны хәҙер өйрәтергә тырышыусы юҡ, нисек бар – шулай ҡабул итәләр. Хөснулла ҡарттың ҡышҡы оҙон төндәрҙә бәйләгән ау, йылымдарын бөтә ауыл кинәнеп тотона, ҡыйын саҡта уға барып эстәрен бушаталар, һәр бәндәгә уның йылы һүҙе, күңелде йыуатырға ҡурайы әҙер, үҙе лә, ҡайҙа барһа ла, ҡәҙерле ҡунаҡ. Сит-ят яҡтарҙа, йыйын-һабантуйҙарҙа берәйһе Күлдәр ауылынан тигәнде аңламай аңшайып торһа: «Аһ-аһ, ҡурайсы Хөснулланың ауылын белмәҫкә ни!» – тиеүҙәре була, әңгәмәсенең ауыҙы йырыла, бик яҡын танышын осратҡандай, ҡурайсы хаҡында, ауыл хәлдәре хаҡында һораша башлай. Күлдәр халҡы Хөснулла ҡурайсының исемен, үҙҙәренең тыуы һымаҡ, ана шулай алдан йөртә. Мир эшенән ҡартты ҡалдырмаҫҡа тырышалар, сөнки унһыҙ байрамдар йәнһеҙ, толҡаһыҙ, китек кеүек. Йылым менән балыҡ һөҙөүгә лә, эшенән бигерәк, күңел өсөн саҡыралар. Яр буйында ҡурай тартып, хәбәрен генә һөйләп ултырһа ла йәм.

Көн һүрелде. Киске шәфәҡ нурҙарынан һирәк аҡ болоттар ялҡынланды, күл өҫтөнә емелдәп торған алтын юлаҡ һуҙылды. Усаҡ та һүнде. Аҙнағол иҫке биҙрә менән һыу килтереп һипкәс, баҙлап ятҡан ҡуҙҙар быҫылдап орошоп алдылар ҙа тынып ҡалдылар. Күңелгә шом һалып, баш өҫтөнән тауыш-тынһыҙ ғына ҡарға тубы осоп үтте.

– Кил, улым, – тип ашыҡтырҙы Кинйәғол усаҡ тирәһендә ыу-арама килгән ейәнен. Аттар егелгән, балыҡсыларҙың һәммәһе арбаларға тейәлешкән. Аҙнағол да йүгереп барып олатаһына һырылды. Малай ниңәлер шыртланы: йә күлдән баяғы һыу инәһе сығыр, йә ен-пәрейҙәр тотоп алыр, йә табанына убырҙар йәбешер кеүек тойолдо.

Йыраҡта, Дим аръяғында, бейек сағылдың ҡыҙғылт таштары емелдәй. Мәсеттең тәҙрәләренә лә алтын ҡабынған. Бисә-сәсә бейә ағыта, өйөр-өйөр йылҡылар

ауылдан ситкә, иркен яланға, ашыға. Туҙан болотона ҡойоноп, һыйыр көтөүе ҡайтып килә. Ул болот, көтөү үтеп киткәс тә, шәфәҡ нуры менән аралашып, һауала оҙаҡ ҡына аҫылынып тора. Ауыл өҫтөндә тәмле икмәк, итле һурпа еҫе аңҡый. Көнө буйы һыу инеп, мөлө һеҙөп, балыҡ ҡармаҡлап арыған ҡара йылтыр малайҙар, ҡармаҡ сыбыҡтарын, ыштандарын күтәреп, өйҙәренә ашығалар. Әсәләренән шөрләгәндәре һыулы кейемдәрен ҡомға йәйеп киптереп маташа, улары ҡараңғы төшкәс, ҡасып-боҫоп ҡына ҡайтасаҡтар. Ана бер киленсәк яңы аҡ баҫманан һыу алды ла тар тыҡрыҡҡа инеп юғалды. Аттың, арбаның оҙонайған күләгәләре көлкөлө булып эргәнән үрмәләп бара. Арбала ултырыусылар ҙа салыш-солош күләгәләр бирә. Аҙнағол уларға ҡарап барҙы ла: «Ендәргә оҡшағандар»,– тип ҡуйҙы. Ул тынлыҡты яратмай, ә бында ғәжәп тынлыҡ – бөтәһе лә ауыҙҙарына һыу уртлағандай килә. Алдағы арбала күңелле, исмаһам,– ҡурайсы Хөснулла ҡарт ҡыҙып-ҡыҙып һаман ниҙер тылҡый.

– Дим аръяғында ниндәй таштар ята ул, олатай?

– Йорт урындары ул, улым.

– Кемдәрҙең йорто булған һуң унда?

– Анау бейек ярҙы күрәһеңме, боронораҡ беҙҙең ауыл шунда булған. Күркәм ерҙә, ҡалын урман ҡырында, Дим һыуын һыулап йәшәгәндәр. Көньяҡтағы яландарҙа иген иккәндәр, Димдең бирьяғына сығып, бесән эшләгәндәр. Ҡулдағы малдарҙы шул урман тирәһендәге киң яландарҙа туйындырғандар, ҡалған артыҡтарын һимертер өсөн был яҡҡа – хәҙерге беҙҙең ауыл яғына ебәргәндәр. Тормоштары иркен, мал-тыуары күп... Ер-һыу кибеү менән йәйләүгә сыҡҡандар. Килмешәктәр килгәс, рәхәт көндәр бөтә. Ҙур һуғыш була. Халыҡ, тамыр тартҡан үҙ ерен ситтәргә бирмәҫ өсөн, яуға күтәрелә, тик дошман күп һәм ныҡ ҡоралланған була, башҡорттар еңелә. Яу башлыҡтарын язалап үлтерәләр, ауыл халҡын ҡамсы менән һуҡтыралар, өйҙәрен яндыралар, малдарын ҡыуып алып китәләр. Был афәттән һуң халыҡ оҙаҡ мандый алмай, күптәре аслыҡтан ҡырыла...

Анау ҡалҡыулыҡ Таштүбә тип атала. Беҙҙең бабайҙар шунан тороп таш атҡандар. Нисек тип, оҙон еп осона таш бәйләгәндәр ҙә көс менән һелтәп ебәргәндәр. Таш дошман яғына осҡан. «Таш атып ҡына дошманды еңеп булалыр шул?» Аҙнағолға был мәҙәк тойолдо. «Беҙҙең урыҫ Сәүкә Батырйән, Бозор Вәлиҙәр менән һуғышҡандағы һымаҡ булған инде»,– тип уйлап ҡуйҙы. Һүҙ, һыртҡы урамға сыҡҡас, аҙашып баҡырып йөрөгән һарыҡ бәрәсе тауышы менән бүленде. Йәш бәрән әсе итеп баҡыра ла ҡолаҡ һалып тыңлап тора, үрге остан бер нисә һарыҡ йыуан тауыш менән яуап ҡайтарғас, һикерә-һикерә шул яҡҡа ҡарай елдерә.

Ҡапҡаны йөҙө-торошо менән Кинйәғолға оҡшаған ҡырҡ йәштәр самаһындағы Йомағол – Аҙнағолдоң атаһы – асты. Кинйәғол:

– Улым, аттарҙы туғар инде, икендегә һуңлап барам, иртә ҡайтаһым икән бөгөн,– тип һөйләнә-һөйләнә, еҙ ҡомғанын алып, аҙбар яғына йүнәлде. Аҙнағол, атаһынан тотам ҡалмай, һыу инәһенең йылымға эләгеп нисектер ысҡынып ҡасыуын, аҡайған күҙҙәрен, ялбыр сәстәрен күреп ҡалыуын һөйләне. Уның үҙенең күҙҙәре лә яман аҡайғайны. Йомағол, атты туғарғас:

– Бар, улым, яланға ебәр, оҙаҡ эш менән арыны, ял итһен,– тине.

Гөлбаныу көйәнтәләп һөт айыртып ҡайтты. Ергә соҡоп яһалған усаҡҡа ҙур ҡаҙан ултыртып, ҡайнатырға һалды. Әсәһе, ишек алдындағы йомшаҡ үләнгә сепрәк балаҫ түшәп, аш ултыртты. Ҡарт мәзин аҙан әйтә башланы. Яйлап шаушыу тынды. Ауыл киске һиллеккә күмелде. Табынға йыйылғас, Аҙнағол:

– Олатай, һин бит күл аръяғындағы таштар хаҡында һөйләп бөтмәнең, – тип иҫенә төшөрҙө.

– Ә-ә,– ҡарт сәй һемерә-һемерә дауам итте: – Ауыл урынында көл-күмер генә ҡала. Беҙҙең бабайҙар унда яңынан ауыл ҡороп маташмайҙар. Уҫаҡлыкүл буйына күсеп киләләр. Һин һораған таштар – шунан ҡалған нигеҙ таштары. Унда йәмле булһа ла, ташҡындарҙа һыу баҫа. Аптырағас, ошо Ологүл буйына күсенәләр. Бында килеп ултырғас та, ҡанлы яуҙар һанһыҙ була. Ауыл күп мәртәбәләр үртәлһә лә, күсмәйҙәр. Күсеп тә ҡайҙа бараһың, ерҙәр көндән-көн наҡыҫая, килмешәктәр аҡрынлап беҙҙең иркен ялан, туғайҙарға хужа булалар, сафалы тормош бөтә.

– Олатай, ниңә улар беҙҙең ерҙәргә яҫҡындылар икән?

– Ер – иң ҙур байлыҡ ул, улым.

– Тейеп ҡараһындар бына беҙҙең ергә, Таҙ Вәлиҙең ауыҙына тондорған һымаҡ тондорормон үҙҙәренә! – Аҙнағол, йоҙроғон төйнәп, һикереп үк торҙо. Әтәс һымаҡ ҡуҡырайған малайға ҡарап бөтәһе лә рәхәтләнеп көлөп ебәрҙеләр.

II

– Әсәй, бынау ҡатыҡты, ойоғас, ҡар баҙына төшөрмәгәнһең, күпсеп, эштән сығып ултыра.

– Эй, балаҡайым, миндә уның ҡайғыһы булдымы әллә, оҙон көн ҡунаҡ менән мәшәҡәт сиктем, ни һин өйҙә юҡ, ни Аҙнағол әллә ҡайҙа китеп олаҡты. Бейә өйөрөп килтерергә лә кеше юҡ, илаһым.

– Ниндәй ҡунаҡ һуң, әле ҡайҙа улар?

– Ҡайтып киттеләр ҙә. Гөлбаныу, иртәгә атайыңдарҙы баҙарға оҙатайыҡ та, эшкә төшкәнсе анау киндереңде һуғып ал.

– Ниңә, әсәй, ҡышҡа һуғырһың, емеш-еләкте күберәк йыйып ҡалайыҡ, сәйгә өҙәрем ваҡытҡа еләк, ҡарағат япрағы ла кәрәк, тигәйнең?

– Шулай тигәйнем дә, әҙер ептең эшкә ингәне яҡшы, донъя хәлен белеп булмай.

Шул саҡ, ҡоңғорт толомдарын ялпылдатып, Гөлбаныуҙың әхирәте Сәғиҙәбаныу йүгереп килеп инде.

– Иҫәнмеһегеҙ, Гөлбикә еңгә!

–Арыу әле ҡапылда, үҙегеҙ ни хәлдә?

– Аллаға шөкөр, әсәйемдәр күрше ауылға ҡунаҡҡа киттеләр, мин Гөлбаныуҙы ҡуна алырға килгәйнем, еңгә.

– Килгәнһең дә бит, бармай шул ул бөгөн. Олатаһы асыулана, «Хәҙер ул еткән ҡыҙ, елбәҙәкләнеп ҡуна йөрөмәһен» ти.

– Улар белмәҫ әле, еңгә.

– Ҡуйығыҙ инде, балалар, мине утҡа һалмағыҙ.

– Әсәй, гөлдәрем кипкән, күлгә һыуға барып ҡайтайым әле әтеү?

– Оҙаҡ йөрөй күрмә.

Гөлбикә ҡыҙының яҙмышы өсөн ҡайғыра, үҙ башынан үткән фажиғәләргә тарып ҡуймаһын, тип ифрат борсола ине. «Илаһым, Хоҙайым, ни булыр, Заһиҙулла муллала игелек күрерме? Ҡарт ҡатыны Сәхибә оҫтабикә яһил нәмә түгелме икән? Кемдәргә йөрәгемде асайым, кемдәрҙән кәңәш һорайым һуң? Уҫал икәнен белеп тә, ни нәмә ҡыла алаһың? Ҡыҙымды бирергә һис кенә лә күңелем

тартмай. Көндәш көнө – эт көнө бит»,– тип оҙаҡ бошоноп, бынан ун алты йыл элек үҙ башына төшкәндәрҙе иҫенә төшөрҙө.

Гөлбикә ярлы ҡыҙы ине. Донъя көткән малдары бер ат та бер һыйыр булһа ла, әсәһе Гөлниса уғата уңған, тырыш, һөнәрле ине. Шуға күрә Гөлбикәгә кешегә эшләп, ҡәҙерһеҙләнеп йөрөргә тура килмәне. Дан тегеүсе ине мәрхүмә. Кемгә яҡшы елән, ниндәй байға яҡшы күлдәк кәрәк – барыһы ла Гөлнисаға килә. Ҡалынға тигән ҡашмауҙар ҙа Гөлниса ҡулынан үтә. Тапҡан-таянғаны яңғыҙ ҡыҙына булғанға, Гөлбикә бай ҡыҙҙары кеүек кейенеп үҫте, һандыҡ әйбере лә уларҙан кәм әҙерләнмәне. Артынан эйәртер көтөү-көтөү малдары ғына булманы – ни тиһәң дә, ярлы ҡыҙы.

Алсаҡ, һылыу Гөлбикә ун бишкә еткәс, баш ҡоҙалар был ярлы өйҙөң буҫағаһын күп тапаны. Сәй эстеләр ҙә «ҡарарбыҙ, йәш әле» тигән яуап менән китә торҙолар. Өйҙөң эсе-тышы ҡыҙ һайлаусыларҙы үҙенә йәлеп итерлек ине шул: балсыҡ менән һылап, шымартылып, аҡбур менән ағартылған, эсе йыйнаҡ, таҙа, иҙәндәре нисә инһәң дә һап-һары итеп ҡырып йыуылған, тәҙрә төптәрендәге балсыҡ көршәктәрҙә күпереп гөлдәр үҫә, барса еҙ нәмәләр ҡом менән ышҡып ағартылып, тәртип менән мейес ҡырына ҡуйылған, ҡаҙанлыҡ менән түрҙе икегә бүлә торған ҡыҙыл сүпләм шаршау һәр ваҡыт төшөүле. Ситән менән уратылған ишек алдында ла шундый уҡ бөхтәлек: таҙа итеп һеперелгән, йәшел хәтфә кеүек бәпкә үләне үҫә. Арыраҡ – һыланған, ағартылған аласыҡ, ат, һыйыр аҙбары, ҡыйшайған тауыҡ кетәге...

Ярлы ата малға ҡыҙҙы. Ун биш йәшлек Гөлбикәне тирә-яҡта байлығы, бәйелһеҙлеге менән дан алған сатан, бер күҙенә аҡ төшкән Арыҫланбәккә өсөнсө ҡатынлыҡҡа бирҙеләр. Күҙ йәштәре лә, ялбарыуҙар ҙа ярҙам итмәне. Һөйгәне Йомағол да, Гөлбикә үҙе лә ҡурҡтылар: Арыҫланбәк менән шаярыу уйын эш түгел. Уға барып ике ай тигәндә, иркә генә үҫкән Гөлбикә һыуһыҙ интеккән гөл шикелле һарғайҙы. Йәш ҡатынды йыш ҡына илауҙан шешенгән, ҡыйнауҙан күгәргән хәлдә күрәләр ине. Бөтә ауыл уның хаҡында шауланы, ә шау-шыуҙың иң ҙурын Арыҫланбәктең оло ҡатыны Мәфтуха ҡуптарҙы:

– Беҙҙә инде йыйын әрәмтамаҡ, әтрәгәләм. Тағы бер һепертке, аяҡлы ҡаза артты. Эт тиһәң, яуы юҡ, әҙәм тиһәң, йүне юҡ. Килде лә күтен күлгә һалды. Йүнләп һыйыр ҙа һауа белмәй, аш-һыуын, ташҡа үлсәйем, ауыҙға алырлыҡ түгел, йоҡоһонан айный алмай, тейһә – тейенгә, теймәһә – ботаҡҡа тип, эште әштерөштөр эшләй ҙә әсәһенә йә һыу буйына тайыу яғын ғына ҡарап тора. Ыштанһыҙ килгәне етмәгән, тамағы туйғас, ҡотора.

– Гөлбикәне тағы ҡыйнағандар. Күл буйына кер сайҡарға төшкәндә Арыҫланбәктең уртансы ҡатыны Сәфәрбикәне күргәйнем, шул һөйләп торҙо: «Гөлбикә ята, ҡуҙғала ла алмай. Ҡашығаяҡ йыйыштырғанда бер сынаяҡты төшөрөп ватҡайны, эй, шуның өсөн теге ҡарт убыр тетмәбеҙҙе тетте, бер нәмә лә ҡалдырманы. Йәнем түҙмәй, ҡаршы бер-ике генә һүҙ әйткәйнем, илла, ҡарт ҡайтҡас, ошаҡлап, икебеҙҙең дә кәрәкте бирҙерҙе. Таяҡтың ҡаты башы Гөлбикәгә эләкте – эт итеп һалып ҡуйҙы. Унһы ла саҡ ҡына ҡуштанланып һырпаланһа, һалпы яғына һалам ҡыҫтырып йүпәләһә, туҡтай бит инде, юҡ, тешегеп өндәшмәй тик торасы», – ти.

– «Байлыҡ кешенең күңелен ташҡа, күҙҙен аҡҡа әйләндерә» тигәндәре дөпдөрөҫ.

– Ҡара бауырҙың бер күҙенә аҡ төшкән инде, икенсеһенә лә төшөр әле.

– Самалап һеҙ, таҡылдаҡтар, уйламай һөйләгән – ауырымай үлгән.

Ошо һүҙҙәрҙе ишетеп йөрөгән Йомағолдоң йөрәге әрнене: «Ниңә ауыҙ асып ҡалдым һуң? Нисек ҡотҡарырға йәнекәйемде?»

Гөлбикә баш ҡалҡытып бер нисә көн үткәс, ауылға: «Йомағол Арыҫланбәктең йәш ҡатынын урлап ҡасҡан икән»,– тигән хәбәр таралды...

Йомағол менән Гөлбикә төрлө ерҙә ауыр эш эшләп көн күрҙе. Гөлбаныуы йыраҡта, байҙың ҡыҫынҡы, бысраҡ мал өйөндә, бәрәндәр, быҙауҙар араһында донъяға килде. Ҡасыуҙарына өс йыл тигәндә, Арыҫланбәктең һыуға батып үлеү хәбәре килгәс, илгә ҡайтып, рәтле генә донъя көтөп алып киттеләр. Тыныс, рәхәт йәшәнеләр. Һүҙсән ҡарсыҡ Мәхүпьямал ғына ваҡыт-ваҡыт сәнсеп ала ине. Мәгәр Йомағоло, ун ете йыл бергә тороп, бер ауыр һүҙ әйтмәне. Ҡай саҡ көлөп: «Арыҫланбәктә өс ай күргәнең дә ғүмереңә етерлек»,– тип ҡуйыр ине. Ҡатындың уйҙарын ҡайныһы Кинйәғолдоң:

– Килен, ҡымыҙың булһа, эсәйек әле, балыҡ ашы һыуһата,– тигән һүҙҙәре бүлде.

Гөлбикә ҡар баҙынан ҡымыҙ алып сыҡты, батмусҡа кәсәләр теҙеп, табынға илтте. Бер кәсәгә һалып, һаумал ҡушып, әжәл сире менән ятҡан ҡәйнәһе Мәхүпьямал ҡарсыҡҡа индерҙе. Тегеһе ыңғырашып, башын саҡ күтәрҙе лә, бер-ике йотҡас:

– Шунда ҡуй, төндә эсһәм,– тип кире урынына ауҙы. – Бәхил бул, балаҡай, төрлө саҡ булды, рәнйемә.

Гөлбикәнең рәнйер сәбәптәре күп булды. Ауылға күҙгә һуғым осоронда ҡайтҡайнылар. Мәхүпьямалдың ҡаҙҙары бик уңғайны ул йылды. Туған-тыумасаны саҡырып, ҙур өмә яһанылар. Башҡалар эште теүәлләп табын янына йыйылғанда, Гөлбикә бушамағайны әле – бала-сағаны туйындырып мәж килде. Йомағоло янына байтаҡ һуңлап барып ултырҙы. Ҡәйнәһе уға өлөш килтерергә ашыҡманы. Аранан берәү, уңаһыҙланып: «Бәй, килендең өлөшө юҡ бит»,– тип иҫенә төшөргәс, «Һуңлап киләләр ҙә»,– тип бупылданы ла тарҫ-торҫ ҡаҙанлыҡ тирәһендә йөрөй бирҙе. Гөлбикә ғәрлегенән ни эшләргә лә белмәне. Аптырағас: «Минең иткә барымым юҡ ул, бына Йомағолдоң өлөшөнән аҙ ғына ҡапһам»,– тигән булды. Ахырҙа алдына шап итеп туҫтаҡ менән ит килеп ултырҙы. Гөлбикәнең ул итте ашарға күңеле тартманы, семсенеп бер аҙ ултырҙы ла тороп китте. Ошо ваҡиғанан һуң ул иттән ысынлап биҙҙе, иткә ҡарата хатта ытырғаныу хисе барлыҡҡа килде. Үсле лә, кенәсел дә түгел Гөлбикә, әммә ҡәйнәһенең өмәләге ҡыланышы ошоғаса онотолмай, ике арала кәртә һымаҡ тора бирҙе, әле бына ҡәйнәһе бәхиллек һорағас ҡына ишелеп төшкәндәй булды, ауырыу кешенең донъялыҡтағы оло йөгөн еңеләйтергә тырышып:

– Үткән эштән төш яҡшы, ҡәйнәм, һин дә бәхил бул, – тип күңелен йыуатып сығып китте.

Ҡояш офоҡҡа етеп бара. Киске шәфәҡ нуры күҙгә һымаҡ шыма, тын күл өҫтөндә ҡойона. Ҡыҙҙың үҙен сорнап алған ауыр уйҙарҙан ҡотолоп, ошо сихри һүкмаҡтан күккә ашҡыһы килде, үҙе лә һиҙмәҫтән йырлап ебәрҙе:

*Ишек алдым йәшел үлән,*
*Тапамам тигән инем,*
*Тыуып-үҫкән ауылымды*
*Ташламам тигән инем.*

Гөлбаныуҙың йырына әкрен генә тағы бер тауыш ҡушылды. Унан бер нисә аҙым ситтә Аҙнабай баҫып тора ине.

– Хоҙай ҡушҡас, тағы осраштыҡ.

– Эйе шул.

– Гөлбаныу, йәнем, әллә бер-бер хәл булдымы?

– Юҡ та...

– Бар. Йырың, күҙҙәрең, һағышлы тауышың әйтеп тора. Ни булды, иркәм?

Егет дым тартымында күпереп үҫкән үләнгә сүгәләне. Гөлбаныуҙы, ҡулынан алып, үҙенә яҡынайтты.

– Күрерҙәр бит, Аҙнабай, яҡшы түгел.

– Бер кем дә юҡ, ҡурҡма, һөйлә.

Гөлбаныу үҙе һиҙгән тиклемен бәйнә-бәйнә һөйләне: еләккә киткәс, кешеләр килеүен, әсәһенең ҡышҡа эшләрбеҙ тип ҡуйған эштәрҙе: «Теүәлләп ҡуй!» – тип ашыҡтырыуын, Сәғиҙәләргә ҡуна ебәрмәүҙәрен.

– Ҡайғырма,– тине Аҙнабай. – Улар тиҙләтһә, беҙ ҙә йоҡлап ятмабыҙ. Ошо аҙнала өмә яһап, өйҙө күтәртәм. Гөлбаныу, һин нисек уйлайһың, уны ҡайһы тирәгәрәк ултыртайыҡ икән?

Гөлбаныу, бөтөнләй үҙен уның менән донъя көткәндәй хис итеп:

– Сәлимйән ағайҙарға урам аша урын бар бит, шунда һалайыҡ. Һыу ҡыры, сәхрә. Теге яғы иркен ялан, бейә бәйләргә лә уңайлы булыр,– тине.

– Улайһа шулай итербеҙ, дан урын ул.

– Эңер төшөп килә, оҙаҡланым. – Гөлбаныу һикереп торҙо, көйәнтәһен алды. Аҙнабай уның көйәнтәһен һаҡ ҡына ҡулынан алып, кире ярға һалды, йән һөйгәнен яр ситендәге ялбыр тирәк ышығына табан тартты, сатыр һымаҡ үҫкән япраҡтар ҡыуышында ҡыҙҙы ҡайнар ҡосағына алды. Гөлбаныу үҙендә иҫерткес хәлһеҙлек тойҙо, ирендәрендә, яңаҡтарында Аҙнабайҙың беренсе ҡат ялҡынлы үбеүен тойҙо. Ҡыҙ тиҙ айныны, йән һөйгәненең ҡосағынан ауырлыҡ менән айырылып, яңынан көйәнтәһенә йәбеште.

– Хуш.

– Хуш, йомошоң булһа, Айбикә еңгәгә әйт, үҙең әҙерлән. Алла бирһә, киләһе аҙнаға...

Ярлы ҡатай ырыуы башҡорто Зиннәтулла улдары Сәлимйән менән Аҙнабайға иҫке өй менән туры бейәнән башҡа нәмә ҡалдырманы. Йорт бар ғына йыһазы менән – Сәлимйәнгә, ат Аҙнабайға булды – үҙ-ара тауыш-тынһыҙ ғына шулай килештеләр. Аҙнабай, ике йыл эшләшеп, Сәлимйәнгә һыйыр алырға булышты. Еңгәһе Айбикә сикһеҙ шатланды. Көтөп алған таналары быҙау килтереп, ыуыҙ ҡоймағы бешергәс:

– Аҙнабай ҡәйнеш, рәхмәт, емерелгән хужалығыбыҙҙы төҙәтештең. Инде былай булғас, донъябыҙ алға китер, Алла бирһә. Яҡшылығыңды онотмабыҙ, йорт йыйырға булышырбыҙ,– тигәйне. Ысынлап та, һүҙҙәрендә торҙолар: һыйырҙарының беренсе быҙауы Аҙнабайға инселәнеп, инде ҙур башмаҡ булып йөрөй, ҡолонло ике бейәһе бар, Хоҙайҙан булып, өйөн күтәртһә...

Аҙнабай ҡайтҡанда еңгәһе менән ағаһы өйҙә ине.

– Һуң ҡайтҡас, аш та һалып торманым. – Айбикә йоҡлаған балаһын келәткә индереп һалды ла күстәнәскә бирелгән ит янына ҡымыҙ килтерҙе.

Уйсан ғына ултырған Аҙнабайға шикләнеп ҡараны:

– Нимә, балтаң һыуға төштөмө әллә, ҡәйнеш? – Гөлбаныуҙы һоратыуҙарын Айбикә ишеткәйне, ҡәйнешенең шунын өсөн көйәләнеүен һиҙеп тора ине. Әле шуға: – Аҙнабай, Гөлбаныуҙы ҡоҙалайҙар бит, минеңсә, тик ятыу ярамаҫ ине, – тип һүҙ башланы. Аҙнабайға еңел булып китте, еңгәһенә сикһеҙ хөрмәт һәм ялбарыу менән ҡараны:

– Еңгә, берәй кәңәш бирсе, ни ҡылырға һуң миңә?

– Ни ҡылырға тип, бөгөндән ал да кил. Ирмен тигән ир-егет ебеп, һөйгәнен ятҡа ебәреп тормаҫ инде.

– Еңгә, ваҡ-төйәк мәшәҡәткә йәш бейәне һатырбыҙ инде?

– Һатырбыҙ ҙа ул, инәһе күк бейәгә оҡшап, үҙе оҙамлы, үҙе һөтлө. Урынына туры бейәне һатып, йәш бейә беҙгә ҡалһа, тигәйнем, һин нисек уйлайһың? Ҡолоно ла ҙур, һатыулыҡлы ла булыр, туй, өй мәшәҡәттәренә етер ине.

– Миңә барыбер. Ағайым менән үҙегеҙ хәл итегеҙ.

Аҙнабай ҡымыҙҙы төп күтәрә эсте лә, тамам тынысланып, эске шатлыҡ, тәмле уйҙар менән әүеҫлеккә менеп ятты. Былай ҙа арыған тәне ҡымыҙҙан ойоп, тиҙ үк йоҡоға талды.

### III

Ҡыш... Әсе ыжғыр буран. Ауылдар ҡарға күмелгән. Йән эйәһе барлығын күрһәтеп, тәҙрәләр генә секерәйә. Урамдар буш. Ярҙамсыһыҙ ҡалған ас ауылдарға һалҡын тырнаҡтарын батырып, буран туй туйлай. Йыраҡтан, далаларҙан, ас бүреләр тауышын килтерә, үлем йырын йырлап, тәҙрәләрҙе шаҡый, өй түбәләрендә һыҙғыра. Шундай ҡурҡыныс, шомло кистәрҙең береһендә ауылдың ситендәрәк, ҙур өйҙөң алғы яғындағы тәҙрәләрҙә тоноҡ ҡына ут күренә. Ябыҡ, һарғайған йөҙлө йәш ҡатын өҫтәл ҡырында туҫтаҡтарға аш бүлә. Ғәжәп матур ҙур ҡара күҙле биш йәштәр самаһындағы йыуаш ҡыҙ менән өс йәштәр тирәһендәге таҙа ир бала өҫтәл артында тауыш-тынһыҙ ғына ултыралар. Ҡатын ыумаслы ашты туҫтаҡтарға һалды ла, ҙур телем ҡара икмәкте тигеҙ өс өлөшкә бүлеп:

– Ашағыҙ, балаҡайҙар,– тине. Балалар, ҡашыҡтарын алып, аштарын болғап:

– Миндә ыумас күп!

– Миндә лә, – тип ашарға тотондолар. Ҡатын аҡрын ғына, теләмәй генә ашай, хәсрәтле күҙҙәре менән балаларға ҡарап ҡуя. Ауыр ҡайғының билдәһе булып күҙ төптәре эскә батып, күгәреп торалар.

Буран тәҙрә ҡапҡастарын зыңғылдата, мөрйәгә инеп, ҡурай уйнай. Ап-аҡ ҡарт бесәй, хужаһының иғтибарын көтөп, сабыр ғына ултыра. Түҙемлеге бөткәс, хужабикәһенең аяғына һырпаланып, күҙҙәренә ҡарай.

– Мә-әү-ү! – тип мыйылдап ҡуя.

– Эй аҡыллы хайуан, һине онотҡанбыҙмы ни? Туҫтағың ҡайҙа?

Бесәй, аңлаған кеүек, мейес алдындағы туҫтағы янына килеп, һуҙып мыяуларға кереште. Ҡатын уға ла аш һалып бирҙе.

– Ашайыҡ, балалар. Төн оҙон, асығырһығыҙ.

Балалар ашап туйҙылар ҙа, әпәр итеп, тороп киттеләр, ҡулдарын йыуып, шым ғына уйнарға тотондолар. Ҡатын ҡашығаяҡты йыуҙы, балалар янына килеп:

– Йоҡоғоҙ килмәйме ни әле? – тип ир баланы алып һөйҙө, ҡыҙ баланы ла сәсенән һыйпаны, һөйөп, яратып алды. Икеһен дә алдына ултыртып, буран көйөн тыңлай-тыңлай, һамаҡларға кереште:

*Аллаһу, аллаһу,*
*Кәзәләрҙе талъа ҡыу.*
*Кәзә япраҡ ашаһын,*
*Юлдыбай менән Гөлсәсәк*
*Йоҡлай ъына башлаһын.*
*Әлли-бәлли бәпкәһе,*
*Ҡайҙа киткән әсәһе?*
*Туъайҙаръа еләккә*
*Балаларъа бүләккә.*
*Бәү, бәү, бәү!*

Балалар йоҡомһорай башлағас, урын йәйҙе, өҫтәренә ҡалын юрған ябып, арҡаларынан һөйөп, шәмде һүндерҙе. Йылы мейескә һөйәлеп, аҙыраҡ торғас: «Көн яманы үтер»,– тип үҙен-үҙе йыуатып, балалар янына барып ятты. Уларҙың тигеҙ һулыш алып, тыныс йоҡлауҙарын тыңланы. Был Гөлбаныу ине. Ул бер яҡтан икенсе яҡҡа әйләнгеләп, үткәндәрен уйлап, Аҙнабайҙы һағынып, оҙон, буранлы ҡышҡы төндө йоҡоһоҙ үткәрҙе.

Өләсәһе Мәхүпьямал ҡарсыҡ донъянан үтеп, йорт уның ҡырҡын үткәреү менән мәшәҡәт сиккәндә, Гөлбаныу Аҙнабайға ҡасып сыҡты. Юғиһә олатаһы, һис нигә ҡарамай, туйҙы тиҙләтергә самалай ине.

Иртәгеһен ҙурҙан шау-шыу ҡупты. Кинйәғол ҡарт донъяға һыймай тулап китте: «Ул ҡәбәхәт, башбирмәҫ ер битте бусағаға баҫтырмағыҙ, йыртыҡ яулығын да бирмәгеҙ, урамдан үтмәһен, күҙемә күренмәһен, күрһәм, һуғып үлтерермен! Битен йыумаған нәмәнең алдымда исемен дә телгә алмағыҙ!» – тип кисәтеп ҡуйҙы.

Кисләтеп кенә Гөлбикә Гөлбаныуҙың кейемдәрен, байтаҡ һандыҡ әйберҙәрен килтереп:

– И, балам-балам, ҙур тилелек эшләп ташланың шул, олатайың ҡотороп сыҡты, һинең өсөн беҙҙе һүкте,– тип илап ебәрҙе. Гөлбаныу ни әйтергә белмәй баҙап ҡалғас, дилбегәне Айбикә үҙ ҡулынына алды. Йомалап сәйгә ултыртты ла:

– Йә инде, ҡоҙағый, ҡарт муллаға биреп тә уңмаҫ инегеҙ. Ике йәш донъя көтмәҫме? Ике күңел бер булғас, сүплек башы гөл булыр, тигәндәй, хәҙер үк донъялары бөтәйҙе. Алма кеүек ҡыҙҙың йән һөйгәненә барыуы тилелек буламы? Йәмле ғүмерҙең йәмен ебәреп, һөймәгәнгә һөйкәлеп йәшәһенме ни?

– Эй, ҡоҙасаҡайым, Йомағол менән икәү-ара риза ла ул, ҡайным тәкәтте алды. Мулла ҡайныһы булырға ифрат та дәртләнгәйне, яңы сапан, ситегенә ҡәҙәр алып ҡуйғайны.

– Кит инде, ҡартайған да тыртайған – аҡыл кермәгән. Бай менән ҡоҙа булһаң, наҙланып маҙаңды алыр, тигәндәр, үҙ тиңеңә етәме ни!

– Ҡайнымды әйтәм, кисә яңы кейемдәре күҙенә салынғас: «Йә, алтын өҫтөнә баҫтырырға уйлағайным бит мин ул бумала башты – тип тағы оторо туҙып китте. Шунан, миңә бәзерәйеп ҡарап: – Инәһен күреп, ҡыҙын ал, иңен күреп, бәзен ал икән шул»,– тисе.

– Арыҫланбәк байҙан ҡасыуыңа ишаралайҙыр инде?

– Әтеү. Нәҫелдәре менән ир битенән көләләр, тиерҙәр инде.

– Көлһөндәр. Көлә әйтә, артынан һөйрәй етә.

– Эй, Айбикә туғанҡайым, йән тартмағаның менән түшәк бүлешеүҙәре – үлем. Ә Арыҫланбәккә нимә, бар тип белде ул һине. «Йәш ҡатын алдым,– тип әйтмәй ул. – Түшәк яңырттым әле»,– тип һөйләй торғайны мәлғүнең. Сиратымды нисек тә үткәреү өсөн ниндәй генә сүрәткә инмәй торғайным: ауырыуға ла һабыштым, булған алтын-көмөштәремде оло бисәләренә өләшеп бөттөм. Арыҫланбәк һиҙеп ҡалғас, бына кәрәкте бирә минең. Иҫләһәм, әле лә тәнем зымбырҙап китә.

– Бәй, шулай булғас, ҡыҙыңдың бәхетенә һөйөнөп, матур теләктәреңде теләп кенә тик йөрө инде.

– Әйтерең бармы, теләкте уны ятһам да, торһам да теләйем, нахаҡ һүҙ ишетеүе генә ҡыйын.

– Ни хәл итәһең, асыу – ағыу, йотһаң – дарыу, бала хаҡына түҙәһең, сабыр итәһең инде.

– Ҡалған хәтерҙең ҡары китһә лә, боҙо китмәй. Бигерәк үҙәккә үтерлек итеп әйтә ҡайным.

– Ата йөрәге лә таш түгел, бөгөн булмаһа, иртәгә ирер әле. Килеп, фатиха биреп, хәл белеүеңә рәхмәт. – Айбикә ҡоҙағыйын оҙатырға сыҡты.

– Әллә шул, бында килгәнемде белһә, шартлар.

– Ҡурҡыу күлдәктәрең туҙһын инде, ҡоҙағый, йәшең дә олоға һан. – Айбикә шулай тиһә лә, тегеһе, шөрләңкерәп, һыу ҡырлап баҡса артынан ғына ҡайтып китте.

Иртәгеһен Сәлимйән менән Аҙнабай арба эсен тултырып йәшел бесән алып ҡайтты, яңы йортҡа мал күсерҙе, дәртләнеп ишек алдарын, ҡаралтыны рәткә һалды, эш ҡоралдарын барлап йөрөнө. Гөлбаныу менән Айбикә лә ғәжәп бер күңеллелек менән өй йыйыштырҙы: икегә бүленгән оло өйҙөң түр яғындағы киң һикегә сәскәләп һуҡҡан аҫалы балаҫты йәйеп, түшәк-яҫтыҡты өйөп ҡуйҙы, шаршау ҡорҙо, арыуыраҡ кейем-һалымды урҙаға, сигеүле таҫтамалдарҙы тәҙрә араларына элде. Һыңар герле сәғәтте, ҙур көҙгөнө, үҙенә күрә ҡупшы ғына сынаяҡтар менән кәштәне лә ҡуйғас, өйгә ҡот ҡунды, күркәм төҫ алды. Айбикә сәскә атҡан тамсы гөлөн килтереп,түрьяҡтың өҫтәленә ултыртты ла:

– Ошо гөл кеүек, тормошоғоҙ сәскә атһын,– тип тәбрикләне.

Өйҙөң ҡаҙанлығы кескенә булып, ике яҡты йылытыуға хеҙмәт иткән мейестең ҙур өлөшө шунда ине. Бында ла һике, өҫтәл ҡуйып, барынса йыйыштырҙылар. Ситән үреп, һылап ағартылған яңы аласыҡҡа Сәлимйән ялан мейесе сығарып бирҙе, Аҙнабай ҡаҙан өсөн усаҡ урыны соҡоно.

Яңы донъяны, ике йорт бер булып, оло шатлыҡ менән ҡороп бөткәс, өй ҡотлау һәм никах уҡытыуҙы ҙурҙан алдырмайынса, ыҡсым ғына итеп уҙғарырға булғайнылар ҙа, ауыл муллаһы: «Төркмәндәр, Кинйәғол менән әселешле булаһым юҡ»,– тип килеүҙән ҡырҡа баш тартты. Аҙнабай ҙа, Сәлимйән дә уны бер нисек тә ризалата алманы. Быны ишеткәс, Гөлбаныуҙың күҙе шәмәрҙе. Гөлбикә лә ах та ух килде. Ахырҙа, ниндәйҙер ҡарарға килеп, китергә йыйынғайны, ҡапҡала Хөснулла ҡарт күренде:

– Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән ҡас, тинем дә иртәрәк килдем әле, – тип ул ихласлап һәммәһе менән күрешеп сыҡты. Ни ҡәҙәр генә өлтөрәп ҡаршы алмаһындар, эштең мөшкөллөгөн һиҙҙе ҡунаҡ.

– Хәл-әхүәлдәр нисек, нишләп йөҙөгөҙгә күләгә төшкән? – тип һорауҙы ҡабырғаһы менән ҡуйҙы. Эштең айышына төшөнгәс: – Йән биргәнгә йүн бирә ул, йөрөп киләйем әле,– тип сығып китте. Бер сәғәт самаһы үттеме-юҡмы, Йомағол менән Гөлбикәне, мулланы эйәртеп кире әйләнде. Ниндәй һүҙҙәр табып, ниндәй дәлилдәр килтереп уларҙы күндергәндер – Хоҙай үҙе беләә, илләә мәгәр мәжлес Гөлбаныу менән Аҙнабай хыялланғандан да мең артыҡ килеп сыҡты. Ата-әсәһенең килеүенә Гөлбаныу һөйөнөп бөтә алманы, йөҙөнән йылмайыу китмәне.

Никах уҡылғандан һуң, ашап-эсеп кәйефләнеп алғас, Хөснулла ҡарт итек ҡунысынан еҙ ҡурайын тартып сығарҙы:

– Мөхәббәт – Раббының донъялыҡтағы иң ҙур бүләге,– тине ул, йөҙө яҡтырып. – Һәр кемгә лә бирелмәй был изге хис. Бирелгән сүрәттә лә, берәүҙәр йә күрмәй, йә һаҡлай алмай уны. Һөйөүегеҙҙе күҙ ҡараһындай ҡурсалап тороғоҙ, әләф-тәләф итмәгеҙ. Ниндәй генә ауырлыҡтар осраһа ла, ул һеҙгә ҡанат булыр, ауырҙы еңел, ҡыйынды рәхәт итер. Ғишҡығыҙ өсөн көрәшергә йөрьәт итеүегеҙгә мин һоҡланам, шатланам, иң моңло көйҙәрҙе һеҙгә бағышлайым.

Хөснулла урынында башҡа кеше булһа: «Хәҙрәттән уҙып, сурытып хәбәр һатып ултырма әле»,– тип күптән ҡабырғаһына төртөрҙәр ине инде, ә уға – ләммим. Йәштәрҙең яңы өлгөргән йортон, ғаиләһен тәбрикләп ҡурай моңо берсә дәртләнеп, берсә һағышланып кис буйы түгелде лә түгелде. Аҫылташ йөҙөктө ни ҡәҙәр матурлаһа, табын йәмен ҡурайсы шул ҡәҙәр күтәрҙе. Күңел төптәрендә ҡатып ятҡан юшҡындарҙы йыуып, сафландырып аҡты уның моңо. Ҡураныс кәүҙәле, ҡарар күҙгә күрмәлекһеҙ генә күренгән был кешенең – ҡурайын ҡулына алыу менән – икенсе ҡиәфәткә инеүенә хайран ҡалып: «Һөйкөмлө һөйәге бар бының»,– тип ултырҙы берәүҙәр. Икенселәренең башынан: «Ҡурайында бер-бер хикмәт барҙыр, юғиһә ямаҡ ҡына бәндә һөймәлеклегә әйләнмәҫ ине, шәт»,– тигән уй йүгереп үтте.

Гөлбаныу менән Аҙнабай ҡунаҡтарҙы оҙатырға сыҡҡанда төн ине инде. Барыһы ла ике йәшкә тигеҙ оҙон ғүмер, аҡ бәхет, етеш тормош теләп, бик ҡәнәғәт булып таралдылар. Уларҙың көңгөр-ҡаңғыр һөйләшкән, көлөшкән тауыштарын тыңлап ҡапҡа алдында байтаҡ һүҙһеҙ ҡосаҡлашып торҙо хужалар.

– Гөлбаныуым, һылыуым, быйыл көҙгә, Алла бирһә, ситән үреп, ҡарағат, балан, муйыл ултыртайыҡ,– тине йәш ир.

– Өй тирәһенә лә кәрәк, мин йәйге эҫелә ағастарҙың тәҙрәне күләгәләп тороуын яратам.

– Эйе, һылыуым, шундай итеп йәшәрбеҙ беҙ һинең менән... Әйҙә, хәҙер йоҡлайыҡ инде, иртәгә Сәлимйән ағайымдар менән бесәнгә барабыҙ бит.

Аҙнабай Гөлбаныуын еңел генә күтәреп алды ла түр яҡтағы киң һикегә индереп һалды. Йәш ҡатын бәхетле йылмайып иренә һыйынды. Улар үҙ өйҙәрендә... Улар бергә... Улар икәү генә... Башҡа бер кем дә уларға ҡамасауламай. Әрһеҙләшеп тәҙрәнән тәҙрәгә йөрөгән ай ҙа кәрәкмәй уларға. Ҡатын, ашығып, тәҙрә ҡорғанын тартты.

...Таң саҡ алланып, һыҙылып килә. Йомшаҡ йылы ел иҫә. Таң әтәстәре, кинәнеп йоҡлаған ауылды уятырға теләгәндәй, берәм-һәрәм һөрән һалалар. Гөлбаныу һалҡын һыу менән йыуынғас, йоҡоһо асылып, еңеләйеп китте. Сәскәле

күлдәге өҫтөнән камзулын кейҙе, сигелгән алъяпҡысын быуҙы, яулығын сөйөп бәйләне һәм, ҡоймаҡ туғығас, ҡоро ҡайын утынын дөрләтеп, усаҡҡа яғып ебәрҙе. Унан өйгә инеп, Аҙнабайҙы уятты. Ире, йоҡо аралаш йылмайып, уны ҡосағына тартты. Гөлбаныу, көлә-көлә сәбәләнеп, Аҙнабайының көслө ҡулдарынан саҡ ҡотолдо, аласыҡҡа сығып, самауыр ҡуйҙы, ҡоймаҡ ҡоя башланы.

Ҡояш, алтын терпе һымаҡ, Йәнтеүәлтау өҫтөнә менеп ҡунаҡлағанда, бесәнселәр йылы ҡоймаҡ менән сәй эсәләр ине инде. Сәйҙән һуң Аҙнабай менән Сәлимйән ат екте. Эш ҡоралдарын барлап һалдылар. Айбикә Гөлбаныу әҙерләп биргән ашантыны, сәй кәрәк-ярағын арбаға урынлаштырҙы. Йәш ҡатын күбәләктәй осоп-ҡунып өй эсен тәртипкә килтергәс, болдор янындағы көрәк менән ишекте терәтеп ҡуйҙы (йәнәһе, өй бикле, хужалар өйҙә юҡ). Майланған ҡапҡа тауыш-тынһыҙ ғына асылды, Гөлбаныу уны ябып, ғәжәп бер етеҙлек менән арбаға һикереп менеп ултырҙы. Бесәнселәрҙе аттан ҡайтыусылар, йоҡлап һыйырын көтөүҙән ҡалдырған, еләне сиселгән, йүгереп ахмалға төшкән ҡатындар һоҡланыу ҡатыш көнләшеп ҡарап ҡалдылар.

Ҡырға сыҡҡас, Гөлбаныу, иркен һулап, ысыҡ һыуы менән көмөшләнгән сәскәләргә ҡарап йылмайҙы. Иртә әйтеп бөтөргөһөҙ йәмле ине. Талдарҙа ваҡ ҡошсоҡтар сырҡылдаша, туғайҙағы ҡамыштар, ап-аҡ томбойоҡтар менән уратылған йомро күлдәрҙән өйрәктәрҙең баҡылдағаны ишетелә. Аҡсарлаҡтар эшен биреп тулҡын яра – балыҡ аулай. Шымакүл яғына табан шыуышҡан көтөүҙән һарыҡтарҙың баҡырыуы, көтөүсе Шаһвәлиҙең ҡарлыҡҡан тауышы тоноҡ ҡына булып ишетелә.

Һары бейә дәртле юрта. Күбә тарттырырға тип саҡырылған күрше малайҙар, Кәрим менән Хәйбулла, атҡа икәү атланып, йә алға, йә артҡа сығып, ҡолондо ирештереп баралар. Арбалағылар тын ғына килә. Күрәһең, улар ҙа, Гөлбаныу һымаҡ, иртәнге ҡыр моңон, хозурлығын тамаша ҡыла. Бары Гөлсәсәк кенә, Айбикәнең күкрәгенә танауын төртөп, иҙрәп йоҡлай.

Сәлимйән, бишек элергә өсталған яһап биргәс, аттарҙы эйәрләп, малайҙарҙы атландырып маташҡан Аҙнабайға өндәште:

– Йә, кемде башҡа мендерәбеҙ? – Аҙнабайға ҡәҙәр тал күләгәһенә ашантыны урынлаштырып йөрөгән Гөлбаныу яуап бирҙе:

– Кәбән башына мин менермен. Айбикә еңгәм күбә ебәрер: Гөлсәсәкте имеҙергә кәрәк бит.

Сәлимйән икеләнеп Гөлбаныуға ҡараны. Тегенең эшкә йылдам, тилбер тотоноуын күргәс, өндәшмәне.

Эш геүләп алға барҙы. Айбикә, йүгергеләп, ике атҡа күбә ебәрҙе. Малайҙар, һай-һыулап һыҙғырып, сабышып, эшкә дәрт өҫтәне. Ирҙәр генә ҡабаланманы: йәш ҡатынды аяп, бесәнде йәбе менән аҙлап ҡына бирергә тырышты. «Аҙнабай, бейегерәк бир, күтәреп алыуы ҡыйын бит»,– тип Сәлимйән әленән-әле Гөлбаныуҙы ҡайғыртты. Ашыҡмай ғына эшләһәләр ҙә, төш еткәнсе сәскә, eләк еҫе генә аңҡып торған хуш еҫле бесәндән тауҙай кәбән ҡойолдо. Уны ослағас, Гөлбаныу, иркен тын алып, тирә-яғына күҙ һалды. Туғай кеше менән тулы: ҡай берәүҙәр кәбән һала, ҡайһылары йыя, сүмәләләй, ҡайһылары яңы саба. Был һуңғылары инде – үҙ өлөшөнә туймай, ярлыларҙан һатып алып, бесәнде хисапһыҙ

әҙерләүсе байҙарҙың ялсылары, көнлөксөләре. Сәлимйән арҡанды үҙе бирҙе һәм Гөлбаныуҙы аҡрын ғына шыуҙырып төшөрҙө:

– Иртә бөттөк. Булмаһа, сәй ҡайнатайыҡ, хәл йыяйыҡ, аттарҙы ял иттерәйек тә аҙаҡ туғай эсен бөтөрөп ҡайтырбыҙ.

Малайҙар Ологүлгә ат эсерергә киттеләр. Ир-ат кәбән тирәһен тәртипкә килтергән арала, Гөлбаныу Димдән һыу алып килде, ең һыҙғанып сәй ҡайнатырға, табын әҙерләргә кереште, сәйгә һалырға ҡарағат япраҡтары, мәтрүшкә йыйып килтерҙе. Күләгәлә балаһын имеҙеп ятҡан Айбикә алдына ла бер туҫтаҡ ҡарағат килтереп ултыртты. Гөлбаныуҙың эшкә етеҙ, белеп тотоноуына һоҡланып ҡарап ятты килендәше: «Аллаға шөкөр, ҡатындан уңды минең ҡәйнеш»,– тип һөйөндө.

**IV**

Һөйгәне менән һөйөп-һөйөлөп йәшәлгән бер йылы бер көн һымаҡ ҡына тойолдо Гөлбаныуға. Ғүмер баҡый бәхет нурына ғына ҡойоноп йәшәрҙәр һымаҡ ине лә бит, яҙмыш уларҙы сыныҡтырыу өсөн, күрәһең, яңы һынауҙар әҙерләп ҡуйған: аяҙ август көндәрендә ашҡыныулы дәрт менән ашлыҡ һуҡҡанда, мәрйен кеүек эре бойҙайҙарҙы келәттәргә урынлаштырғанда, шомло хәбәр таралды: «Герман һуғыш асҡан!»

Бик күптәр фронтҡа алынды. Сәлимйән дә, Аҙнабай ҙа китергә тейештәр ине. Ҡайғы күреп өйрәнмәгән Гөлбаныу илай-илай бер тәүлектә ауырыуға һабышты. Әсәһенең әрнеү-һыҙланыуҙары балаға ла күсте. Ул, яҡты донъяға килеп йәш әсәһен тынысландырырға теләгәндәй, ярһый, тулғана башланы. Ҡатыны әсе тулғаҡҡа сыҙай алмай ишекле-түрле йөрөй башлағас, Аҙнабай кендек инәһе Шәмсебаныу ҡарсыҡҡа сығып йүгерҙе, ҡайтышлай Гөлбикәне алып сыҡты.

Кинйәғол ҡарт, уртаға өҙөлгән йылан шикелле, ейәнсәре өсөн һыҙланып, ҡайҙа барып бәрелергә белмәй аптырап тороп ҡалды. Быйыл ул ҡыр эштәре башланырҙан алда ғына, Гөлбаныу менән Аҙнабайҙы саҡырып, фатиха биргәйне. Гөлбаныуҙың барса нәмәләрен тейәп килтереп, яңы йортта ҡунаҡ булып, йыл буйы һаҡланған асыуҙары елгә осҡайны. Инде бөтәһе лә яйланды тигәндә, яңы бәлә һәм ниндәйерәк бәлә...

Аҙнабай ярым һушһыҙ ятҡан Гөлбаныуы янына инеп, сәйнәлгән, күгәргән ирендәренән үпте: «Хуш, йәнекәйем, мин китәм инде». Гөлбаныу уға яуап бирмәне, тағы өҙгөләнеп, ауыр итеп ыңғырашырға кереште. Шәмсебаныу ҡарсыҡ: «Тәҡдир нишләтә, ярар, бар инде, балам, иҫән-һау йөрөгөҙ»,– тине. Аҙнабай әрнеүле күҙҙәрен ҡатынына төбәп бер аҙ торҙо ла, барыһы менән хушлашып, Гөлбикә һонған муҡсаны аҫып, арбаға сығып ултырҙы.

Аттар ҡуҙғалды. Илау, һыҡтау, йөрәк әрнеткес һағышлы йыр, әйтеләһе һуңғы һүҙҙәр, арба тәгәрмәстәре сылтырауы ҡот осҡос төҫ алды. Ата-әсәләр, һылыу ҡыҙҙар, йәш килендәр, балалы ҡатындар йәштәренә төйөлөп, һушһыҙ булып ҡалдылар.

Ҡурайсы Хөснулла барыһы менән хушлашты ла, ябалаҡтыҡы шикелле йәшле күҙҙәрен китеүселәргә төбәп, ҡурайын уйнап ебәрҙе. Ауылды һағышлы моң баҫты.

Ауыл шулай һыҡрап илағанда, ҡурай моңланғанда, хәсрәтле донъяға бала тыуҙы. Бала әсе тауыш менән илап ебәрҙе. Атаһы уны йыуатырға килмәне, әсәһе

арыған күҙҙәрен асып, кемделер эҙләне, кипкән ирендәрен саҡ ҡыймылдатып, эргәһендә ултырған әсәһенән: «Ҡайҙа?» – тип һораны.

...Буран һаман геүләй, йүшкәләр зыңлай. Гөлбаныуҙың күҙ алдына Аҙнабайҙың һарғылт ҡағыҙға зәңгәр ҡәләм менән яҙылған һуңғы хаты килеп баҫты. Ул уны тағы бер ҡат күңеленән уҡып сыҡты:

«Гөлбаныуым!

Һуғыштың осо-ҡырыйы күренмәй һәм тиҙ генә күренмәҫ тә. Һин ҡайғырмаҫҡа тырыш. Сәлимйән ағайға хат яҙҙым, ул ярҙам итер. Үҙем хәҙергә һау-сәләмәтмен. Һеҙҙең иҫән-һаулыҡты ишетеп бик шатландым. Гел һеҙҙе уйлайым, төштәремдә күрәм, осрашыр минуттарҙы тыным менән тартып алырҙай булып көтәм. Борсолма, йәнем, ныҡ булырға тырыш. Нишләтәһең, ил өҫтөнә төшкән ҡайғыны бергә күтәрмәй хәл юҡ. Түҙ, көт, һылыуым. Йәш баланы минең өсөн дә һөй, иркәлә. Әгәр бығаса исем ҡушмаған булһағыҙ, Юлдыбай тип ҡушығыҙ».

Юлдыбай, һаташып: «Әсәй!»– тип ҡысҡырып ебәрҙе. Гөлбаныу уны тынысландырып күкрәгенә ҡыҫты, белгән сүрәләрен уҡый-уҡый ҡорама юрғанды яҡшылап япты, аҙаҡ тағы уйҙарына сумды.

Сәлимйән ҡыш ҡайтты, йөрәге сирле булған икән. Гөлбаныуҙы ситкә ҡаҡманы, башҡа һалдаткалар кеүек ир көсө эҙләп тилмереп йөрөргә ирек ҡуйманы: һөрҙө, сәсте, бесәнен әҙерләне, утынын килтерҙе. Гөлбаныу менән Айбикә хәлдән килгәнсә уға булыштылар. Өҫтәүенә, ҡайғы Кинйәғолдар ғаиләһен дә урап үтмәне: олатаһы донъя ҡуйҙы, күптән түгел генә һуғышҡа алынған атаһының хаттары туҡталды.

Гөлбаныу, һуңғы ваҡыт ни ҡәҙәр арыһа ла, йоҡоһоҙлоҡтан йонсоно, йоҡлаған хәлдә лә ҡурҡыныс төштәр күрҙе. Бер төшө тынғылыҡ бирмәй, иҫенән сыҡмай аптыратҡас, Гөлбаныу әсәһенә китте.

– Имеш, ажғырып ятҡан даръяла һалда йөҙөп барам. Һалым дер ҡалтырай, бүрәнәләрем таралып төшөп бара. Мин уларҙы ашығып-ашығып сырмаған булам. Бер урынын ныҡытһам, икенсе урыны ишелә. Аяҡ аҫтымдағы бәләкәй генә таянысты һаҡлап ҡалырға тырышам, алышам, бирешмәйем. «Ебеп төшөргә ярамай, балам бар», – тип уйлаған булам, үҙемдең баҫып торорлоҡ урыным юҡ. Тулҡындар менән айҡаша торғас, көс-хәл менән ярға ҡарай үрмәләнем. Даръя тынысланды, ләкин һиҙәм: был һиллек оҙаҡҡа түгел. Ҡапыл ҙур ҡара тулҡын күтәрелде, донъя ҡараңғыланды, һыу өҫтө сыбарланды. Ә тулҡындар араһында – Аҙнабай менән атайым сайҡала! Уларҙы ҡотҡарам тип тулҡындарға ташланыуым булды, кире ҡаҡ ярға йыуылып төштөм. Ул арала атайым менән Аҙнабайҙың баштары һыу эсенә инеп, зым-зыя юҡ булды.

Гөлбаныу һөйләп бөттө лә, яуап көтөп, әсәһенә баҡты. Гөлбикә өндәшмәне, мейес алдынан ҡомғанын алып, тәһәрәт алырға сығып китте. Ингәс, намаҙға баҫты. Әсәһенең шөбһәләрен аңланы Гөлбаныу, эстән генә атаһы менән Аҙнабайына иҫәнлек-һаулыҡ теләй-теләй ҡайтып китте. Аҙна-ун көн үттеме-юҡмы, тәүҙә Аҙнабайҙың, унан Йомағолдоң ҡара ҡағыҙы килде.

Бәлә ҡапҡанды бер ҡағып әрһеҙләшеп килеп инһә, тиҙ генә сығып китергә ашыҡмай икән ул. Ошо ауыр заманда Айбикәнең ваҡытһыҙ яҡты донъяларҙан китеүе аяҙ көндө йәшен һуғыу менән бер булды. Быҙауҙарын көскә табып ахмалға төшөп ҡайтып килгән ҡатын теште зәңкетерлек һалҡын ҡойонан эйелеп

рәхәтләнеп һыу эскән... Өйөнә аяғын саҡ һөйрәп ҡайтып йығылған һәм шул ятыуҙан тора алмаған ҡатын Сәлимйәне менән Гөлбаныуҙы бергә саҡырып бәхилләште:

– Гөлбаныу, һин миңә иң яҡын туғанымдан да яҡыныраҡ булдың. Гөлсәсәгемде һиңә тапшырам, үгәй ҡулына биреп ғазаплатма йән киҫәгемде. Күңелеңә ауыр алма, Аҙнабай ҡайтмаһа, ҡайнағаңа бар. Әгәр шулай булһа, мин ҡәберемдә тыныс ятырмын, бөртөкләп йыйған донъямда яттар кинәнмәҫ. Гөлсәсәгемде... – Айбикәнең арыҡ йөҙө буйлап күҙ йәштәре тәгәрәне. – Гөлсәсәгемде ситтәрҙән ҡаҡтырма – үтенесем шул.

Хәлһеҙләнеп мендәренә кире ауған Айбикә шул ятыуҙан кире торманы. Гөлбаныу, йәшенә төйөлөп, бер нәмә лә өндәшмәне. Сәлимйән шаңҡыған хәлдә баҫып торҙо.

Килендәше вафат булғас, ике йортто, балаларҙы Гөлбаныу ҡараны. Сәлимйән айҙар буйы бойоғоп, ҡулына эш бармай ҡаңғырып йөрөнө. Бер көн килеп, күҙҙәрен мөлдөрәтеп тәҡдимен әйтергә батырсылыҡ итте:

– Гөлбаныу, өйөңдө бикләп торайыҡ, күс һин беҙгә.

Гөлбаныуҙың Аҙнабай шундай тырышлыҡ, һөйөү менән ҡорған нигеҙен ташлап киткеһе килмәне, ҡайтырына өмөтө лә ҙур ине, кеше ғәйбәтенән дә ҡурҡты.

– Һин беҙҙә торһаң, йортҡа сит кеше килтермәҫ инем. Йылдар ауыр, Аҙнабайҙың ҡайтҡанын бергә көтөр инек.

– Юҡ, ҡайнаға, кеше һүҙенә кергәнсе, гүр ҡуйынына кереү артыҡ. Аҙнабайымды үҙ йортомда ҡаршы алам.

Сәлимйәндең икенсе ҡатыны йышылған, яман уҫал нәмә булып, Гөлсәсәкте ҡаға, йортто туҙҙыра, артынан килгән ҡыҙын ғына тығындыра, кейендерә... Йәш йыуаш ҡатын быларҙы күреп торһа ла, өндәшмәне. Өндәшеп тә ни ҡыла алаһың, юҡҡа ғына, ир менән ҡатын араһына ингәнсе, ике ут араһына ин, тимәгәндәр. Гөлсәсәк кенә йәл, йәнә Айбикә рухы алдында оят.

Ҡыштың сатнама һыуыҡ көндәренең береһендә һыуҙан ҡайтҡанда Гөлбаныу үҙәкте өҙөп сеңләп илаған бала тауышын ишетте һәм, шөбһәләнеп, күнәктәрен урамда ҡалдырҙы ла Сәлимйәндәр ишек алдына ҡарай йүгерҙе. Барһа, ни күрһен: ҡар өҫтөндә әле бер аяғын, әле икенсеһен күтәреп, йыртыҡ күлдәкле, туҙған сәсле Гөлсәсәк асырғанып илай. Гөлбаныу уны йәһәт кенә ҡармап, ауыр ишекте көскә асып, эскә уҙҙы, баланың аяҡтарын, ҡулдарын ыуырға тотондо.

– Шәмсебанат еңгә, бынау һалҡында остоҡ ҡына баланы әрәм итеүең бар бит.

– Әстәғәфирулла, кем мине оялтып маташҡан була бит әле, әйкәйем. Уның буғын-һейҙеген мин түгәйемме?! Уғата йәлләһәң, алып аҫыра, атаһын ярата һың бит!

Сарға бисә, бөйөрөнә таянып, күҙҙәренән зәһәр осҡондар сәсеп, ҡаршыһына килеп баҫты.

– Ҡуштан кәнтәй, кеше ирен аҙҙырыуың етмәгән, минең өйөмә инеп, сүптән сүмәлә өйөп йөрөгән була, арт һыныңа тибеп сығарырмын. Олаҡ күҙемдән яҡшы саҡта! – Эсендәге ҡара эренен түгергә яҫҡынған Шәмсебанат ярһып, ағыуына сәсәп тороп ҡалды.

Гөлбаныу ҡайтып мейесенә яҡты, баланы йыуындырҙы, йылы һөт эсереп, икмәк ашатҡас, мейес янындағы һикегә юрғанға урап һалып ҡуйҙы. Апаһының

килеүенә шатланған Юлдыбай ҙа, шырҡ-шырҡ көлөп, уның янына барып сумды.

Ҡатын һандығында ятҡан бәҙҙән күлдәк тегә башланы. Кискә ҡәҙәр шуның менән мәж килде. Сәлимйәндең ике ат менән утындан ҡайтып бушатыуын да, мал эсереп, бесән һалыуын да, Шәмсебанаттың тәҙрәнән тәҙрәгә йөрөп, асыуҙан шартларҙай булып үрһәләнеүен дә күрмәне. Гөлсәсәккә яңы күк күлдәк кейҙергәс, ҡыуаныстан өсәүләшеп таҡмаҡ әйтеп бейеп алдылар, күлдәкте ҡотлап ҡоймаҡ ҡойҙолар. Һуңлабыраҡ ҡына мал ҡырына сыҡҡан Гөлбаныу, утын өйөп торған ҡайнағаһын күреп, уңайһыҙланып китте:

– Ай, ҡайнаға, күрмәй ҙә торам, утынды ҡалай күп килтергәнһең.

– Күп булмай ул, ҡыш бауыры оҙон. Ашығыс ҡына бушатып, ҡапҡа ла япмай ҡайтып киткәнмен. Мал ҡарап, сәй эсеп, был яҡҡа күҙ һалһам, ҡапҡа асыҡ, ишек алдына сит мал ингән, еңгәңә: «Килен ауырыймы әллә? Бар, ҡарап кил әле!» – тигәйнем, тыңламаны, әллә ниңә асыуланған. Шунан үҙем килдем.

Сәлимйән һөйләнә-һөйләнә утынды өйөп бөттө, бейәләйҙәрен ҡаҡҡыланы ла, яуап булмағас, әйләнеп ҡараны, Гөлбаныуҙың йәшкәҙгән күҙҙәрен күреп, ҡурҡып китте.

– Нимә булды, килен?

– Шәмсебанат еңгә харап икән бөгөн, – Гөлбаныу килеп сыҡҡан хәлде ҡыйынһынып ҡына аңлатып бирҙе.

– Көнсөл көнө – көйөнөс, Шәмсебанат үҙе лә рәхәтлек күрмәй, башҡаларға ла тынғылыҡ юҡ. Айбикәнең өҙөлөп әйткән һүҙен тыңламаныҡ шул, – ир Гөлбаныуҙың ни әйтерен саҡ ҡына көттө лә, күҙҙәрен дә күтәрмәй, өйгә инеп китте. Матур күлдәк кейеп, шатланып йөрөгән ҡыҙының арҡаһынан тупылдатып һөйҙө, Юлдыбайҙың башынан яратты ла, бер аҙ ултырғас, ауыр аҙымдар менән Шәмсебанат янына ҡайтып китте.

Сәлимйән Гөлбаныуҙарға йышыраҡ инә башланы. Ихаталағы ауыр ир-ат эшен гел үҙе эшләргә тырышты, инеп, кинәнеп балалар менән уйнаны, ҡай саҡ күстәнәсен дә тотоп килгеләне. Бының өсөн Шәмсебанат өйҙә олоғара дау ҡуптарҙы. Былай ҙа саҡ торған тормоштары сатнап, тора-бара ул ярыҡ ҙур упҡынға әйләнде. Йорт эсендә йәм бөттө, ҡот ҡасты. Ахыр килеп, Шәмсебанат, йорт-юшанын тейәп, Сәлимйәндекен дә өҫтәп алып, ауылына ҡайтып китте.

Гөлбаныу, Сәлимйәндең яңғыҙ ҡалған ата ҡаҙ кеүек үрһәләнеүен, күңеленә толҡа таба алмай интегеүен күреп, үҙен битәрләне. Йәлләп Гөлсәсәкте алып ҡайтҡанда араларын һис боҙорға теләмәгәйне. Ниндәйҙер арыу һүҙҙәр табып, араларын нығытырға кәрәккәндер ҙә бит, баланың аянослы хәлен күреп, ифрат ҡыҙғанды шул, аралары һыуыныр, тип уйламаны. Эшләгән яҡшылығың да ике осло була икән  ҡайһы саҡ. Унһыҙ ҙа ҡалтырап торған донъялары, ана, ҡалай емерелеп төштө. Хәйер, ҡойолоп төшөргә торған нәмәне терәү һалып ҡына эшкиндереп булыр инеме икән?

Күктә яҡты Сулпан йондоҙо емелдәй. Йыраҡтан, тау артынан, таң атып килә. Йомшаҡ ҡулы менән асты иркәләп, йылы яҙ килә. Көндөҙ түбәләрҙән тып-тып тамсылар тама, тау биттәре ҡарайып асыла, йырғанаҡ, ҡыләүектәрҙең аҫтында үләндәрҙең йәшел баштары күренә. Ҡара ҡарғалар эшлекле ҡиәфәт менән тыуған яҡтарының ҡыр-яландарын ҡараштырып йөрөй. Яҙ һулышынан баштары әйләнеп, турғайҙар дәртле сырҡылдаша, әтәстәр  ҡысҡыра, ҡаҙҙар ҡаңғылдай,

көн битендә малдар арҡаларын ҡояшта ҡыҙҙыра. Сыйырсыҡтар, һабантурғайҙар ҡыуаныстарын, моңға сорнап, ергә түгә. Һәр тамсыла, һәр күләүек, һәр йырғанаҡта ҡояш көлә.

Гөлбаныу яҙғы байрам иртәһендә йөрәкһеп уянды. Тәһәрәт алып, намаҙға баҫты, белгән сүрәләрен ҡат-ҡат уҡып күңелен бушатты. Аҙнабайы ҡәһәрле шул һуғышҡа киткәне бирле ул намаҙын ҡалдырмаҫҡа тырышты. Уҡыған сүрәләрем кәрәк ерҙә ҡанат, кәрәк ерҙә ҡалҡан булһын йән киҫәгемә, утты-һыуҙы кисергә ярҙам итһен, тип теләне.

Өй һыуынғайны. Гөлбаныу мейескә яҡты, ҡуҙ төшкәс, ҡоймаҡ ҡойҙо, аҙаҡ, бәрәместәр яһап, мейескә тыҡты. Бер аҙҙан, тәмле ризыҡ еҫен тойоп, балалар ҙа тороп ултырҙы. Мейестән яңы сыҡҡан бәрәместәр, тәҙрә төбөндә шау сәскә булып ултырған ике гөл, әсәләренең яҡты йөҙө әкиәти сихри донъяға саҡырыу һымаҡ тойолдо уларға.

– Бөгөн байраммы, әсәй? – тип һикереп торҙо Юлдыбай.

– Байрам, балалар, байрам. Тороғоҙ, йыуынығыҙ ҙа сәй эсергә ултырығыҙ.

Балалар мейес янындағы ҡомғанды алып, бер-береһенә алмаш-тилмәш ҡойоп йыуындылар ҙа йәһәт кенә табынға килеп ултырҙылар.

Гөлбаныу уларға ҡаймаҡ һалып сәй яһаны, алдарына бәрәмес, ҡоймаҡтар ҡуйҙы.

– Сәйҙән һуң өләсәйегеҙҙе, Ҡәмәр инәйегеҙҙе саҡырып ҡайтырһығыҙ. – Гөлбаныу хәбәрен һөйләп тә бөтмәне, Сәлимйән килеп керҙе. Күптән уны күрмәгән балалар, һикереп тороп, уға һырылдылар. Сәлимйән, уларҙы һикертеп һөйөп, өҫтәл янына кире ултыртты һәм, артыҡ ҡыҫтатып тормай, үҙе лә табынға ултырҙы. Ул бөгөн элеккесә шат, күңелле күренә ине. Гөлбаныу һөйөнөп ҡуйҙы: Айбикә вафат булғаны бирле Сәлимйәндең ҡаштары яҙылғанын, йөҙө асылғанын күргәне юҡ ине.

– Һә, минең кескенәләрем, суҡтай итеп кейенеп ҡуйғандар байрамға,– тип ихласлап балалар менән һөйләнеп ултырҙы.

– Ҙурая, Гөлсәсәккә кейемдәр кәрәк,– тине Гөлбаныу, балалар сығып киткәс.

– Шулай шул, икеһенә лә кәрәк. Иген үҫһә, Алла бирһә, шуны рәтләрбеҙ,– тине тегеһе. – Байрам үтһен дә, орлоҡҡа тигән ашлыҡты таҙартырға кәрәк булыр. Әрйәләге игендәргә һыу үтмәгәнме, ҡараманыңмы?

– Юҡсы, ҡоро торалар, ҡараным.

– Һары бейәне һабанға егеп борсолдормабыҙ, йәй башында ҡолонларға тейеш. Яһа әле тағы бер сынаяҡ, ҡалай рәхәт һеҙҙең менән бергә. Өс йылдыр инде минең былай иркенләп, шатланып ашап-эсмәгәнгә.

Самауыр ҡумыҙ тауышы сығарып сыңланы. Айбикәне иҫләгәс, икеһенә лә яманһыу булып китте. Сәлимйән һаҡ ҡына, кемделер йоҡоһонан уятыуҙан ҡурҡҡан кеүек, һүҙ башланы:

– Гөлбаныу, нисек уйлайһың, ике ара донъя көтөүе ҡыйын бит. Көсәнеп, тырышып ҡараныҡ, алдыра алманыҡ. Ҡырҡ ҡатын килтерәйем – йорт һинһеҙ етем, бигерәк тә Гөлсәсәк... Аҙнабайҙың өнө лә, тыны ла юҡ, ҡара ҡағыҙына ла йылдан ашыу, иҫән булһа, ҡош телендәй генә хәбәре килер ине. Юлдыбайға яҡшы ата, Гөлсәсәккә яҡшы әсә булмаҫ беҙ ике ары торғанда.

Ир эш ваҡыты етеүен, йәшәүҙең ауырлығын аңлатырға тырышты. Гөлбаныу

самауыр артына йәшеренә биреп тыңланы, өндәшмәне. Быны Сәлимйән ризалыҡ һымағыраҡ ҡабул итте.

– Мин, Гөлбаныу, ҡоҙағыйға хәлде яҡшылап аңлатырмын, ул риза булырға тейеш. Ә һин аш һал. Мулланы, тағы бер нисә кешене саҡырып алырбыҙ. Байтаҡтан бирле яңғыҙбыҙ бит инде. Һинең тикле саф, аҡыллы әүлиә йән юҡ ул. Бар ине Айбикә, бик иртә әрәм булды. Беҙҙең ҡауышыуға ул үҙе фатиха бирҙе.

Гөлбаныу самауыр артынан Сәлимйәнгә ҡараны. Аҙнабайҙыҡы ише буй-һын, тулҡынлып торған дөм-ҡара сәстәр, тауышына ҡәҙәр хәс Аҙнабай. Аҙнабайҙыҡы ише күҙҙәр мөлдөрәп, ялбарып уға баҡҡан. Йомошҡа ебәрелгән балалар ҙа йүгереп килеп инделәр. Улары ла ниҙер көткән, өмөт иткәндәй уға ҡарап туҡтап ҡалдылар. «Алты күҙ, ҡояшҡа тартылған көнбағыштарҙай, уға текәлгән, унан таяныс эҙләй. Алты күҙем илағансы, ике күҙем илаһын, ошо алты күҙҙә шатлыҡ, ошо алты күҙҙә яҡты нур уйнаһын өсөн мин бөтәһен дә эшләргә тейеш", – тип уйланы ҡатын.

– Бар, Сәлимйән, мулланы саҡыр. Ә әсәйемдәр былай ҙа ашҡа килергә тейештәр.

Тораташ кеүек ҡатып, ағарынып унық һүҙен көткән иргә йән керҙе. Ул, сырайы яҡтырып, ике баланы ике ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып өйөрөлттө лә йәш кәзә бәрәсе шикелле сығып йүгерҙе. Бер аҙҙан ахылдап кире йүгереп инде.

– Ҡасанғараҡ тип саҡырайым ?

– Төшкө ашҡа килһендәр. Сәлимйән, туҡта әле...

Инде ҡапҡа төбөнә етеп барған ир, яҡшы атҡа оҡшатып юрғалап, кире әйләнде.

– Әү, Гөлбаныу.

– Ҡөрьән уҡытырға тип кенә әйт, бер үк никах тураһында өндәшмәй тор, мин тағы бер ҡат уйлайым әле.

Ирҙең йөҙөнә күләгә йүгерҙе. Ул күҙҙәрен тултырып Гөлбаныуға ҡарап торҙо ла яй ғына сығып китте. Донъяның ауыр йөгөн йөкмәгәндәй, бөкрәйә биреберәк атлап барған ҡайнағаһы үтә лә бәхетһеҙ булып күренде Гөлбаныуға.

– Хоҙайым, әҙәм балаларының йөҙө яҡты, нурлы булһа ине... Кәңәш бирсе, Раббым, нимә эшләргә тейеш мин?

Гөлбаныу намаҙлығын йәйеп, өмөт менән ҡиблаға йөҙөн борҙо, ҡат-ҡат белгән сүрәләрен уҡыны, үҙе лә һиҙмәҫтән субырлап йәше аҡты.

– Ҡыуанып, һөйөп, һөйөлөп йәшә, бәхетле була бел. Бәхетлеләр, күңелдәре мөхәббәт менән тулы булғандар ғына башҡаларға ла бәхет өләшә ала. Һәр бер сәскә, һәр ҡыяҡ, ағас тирә-йүнгә һөйөп баға, һәр ҡоштоң теле – тулы моң. Хоҙай ҙа был донъяны иҫ киткес ҙур һөйөү менән тыуҙырған. Донъя тотҡаһы – һөйөү.

Ҡайҙандыр килгән ошо һүҙҙәрҙән Гөлбаныуға йән керҙе. «Донъя тотҡаһы – һөйөү, – тип ҡабатланы ул, сырайы яҡтырып. – Рәхмәт һиңә, Раббым! Нишләр инем һинһеҙ?! Сыраһыҙ, утһыҙ ҡалған йорт кеүек булыр инем. Хоҙайым, яҡты нурыңдан айырма!»

**Ноғман**
**МУСИН**

## ДИНИС ЮЛЫ



***Был мәҡәлә төрлө ваҡытта яҙылды. Һуңғы вариантты 2011 йылдың сентябрендә, Динис Исламовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арнап, журналға биреү өсөн, йәнә яҙырға тотонғайным. Шулай килеп сыҡты – уны ваҡытында ослай алманым.***

***Ярай, һуң булһа ла, уң булһын! Ижады менән дә, яугир-шәхес булараҡ та күңелемә уйылып ҡалған өлкән ҡәләмдәшемдең һоҡланғыс образына күпмелер яҡтылыҡ төшөрә алһам, изге ниәтемә ирештем, тиермен.***

* * *

Тәүге тапҡыр осрашҡанybыҙҙа ул хәрби кейемдә ине: офицерҙар кейә торған һәйбәт шинель, унын асыҡ иҙеүенән, яға эләктергестәре ҡаптырылмаған йәшел китель күренә, галифе салбар, ҡалын күндән тегелгән итек. Башындағы кубанка һымағыраҡ бүрке, көмрө танауы уны беҙ киноларҙа күреп өйрәнгән, Граждандар һуғышы осорондағы хәрби казакка оҡшата.

Мин ул ваҡытта ауылда йәшәй инем һәм ҡышҡы каникул мәлендә «Әҙәби Башҡортостан» журналына хикәйәләремде алып килгәйнем. Редакцияла һөйләшеп ултырған арала, әлеге хәрби кейемдәге кешенең Динис Исламов булыуын, унын һуғыштан ҡайтҡандан аҙаҡ гәзит редакцияһында эшләп йөрөгән еренән ҡабат хәрби хеҙмәткә алынып, йәнә бер аҙ һалдатта йөрөп ҡайтыуын белдем. Шуға күрә әле хәрби кейемен һалып өлгөрмәгән икән.

Һәм ул минең күңелемә ана шулай хәрби кеше булып һеңеп ҡалды. Ә һуңынанырак унын һуғышта күрһәткән батырлыҡтары

тураһында белгәс, Динис Исламов күҙ алдымда утлы юлдар үткән, ҡурҡыу белмәҫ, ләкин нык ҡына йонсоған, шулай ҙа рухи ныҡлығын һаҡлаған һалдат булып һынланды.

Батыр кеше бер ваҡытта ла, мин батыр, тип күкрәк ҡаҡмай. Динис Исламов һуғышта йөрөп ҡайтҡан яҙыусылар араһында батырлыҡтары өсөн иң күп һәм иң ҙур ордендар алған кеше ине. Ике хәрби Ҡыҙыл Байраҡ, I һәм II дәрәжәләге Ватан һуғышы, «Ҡыҙыл Йондоҙ» ордендары һәм миҙалдар – ҡыйыу офицерҙың Дон буйҙарынан алып Берлинғаса үткән данлы юлының асыҡ сағылышы. Әммә ул ошо ордендарын бер ваҡытта ла түшенә тағып, бына мин кем, тигән һымаҡ йөрөмәне. Ул үҙенең фронт юлдары, ниндәй батырлыҡтары өсөн наградалар алыуын да һөйләргә яратмай ине. Шулай ҙа мин бер тапҡыр, ҡыҙыҡһыныуымды тыя алмайынса:

– Хәрби Ҡыҙыл Байраҡты ваҡ-төйәк өсөн бирмәйҙәр бит инде, ағай. Тәүгеһен ҡасан, ни өсөн бирҙеләр? – тип һораным.

Ул ғәҙәтенсә ҡулын һелтәне, тотлоғобораҡ әйтте:

– Эй, туғанҡай, ниңә кәрәк инде ул. Уны һөйләп йөрөр өсөн бирмәгәндәр, һөйләһәм дә, аңламаҫһың...

Еңеү көнө, 9 май алдынан, йәки 23 февралдә уның, башҡа фронтовиктар кеүек орден-миҙалдарын, һәр төрлө значоктарын шауҙырлатып тағып, осрашыуҙарға йөрөүен, тантана кисәләрендә президиумдарҙа ултырыуын да хәтерләмәйем. Ул яҡтан уғата ла баҫалҡы кеше ине Динис Исламов.

Бына ошо баҫалҡы, үтә бер ҡатлы, хатта әрпешерәк тә кеше үҙ ғүмерендә йәнә бер батырлыҡ эшләне. Быныһы ижади батырлыҡ ине: ул Бөйөк Ватан һуғышы осоронда халҡыбыҙ күрһәткән ҡаһарманлыҡтарҙы сағылдырған бынамын тигән роман, повестар ижад итте. «Мәскәү юлы» романы һәм «Зеелов тауҙары» тигән повесть кешеләргә оло һынау булған аяуһыҙ алышты бөтә ҡатмарлылығында һүрәтләгән, батырлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ, тоғролоҡ һәм вәхшилек, үлемһеҙлек һәм фажиғә тураһында тәрән уйланыуҙарҙан тыуылған иң яҡшы һәм ҡабатланмаҫ әҫәр булып ҡаласаҡ. Һуғыш тураһында, әлбиттә, уларҙан башҡа ла шиғырҙар, поэмалар, хикәйә, повестар, роман, хатта бер нисә сәхнә әҫәре лә бар ине. Әммә Динис Исламов әҫәрҙәре уларҙан һәр яҡлап бер башҡа өҫтөн тора. «Мәскәү юлы» романын миңә тәүгеләрҙән булып уҡырға (ул саҡта «Ағиҙел» журналы редакцияһында эшләй инем) һәм уны журналда баҫыу өсөн әҙерләргә тура килде. Хәйер, был хаҡта аҙаҡтанырaҡ һөйләрмен, ә уға тиклем...

«Мәскәү юлы»н яҙғанға тиклем Динис Исламов ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы ижад юлы үтте. Ул да, аҙаҡтан прозаик йә драматург булып киткән күп яҙыусылар кеүек, тәүҙә шиғырҙар яҙҙы, уларҙың байтағы матбуғатта баҫылып та сыҡты. Тәүҙә металлургия институты рабфағында уҡып, бер йыллыҡ курсты ғына бөткән егет күңелендә

шиғриәткә ынтылыш юҡтан ғына яралмағандыр. Бындай күренеште, Хоҙай биргән һәләт, тиҙәр. Уның ошо һәләте яу юлдарында йөрөп ҡайтҡандан һуң, илленсе йыл баштарында, ныҡлап асыла, һәм Динис Исламов тиҙ арала үҙенсәлекле прозаик булып таныла. Талантлы кеше бер эште лә ҡурҡып, һәрмәнеп, шикләнеп башламай, үҙен тәүге аҙымдарҙан уҡ күрһәтә. Динис Исламов та тәүге «Беренсе көн» (1951), «Яҙ»(1952) хикәйәләре менән үк башҡорт прозаһында яңы һүҙ әйтте һәм артабан уның таланты гөлт итеп асылып китте.

Бының сәбәбе, берҙән, юғарыла әйткәнебеҙсә, Хоҙай биргән талант булһа, икенсеһе – ауыр һуғыш юлдарын үткәндә алған тормош һабағы. Динис Исламов үҙенең 50 йәше тулыу уңайы менән сыҡҡан «Аға һыуҙар» тигән китабына яҙған инеш һүҙендә лә: «Бөйөк Ватан һуғышы йылдары минең өсөн ғүмерлеккә һәм оло тормош мәктәбем булды», – ти.

Уның «Йомарт ер» романындағы бер герой: «Тормош – мәңгелек, ғүмер – ҡыҫҡа. Ашығырға кәрәк... Алда тормошҡа ашырылыуын көткән тағы ла күпме хыялдар бар әле!» – ти. Миңә Динис Исламов үҙенең ҡыҫҡа ғүмерен ошо һүҙҙәрҙе ҡабатлай-ҡабатлай йәшәгән һымаҡ тойола. Ҡайһы берәүҙәр уны алабарманлыҡта, ваҡыт ҡәҙерен белмәүҙә, хатта тәртипһеҙлектә ғәйепләй, уның бер ҡатлылығынан көләләр ҙә ине. Ә бына хәҙер ижад юлына иғтибар менән күҙ һалһаң, уның ни тиклем егәрле ижад итеүен күрмәү мөмкин түгел. Егерме йыл самаһы ваҡыт эсендә ул өс роман, ете-һигеҙ повесть, бик күп хикәйә һәм очерктар яҙып өлгөргән. Һәм ниндәй әҫәрҙәр бит әле! Әҙәбиәтебеҙҙең түрендә урын алырҙайҙар. Быны урам буйында һемтәңләп йөрөүсе йә булмаһа бер китап сығарғандан аҙаҡ үҙен ҙур яҙыусыға иҫәпләп, трибуналарҙан лаф ороусы эшләй алмай.

Үҙ ижады юлында ниҙәр генә күрмәне лә ниҙәр генә кисермәне Динис Исламов. Тәүге хикәйәләр китабы («Беренсе көн», 1953 йыл) донъя күргәс, бигерәк тә «Ураҡ өҫтө» тигән хикәйәһе «Гость из Кубани» тигән баш аҫтында «Огонек» журналында баҫылғас (ошоғаса башҡорт прозаиктарының әҫәре был популяр журналда баҫылғаны булмай), уны күккә күтәреп маҡтайҙар, гәзит-журналдарға бер нисә һәйбәт рецензия ла яҙыла. Динис Исламовҡа «Огонек» журналынан мул ғына гонорар килеп төшкәс, уның бер ҡатлылығынан файҙаланып, ҡайһы берәүҙәр уны тағы ла нығыраҡ ҡапаҡларға, күккә күтәреп маҡтарға тотона. Кеше кеҫәһен һәрмәргә яратыусы ошондай ҡәләмдәштәре, йылдар үткәс тә әле, Динис Исламовтың гонорар аҡсаһын нисек итеп ике көндә эсеп бөтөүҙәрен мәрәкә һымағыраҡ көлөп һөйләүҙәре хәтерҙә. Һәм мин ошо уҡ кешеләрҙең аҙаҡтаныраҡ Динис Исламов әҫәрҙәренән «сөй» эҙләп, уны тәнҡитләп, авторға әллә ни тиклем борсолоуҙар килтереүен дә беләм.

Динис Исламовтың «Ҡыҙҙар» повесы баҫылып сығыу (1954) әҙәбиәт донъяһын тағы бер ҡужғытты. Әҫәр мауыҡтырғыс сюжетҡа ҡоролоуы

һәм киҫкен бәрелештәрҙә сағыу образдар тыуҙырылыуы менән быға тиклемге әҫәрҙәрҙән айырылып тора ине. Күренекле ғалим һәм яҙыусы, башҡорт прозаһының бөтә үҫеш юлын асыҡ күҙаллаған һәм ошо хаҡта ҙур монография яҙған Әнүр Вахитов был турала: «Повесть үҙенең тормошсан һулышы, ихласлығы менән күңелде яулай. Был әҫәр башҡорт прозаһы үҫешендә, уның тормошҡа яҡынайыуында, заман темаһын үҙләштереүҙә етди аҙым булды», – тип яҙҙы. Ә 1955 йылда Мәскәүҙә Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре үткәрелергә булғас, бөгөнгө көн темаһына яҙылған башҡа күҙгә күренерҙәй әҫәр юҡлыҡтан, «Ҡыҙҙар» повесы бик тиҙ генә руссаға тәржемә ителеп тә баҫыла. Йыйып әйткәндә, Динис Исламов «Ҡыҙҙар», «Гөлбәҙәр юлы», «Ғүмер уртаһы» тигән повестары менән илленсе йыл урталарында башҡорт прозаиктарының алдынғы сафына сыҡты. Уның бик популяр яҙыусы булып китеүен күрһәткән бер миҫал. 1956 йылда уның «Ғүмер уртаһы» тигән әҫәре «Совет Башҡортостаны» гәзитендә бер нисә һанда баҫылып сыҡты. Ул саҡта ауылда йәшәй инем. Гәзит килеү менән «Ғүмер уртаһы»н уҡыйым, ул арала кемуҙарҙан йүгерешеп күршеләр килеп етә: улар ҙа әҫәрҙең дауамын уҡырға уҡталып тора. Һәм әлеге гәзит, ҡулдан-ҡулға күсеп йөрөй торғас, ылбырап бөтә, йыш ҡына миңә кире әйләнеп ҡайтмай ине.

Тик ысын ижадсының, талантлы яҙыусының тормошо гел шатлыҡ-ҡыуаныстарҙан ғына тормай, уға бер кем дә таҡыр юл әҙерләп ҡуймаған. Сөнки уның тормошҡа, кешеләргә, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтенә, шул иҫәптән етәксе эштә йөрөүселәргә лә үҙ ҡарашы бар, һәм ул әҫәрҙәрендә лә үҙ йәшәү принциптарына – намыҫына тоғро булып ҡала, ниндәйҙер ҡалыптарға яраҡлашырға тырышмай. Динис Исламов та тап бына ошондай шәхес ине. Шуға күрә лә мине уның тәүге эпик әҫәре – «Йомарт ер» романы – ниндәй кәртәләр үтеп, төрлө кимәлдәрҙә тәнҡит һүҙҙәре ишеткәндән аҙаҡ ҡына донъя күреүе бер ҙә аптыратмай.

Был роман 1956 йылда Яҙыусылар союзының проза секцияһы ултырышында тикшерелә. Төрлө һүҙҙәр ишетә автор унда. Шулай ҙа маҡтау һүҙҙәре аҙыраҡ була, күберәк тәнҡит һүҙҙәре эләгә. Минеңсә, илленсе йыл баштарындағы ауыл тормошо тураһында киҫкен конфликттарға ҡоролған, тормошто һәм етәксе-коммунистарҙы ла ыңғай яҡтан ғына һүрәтләмәгән, ә бөтә ҡатмарлылығында биргән яңы һулышлы эпик әҫәрҙе тормошҡа, күрһәтмәләргә яраҡлашып ижад итеүсе ҡәләмдәштәре аңлап етмәй, ҡабул итә алмай. Ошонан аҙаҡ яҙыусыларҙың йыйылыштарында ғына түгел, партия өлкә конференцияһында ла был романды тәнҡитләп телгә алалар, «Әҙәби Башҡортостан» журналында баҫыуҙан баш тарталар. Был саҡта Динис Исламовтың ниҙәр кисергәнен бер кем белмәй. Бер ҡатлыраҡ булһа ла, ул ижадындағы уңыштары йә көйөнөстәре тураһында кеше

алдында артыҡ һүҙ ыҫҡындырып бармай, үҙ тойғоларын ирҙәрсә буйына һеңдерә белә ине. «Йомарт ер» тик 1959 йылда ғына китап булып сыҡты. Әлбиттә, авторға үҙ әҫәрен баҫтырыу өсөн байтаҡ шымартырға, төп герой Рәшит Билаловты ла нигеҙҙә ыңғай образ итергә тура килде. Миңә ҡалһа, әгәр роман авторҙың тәүге вариантында сыҡһа, ул художество дөрөҫлөгө яғынан тағы ла көслөрәк әҫәр булыр һәм әле лә, илле йылға яҡын ваҡыт үткәс тә, беҙ уны бөгөнгө көн тураһындағы әҫәр итеп уҡыр инек. «Йомарт ер»ҙең баһаһын күтәреүҙә талантлы артист һәм режиссер Вәли Ғәлимов ҙур эш башҡарҙы: ул роман буйынса сәхнә әҫәре яҙҙы, һәм Башҡорт академия драма театрында ул «Ҡуштирәк» исеме аҫтында оҙаҡ ваҡыт уңыш менән барҙы. Аҫыл ташҡа бысраҡ йоҡмай, тигән мәҡәлдең дөрөҫлөгө шулай итеп йәнә бер тапҡыр раҫланды.

Ғөмүмән, Динис Исламов хикәйәлә лә (мәҫәлән, «Ағастар япраҡ ҡойғанда»), ҡыҫҡа ғына повеста ла («Гөлбәҙәр юлы»), ҡатмарлы сюжетҡа ҡоролған, ваҡиғалар романға тартып, эпик һүрәтләүҙәр аша сағылдырылған повестарында ла («Йылдар һәм юлдар») үҙ фекерен художестволы дөйөмләштереүҙәр аша әйтеп бирә алырҙай ваҡиға-ситуациялар, геройҙар һайлап ала белеүе менән айырылып тора. Былар иһә – яҙыусының оҫталығын күрһәткән сифаттар.

Талантлы оҫталар иһә һәр эше менән үҙен дә, башҡаларҙы ла ҡабатламай, яңынан-яңы ижад гәүһәрҙәре тыуҙыра. Алтмышынсы йыл урталарына тиклем Динис Исламовтың, Ватан һуғышының утлы юлдарын үткән, күп тапҡырҙар үлем менән күҙмә-күҙ осрашҡан һалдат булараҡ, был темаға күҙгә күренерлек әҫәр яҙғаны юҡ ине. Ләкин ул был тема өҫтөндә оҙаҡ уйланған, өҙлөкһөҙ эҙләнгән, бәлки, яйлап-яйлап яҙып та йөрөгәндер. Шулай итмәһә, һуғыштың иң ҡатмарлы, ауыр осорон – 1941 йылдағы ваҡиғаларҙы – сағылдырыуға арналған «Мәскәү юлы» романы башҡорт романистикаһында яңы бер асыш булырҙай әҫәр булып өлгөрмәҫ ине.

Юғарыла ошо әҫәрҙе ҡулъяҙма көйө тәүгеләрҙән булып уҡыуым, уны «Ағиҙел» журналында баҫыу өсөн әҙерләүем хаҡында әйтә биреп ҡуйғайным. Шул саҡта мин авторҙың һуғыш тураһында трилогия яҙырға уйлауын, «Мәскәү юлы»ның беренсе китап ҡына булыуын, икенсе китаптың яҙыла башлауын һәм уның «Көньяҡ ҡояшы» тип аталасағын да белдем. «Бер ҡатлы», «алабарман», «тәртипһеҙ» Динис Исламов ана шундай ҙур пландар менән йәшәй һәм өҙлөкһөҙ эшләй ине. Әгәр ул, ғүмере булып, ошо хыялдарын тормошҡа ашыра алһа, беҙ ошо көндә, Константин Симоновтың «Үлеләр һәм тереләр» трилогияһы кеүек үк һәм художество йәһәтенән унан һис тә ҡайтыш булмаған, Ватан һуғышын башынан аҙағынаса сағылдырылған эпик әҫәрле булыр инек.

«Мәскәү юлы», әлбиттә, һуғыш темаһына яҙылған тәүге әҫәр түгел ине. Ғәли Ибраһимовтың «Бер полк кешеләре» романы, бер нисә повесть һәм хикәйәләр донъя күргәйне. Ләкин улар Башҡортостан егеттәренең батырлыҡтарын, һуғыштың трагик асылын тулыһынса күрһәтә һәм әллә ни популярлыҡ ҡаҙана алманы. «Мәскәү юлы» иһә ошо бушлыҡты тултырып ҡына ҡалманы, башҡорт әҙәбиәтен байытыусы, унда мәңге һаҡланасаҡ әҫәр булды.

Романды мөхәррир күҙлегенән ҡарап, баҫырға әҙерләгәндә, мин авторҙың үҙенсәлекле хикәйәләү стиленә, образдарҙы индивидуалләштереү өҫтөндә эшләүгә ҙур иғтибар биреүен күрҙем. Шул уҡ ваҡытта ул ваҡиғаларҙың логик үҫә һәм тығыҙ бәйләнештә күсәгилешлеген ышандырғыс деталдәр аша бирә. Ләкин әҫәрҙәге төп етешһеҙлек – стиль ҡытыршылығы ине. Күрәһең, авторҙың башҡорт теленең һүҙ байлығын самалы белеүе, махсус филологик белеме булмауы ла зыян иткәндер. Динис Исламовҡа әҫәрҙе мөхәррирләгәндән һуң ошо хаталарына төртөп күрһәтеп:

– Ағай, икенсе китабың өҫтөндә эшләгәндә ошоларға иғтибар ит әле, – тигәйнем, ул:

– Эй,– тип ҡулын һелтәне, – теге, ни, Батыр Вәлит әйткәндәге һымаҡ, әсәң башҡорт булмағас... Ярар, туғанҡай, мин һинең төҙәтеүҙәрең менән риза. Тик бер нәмәне онотмаһаң ине – һуғыш тураһында яҙғанда үтә шыма стиль фекерҙе асыҡ әйтеүгә зыян килтереүе лә бар.

Уның һуңғы һүҙҙәре уйландырырлыҡ ине. Ниндәй темаға, ниндәй осорҙа йәшәгән кешеләр тураһында яҙыуыңа ҡарап, хикәйәләү стилен һайлай белеүҙең дә оҫталыҡ икәнен иҫкәртә ине бит ул миңә. Һәм бик дөрөҫ әйтә ине.

Динис Исламов уйланған эпопеяның икенсе китабын – «Көньяҡ ҡояшы»н яҙып бөтә алмай донъянан китте. Уның яҙылған тиклем өлөшө лә ҡаралама хәлендә генә ине. «Ағиҙел» журналы редакцияһы уның шул тиклемен булһа ла уҡыусыларға еткереү сараһын күрҙе. 1974 йылда мин йәнә проза бүлеген алып бара инем. «Көньяҡ ҡояшы»ның ҡулъяҙмаһын ҡарап сығыу, тәртипкә килтереү өсөн Ярулла Вәлиевҡа бирҙек. Унан аҙаҡ үҙем ныҡлап ҡарап сығып, баҫырға әҙерләнем. Шул саҡта йәнә бер тапҡыр үкенес кисерҙем: ниндәй әҫәр яҙылып бөтмәгән!..

Икенсе китап яҙылып бөтмәһә, өсөнсөһө башланмай ҡалһа ла, һуғыш юлдарын башынан аҙағынаса үткән фронтовик-яҙыусы һуғыштың һуңғы көндәре тураһында әҫәр яҙырға өлгөрҙө. Был – тағы ла совет һалдаттарының батырлыҡтары тураһындағы бик һәйбәт повесть – «Зеелов тауҙары». 1971 йылда ГДР-ға барып йөрөгәндә экскурсовод автобусты тап бына Берлиндан алыҫ түгел ерҙәге ошо Зеелов тауҙары тәңгәлендә туҡтатып, Берлин өсөн һуғыштарҙың иң ҡан ҡойошлоһо ошонда үтеүен һөйләгәйне. Шул саҡ «Зеелов тауҙары»нда һүрәтләнгән

ваҡиғалар менән күҙ алдынан үтте, һәм мин өлкән ҡәләмдәшемә шул көндәрҙе мәңгеләштергән өсөн күңелемдән генә рәхмәт уҡыным.

Утлы юлдарҙа ла бирешмәгән, башҡорт әҙәбиәтендә яҡты эҙ ҡалдырған Динис Исламов тормоштан көтмәгәндә һәм ҡапыл китеп барҙы. Әлбиттә, үлем менән яғалашып үткән оҙайлы фронт юлдары, көсөргәнешле ижади хеҙмәт уның сәләмәтлеген әкренләп ҡаҡшатҡандыр. Әлеге шул беҙҙәге берәүҙе һәпестүкләп юғары күтәреү, данға күмеү, икенсе берәүҙең хеҙмәтен күрмәү йәки күрергә теләмәү касафаты: уның үлгәнгә тиклем рәтле фатиры ла булманы. Эре панелле йорттағы ике бүлмәле фатирҙа көн итте. Кескәй генә йоҡо бүлмәһенең бер мөйөшөндә яҙыу өҫтәле тора торғайны. Ул шундағы тынсыу һауала тындары ҡыҫылып, өҙлөкһөҙ ижад итте. Был да уның ғүмер ҡыҫҡалығына сәбәп булғандыр...

Ә төп сәбәптәрҙең береһе – икенсерәк. Актерҙар йортонда барған яҙыусылар йыйылышында уны бөтә ҡәләмдәштәре алдында имгәтә һуҡтылар. Ҡул менән түгел – тел менән. Ошо йыйылышта Динис Исламов та һүҙ алып, трибунаға сыҡты. Ул фекерен шымалап әйтә белмәй, туранан ярып һөйләй ине. Был сығышында иһә ул әҙәби процесты ойоштороу тәңгәлендә етешһеҙлектәрен әйтеп, Яҙыусылар союзына ла, хатта партияның өлкә комитетына ҡарата ла ҡаты ғына тәнҡит һүҙҙәре ысҡындырҙы. Уның артынса уҡ трибуна эргәһенә етәкселәр алдында тәрилкә тоторға яраткан, хатта ошо юл менән Салауат Юлаев премияһы ла алған Рәмил Хәкимов йүгереп барып менде лә Динис Исламовҡа ҡаршы, әҙәпһеҙлектә, әхлаҡһыҙлыҡта ғәйепләп, ғәжәп яман һүҙҙәр яуҙырырға тотондо. Унан аҙаҡ йәнә ике иптәш Динис Исламовты тәнҡитләп сыҡты. Ә өлкә комитет секретары Т. Ахунйәнов был ғәйепләү актын үҙенсә ослап ҡуйҙы... Ошонан аҙаҡ күтәрелә алманы фронтовик яҙыусы. Ул Туҡай урамындағы дауаханала үлем түшәгендә ятҡанда, уның эргәһенә барҙым. Ағайыбыҙ бөтөнләй шиңгән, күҙ ҡараштары тоноҡланған, саҡ-саҡ тын алып һөйләште.

– Ярай... ҡала инде... – тигән һуңғы һүҙҙәре хәтерҙә.

Яҡты донъя ҡала, тинеме, яҙылып бөтмәгән әҫәрҙәр ҡала, тип әйтергә теләнеме, әллә яман-ялсыларға донъя иркен ҡала, тип әйтмәксе инеме – кем генә белһен...

Әммә бер нәмә айырым асыҡ: һуғыш һәм хеҙмәт батыры Динис Исламовтан беҙгә бынамын тигән бай әҙәби мираҫ ҡалды.

**1982 – 2012 йылдар.**

## "УРАЛ БАТЫР" – ҠӨРЪӘН АЯТТАРЫНДА

Йәмғиәттең бөтә ҡатламдарына үтеп ингән рухи сирҙең иң аҙған осоронда йәшәйбеҙ. Ата-бабаларыбыҙ бындай сирҙән арыныу дауаһын сер һандығында һаҡлаған. Был – «Урал батыр» ҡомартҡыһы. Уның кешелек донъяһы өсөн уртаҡ рухи байлыҡ икәнлеген үҙебеҙ генә таныу аҙ, уны башҡаларға танытыу ҙа зарур. Иң боронғоларҙан һаналған даосизм, Будда диненең нигеҙ ташын тәшкил иткән йога тәғлимәте тураһында мәғлүмәт туплаған, башҡа донъяуи диндәр өсөн изге һаналған Әт-Таурат, Әз-Зәбүр, Әл-Инжил, Изге Ҡөрьән китаптарына керәсәк һүрәтләүҙәрҙе үҙ эсенә алған әҫәрҙең, ысынлап та, тамырҙары бик тәрән һәм Ер йөҙөндәге барса халыҡтар өсөн уртаҡ! Был эҙләнеүебеҙҙә халҡыбыҙҙың иң боронғо рухи ҡомартҡыһындағы һүрәтләүҙәрҙе һуңғараҡ ситтән үҙләштергән Ислам диненең Изге Китабы Ҡөрьән-Кәримдәге аяттар менән уртаҡлыҡтарын табыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Сөнки кешелектең башланғысы бер төптән булыуын дин һәм фән бөгөн берҙәй таный. Тәүҙә ошоға дәлил аяттарҙы килтерәбеҙ Ҡөрьәндән:

*Әгәр Алла теләһә, Ул һеҙҙе бер өммәт яһаған булыр ине...* [«Әш-Шура» (Кәңәш) сүрәһе, 8-се аят].

*Кешеләр бер генә өммәт ине, әммә бүленделәр...* [Йунус (Юныс) сүрәһе, 19-сы аят].

*Һәр өммәт өсөн Беҙ улар тотҡан ғибәҙәт ҡылыу йолаһы яһаныҡ...* [«Әл- Хадж» (Хаж) сүрәһе, 67-68-се аяттар].

*Беҙ үҙебеҙҙең аяттарыбыҙҙы Уның хаҡ икәнлеге уларға аңлашылғанға тиклем илдәрҙә һәм уларҙың үҙҙәрендә күрһәтәсәкбеҙ...* [«Фуссыиләт» (Асыҡ аңлатыуҙар) сүрәһе, 53-сө аят].

Ер шарында миллиардлап йылдар йәшәү дәүерендә унда әллә күпме цивилизациялар булыуы һәм юҡҡа сығыуы тураһында мәғлүмәтте Ҡөрьән-Кәрим түбәндәге аят аша аңлата:

*Беҙ уларҙың барыһын да гонаһтары өсөн тоттоҡ. Уларҙың ҡайһыларына өйөрмә ебәрҙек, һәм ҡайһы берҙәрен көслө тауыш алды, һәм уларҙың ҡайһы берҙәрен ерҙән йотторҙоҡ, ҡайһыларын һыуға батырҙыҡ. Алла уларҙы йәберләүсе булманы, улар үҙ-үҙҙәренә золом ҡылдылар* [«Әл-Ғәнкәбут» (Үрмәксе) сүрәһе, 40-сы аят].

*Беҙ үҙ рәсүлдәребеҙҙең береһе артынан икенсеһен ебәрҙек. Өммәткә рәсүле килгән һайын, улар уны алдаҡсыға һананылар, һәм Беҙ уларҙы бер-бер артлы ебәрҙек һәм уларҙы хикәйәләр иттек. Дөмөкһөн иманға килмәгән ҡәүем!* [«Әл-Муъминун» (Иман килтергән кешеләр) сүрәһе, 44-се аят].

Ҡобайырҙың башында уҡ ошондай донъяуи ваҡиғаларҙың сираттағы

береһенән һуң Ер йөҙөндә тормош өр-яңынан башланыуы тураһында бәйән ителә. Был осраҡта кешелек хәтеренән унан алдағы цивилизация тураһында мәғлүмәт юйҙырылған:

*Был ҡарт менән был ҡарсыҡ*
*Ҡайҙан бында килеүен,*
*Ата-әсә, ер-һыуы*
*Ҡайҙа тороп ҡалғанын*
*Үҙҙәре лә онотҡан.*
*Икәүҙән-икәү шул ерҙә*
*Башлап ғүмер һөргәндәр...*

Алдағы цивилизация үҙләштергән кире тормош тәжрибәһе заман ахырында кешелек хәтеренән юйҙырылғанға күрә, һәр яңыһы Аллаһы Тәғәләнең ижадынан – кешене бар ҡылыуҙан башланыр:

*Һәм уның аяттарынан: Ул һеҙҙе тупраҡтан барлыҡҡа килтерҙе, шунан һеҙ, кеше булғас, таралыштығыҙ.*

*Һәм уның аяттарынан: Ул һеҙҙең өсөн, һеҙгә бергә тороу өсөн, үҙегеҙҙән ҡатындар барлыҡҡа килтерҙе, арағыҙҙа мөхәббәт һәм рәхмәт яһаны. Ысынлап та, фекерләп ҡараған кешеләргә бында аят бар!*

*Һәм уның аяттарынан: күктәрҙе һәм Ерҙе барлыҡҡа килтереү, һеҙҙең телдәрегеҙҙең һәм төҫтәрегеҙҙең төрлө булыуы. Ысынлап та, белгән кешеләргә бында аят бар*! [«Әр-Рум» (Румиҙар) сүрәһе, 20-21-се аяттар].

Кешелектең уртаҡ йорто – Ер йөҙөндә илдәрҙең, йолаларҙың күп төрлө буласағы тураһында ап-асыҡ мәғлүмәтле боронғо әҫәр был айырымлыҡтың мәңге түгеллегенә лә ишара яһай. Ҡасандыр халыҡтар уларҙы шомландырыр, үҙ-ара дошманлаштырыр, һәләкәткә алып барыр сәбәптәрҙең айышына төшөнөр, бер иманға килер, хаҡ диндә берләшер көндәр буласағына ла ышандыра уҡыусыһын. Ә Изге Ҡөрьән ошо турала түбәндәге аяттары менән инандырыр әҙәмдәрҙе:

*Эй һеҙ, рәсүлдәр! Хәләл нәмәләрҙе ашағыҙ, изге эштәр эшләгеҙ, ысынлап та, һеҙ эшләгән нәмәләрҙе Мин белеп торам! Һәм, ысынлап та, был өммәтегеҙ – бер өммәт, һәм Мин – һеҙҙең Раббығыҙ, минән ҡурҡығыҙ! Улар үҙ дин эштәрен ваҡ-ваҡ итеп киҫәктәргә айырҙылар, һәр фирҡә үҙендә булған нәмәгә шатлана. Уларҙы ваҡытына тиклем аҙашыуҙарында ҡалдыр* [«Әл-Муъминун» (Иман килтергән кешеләр) сүрәһе, 51–54-се аяттар].

*Беҙ һине хаҡлыҡ менән һөйөнсөләүсе һәм өгөтләүсе итеп ебәрҙек. Үҙенә өгөтләүсе-иҫкәртеүсе ебәрелмәгән бер халыҡ юҡ*! [«Фатир» (Барлыҡҡа килтереүсе) сүрәһе, 24-се аят].

Эпостан күҙаллауыбыҙса, Йәнбирҙе һәм Йәнбикә Илаһ бар ҡылған тәбиғәттең үҙе менән бөтөн берлектә, тәбиғи шарттарға ысын мәғәнәлә яраҡлашып ғүмер итәләр. Эпоста тәүкешеләр Таҡ менән Йоптоң исемдәре бер үк тамырҙан: "йән" – донъяны бар иткән Илаһтың матдәләргә өргән һәм йәшәргә һәләтлелек биргән ҡеүәт көсө:

*Һеҙҙе Ул* ***бер йән****дән барлыҡҡа килтерҙе, шунан уға* ***унан ҡатынын*** *яһаны, һәм һеҙгә* ***һигеҙ ишле мал*** *төшөрҙө. Ул һеҙҙе әсәләрегеҙҙең ҡарынында бер-бер артлы барлыҡҡа килтереү менән өс ҡараңғылыҡта барлыҡҡа килтерә. Ошо – Алла, һеҙҙең Раббығыҙ. Батшалыҡ Уныҡы. Унан башҡа Илаһ юҡ! Ҡайҙа боролаһығыҙ һеҙ?* [«Әз-Зумар» (Төркөмдәр) сүрәһе, 6-сы аят].

*Эй һеҙ, кешеләр! Беҙ һеҙҙе бер ир менән ҡатындан барлыҡҡа килтерҙек.*

*Бер-берегеҙҙе белер өсөн һеҙҙе халыҡтар һәм ҡәбиләләр яһаныҡ. Арағыҙҙан Алла ҡаршыһында иң хөрмәтле – иң тәҡүәлегеҙ. Алла, ысынлап та, беләүсе, хәбәрҙар!* [«Әл-Худжурат» (Бүлмәләр) сүрәһе, 9–13-сө аяттар].

Аллаһы Тәғәләнең ризалығына күрә, был икәү "ауырыу-һыҙлау күрмәй, үлем барлығын белмәй", тәбиғәттә башҡа йән эйәләре менән бергә бик килешеп, бер бөтөндө тәшкил итеп йәшәй бирәләр:

*Ҡошҡа шоңҡар сөйәргә,*
*Суртан арбап балыҡҡа,*
*Эт өскөтөп йәнлеккә*
*Ыҙалау ни – күрмәгән;*
*Шоңҡар, эткә, арыҫланға,*
*Өмөт бәйләп суртанға,*
*Һунарында интекмәй –*
*Теш-тырнағы – ҡоралы,*
*Үҙ ҡулында теләге,*
*Һис тә талмай беләге,*
*Һис аҙамай йөрәге...*

Был һигеҙ ишле мал тураһында мәғлүмәт эпоста ҡат-ҡат ҡабатлана, улар – тәүкешеләр Йәнбирҙе һәм Йәнбикәгә хеҙмәт итеүсе йән эйәләре (йәнлек, януарҙар) булыр:

*Менәренә –* ***арыҫланды,***
*Балығына –* ***суртанды,***
*Ҡошҡа сөйгән* ***шоңҡарҙы,***
***Эте*** *тотҡан йәнлекте,*
*Ҡан һурырға* ***һөлөктө***
*Үҙ иштәре яһаған.*

Эпостың аҙағында кешегә хеҙмәт итеүсе йән эйәләренең һаны арта төшә:

*...**Һомай** түҙмәй осҡан, ти,*
*Бер килгән, ти, киткән, ти;*
*Тыныс ил, тип, берәмләп,*
*Ҡош-ҡорттарҙы эйәртеп,*
*Үҙ артынан эркелтеп,*
*Тағы Уралға килгән, ти;*
*Шуға эйәреп Уралда*
*Ҡош-ҡорт йәнлек тулған, ти.*
*Ҡоштар киткәнен белгәс,*
*Тыныс ил тип ишеткәс,*
***Ҡатил үгеҙе**, тоҡомон*
*Үҙе башлап эйәртеп,*
*Данлы Урал буйында,*
*Йәмле Урал ҡуйынында*
*Бергә ғүмер һөрәм, тип,*
*Урал буйына килгән, ти,*
*Кешегә буй биргән, ти.*
***Аҡбуҙат та** ил гиҙеп,*
*Йылҡы тоҡомон йыйып,*

*Бар йылҡыға баш булып,*
*Барып алып килгән, ти.*
*Кешеләргә ылығып,*
*Менәренә ат булып,*
*Йылҡы түлләп киткән, ти.*

Билдәле булыуынса, тәбиғәттә ярашып йәшәүсе үҫемлектәргә, йәнлектәргә һәм кешегә бирелгән йәшәүгә һәләтлелек өс таяуға нигеҙләнгән:

үҙ-үҙеңде һаҡлай алыу ;

үҙ-үҙеңде тәьмин итеү;

тоҡомоңдо, киләсәк быуыныңды, нәҫелеңде дауам итеү.

Ошо өс һәләтте үҙенә буйһондороп ҡулланһын өсөн, барса тере есемдәргә лә, уларҙың үҫеш кимәленә ҡарап, Илаһ тарафынан, өҫтәп, **аң** да бирелгән. Мәҫәлән, үҫемлектәргә йәшәү рәүешен тәьмин итер өсөн бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөү хәжәте юҡ. Шуға күрә уларҙың аңы бер нөктәгә тупланмай, киреһенсә, үҫемлекте уратып алған арауыҡ ҡабында, киңлектә тигеҙ таралып, тамыр–олон–ботаҡ–япраҡ–сәскәнең үҙ-ара бәйләнешен тәьмин итеүгә һәм бер үк ваҡытта уларға күрше булған башҡа үҫемлектәр менән ярашып көн күреүгә сарыф итөлә.

Хайуандар донъяһында йәшәүгә һәләтлелек ҡатмарлыраҡ шарттарға ҡулайлашҡанға күрә, аң, юғарыраҡ кимәлгә күтәрелеп, баш мейеһендә туплана. Уның был осраҡтағы тәғәйенләнеше – йән эйәләренә хас тәбиғи һиҙгерлек, тойомлау аша уларҙы уратып алған мөхит тураһындағы мәғлүмәтте үҙләштереү һәм шуларға яраҡлашыу һәләтен тәьмин итеү.

Кешенең дә есеме, тән ҡоролошо хайуандыҡынан әллә ни айырылмай, ләкин уға тейешле аң кимәле – Илаһтың мөғжизәүи бүләге. Донъя яратылғанда **ир енесе беренсел** булғанға күрә, зиһен, аң кимәле ларҙа ныҒыраҡ үҫеш кисергән. ”Ҡәмәрҙең һимməте – ҡашында, ирҙең ҡимməте – башында,” – ти был турала халыҡ мәҡәле. Шуға күрә, Йәнбирҙе һәм Йәнбикә иркәк хайуандың баш мейеһен ашап, үҙҙәрендә тәбиғи уй-фекергә һәләтлелекте үҫтереп, аң кимәлен юғары тотоуҙы маҡсат итеп ҡуйған булып сыға.

Билдәле булыуынса, кешелек донъяһы ғаләмдә аң кимәленең үҫеше буйынса алға киткән берҙән-бер донъя түгел. Был баҫҡыста аң кимәле буйынса кешенән үрҙәрәк торған йән эйәләре бар, тиҙәр.

*Ул кешене сүлмәк яһай торған балсыҡ кеүек яңғырауыҡлы мәтенән яратты һәм ендәрҙе саф ут ялҡынынан яратты* [«Әр-Рәхмән» (Шәфҡәтле) сүрәһе, 14-15-се аяттар].

Йога тәғлимәте өйрәткәнсә, кимәле буйынса ер элементы (тупраҡ, балсыҡ, ҡом) һыу һәм уттан түбәнерәк икәнлеге билдәле. Эпостан күҙаллауыбыҙса ла, ошо йән эйәләренең бар булмышы ут менән бәйле, шуның менән улар кешенән көслөрәк:

*Күккә олғашҡан ҙур тауҙай*
*Ҡара күргән алдында,*
*Нәжәғәйҙәй ялтыраған*
*Ут уйнай, ти, янында.*
*Күк томандар ҡаплаған,*
*Ут һөрөмө бөркөлгән*
*Нәмә күргәс юлында,*

*Урал: “Ни ?”– тип һораған.*
*“Һарайҙарҙы һаҡлаған,*
*Тау түгел ул, йылан”, – тип*
*Зәрҡум уны аңлатҡан.*

Юғары Аңға тоташҡан һәм бик күп төрлө кимәлдәге башҡа Йыһан вәкилдәре йышыраҡ осраҡта кешегә ҡарата ыңғай мөнәсәбәттә түгел икән. Был турала һуңғараҡ Изге Китап Ҡөрьәндә лә мәғлүмәт буласаҡ:

*Һәм Беҙ кешене яңғырап торғандан, һүрәткә килтерелгән балсыҡтан яралттыҡ! Һәм Беҙ элек ендәрҙе эҫе утынан бар иткәйнек. Бына Раббың фәрештәләргә әйтте: “Мин яңғырап торғандан, һүрәткә килтерелгән балсыҡтан кеше яһайым, һәм Мин тигеҙләгәс һәм* ***Үҙемдең рухымдан өргәс,*** *уға сәждә ҡылып, йөҙтүбән йығылығыҙ!” Һәм фәрештәләр барыһы ла сәждә ҡылды, Иблистән башҡа. Ул сәждә ҡылыусылар менән бергә булыуҙан баш тартты. Ул: “Эй, Иблис! Нимә булды һиңә, сәждә ҡылыусылар менән бергә булманың?” – тине. Ул: “Яңғырап торғандан, һүрәткә килтергән балсыҡтан яралтҡан кешегә мин сәждә ҡылыусы булмаясаҡмын”, – тине. Ул әйтте: “Бынан сығып кит! Һин – таштар менән атылған. Һәм, ысынлап та, Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр һиңә ләғнәт! Ул: “Раббым! Кешеләр ҡәберҙәренән ҡуптарыласаҡ көнгә тиклем мине кисектер”, – тине. Ул әйтте: “Ысынлап та, һин – кисектерелгәндәрҙән – мәғлүм ваҡыттың көнөнә ҡәҙәр”.*

*Ул әйтте:”Раббым! Һин мине яҙҙырған өсөн мин уларға Ер йөҙөндәге булған нәмәләрҙе зиннәтләп күрһәтермен һәм барыһын да юлдан яҙҙырырмын, ҡолдарыңдан ихлас күңеллеләренән башҡаһын”.*

*Ул әйтте: “Был – минең өсөн тура юл, ысынлап та, Минең ҡолдарым – юлдан яҙып һиңә эйәргәндәрҙән башҡа, һиңә улар өҫтөнән хакимлыҡ итеү булмаҫ* [«Әл - Хиджр» (Әл-Хижер) сүрәһе, 26–42- се аяттар].

*Иҫтәренә төшөр, иҫкә төшөрөү – ул иман килтергән кешеләргә файҙа итә! Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе Үҙемә ғибәҙәт ҡылһындар өсөн барлыҡҡа килтерҙем. Мин уларҙан һис бер ризыҡ теләмәйем, һәм Мине туйҙырыуҙарын да теләмәйем* [«Әҙ - Ҙәрийәт» (Елгәреүселәр) сүрәһе, 55–57-се аяттар].

Эпостың башында уҡ әле ағалы-ҡустылы үҫмер балалар Шүлгән менән Уралдың тәүге һүҙгә килешеүенән ошо турала мәғлүмәтте алаһың. Шүлгән, ағайлығынан файҙаланып, үҙенән йәшерәк туғанын ярамаған эшкә ҡотортоуына ҡарамаҫтан, уныһы был ҡотҡоға бирелмәй, дөрөҫ юлды һайлай һәм, әлбиттә, Аллаһының яратҡан бәндәһенән буласаҡ:

*Ҡан эсеүҙән атаһы*
*Тыйғанын белһә лә,*
*Аталары киҫәтеп:*
*“Ҡан эсмәгеҙ!” – тиһә лә,*
*Шүлгән, Уралды димләп,*
*Былай тиеп әйткән, ти:*
*«Йәнде ҡыйып һунарлау*
*Ҡомарлы эш булмаһа,*
*Һыуһағанда ҡан эсеү*
*Тағы тәмле булмаһа,*
*Атамдар йоҡо ҡалдырып,*
*Аяҡ-ҡулын талдырып,*
*Һәр көн икәү ҡаңғырып,*

*Беҙҙе өйҙә ҡалдырып,*
*Йөрөмәҫ ине һунар тип.*
*Урал, әйҙә, булмаһа,*
*Ҡабырсаҡты асайыҡ,*
*Һәр беренән аҙ-аҙлап*
*Берәр тамсы эсәйек,*
*Ҡандың тәмен беләйек».*
*Урал: "Атам һүҙен тотамын –*
*Мин ҡан эсмәй түҙәмен.*
*Егет булып үҫмәйсе,*
*Төп йоланы белмәйсе,*
*Бер ил гиҙеп йөрөмәйсе,*
*Ысынлап та донъяла*
*Үлем юғын күрмәйсе,*
*Суҡмар алып ҡулыма,*
*Һис бер йәнде һуҡмамын,*
*Һөлөк һурған ҡанды мин*
*Ҡабырсаҡтан эсмәмен."*

Ҡобайырҙа хәл-ваҡиғаларҙың үҫеше тап ошо йүнәлештә һүрәтләнә. Урал, Шүлгән ағаһы менән сығып китеп, юлдары аймылышҡаны бирле, төп маҡсатынан һис тайпылмай, донъя буйлап йөрөп, күп илдәр күрә, төрлө халыҡтарҙың йолаларын танып белә:

*Мин киләмен йыраҡтан,*
*Үҙем торған торлаҡтан,*
*Бала инем киткәндә,*
*Күп илдәрҙе үткәндә,*
*Мин кешегә теймәймен,*
*Уның ҡанын ҡоймаймын –*
*Үлем тигән яуызды*
*Үлтерергә уйлаймын.*

Хәрәкәтсән ғаләмдә Аңға эйә сит донъя вәкилдәренең дә ғүмерҙәре ниндәй генә оҙонлоҡта булмаһын, бөтә осраҡта ла уның ахыры була. Был сәғәт һуҡҡанда, йәшәү дәүерендә шәхсән тупланған донъяуи мәғлүмәт уның эйәһенең аңынан планетар аңға күсерелә һәм, юйылып, юҡҡа сыға. Бер үк ваҡытта Йыһан Аңына тоташыусы йән эйәләренең араһында тик кешегә генә хас булған һәм тик уға ғына Ер йөҙөндә ҡабат-ҡабат тыуыу мөмкинселеген биргән **Үлемһеҙ Рух** барлығы тураһында ла хәбәрҙар икән ул заттар.

Шуға күрә, юғары кимәлдәге аңға эйә булып та, рухһыҙлыҡтары сәбәпле, кеше алдында үҙҙәренең көсһеҙлөгөн тойған башҡа донъя вәкилдәре Ҡәһҡәһә, Әзрәҡә, Зәрҡумдың төп маҡсаты – бына шул иң нескә кимәлдә туҡылған ҡеүәт – рухты кешенән тартып алып, үҙенеке итеү:

*Шаһым, сара эҙләйек,*
*Самрау ҡоштоң Аҡбуҙын*
*Кеше аша алайыҡ,*
*Һис булмаһа – урлайыҡ,–*
*Тигәс, батша уйланған,*
*Былай тиеп һөйләнгән:*

*Аҡбуҙатты алырға,*
*Уға эйә булырға,*
*Йә булмаһа, ул атты*
*Был донъянан юйырға*
*Ете дейеү ебәрҙем...*

Ерҙән тыш йәшәүсе цивилизациялар кешелек донъяһын хәстәрләүсе һәм уның үҫешенә булышлыҡ итеүсе, кешегә генә хас күңел донъяһы өсөн нескә кимәлдәге рух өрөүсе **Кемдер** барлығын да беләләр, әммә ләкин Уның Үҙе менән туранан-тура мөнәсәбәткә кереү мөмкинлегенән мәхрүм улар:

*Улар һинән рух тураһында һорайҙар. Рух – Раббымдың бойороғонан, һәм һеҙгә белем бик аҙ бирелде бит, – тип әйт* [«Әл-Исра» (Төндә күсереү) доғаһы, 85-се аят].

*Ул бойороғо менән ҡолдарынан теләгән берәүгә фәрештәләр менән рух индерә* [Ҡөрьән-Кәрим: «Ән-Нәха» (Бал ҡорто) сүрәһе, 2-се аят].

Эпоста рух төшөнсәһе Аҡбуҙат образы аша ап-асыҡ һүрәтләнә, һәм ул Күк батшаһы Самрауҙан бирелеп, ҡыҙы Һомай аша тик саф һәм изге **йөрәклеләргә** генә күндерелер:

*Күктә тыуып, күктә үҫкән,*
*Ерҙә тоҡом йәймәгән,*
*Әзрәҡәнең дейеүе*
*Мең йыл ҡыуып тотмаған,*
*Әсәйемдән бирелгән,*
*Донъялағы **йөрәгем** –*
*Үҙем һөйгән егеткә*
*Бирә торған бүләгем.*

Ир затының үҙенән (Әҙәмдең ҡабырғаһынан) булдырылған, шуға күрә **икенсел** тип ҡабул ителгән, ләкин әһәмиәте буйынса уның үҙенән һис кенә лә ҡалышмаған **ҡатын-ҡыҙ, инә, ана** затына хас һиҙгерлек, зауыҡлыҡ, тоғролоҡ, яуаплылыҡ кеүек хистәр менән һуғарылған ул рух тойғоһо. Тимәк, эпоста һүрәтләнгәнсә, үҙҙәрендә тәбиғи һиҙгерлек үҫтереү һәм хис-тойғоларының нескәреүенә, рух күтәренкелегенә өлгәшеү ниәтенән, Йәнбирҙе һәм Йәнбикә, һунарҙа орғасы йәнлек тотоп, уның йөрәген ярып ашаған булып сыға. Эпостың башында Йәнбирҙе ҡатыны һәм улдары менән һунарҙа аулап алған ҡоштарҙың араһында бер аҡкош башын ҡырҡып ташларға бысаҡ ҡайрағанда телгә килеп, үҙенең ябай ҡош түгеллеген ошолай аңғарта:

*Ебәрегеҙ һеҙ мине,*
*Үҙ илемә ҡайтайым.*
*Мине һуйып ашап та,*
*Сәйнәп мине йотоп та*
*Барыбер аш булмамын,*
*Һис аш булып һеңмәмен.*

Ысынлап та, Һомай – һунарлап алған матди аҙыҡ түгел булып сыға. Киреһенсә, ниндәйҙер юғары донъянан билдәле бер ниәт менән ергә осоп килеүсе рухи зат төҫмөрләнә бында. Изге Ҡөрьән был турала ошолай тип тә әйтәсәк:

*Алла кеше менән һөйләшә торған булманы, тик үәхи (төшөндөрөү, күңелгә һалыу, илһамландырыу) аша йәки ҡорма аша ғына, йәки рәсүл ебәрә, һәм үҙ рөхсәте менән уға теләгән нәмәне үәхи ҡыла. Ул, ысынлап та, оло, хикмәтле!* [«Әш - Шура» (Кәңәш) сүрәһе, 51-се аят].

Бындай заттың һунарсы ауына эләгеүе лә осраҡлы хәл түгеллегенә иманабыҙ. Сәбәп–һөҙөмтә сылбырында бер-бер артлы теҙелеп, үрелеп барасаҡ хәлваҡиғаларҙың башы ғына әле был. Ябай булмаған Ҡоштоң юғары донъянан икәнлеген үҙе лә тыумыштан зирәк булмышлы, һиҙгер Урал ғына нескә тоя ала һәм уны ебәреү әмәлен күрә. Уның был яҡшылығының әжере лә шул кимәлдә буласағы һис кенә лә шик тыуҙырмай. Ысынлап та, ҡасандыр аҡҡош рәүешенән ҡыҙға әүерелер Һомайҙың бүләге тап шундай буласаҡ:

*Осраған бер кешене*
*Хайран итер, уйлатыр,–*
*Бына ошондай Аҡбуҙ ул,*
*Күҙ күрмәгән ят буҙ ул.*

Ниндәй йөкмәтке һалынған һуң ул Аҡбуҙат образына? Әлбиттә, Күк тәхетендәге Самрау батшанан бирелер **рух образы ул – Аҡбуҙ.** Ә Самрауҙың үҙен Һомайғош ошо юлдар аша тулы мәғәнәһендә ҡылыҡһырлай:

*Ерҙә һис кем тыумаҫтан,*
*Берәү аяҡ баҫмаҫтан,*
*Ҡуш булырға йәр эҙләп,*
*Ерҙә һис кем тапмағас,*
*Бүтән йәндән һайларға*
*Берәүһен тиң күрмәгәс,–*
*Күккә осоп йәр эҙләп,*
*Айҙы, Ҡояшты күҙләп,*
*Үҙенә йәр һайлаған,*
*Икеһен дә арбаған,*
*Бар ҡоштарға баш булған*
*Самрау атлы атам бар.*
*Ике балаһы булған,*
*Балаһы ла, үҙе лә*
*Һис ауырыу күрмәгән,*
*Һис берәүһе үлмәгән.*
*Әле лә батша атайым...*

Ошо юлдарҙан Самрау образы Ғаләмдәрҙең хужаһы Бөйөк Абсолют Аң түгел икәнлеген, йәғни барса тереклек донъяһына йән өрөүсе Бар һәм Бер булған Аллаһы Тәғәлә образына тап килмәүен күрәбеҙ. Уның барлығын Ҡөрьән-Кәрим былай һүрәтләй:

*Әйт:" Аллаһ – Ул берәү, Аллаһ – мәңге, Ул бер кемде лә тыуҙырмаған һәм Үҙе лә тыуҙырылмаған, һәм бер кем дә Уға тиң түгел!"* [«Әл-Ихлас» (Ихласлыҡ) сүрәһе].

Христиандар табынған Күк Атаһы (Отец Небесный) һәм унан да элегерәкке донъяуи Будда динендә асыҡ һүрәтләнгән Изге Күк (Святые Небеса) донъяһы тураһында был һүрәтләү. Фәҡәт Ул Ер йөҙөнә Изге Рухты (Аҡбуҙатты) үҙенең Ҡояштан ҡыҙы Һомай ярҙамында күндерәсәк. Был образдар һуңынан Ҡөрьәндә аяттар аша аңлатыласаҡ:

*Һәм Ул һеҙгә төн менән көндө, Ҡояш менән Айҙы буйһондорҙо, һәм Уның әмере менән йондоҙҙар буйһондоролдо. Ысынлап та, бында аҡыллы халыҡтарға аят бар!* [«Ән-Наха» (Бал ҡорто) сүрәһе, 12-се аят].

*Ул Ҡояшты балҡып тороусы итте, ә Айҙы нурланыусы итте, һәм һеҙгә йыл һандарын иҫәпләп белеү өсөн һәм хисаплау өсөн уның урындарын билдәләне. Белгән халыҡтарға аяттарҙы аңлатып, быны Алла тик хаҡлыҡ менән генә барлыҡҡа килтерҙе* [«Йунус» (Юныс) сүрәһе, 5-се аят].

Рухтың теләгән берәүгә түгел, һайлап алынған йәндәргә генә бирелеүе тураһында Һомай үҙе былай тип иҫкәртә:

*Буҙ атым бар йыраҡта,*
*Әсәм биргән бүләккә,*
*Майҙаныма шул килер,*
***Батыр булһаң,** ул белер.*

Аң кимәле буйынса беҙҙән көслөрәк булған башҡа йыһан вәкилдәре, фәҡәт шуның менән өҫтөнлөк ҡулланып, кешеләр араһынан рух күтәренкелегенә эйә булмағандарын ҡурҡытып, буйһондороп, үҙҙәренә “баш үҫтереү” маҡсатынан йотоп тороуҙары тураһында эпос тулы мәғлүмәт бирә. Тап улар өсөн яратылған да инде Күктең уларға тәғәйен бер ҡаты – Әзрәҡә, Ҡаһҡаһәләр донъяһы:

*Күктә торған буҙ аттың*
*Урынын үҙем күргәйнем.*
*Улар барып баҫтырҙы,*
*Тота алмағас, яҡшылап,*
*Яндарына саҡырҙы.*
*Ат уларға килмәне –*
*Дейеүҙәрем, ғәрлектән,*
*Кире илемә ҡайтманы:*
*Күктә ҡалды хур булып,*
*“Етегән” тигән исемдә*
*Мәңге ҡалды ут булып.*

Ә хәҙер был ваҡиғаны раҫлаусы Ҡөрьән аятын ҡарайыҡ:

*Беҙ түбәнге Күк көмбәҙен йондоҙҙар менән зиннәтләнек, һәр бер баш күтәргән шайтандан һаҡлау өсөн. Улар юғары кәңәшмәгә ҡолаҡ һала алмай һәм улар һәр яҡтан (таш йәки йондоҙҙан бер киҫәк менән) атыла, ҡыуып ебәрелеү өсөн, һәм уларға бөтмәҫ-төкәнмәҫ ғазап* [«Әс-Сафат» (Сафтарҙа тороусылар) сүрәһе, 6–8-се аяттар].

*Кеше ашап ятыусы,*
*Баш үҫтереп йөрөүсе,*
*Ҡаһҡаһәнең бар серен,*
*Башын һаҡлап тороусы*

дейеүҙәрҙән йотолоп юҡҡа сыҡҡан халыҡтарҙы ҡотҡарыр Урал кеүек батырҙар, илаһи заттар һәр дәүерҙәрҙә тыуа торған – был инде йыһандағы эволюция хаҡына кешелектең бар гонаһтарын ғәфү ҡылыусы мәрхәмәтле Раббыбыҙ тарафынан. Рәсүлдәр һәм пәйғәмбәрҙәр ни дәүерҙәрҙә ни маҡсаттан Ер йөҙөнә килтерелгән – был турала аяттар түбәндәгеләрҙән ғибәрәт:

*Һәр бер өммәткә үҙ рәсүле; һәм, рәсүл килгәс, улар араһындағы эш ғәҙеллек менән хәл ителгән булыр, һәм улар йәберләнмәҫ тә.* [«Йунус» (Юныс) сүрәһе, 47-се аят].

*Беҙ рәсүлдәрҙе үҙ халҡының теле менән генә – уларға аңлаһындар өсөн ебәрҙек...* [«Ибраһим» сүрәһе, 4-се аят].

*Алла рәсүлдәрҙе фәрештәләрҙән һәм кешенән һайлай…* [«Әл - Хадж» (Хаж) сүрәһе, 75-76-сы аяттар].

Эпостың төп геройы Урал батырҙың булмышына пәйғәмбәрлек бурысы һалынғанына һис шик юҡ. Шуларҙың икәүһе Күктәр тарафынан уның тыуыуы һәм үлеме менән бәйле рәүештә һүрәтләнә:

*1)Бер йәш бала тыуғанда,*
*Уның тауышы килгәндә,*
*Күктә осҡан дейеүҙәр*
*Бары ҡолап төшкәйне.*
*Уны урлап алырға,*
*Үлтереп юҡ ҡылырға*
*Барған дейеү-ендәрҙең,*
*Бала текләп ҡарағас,*
*Тотарға тип уҡталғас,*
*Барған бере ҡурҡыуҙан*
*Йөрәге ҡубып үлгәйне.*
*2) Урал батыр үлгән һуң,*
*Халыҡ ултырып, барыһы*
*Башын түбән эйгән, ти;*
*Күктән йондоҙ атылып,*
*Һомайға оран биргән, ти.*

Ер йөҙөнә килеп киткән пәйғәмбәрҙәрҙең һәр ҡайһыһына, уларҙың пәйғәмбәрлеген дәлилләү өсөн, Аллаһы Тәғәләнең ихтыяры һәм теләге буйынса, мөғжизә күрһәтә алыу һәләттәре бирелер булған. Урал батырҙың да бындай мөғжизәүи һәләттәре бер-бер артлы асыла бара. Бына шуларҙың береһенә генә миҫал:

*Урал алға сапҡан, ти,*
*Аты диңгеҙ ярған, ти;*
*Аты барған урында*
*Һыу алмаҫлыҡ юл булып*
*Ҙур тау ҡалҡа барған, ти;*
*Һыу эсенән бар халыҡ*
*Шунда сыға барған, ти.*

Бөтә донъяны һыуҙан баҫтырыу, шулай уҡ кемделер ҡотҡарып алып ҡалыу – Аллаһы Тәғәләнең ихтыярынан. Был туралағы мәғлүмәт Ҡөрьәндә лә бар:

*Һәм Беҙ Мусаға: Таяғың менән диңгеҙгә һуҡ! – тип үәхи ҡылдыҡ, һәм ул ярылып китте һәм һәр киҫәге бейек тау кеүек булды. Унан һуң беҙ икенселәрҙе яҡынайттыҡ. Һәм Беҙ Мусаны һәм уның менән булған кешеләрҙе ҡотҡарҙыҡ* [«Әш-Шуъара» (Шағирҙар)сүрәһе, 63 – 65-се аяттар].

Ә шулай ҙа Урал батыр күрһәткән мөғжизәләр араһында дөйөм кешелек өсөн иң әһәмиәтлеһе һәм файҙалыһы – үҙе тапҡан Йәншишмәнең тереһыуын уртлап, тамсыһын да йотмайынса, ер йөҙөнә бөркkәне:

*…Ил һөйәргә ил булып,*
*Ер һөйәргә бағ булып,*
*Дошман күҙен ҡыҙҙырып*
*Балҡып торған ер булһын!*

Уралдың – һайланған кеше, Аллаһы Тәғәләнең белемен кешеләргә еткереүсе

икәненә өҫтәмә дәлилдәргә лә миҫалдар етерлек эпоста, һәм беҙ уларҙан пәйғәмбәрлектең башҡа күркәм сифаттарын һанап китә алабыҙ:

- Үҙ заманы өсөн бөтә илдәрҙә, бөтә халыҡтарға ҡарата мөнәсәбәттәрҙә иң юғары кимәлдәге дөрөҫлөк яҡлы һәм ғәҙел булыуы;
- Бар мөнәсәбәттәрҙә лә тоғро булыуы;
- Аллаһы Тәғәләнән ебәрелгән саҡырыу һәм йолаларҙы тулы кимәлдә кешеләргә таратыуы;
- Асыҡ зиһенле һәм ныҡ үҫешкән аңлы булыуы;
- Гонаһ ҡылмауы.

Ҡасандыр Йәншишмәнең һыуын эсеп, Үлемдең үҙенә бирешмәгән Меңйәшәр ҡарт Уралдың ни заттан икәненә былай тип баһа бирә:

*Егетем, батыр икәнһең,*
*Күҙ ҡарамдай һаналған*
*Илгә ҡашҡа икәнһең;*
*Быуын-быуын буйына*
*Маҡталырлыҡ икәнһең.*
*Быуын-быуын әсәңдән*
*Тыуыуыңды көттөрҙөң;*
*Ил ырыҫын табырға*
*Атаң һиңә ҡот биргән,*
*Әсәң һиңә һөт биргән;*
*Тәү арыҫланға атланған,*
***Яҡшылыҡҡа** ынтылған...*

Был мәңгелек рухи ҡиммәт тураһында Ҡөрьән былай ти:

*Кеше яҡшылыҡты теләүҙән ялыҡмай, ә инде уға яманлыҡ тейһә, ул бойоға һәм өмөтһөҙләнә* [«Фуссыиләт» (Асыҡ аңлатыуҙар) сүрәһе, 49-сы, 51-се аяттар].

Ә хәҙер эпоста ҡат-ҡат һыҙыҡ өҫтөнә алыныр ошо төшөнсәгә туҡталайыҡ:

*Күккә лә осор – яҡшылыҡ,*
*Һыуға ла батмаҫ – яҡшылыҡ,*
*Утта ла янмаҫ – яҡшылыҡ,*
*Телдән төшмәҫ – яҡшылыҡ.*
*Бары эшкә баш булыр,*
*Үҙеңә лә, кешегә лә*
*Мәңге ейер аш булыр, –*
*Тигән һүҙен ишеткәс,*
*Бөтә **серҙе** аңлағас,*
*Бар халыҡты эйәртеп,*
*Урал юлға сыҡҡан, ти;*
*Йәншишмәгә барған,ти,*
*Һыуын уртлап алған, ти;*
*Үҙе сапҡан юлына,*
*Дейеүҙән өйгән тауына*
*Һыуҙы алып һипкән, ти.*

Урал меңйәшәр ҡарттың алдағы кәңәшенән ниндәй серҙе аңлаған һуң? Ошонан алда ғына уның фекере һәм маҡсаты башҡа ине бит:

*Үҙем мин йәш булһам да,*
*Биш ил барын белдем мин:*

*Берeһендә үҙем тыуҙым мин,*
*Икеһен йөрөп күрҙем мин,*
*Ҡалған тағы икәүһен*
*Күрергә тип сыҡтым мин.*
*Ҡайҙа ғына барһаң да,*
*Береһе үҙен шаһ тиә,*
*Икенсеһе баш эйә,*
*Көслө көсһөҙҙө ейә,*
*Теләгәнсә ҡан ҡоя.*

*...Үлем тигән яуыз бар,*
*Шунан алыр ҡоном бар;*
*Шуны табып үлтереп,*
*Ил ҡотҡарыр уйым бар.*

Биш өлөшсәнән торған Ер йөҙөн урап сыҡҡан Урал батыр кешелек донъяһының үҫеше әлмисаҡтан яңылыш юлдан киткәнен йөрөп, күреп, сәбәбенә төшөнә, әммә ошоғаса, уның сәбәпсеһе – Үлем, тип уйлай. Ә аҡһаҡалдың ишараһынан ул был яңылышты төҙәтә алыу ихтималлығын тойоп ала: Ер йөҙөндәге тормошто ожмахҡа тиң итеү өсөн бары тик **тәүҙә үҙең өсөн түгел, ә үҙеңдән башҡалар өсөн яҡшылыҡ эшләүгә ынтылыш булдыр!** Шул осраҡта ғына кешелек ысын үҫеш юлына төшәсәк!

*“Яуабына ҙурҙы теләп, изгелек күрһәтмә!”*– тип әйтәсәк был турала Ҡөрьән-Кәрим [«Әл-Мүдәҫҫир»(Кейеменә бөркәнгән) сүрәһе, 6-сы аят].

Йыһандың бөйөк ҡанундарына ярашлы, ысынбарлыҡ ҡапма-ҡаршылыҡлы ике остан, ике яҡтан яратылған. Аллаһы Тәғәлә – берҙән-бер барлыҡҡа килтереүсе, һәм ул яҡшылыҡ менән яуызлыҡты бар ҡылған. Яуызлыҡтың булыуы ни тиклем яҡшылыҡ ҡиммәт икәнен күрһәтә. Донъялыҡта шуға күрә ваҡыты-ваҡыты менән уның тиҫкәре, кире яғы еңеп китеүе – тәбиғи хәл. Был осраҡта, карма законының береһе буйынса, ҡара көстәр бер-береһенә тартылып, ойошоп, күплекте тәшкил итә һәм, әлбиттә, ыңғай сифаттарға эйә яҡты, аҙ һанлы ҡалыуынан файҙаланып, баҫып, еңеп китә. Был ҡанунды яҡшы белгән яуыз ниәтле, аңлы Ҡәһҡәһә, Зәрҡум, Әзрәҡәләр хәйлә менән үҙҙәренең яғына, кеше затлы булыуына ҡарамаҫтан, бөтә кире сифаттарға эйә Шүлгәнде ауҙарып ала ла инде. Әммә бер нәмәне күҙ уңынан ысҡындыралар улар:

*Алланың күктәрҙә һәм Ерҙә булғандарҙы белеп торғанын күрмәйһеңме ни һин? Өс кеше араһында йәшерен һөйләшеү булһа, дүртенсеһе – Ул, биш кеше араһында булһа, алтынсыһы – Ул. Бынан аҙыраҡ йәки күберәк булғанда ла, улар ҡайҙа булһалар ҙа – Ул улар менән бергә. Быының һуңында, Ҡиәмәт көнөндә, Ул уларға нимә эшләгәндәрен хәбәр итер. Алла һәр нәмәне белә!* [«Әл -Мүджәдәлә» (Һүҙ көрәштереү) сүрәһе, 7-се аят].

Шүлгән ҡомһоҙлоғо, көнсөллөгө арҡаһында аҫтыртын башланған хөсөтлөгөн кешелекте ҡотҡарыу юлына көрәшкә сыҡҡан үҙ туғаны Уралға ҡаршы асыҡтан-асыҡ көрәш-һуғышҡа тиклем килтереп еткерә. Эпоста һүрәтләнгән Изгелеккә ҡаршы Яуызлыҡтың көрәше кешелеккә биреләсәк һуңғы донъяуи дин өсөн төшөрөлгән Изге Китапта ла осраясаҡ:

*Һәм Беҙ рәсүлдәрҙе өгөтләүсе-иҫкәртеүсе һәм һөйөнсөләүсе итеп кенә ебәрәбеҙ. Иман килтермәгән кешеләр ялғанлыҡ менән бәхәсләшәләр, уның*

*менән хаҡлыҡты юҡҡа сығарыр өсөн. Һәм улар Беҙҙең аяттарыбыҙҙы һәм уларҙы өгөтләгән нәмәне мыҫҡыллайҙар* [«Әл-Кәһф» (Мәмерйә) сүрәһе, 56-сы аят].

Эпостағы хәл-ваҡиғалар эсендә ҡайнаусыларҙың ошо ҡапма-ҡаршы яҡтың ҡайһыһын үҙ итеүе, юл сатында торғанда ҡайһыһын һайлауы уның үҙ булмышынан, үҙ иркенән икәнлегенә асыҡтан-асыҡ миҫалдар ярылып ята. Улар – уҡығандан фәһем алырлыҡ һәләте булғандарға зиһенен зирәкләндерер ишара, һиҙемләү һәләте булмаҫтайына тере һабаҡ. Башбирмәҫ, эскерле, көнсөл, ҡомһоҙ Шүлгән Урал ҡустыһының эштәренә күпме генә хаслыҡ ҡылһа ла, уныһы кешелек хаҡына тура юлдан ситкә тайпылмай. Бөтә замандарҙа ла кеше өсөн әһәмиәтле буласаҡ һабаҡ бирә булыр ағалы-ҡустылы Шүлгән менән Урал. **Тура юлдан барыу һәм аҙашыу – кешенең үҙ ихтыярында**:

*Һәр кем үҙенә оҡшағанды эшләй, Раббың кемдең тура юлдараҡ икәнен яҡшыраҡ белә, – тип әйт* [«Әл - Исра» (Төндә күсереү) доғаһы, 84-се аят].

Ошондай донъяуи миҫалдар нигеҙендә Ҡөрьән-Кәримдең түбәндәге аяттары еңел аңлашыла:

*Уны (йәнде) сафлаған кеше уңышҡа иреште, ә уны мәкерләгән кеше уңышһыҙлыҡҡа тарыны* [«Әш-Шәмс» (Ҡояш) сүрәһе, 9-10-сы аяттар].

*Берәү тура юлдан барһа, үҙе өсөн бара, берәү аҙашһа, үҙенә зарарға аҙаша, һис бер йөк күтәреүсе икенсе йәндең йөгөн күтәрмәҫ* [«Әл-Исра» (Төндә күсереү) доғаһы, 15-се аят].

Ә хәҙер ҡобайырҙың башынан аҙағына тиклем оҙата килеүсе Һыу образына күҙәтеү яһайыҡ. Ерҙең үҙе кеүек, барса тереклек өсөн йәшәү сығанағы булған **Һыу – ул мәғлүмәт символы ла.** Уның тураһында Ҡөрьән ни ти?

*Алла күктәрҙе һәм Ерҙе бар ҡылды, күктән һыуҙы төшөрҙө, һәм уның менән емештәрҙе ризыҡ итеп сығарҙы. Үҙенең бойороғо менән диңгеҙҙә йөрөһөндәр өсөн кәмәләрҙе һеҙгә буйһондорҙо, һәм һеҙгә йылғаларҙы буйһондорҙо.*

*Һәм һеҙгә төн менән көндө буйһондорҙо, һәм тырыш хеҙмәтсәндәр итеп Ҡояш менән Айҙы буйһондорҙо.*

*Һәм һеҙ һорағандарҙың барыһын да бирҙе. Әгәр һеҙ Алланың ниғмәтен һанаһағыҙ, һанап бөтөрә алмаҫһығыҙ. Ысынлап та кеше – йәберләүсе, һәм яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәй!* [«Ибраһим» сүрәһе, 32–34-се аяттар].

Эпоста дейеүҙәр үҙҙәре хужа булып алып, кешенән йәшереп тотҡан Йәншишмә – кешелекте рухһыҙлыҡтан ҡотолдорор тәғлимәт символы, хаҡ белемдең, табылып, Ер йөҙөнә таратылыр көн етеренә ишара. Бының өсөн кешелек донъяһының, ҡасандыр бер кешенән яралып, бер өммәттән булып таралыуын иҫенә төшөрөү кәрәк.

*Иҫтәренә төшөр, иҫкә төшөрөү ул иман килтергән кешеләргә файҙа итә!* [«Әҙ-Ҙәрийәт» (Елгәреүселәр) сүрәһе, 55-се аят].

Уны беҙ Меңйәшәр ҡарттың Уралға әйткәненән тойомларбыҙ:

*Илгә йола булырҙай*
*Һынап белгән заңым бар:*
*Донъяла мәңге ҡалам, тип*
*Донъялай ғүмер һөрәм, тип,*
*Үлемгә буй бирмәҫкә,*
*Уны бер заң итмәҫкә*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ,*
*Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ.*

Ғилемгә бер үҙең генә эйә булған осраҡта уның тик файҙаһыҙ ғәмәл, мәғәнәһеҙ ауырлыҡ буласағын үҙ елкәһендә күтәреп арыған, үҙ тәжрибәһендә татып ялыҡҡан кеше, үкенес кисереп, шуны бүтәндәрҙең ҡабатламауын теләй булыр. Урал батыр был иҫкәртеүҙе йәһәт кенә төшөнөп алып, дөрөҫ ҡарарға килә:

*Бар халыҡты эйәртеп,*
*Урал юлға сыҡҡан, ти;*
*Йәншишмәгә барған,ти,*
*Һыуын уртлап алған, ти;*
*Үҙе сапҡан юлына,*
*Дейеүҙән өйгән тауына*
*Һыуҙы алып һипкән, ти:*
*“Тау-урмандар йәшәрһен,*
*Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,*
*Ҡошо һайрап маҡтаһын,*
*Халҡы йырлап хупл аһын,*
*Ерҙән ҡасып дошмандар,*
*Бары күреп һоҡланһын,*
*Илһөйәргә ил булып,*
*Ер һөйәргә бағ булып,*
*Дошман күҙен ҡыҙҙырып*
*Балҡып торор ер булһын!” –*
*Тигән һүҙҙе әйткән, ти.*
*Һыу күп һипкән еренән*
*Ҡарағай, шыршы үҫкән, ти,*
*Һыуыҡҡа төҫ ҡоймаҫлыҡ,*
*Эҫегә лә кипмәҫлек,*
*Ҡорт, мыр-маҙар төшмәҫлек,*
*Япрағы төрөлөп,*
*Беҙәнәктәй булған, ти,*
*Мәңге йәшел ҡалған, ти.*

Йәшел төҫ – мәңгелек тереклек, хаҡ белем символы, хаҡ дин – Ислам төҫө. Йәншишмәне уртлағанда Урал уның һыуына үҙенең изге ниәтен, теләген мәғлүмәт итеп һала. Бөркөлгән һыуҙы һыулап үҫкән һәм батырҙың исемен мәңгеләштерер Уралтауҙа киң тараласаҡ ҡарағай, шыршы – шул мәғлүмәтте һаҡлаусы изге ағастар. Шул ағастарҙы һаҡлау – беҙҙең изге бурысыбыҙ түгелме ни? Бөркөп өшкөрөү – башҡорттоң дауалау маҡсатынан ҡуллана торған боронғо йолаһы. Һыу дауалаусының ауыҙында саҡта уның теләгән теләген үҙләштерә һәм бөрккән ваҡытта шул мәғлүмәтте дауаланыусыға күсерә. Был осраҡта Урал тыуған төйәгебеҙҙе киләсәк быуындар өсөн һыу менән имләгән булып сыға.

Ҡапма-ҡаршылыҡлы был фани донъяла һыуҙың да ике төрө булыуы тураһында беләбеҙ эпостан: Йәншишмәнең тере һыуына ҡаршы торғон һыу – күлдең үле һыуы бар. Бына шул кире мәғлүмәтле һыу аша киләсәккә янаусы ҡурҡыныс афәт буласағы тураһында бик ҡаты иҫкәрткән дә бит беҙҙе батырыбыҙ! Уның заман ахырына бәйле киҫәтеүҙәре бик фәһемле бөгөн:

*Халҡым, һеҙгә шуны әйтәм,*
*Уландарым, һеҙгә әйтәм:*

*Уйым-уйым күлдәрҙең*
*Барында дейеү буласаҡ,*
*Уҫаллығын ҡыласаҡ,*
*Эсегеҙгә керәсәк.*
*Дейеүҙәрҙең ҡоһоро*
*Барығыҙға тейәсәк,*
*Шунан барың үләсәк.*
*Күлдең һыуын эсмәгеҙ,*
*Хараплыҡҡа төшмәгеҙ,*
*Дейеүҙәргә буй биреп,*
*Ҡул ҡаушырып тормағыҙ!*

Ниндәй һыу тураһында әйтеп ҡалдырған һуң беҙгә Урал батыр был урында? Күл һыуы – бер урынға йыйылған торғон һыу, йәғни үле һыу. Әлбиттә, бөгөнгө көндә матур-матур һауыттарға тултырылып, күпселек әҙәм балаларын теҙләндергән, кешелек дәрәжәһен юйҙырған араҡы, шарап, һыра кеүек эсемлектәр булыр уныһы! Аллаһы Тәғәләнең биргән тәбиғи саф һыуына мөрхәтһенмәй, шайтан ҡотҡоһона төшкән әҙәмдәр үҙҙәре уйлап сығарған, шуға күрә язаһын да күрә кешелек бөгөнгө көндә был эсемлектәрҙән. Ә хәҙер Ҡөрьән аяттарынан ошо турала уҡыйыҡ:

*Был донъя күктән беҙ биргән һыуға оҡшай: ул һыу менән Ерҙәге үҫемлектәр ҡатнашҡан, ул үҫемлектәр менән кешеләр һәм хайуандар туҡлана. Инде Ер үҙ биҙәктәрен алып гүзәлләнгәс, унда йәшәүселәр үҙҙәрен уның өҫтөнән хакимлыҡ итәләр тип уйланылар, һәм төндә йәки көндөҙ уға Беҙҙең бойороғобоҙ килде. Беҙ уны, әйтерһең дә, ул кисәнән бай булмаған кеүек итеп, урылған иттек. Уйлаған кешеләргә шулай аңлатабыҙ Беҙ аяттарҙы!*

*Алла тыныслыҡ йортона саҡыра һәм теләгән кешене тура юлға күндерә!*

*Изгелек ҡылғандарға – изгелек һәм өҫтәмә, уларҙың йөҙөн туҙан да, хурлыҡ та ҡапламаҫ. Былар – ожмах әһелдәре, улар унда мәңге ҡалыр.*

*Насар эштәр ҡаҙанғандарға – насар эштәренең язаһы шул эштәренә оҡшай: уларҙы хурлыҡ баҫыр, уларҙы Алланан һис кем һаҡламаҫ! Уларҙың йөҙө ҡараңғы төндөң киҫәктәре менән ҡапланған кеүек булыр. Был кешеләр – тамуҡ киҫәүҙәре, улар унда мәңге ҡалыр* [«Йунус» (Юныс) сүрәһе, 24 – 27-се аяттар].

Ерҙе туйындырған йылға һыуҙарын бысратыу, ағастарын ҡырып, эсәр һыуыбыҙҙан яҙыу – барыһы ла пәйғәмбәребеҙҙең әйтеп ҡалдырған киҫәтеүҙәрен тотмауҙан!

Һәр төрлө ниғмәттәренән ҡулланып йәшәй-йәшәй, Ер-Әсәнең үҙенең дә тере һәм йәнле икәнлеген онотТоҡ, уның алдындағы изге бурыстарыбыҙҙы ла үтәмәйбеҙ бит, кешеләр!

*Донъя ул бер бағ икән,*
*Йән эйәһе шул бағта*
*Донъя быуынын һанаған,*
*Ҡайһы быуын аҡлаған,*
*Ҡайһы уны таплаған...*

Ошо сәбәптән юҡҡа сыҡҡан халыҡтар рәтенә кермәҫ элек, түбәндәге аяттарҙың мәғәнәһенә төшөнәйек:

*Һәм Ул Ерҙе йән эйәләре өсөн ҡуйҙы. Уның өҫтөндә емеш-еләктәр һәм емшәнле хөрмә ағастары, һәм башаҡлы орлоҡтар һәм хуш еҫле сәскәләр* [«Әр-Рәхмән» (Шәфҡәтле) сүрәһе, 10–12-се аяттар].

*Ер йөҙөн Ул төҙөкләндергәндән һуң боҙмағыҙ. Уға ҡурҡыу һәм өмөт менән доға ҡылығыҙ. Ысынлап та, Алланың рәхмәте изге эштәр эшләгән кешеләргә яҡын!*

*Яҡшы ил булһа, Раббыһының рөхсәте менән уның үҫемлектәре сығыр, насар ил булһа, уның үҫемлектәре етер-етмәҫ кенә булып ҡалыр. Шөкөр иткән халыҡтарға бына шулай аңлатабыҙ Беҙ аяттарҙы!* [«Әл- Әғраф» (Кәртәләр) сүрәһе, 56-сы, 58-се аяттар].

*Һинең Раббың ҡалаларҙың олоһона Беҙҙең аяттарыбыҙҙы уларға уҡый торған рәсүл ебәрмәҫ борон уларҙы һәләк итеүсе булманы. Беҙ халҡы залим булған ҡалаларҙы ғына һәләк ҡылдыҡ! Һеҙгә бирелгән нәмәләр донъя тереклегенең кәрәк-яраҡтары һәм биҙәге генә. Ә Алла ҡаршыһындағы нәмәләр яҡшыраҡ та һәм дауамлыраҡ та. Уйлап ҡарамаҫһығыҙмы һеҙ?* [«Әл-Ҡасас» (Хикәйә) сүрәһе, 59-60-сы аяттар].

*Белегеҙ: был донъя тереклеге уйын һәм көлкө, һәм матурланыу, һәм арағыҙҙа үҙ-ара маҡтаныу, һәм малдар һәм балалар менән ярышыу. Ул ямғыр кеүек, унан үҫкән үҫемлектәр кафырҙарҙы һоҡландыра, унан һуң ул шиңә, һин уның һарғайғанын күрәһең, һәм бынан һуң ул сүп-сарға әйләнә. Ә ахирәттә ҡаты ғазап, һәм Алланан ярлыҡаныу, һәм ризалыҡ. Донъя тереклеге алдаҡсы файҙаланыу ғына ул* [«Әл- Хәдид» (Тимер) сүрәһе, 20-се аят].

*Улар бүләләрме ни Раббыңдың рәхмәтен? Донъя тереклегендә кәрәк була торған нәмәләрҙе улар араһында Беҙ бүлдек, һәм бәғзеләре икенселәрен хеҙмәткә алһын өсөн берееһенең дәрәжәһен икенсеһенән юғары ҡылдыҡ. Ә Раббыңдың рәхмәте улар йыйған нәмәгә ҡарағанда яҡшыраҡ!* [«Әз-Зухруф» (Биҙәктәр) сүрәһе, 32-се аят].

*Донъя тереклеген генә теләп, Беҙҙе иҫкә алыуҙан баш тартҡан кешеләрҙән йөҙ сөйөр һин!*

*Ваҡ-төйәк кәмселектәрҙән башҡа оло гонаһтарҙан һәм фәхишәлектән һаҡланыусыларға, ысынлап та, Раббыңдың ярлыҡауы киң. Ул һеҙҙе ерҙән яратҡанда ла һәм әсәләрегеҙ ҡарынында яралғы булған сағығыҙҙа ла һеҙҙе иң яҡшы белеүсе ине. Үҙегеҙҙе үҙегеҙ маҡтамағыҙ. Ул кемдең тәҡүәле икәнен яҡшыраҡ белә* [«Ән-Нәджм» (Йондоҙ) сүрәһе, 29-сы, 32-се аяттар].

Эпостың йөкмәткеһендә ярылып ятҡан тағы ла бер бик әһәмиәтле фекергә иғтибар итмәй булмай. **Кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе көйлә тотоу** заруратыкөн ҡаҙағында торор иң киҫкен хәл буласағын анык күҙаллаған батырыбыҙ өгөт - нәсихәтен киләсәккә төбәп, фәкәт беҙгә өндәшә:

*Улдарым, тыңлаң, һеҙгә әйтәм,*
*Тыңла, илем, һиңә әйтәм:*
*Ир-арыҫлан булһаң да,*
*Батыр беләкле тыуһаң да,*
*Илдә йөрөп, ил күрмәй,*
*Тубығыңдан ҡан кисмәй,*
*Йөрәгең батыр булалмаҫ.*
*Яуызға юлдаш булмағыҙ,*
*Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ,*

*Уландарым, һеҙгә әйтәм:*
*Мин әрсегән ерҙәрҙә*
*Кешегә байман табығыҙ;*
*Яуҙа булһа, баш булып,*
*Кешегә ил ҡороғоҙ;*
*Данлы батыр булығыҙ!*
*Олоно оло итегеҙ, –*
*Кәңәш алып йөрөгөҙ;*
*Кесене кесе итегеҙ,–*
*Кәңәш биреп йөрөгөҙ.*
*Күҙенә суп төшөрҙәй,*
*Күҙһеҙ булып ҡалырҙай*
*Еҫерҙәрҙең алдында*
*Күҙенә керпек булығыҙ!*

Барса ошо яуаплы бурыстарҙың маҡсатлы рәүештә фәҡәт ир-ат иңенә һалынғанлығына иғтибар итмәй буламы һуң был мөрәжәғәттәрҙән атайҙар, ағайҙар, уландар? Кеше-ара мөнәсәбәттәрҙең һәр замандарҙа ла киҫкен торасағын күҙаллағанға күрә, Урал батыр ошо яп-ябай ғына талаптарҙы үтәргә саҡырған. Аллаһынан алыҫлашҡан һайын, әҙәмдең үҙ-үҙен генә яратыуынан килеп тыуыр был хәл:

*Кеше, ысынлап та, ҡурҡаҡ һәм икеләнеүсән итеп яратылды. Уға яманлыҡ ҡағылһа – ҡайғыра, яҡшылыҡ килһә – һаранлана, намаҙ уҡығандарҙан башҡа* [«Әл-Мәғәридж» (Баҫҡыстар) сүрәһе, 19–22-се аяттар].

*Уларҙың үҙ араларындағы ғәйрәттәре көслө һәм һин уларҙы көслө тип уйлайһың, ә уларҙың йөрәктәре айырым. Был – улар аңламай торған халыҡ булғанлыҡтан*! [«Әл-Хәшр» (Ҡыуып сығарыу) сүрәһе, 14-се аят].

Кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүгә саҡырыусы түбәндәге аяттар ҙа бик тап килә Уралдың өгөт-нәсихәтенә:

*Әгәр иман килтергән кешеләрҙән ике төркөм һуғышһа, уларҙың араларын килештерегеҙ, әгәр береһе икенсеһенә йәберләүсе булһа, ул Алланың бойороғона буйһонғанға тиклем йәберләүсе менән һуғышығыҙ. Әгәр ул Алланың бойороғона буйһонһа, ғәҙел рәүештә уларҙың араһын дөрөҫ хөкөм менән килештерегеҙ. Алла, ысынлап та, ғәҙелдәрҙе ярата! Иман килтергән кешеләр, ысынлап та, туғандар, ике туғанығыҙҙы ла килештерегеҙ һәм Алланан ҡурҡығыҙ, – бәлки, ғәфү ителерһегеҙ. Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Бер халыҡ икенсе халыҡты мәсхәрә итмәһен, ихтимал, тегеләр быларҙан яҡшыраҡтыр, ихтимал, ул ҡатындар быларҙан яҡшыраҡтыр. Үҙ-үҙегеҙҙе хурламағыҙ, ҡушамат исем аташмағыҙ, ә иман килтергәндән һуң “боҙоҡлоҡ” исеме бик насар бит. Һәм тәүбә ҡылмаған кешеләр – залимдар.*

*Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Күп уйҙарҙан һаҡланығыҙ, сөнки ҡайһы бер уйҙар гонаһ, һәм шымсылыҡ ҡылмағыҙ, һәм бәғзеләрегеҙ икенселәрегеҙ тураһында күҙ артында ғәйбәт һөйләмәһен. Һеҙҙең берәрегеҙ үлгән ҡәрҙәшенең итен ашарға теләрме ни, һеҙ унан ерәнәһегеҙ бит. Алланан ҡурҡығыҙ, Алла, ысынлап та, тәүбәләрҙе ҡабул итә, рәхимле!*

*Ул һине етем хәлдә табып, һыйыныр урын бирмәнеме ни? Ул һине аҙашҡан хәлдә тапты һәм тура юлға һалды. Ул һине ярлы хәлдә тапты һәм байытты.*

*Һәм һин етемде йәберләмә, һәм теләнсене ҡыуып ебәрмә* [«Ад-Духа» (Иртә) сүрәһе, 6 – 10-сы аяттар].

*Бәлки, һеҙ үҙегеҙ етемде хөрмәт итмәйһегеҙ, һәм ярлыны туйҙырырға өндәмәйһегеҙ. Һәм мираҫты ашап бөтөрәһегеҙ, һәм байлыҡты сиктән тыш яратаһығыҙ* [«Әл-Фәджр» (Таң) сүрәһе, 17–20-се аяттар].

Бер туған ағаһының үҙенә ҡылған хаслыҡтарын өс тапҡыр кисереүе, ул ғына ла түгел, шул хаталарын төҙәтергә булышлыҡ итеүе – Уралдың миһырбанлыҡта, хуш күңеллелектә ысын өлгө күрһәтеүе. Быным менән ул ҡан-ҡәрҙәшлек ептәрен өҙмәүҙең, ата-әсәне хөрмәтләүҙең үҙе өсөн ни тиклем яуаплы икәнен күрһәтә:

*Атамдың хаҡы өсөн,*
*Әсәмдең хәтере өсөн*
*Тағы ла бер һынайым,*
*Теләгеңде бирәйем.*

Уралдың әлеге ҡылығы ла – уның Аллаһы Тәғәләнең яратҡан бәндәһе, Ерҙәге илсеһе булыуына бер миҫал:

*Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Ҡатындарығыҙ һәм балаларығыҙ араһында, ысынлап та, дошмандарығыҙ бар, уларҙан һаҡланығыҙ! Әммә ғәфү итһәгеҙ, асыҡ йөҙлө булһағыҙ һәм кисерһәгеҙ, ул саҡта Алла – ярлыҡаусы, шәфҡәтле! Һеҙҙең малдарығыҙ һәм балаларығыҙ – фетнә-һынау ғына. Ә Алла ҡаршыһында оло әжер* [«Әт-Тәғабун» (Үҙ-ара алдашыу) сүрәһе, 14-15-се аяттар].

Шулай итеп, был донъяға килеүебеҙ өсөн ата-әсәгә бурыслы икәнебеҙҙе белеү генә аҙ. Шул бурысты үтәүҙең әһәмиәте бөтә замандарҙа ла бөтә халыҡтар өсөн дә берҙәй булырына Ҡобайырҙа ла, Изге Китапта ла киҫәтеүҙәр бер төрлө. Доға ҡабатлаған һайын яңыра шул:

*Беҙ кешеләргә ата-әсәләренә изгелекле булырға ҡуштыҡ, әсәһе уны ауырлыҡ менән күтәреп йөрөй һәм ауырлыҡ менән тыуҙыра, уны өйрәтеү һәм имсәктән айырыу 30 ай ваҡытты ала. Ул камил бәлиғ булғас, һәм 40 йәшенә еткәс: "Раббым, миңә һәм минең ата-әсәмә Һинең күрһәткән ниғмәтең өсөн шөкөр итеүҙе һәм Һин риза булған изгелекте ҡылыуҙы күңелемә һал, минең өсөн тоҡомомдо төҙөк ҡыл. Мин Һиңә ҡайттым, һәм мин, ысынлап та, мосолмандарҙан," – тип әйтә* ["Әл-Әхҡаф" (Ҡомдар) сүрәһе, 15-се аят].

Өсөнсө тапҡыр ғәфү ителеп тә тәүбәгә килмәгән Шүлгәндең бер туғаны Урал батыр тарафынан язаһын табыуы ла – изге китаптарҙа ҡабул ителгән бер алым, сара:

*Ә кемгә йәберләү ҡағылһа, улар үҙҙәрен яҡлайҙар. Һәм яуызлыҡтың түләүе – шул яуызлыҡ кеүек яуызлыҡ. Әгәр берәй кеше ғәфү итһә һәм килешһә, уның әжере Алла ҡаршыһында. Сөнки Алла залимдарҙы яратмай! Әгәр берәй кеше йәберләнгәндән һуң үҙен яҡлаһа, уға ҡаршы юл (шелтә) юҡ. Кешеләргә золом ҡылыусыларға, нахаҡҡа Ер йөҙөндә яуызлыҡ эшләүселәргә генә ҡаршы юл – улар өсөн интектергес ғазап! Әммә берәү сабырлы булһа һәм кисерһә, ысынлап та, был эштәрҙә ҡыйыу булыуҙан* [«Әш-Шура (Кәңәш) сүрәһе, 39 – 43-сө аяттар].

Ҡобайырҙа туған-ара мөнәсәбәттең киҫкенләшеүе Шүлгән тарафынан ахырғы сиккә барып еткерелгәс, Уралдың да ғәҙел сара табыуы осрағына оҡшаш аяттар бар икән Ҡөрьән-Кәримдә:

*Һин уларға дөрөҫ итеп Әҙәмдең ике улы хаҡындағы хәбәрҙе уҡы. Улар икеһе лә ҡорбан салған. Шул ҡорбан береһенән ҡабул ителгән, икенсеһенән ҡабул ителмәгән. Икенсеһе: “Үлтерәм мин һине!” – тигән. Тегенеһе:”Алла тәҡүәлеләрҙән генә (ҡорбан) ҡабул итә. Һин үлтермәк булып, миңә ҡул һуҙһаң да, мин һиңә ҡул һуҙмам. Мин бит ғаләм Раббыһы Алланан ҡурҡам. Миңә ҡарата ҡылған гонаһыңды ла, үҙ гонаһыңды ла бергә йыйып, тамуҡҡа төшөүеңде теләйем мин. Залимдарҙың язаһы – шул,” – тигән* [«Әл-Маидә» (Аш табыны) сүрәһе, 27–29-сы аяттар].

Хәҙер төп геройҙың үлеме алдынан әйткән бәхилләшеү һүҙенең айышына төшөнәйек:

*Дейеүҙәргә яу асып,*
*Диңгеҙҙе дейеүҙән әрсеп,*
*Ерҙә торлаҡ табыштым,*
***Кешеләрҙе яуыздан***
***Ҡотҡарырға тырыштым...***
*...Яңғыҙ башым уйланым,*
*Уңмаҫ юлды һайланым.*

Урал батыр, Аллаһы Тәғәләнең һайланған бәндәһенән булһа ла, үҙенең был донъяла хата аҙым яһауҙан азат булмауын таный. Билдәле булыуынса, кешелекте төрлө дәүерҙәрҙә унан һуң да рухи һәләкәттән ҡотҡарырға килеүселәр күп буласаҡ. Әммә эш ниҙә һуң? Ни өсөн бер үк хәл-ваҡиғалар ҡабатлана тора? Изге Китапта бар был һорауға яуап:

*Әгәр Беҙ теләһәк, һәр бер йәнгә тура юлын бирер инек. Әммә Минең: “Тамуҡты бергә ендәр һәм кешеләр менән тултырырмын!” – тигән һүҙем раҫ булды бит. Үҙегеҙҙең ошо көнгә осраясағығыҙҙы онотҡанығыҙ өсөн [ғазапты] татығыҙ! Беҙ һеҙҙе онотторҡ. Һәм ҡылған эшегеҙгә күрә мәңгелек ғазап татығыҙ инде!* [«Әс-Сәждәһ» (Сәждә) сүрәһе, 13-14-се аяттар].

**Һәр әҙәм үҙе теләргә тейеш был ҡотолоуҙы, үҙе үрләргә тейеш бейек Бөйөклөккә!** Был ниәтте тормошҡа ашырыр юл бер генә. Шуны беҙгә васыят иткән Урал атабыҙ:

*Күккә лә осор – яҡшылыҡ,*
*Һыуға ла батмаҫ – яҡшылыҡ,*
*Утта ла янмаҫ – яҡшылыҡ,*
*Телдән төшмәҫ – яҡшылыҡ.*

Фәҡәт ошо идея менән генә тарҡаулыҡтан арынып, берләшер милләт эсендәгеләр, ә унан һуң – донъяуи халыҡтар. Был ниәт тормошҡа ашһа, яуап көнөндә яҡты булыр йөҙөбөҙ:

*Һәр кемдең тотҡан йүнәлеше бар.* ***Изге эш менән бер-берегеҙҙе уҙырға тырышығыҙ.*** *Ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа, Алла һеҙҙең барығыҙҙы ла (ҡаршыһына)* [«Әл-Бәҡара» сүрәһе, 148-се аят].

Шулай итеп, кеше–ара мөнәсәбәттәрҙең бөтә төрҙәрен (ир – ҡатын, ата – бала, әсә – бала, туған-ара, халыҡ-ара) һүрәтләү өлгөһө менән генә сикләнмәгән, ә ошо мөнәсәбәттәрҙә һәр кешенең үҙ яуаплылығын да һыҙыҡ өҫтөнә алған рухи мираҫыбыҙ “Урал батыр” ҡобайыры! Үҙ заманында бәндәләрҙе яҡшылыҡҡа өйрәтер өсөн ебәрелгән Урал батырҙың өлгөлө тәртибе һәм беҙгә төбәлгән өгөт- нәсихәттәре донъяуи диндәрҙең талаптары менән тап килә, сөнки изге белемдәрҙең сығанағы уртаҡ. Үрҙә килтерелгән дәлилдәр нигеҙендә

шундай һығымтаға килергә була: бөтә диндәрҙең маҡсаты бер – тормошто һәм кешелекте тәрбиә, тәртип ҡыҫаларында тотоу, игелек нигеҙендә ҡоролған әхлаҡи ҡиммәттәрҙең йәшәүсәнлеген тәьмин итеү. «Урал батыр» ҡобайыры ла төрлө дин әһелдәрен ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшә, аңлаша белергә өйрәтә, татыулыҡҡа, теләктәшлеккә, бер-береңде хөрмәт итергә саҡыра.

## Йомғаҡлау

Кешелек донъяһы тарихтың инволюция (матдилашыу, аң кимәленең түбән төшә барыу этабы), революция (бер хәлдән икенсеһенә күсеш-ҡыйралыш) кеүек осорҙарын тәжрибә өсөн кисерергә мәжбүр булған. Бына шул донъяның ғазаптары, алдаҡтары эсендә буталыуҙарҙан алйыған, миктәгән йән хыялдарҙың буш ҡыуыҡҡа тиңлеген төшөнгәндән һуң, рухи ғәмәлдәргә тотонасаҡ, тормош мәғәнәһе ваҡытлыса онотторор алдаҡсыстарҙа түгел, ә мәңгелек ҡиммәттәрҙе эҙләүҙә икәнлеген аңлаясаҡ. Тимәк, уның эволюция (аң күтәрелеше нигеҙендәге үҫеш) юлынан үтергә тейешлеге лә – тәбиғи хәл. Алтын быуат – Һыуғояр дәүеренә аяҡ баҫырға торғанда, Ер йөҙөндәге ҡайһы бер халыҡтар булмаған ерлектә, буш урында мифтар тыуҙырып, йә булмаһа, башҡаныҡына ҡулын һуҙып, талаша-бүлешә ятҡанда, үҙебеҙгә яҙған рухи байлыҡтарыбыҙҙы барлап, уларҙың тәғәйенләнешен дөрөҫ ҡулланһаҡ, киләсәгебеҙ өмөтлө беҙҙең. Ә ул ҡиммәттәр – ошондай көн тыуырын алдан хәстәрләгән аҡыл эйәләре тарафынан түкмәй-сәсмәй һаҡланып, бөгөнгө көнгә килтереп еткергән халыҡ ижадында: ҡобайырҙарҙа, мәҡәл-әйтемдәрҙә, әкиәттәрҙә, ҡурай моңонда, ер-һыу атамаларында!

Белеүебеҙсә, төрлө замандарҙа, рухи һәләкәт алдында торғанда кешелекте афәттән алып сығыусы донъяуи диндәр үҙенән алдағыһының үҙенсәлектәрен иҫәпкә алған, йәғни буш урында барлыҡҡа килмәгән. Иң йәш һәм һуңғы дин тип һаналған Исламда унан алдағы христиан һәм иудаизмдағы пәйғәмбәрҙәр телгә алынһа, шул диндең башында торған Ғайса пәйғәмбәрҙең дә үҙ ваҡытында Һиндостанға барып, йога серҙәрен өйрәнеүе тураһында фараздар бар. Аҡыл Эйәһе Гаутама ла, йога тәғлимәтен төбөнә тиклем төшөнөп, бөтә баҫҡыстарын үтеп сыҡҡас, шул белемдәрен Будда диненең нигеҙенә башланғыс итеп һалған. Әгәр шул донъяуи диндәрҙең сығанағы – йога тәғлимәте беҙҙең ҡобайырыбыҙҙа ярылып ята икән, бына ҡайҙа ул Рух шишмәһененең башы! Был һүҙҙе тиҫкәрегә уҡығанда килеп сыҡҡан “хур”, “хурлыҡҡа ҡалыу”, “хур булыу” кимәленә ҡалмайыҡсы ғәм алдында, ошо тиклем рухи байлығыбыҙ бар була тороп. Уралдың беҙгә төбәп ҡалдырған һуңғы һүҙҙәрендә ап-асыҡ аталған был хикмәтле иҫкәртеү:

*Уйым-уйым күлдәрҙең*
*Барында дейеү буласаҡ,*
*Уҫаллығын ҡыласаҡ,*
*Эсегеҙгә керәсәк.*
*Дейеүҙәрҙең ҡоһоро*
*Барығыҙға тейәсәк,*
*Шунан барың үләсәк.*
*Күлдең һыуын эсмәгеҙ,*
*Хараплыҡҡа төшмәгеҙ,*
*Дейеүҙәргә буй биреп,*
*Ҡул ҡаушырып тормағыҙ!*

Хөрмәтле милләттәштәрем! Ҡобайырҙа Йәншишмә тип кодҡа һалынған уртаҡ рухи байлығыбыҙ булған, тик әлегәсә йәшенеп, быуылып ҡына ятҡан шул

инештең саф тереһыуын йырып, ағыҙышып ебәреүҙә, йәғни бөйөк тәғлиматтең әле беҙ аңлап бөтмәгән мәғәнәһенә, асылмаған серҙәренә төшөнөү өсөн бәләкәй генә өлөшөбөҙҙө кертә алһаҡ, алған белемдәребеҙ, туплаған тормош тәжрибәбеҙ, кеше булып йәшәүебеҙ аҡланыр ине, тигән өмөттәбеҙ.

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.**

## Ҡулланылған әҙәбиәт:


1. Аҙнабаев Р.Т. һ.б. Тамырҙарыңды беләһеңме? Шәжәрә байрамдарын үткәреү буйынса ҡулланма. – Өфө: «Белая река», 2006. – 64-се бит.
2. Ҡөрьән-Кәрим. Байышев Ф. тәржемәһендә. – Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1992, 960-сы биттәр.
3. Бейешев Ә.Ғ., Сөйәрғолов Ә., Хисамов Ғ.А. Ҡөрьән-Кәрим. – Өфө:Китап, 2009. – 960-сы бит.
4. Биишев А.Г., Ишмөхәмәтов З.К. һ.б. Башҡорт теленең һүҙлеге. – 2 томлыҡ. – М., «Русский язык», 1993. –1-се том. – 861-се бит.
5. Боцман Я. Буддизм. Четыре благородных истины: – М.:Изд-во ЭКСМО-Пресс; Харьков: Изд-во Фолио, 2001. – 992с. (Серия «Антология мысли»).
6. Виссарион. Последний Завет. Повествование от Вадима. – Спб: Изд-во Общества Ведической культуры, 1997. – 294с.
7. Галлямов С.А. Санскритско- башкирский словарь. – М. – СПб., 2003. – 308 с.
8. Галлямов С.А. Башкорды от Гильгамеша до Заратуштры. – Уфа: Китап, 2005. – 248 с.
9. Галин Салауат. Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклоры: аңлатмалы һүҙлек. Уҡыу ҡулланмаһы. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. – 224-се бит.
10. Ғималова М.Ғ., Хөсәйенов Ғ.Б. «Туған әҙәбиәт» Урта мәктәптең 8 класс уҡыусылары өсөн дәреслек-хрестоматия. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. – 352-се бит.
11. Древнетюркский словарь. Издательство «Наука»: Ленинград, 1969. – 676 с.
12. Кирәй Мәргән һ.б. Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. – Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. – 416-сы бит.
13. Кочергина В.А. Санскритско-русский словарь. – М., 1996. – 895с.
14. Кочергина В.А. Санскрит: учебник для высших учебных заведений/ В.А.Кочергина. – М.: Академический проект, 2007. – 335с.
15. Маршалл А. Научно-популярное издание, Гиннес.Большая книга знаний, том 2. ООО Издательство АСТ. – Тверь,1997.
16. Мюллер В.К. Англо-русский словарь.53000 слов. Изд. 17-е, испр. и доп. – М., «Русский язык», 1978. – 888 с.
17. Петросян А.А. и др. Башкирский народный эпос. Главная редакция восточной литературы. – М. 1977. – 518с.
18. Севортян Э.В. Этимологический словарь тюркских языков (Общетюркские и межтюркские основы на гласные). – Изд-во «Наука» М., 1974. – 767с.
19. Сергеева Татьяна. Будда, или Легенда о Разбуженном принце. – Русское энциклопедическое товарищество. – М., 2002. – 254 с.
20. Надршина Ф. Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Башҡортостан китап нәшриәте. – Өфө. 1980. – 472-се бит.
21. Новиков М.П. Атеистический словарь. – М., Политиздат, 1985. –512 с.
22. Патрул Римпоче. Слова моего несравненного Учителя (С предисловиями Далай-Ламы и Дилго Кхенце Ринпоче). Изд-е А. Терентьева. – Санкт-Петербург, 2007. – 608 стр.
23. «Урал батыр». Башкирский народный эпос. – Уфа:Китап, 2005. – 296 с.
24. Шакурова Ш.Р. Башкирский народный эпос «Урал-батыр»: архивный первоисточник и его текстологический анализ. – Уфа: Гилем, 2007. – 386с.

## «ОШО ЙЫРЫМ БУЛЫР УҠАҺЫ»

***Бөйөк Ватан һуғышына тиклем Учалы районының Науырҙа ауылында йәшәп, шунан фронтҡа алынған Сафиулла Афзаловтың «Ейәндәрем уҡыр...» тип аталған көндәлектәренән өҙөктәр «Ағиҙел»дең былтырғы 5-се һанында донъя күргәйне. Унда һүҙ һуғышҡа тиклемге ваҡиғалар тураһында барһа, был юлы тәҡдим ителгәне авторҙың үҫмер сағынан алып егет ҡорона ингән осорона бағышланған. Яҙма тәрән фәлсәфәле фекерҙәргә бай булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә.***

«Миңә 9 йәш, быйыл 3-сө класта уҡый башланым. Ауылда шаулы ваҡиғалар булып алды, бөтә халыҡты колхозға индерҙеләр. Атайым менән күрше Ҡасим ағай быға риза булманы. «Урта хәлле (уларҙы шулай тип йөрөтәләр – **С.А.**) көйө лә бына тигән итеп йәшәп яттыҡ, артабан да шулай йәшәрбеҙ әле», – тине улар. Атайым менән Ҡасим ағайҙы колхозға инергә өгөтләп тә, ҡурҡытып та ҡаранылар. Ахыры-һы ауыл йыйылышында, уларға кулак мөһөрө тағып, Себергә һөрөргә ҡарар иткәндәр.

Беҙҙең өй алдына ылау килеп туҡтаны, унда милиционер һәм ылаусы бар ине. Ауыл Советы һәм колхоз етәкселәре атайым менән Ҡасим ағайҙы арбаға ултыртты. Беҙҙең янда күп кенә кеше йыйылып китте. Ылау ҡуҙғалды. Ул бер аҙ киткәс, арттарынан йүгерҙем. Шунда Ҡасим ағайҙың ҡыҙы Гөлнәзифә лә миңә эйәрҙе. Уны етәкләп алдым. Ауыл ситендәге түбә башына тиклем йүгерҙек. Беҙ түбә башына менеп еткәндә, ылау зыярат эргәһендә ине. Беҙ йүгергәнде күреп, ауыл кешеләренең күҙенән йәш сыҡҡан. Был турала аҙаҡтан әсәйем әйтте. Атайымдар артҡа ҡарап барғандарҙыр инде, беҙгә ҡул болғанылар. Беҙ шулай хушлаштыҡ. Ылау күҙҙән юғалғансы етәкләшкән көйө ҡарап торҙоҡ. Гөлнәзифә һулҡылдап илап ebәрҙе.

– Илама, һеңлекәш! Бирешмәбеҙ әле. Бәлки, атайҙар оҙаҡламай ҡайтып килер, – тигән булып йыуаттым уны. Минең күҙемдә лә йәш тулы. Бер аҙ тынысланғас, түбәнән төштөк.

Ҡасим ағайҙарҙың ҙур йорттарын тартып алдылар ҙа колхоз идараһы иттеләр. Ғаиләһен ҡапҡа төбөндәге бәләкәй генә аш өйөнә

күсерҙеләр. Бер генә һыйыр ҡалдырып, ҡалған малдарын колхозға тартып алдылар. Әҙерләнгән бесәнде лә шулай бүлделәр. Беҙҙең ике бүлмәле ҙур өйҙөң бәләкәй яғын үҙебеҙгә ҡалдырҙылар ҙа ҙур яғына колхоз бригадирын күсерҙеләр. Шулай уҡ беҙгә лә бер генә һыйыр ҡалды. Башҡа малдарҙы, хатта быҙауҙарҙы ла колхозға тартып алдылар.

Был башбаштаҡлыҡ ни өсөн эшләнә? Ошо һорауға яуап таба алмай аптырайым. Элек өйөбөҙҙән кеше өҙөлмәй торғайны, хәҙер бер кем дә хәл белергә инеп сыҡмай. Әсәйем Ҡасим ағайҙың ҡатыны Ғәлимә еңгәләргә барып ҡына күңелен бушата. Икәүләп илашып та алалар.

Минең, туғыҙ йәшлек малайҙың, күңеле таш булып ҡатты. Балалығым шуның менән бөттө. Хәҙер мин үҙебеҙҙең ғаилә һәм Ғәлимә еңгәләр өсөн яуаплы кеше. Үҙем шулай тоям. Әсәйем һәм ике ҡустым да миңә оло кешегә ҡараған кеүек төбәлә. Эйе, мин хәҙер ҙур кеше инде.

Бөтә уй-хыялдарымды был яғына инде һинең менән, дәфтәремкөндәлегем, бүлешәсәкмен. Уларҙы әсәйемә, ҡустыларыма әйтеп булмай бит инде.

**30 сентябрь, 1930 йыл».**

«Колхоз бүлеп ҡалдырған бер аҙ ризыҡ февраль аҙаҡтарына бөттө. Әсәйемде, Ғәлимә еңгәне фермаға һауынсы итеп ҡуштылар. Тыңламай ғына ҡара! Эшләгәндәренә астан үлмәҫлек кенә он биргән булалар. Ҡустыларым әле бәләкәс, ул-былды аңлап еткермәйҙәр. Артабан нисек тамаҡ туйҙырыу тураһында әсәйем менән миңә ҡайғыртырға тура киләсәк. Ни эшләргә? Баш етмәй. Нисек кенә ауыр булмаһын, йәшәргә кәрәк, тырышырға тура килә. Зыяратҡа барып, ҡәбергә ятып булмай шул. Үҙем өсөнсө класта ғына уҡыһам да, иңемдә әҙәм күтәрә алмаҫлыҡ йөк ята.

**21 февраль, 1931 йыл».**

«Тышта – март. Башта ныҡ ҡына һыуытып торҙо ла көн йылынды ла китте. Уйнарға сыҡҡы килә, тик йорт эштәре минең ҡарамаҡта. Бесән яғы ла наҡыҫ, һыйырға самалап ҡына бирәм. Һыйыр тиҙәген бәләкәй сана менән баҡсаға түгәм. Гөлнәзифәләргә лә ярҙам иткән булам. Эштән арып ҡайтҡан Ғәлимә еңгә өлгөрмәй.

Йәшәүе нисек ҡыйын булһа ла, уҡыуымды ҡалдырмайым. «Уҡыған кеше генә тормош ауырлыҡтарына бирешмәй», – ти торғайны атайым. Мин дә һис бирешергә теләмәйем. Бирешмәйем тигәндән, кисә мәктәптә ғауға булып алды. Һонтор Ғиндулла, көлмәк булып, мине «кулак ҡалдығы» тип атаны. Ҡарап торманым, тегенең эсенә ныҡ итеп типтем. Бөгөлөп төшкәйне, ҡолаҡ төбөнә тондорҙом. Шул саҡ класҡа уҡытыусы апай килеп инде, ә Ғиндулла илап ҡайтып китте. Бер аҙҙан класс бүлмәһенә уның атаһы килеп инде. Ауыҙында эт ашағыһыҙ һүҙҙәр. Йәнәһе, мине туҡмарға килгән. Мине иптәштәрем уратып алды, уҡытыусым да яҡлашты. Теге әҙәм, бер эш тә

ҡыйрата алмай, яман һүгенеп ҡайтып китте. Уҡытыусым дәрестән һуң мине өйөмә тиклем оҙатты, урамда Ғиндулланың атаһы туҡмап ҡуймаһын, тигәндер инде.

Был ваҡиға мине ҡул көсө менән хөкөм итмәҫкә, ниндәй ауыр хәлдә лә аҡыл менән эш итергә өйрәтте. Шунан һуң мине мәктәптә лә, ауылда ла ҡыйырһытырға маташыусы булманы. Тормош, яҙмыш былай ҙа кәрәкте биргәнсә кәмһетте бит инде, шунан да артығы нисек була инде? Ярай, мин дә әҙәм булырмын әле. Ошо оло ышаныс йәшәтә мине.

**20 март, 1931 йыл»**.

«Мин – көтөүсе. Атайым Себергә һөрөлмәһә, мине ун йәштән үк көтөүсе итмәҫ ине әле. Яҙмыш шул эшкә мәжбүр итә. Атайымдан бер хәбәр ҙә юҡ. Ул тереме, үлеме – белгән юҡ.

Беҙҙең яҡтарҙа көтөү апрель баштарында сыға. Был саҡтарҙа күп ерҙәр ҡарҙан әрселгән була. Быйыл да шулай булыр, ахырыһы. Бесән бөтөнләй бөттө. Һыйырҙы көн һайын ҡаршылағы тауға сығарам. Унда ла үлән юҡ. Шулай ҙа һыйыр ер еҫкәп, ҡарынын ҡалдыҡ-боҫтоҡ ҡылған менән тултырып килгән була. Етмәһә, быҙауын да, беҙҙе лә һөт менән һыйлай.

Бөгөн кискә табан Ғәбделбарый бабай килеп инде. Уның беҙгә бер ҡасан да кергәне юҡ ине әле. Ғөмүмән, атай киткәс, беҙгә аяҡ баҫыусылар бөттө.

– Һаумыһығыҙ! Һау тораһығыҙмы? Тайфур ҡорҙаштан хәбәр юҡмы? – тип ул ғәҙәти һорауҙарын бирҙе лә түп йомошона күсте. – Килен! Хәлегеҙҙе аңлайым. Ауыр инде. Ни эшләйһең? Бәлә ағас башынан түгел, әҙәм башынан йөрөй. Мине быйыл да ауыл Советы саҡыртты һәм ауыл көтөүен алырға ҡушты. Тик миңә сос ҡына ярҙамсы кәрәк. Сафиулла бик йылғыр, егәрле булып үҫеп килә, күҙ теймәһен үҙенә. Ялланған хаҡтың өстән бер өлөшөн малайыңа бирер инем. Уны миңә ярҙамсы итеп бирәһеңме? Хәҙер ул грамотный. Малды икәүләп йөрөп яҙыр инек. Хаҡын да билдәләрбеҙ, – ти.

– Сафиулла уҡый бит әле, – тине әсәйем, икеләнеп.

– Берәй аҙна, малдарҙы өйрәтеп алғансы, бергәләп көтһәк, аҙаҡтан малдарҙы сығарышыр ҙа мәктәбенә китер. Уның урынына ҡустыһы ярҙам итеп торор. Дәрестәре бөтөү менән, ул үҙе килеп етер. Шунан Ғарифулланы ҡайтарып ебәрербеҙ, – тине Ғәбделбарый бабай.

– Әллә инде, белмәйем. Ана, үҙе менән һөйләш, – тине әсәйем.

– Мин риза. Уҡыуым да ҡалмағас, ҡуш ҡуллап ризамын. Ә бер аҙнаға уҡытыусымдан рөхсәт алырмын. Әсәй, барыбер йәй буйына колхозда эшләргә кәрәк буласаҡ бит, – тинем.

Әсәйем башын ғына һелкеп ҡуйҙы. Икенсе көн төштән һуң, мин мәктәптән ҡайтҡас, өй беренсә йөрөп, кешеләр малын яҙып алдыҡ. Бер юлы көтөү хаҡын да әйтә йөрөнөк. Хаҡына игене лә, картуфы

ла, бер аҙ аҡсаһы ла буласаҡ. Дәфтәр – минең ҡулда. Ғәбделбарый үҙенә килтергән хаҡты ла миңә әйтеп яҙҙырып торасаҡ. Бына шулай: уҡый-яҙа белеү ҙә ярап ҡалды.

Шулай итеп, мин – көтөүсе.

**10 апрель, 1931 йыл».**

«Көтөүҙә йөрөү башта ауыр ғына тойолғайны. Ике-өс һыйыр ҡасып та маташты. Ғәбделбарый бабай, ғүмере буйы көтөү көткәс, уларҙы тиҙ өйрәтте. Тәүге айҙа бик ныҡ арыһам да, аҙаҡтан күнегеп киттем. Төштәрен, малдар һыулауҙа торған саҡта, китап уҡырға ла әүәҫләнеп алдым. Төшкөгә аҙыҡты Ғәбделбарый бабай үҙе менән йөрөтә.

Бер ай үтеүгә, эш хаҡын да килтерә башланылар. Кешеләр үткән йылғы картуфты ла биргеләй, унынан да баш тартмайбыҙ. Уҡыуҙар тамамланғас, Ғарифулла ҡустымды көтөүгә йөрөтмәйем. Ул өй эштәрендә булыша. Быҙауҙы ҡарау, картуф утау, күмеү һәм башҡа бихисап эштәр күп бит. Шулай уҡ ул Гөлнәзифәләргә лә ярҙамлаша.

Бына шулай үтте минең тәүге көтөүсе йәйем.

**25 август, 1931 йыл».**

«Иртәгә – беренсе сентябрь. Әсәйем миңә бер салбар һәм күлдәк алып ҡуйған. Ғарифулла ҡустыма ла салбар әләкте. Был яғына ул да ярты көн көтөүҙә буласаҡ бит. Көтөүҙе сығарыштым да, кейенә һалып, мәктәбемә киттем. Һәләк тигәнсә һағындырған икән уҡыу. Хатта һонтор Ғиндулланы ла күрге килде. Шаулашып ҡаршы алды класташтарым, уҡытыусым да хәл белеште. Ғиндулла, минән көлөп, ниҙер әйтергә самалағайны ла, тегегә йоҙроҡ күрһәттем. Шым булды. Мин 4-се класс уҡыусыһы булып киттем. Киләһе йылда ауылда ете йыллыҡ мәктәп асыласаҡ, тигән хәбәр йөрөй. Минең өсөн оло ҡыуаныс буласаҡ был.

**31 август, 1931 йыл».**

«Иртән торһам, бөтә ер – ап-аҡ. Ҡар яуған икән. «Ура!» ҡысҡырып ебәрҙем. Хатта ҡустыларым да йоҡонан уянды. Быйылға көтөү тамамланды. Беренсе сирек тә бөттө, көҙгө каникул башлана.

Төштән һуң Ғәбделбарый бабай менән өй беренсә йөрөргә сыҡтыҡ. Ул әллә кемдән ат һорап егеп алған. Тәгәрмәстәргә ҡар урала. Ауыл халҡы көтөү хаҡын бирергә тырышып ҡына тора. Тик аҡсаһын ғына байрамдан һуң бирәсәктәр. Риза булдыҡ. Әрләшеп тә ни эшләйһең инде, халыҡтың хәлен аңлайбыҙ бит.

Гөлнәзифәләргә һуғылмай үткәйнек, Ғәлимә еңгә йүгереп килеп еткән. «Ниңә беҙгә теймәй үттегеҙ?» – ти. «Үҙегеҙ рәхәтләнеп ашағыҙ. Үҙемдең иҫәпкә һеҙҙе түләгән тип яҙып ҡуйҙым», – тинем. Ғәбделбарый бабай мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуйҙы. Шулай ҙа:

– Иҫәпте Сафиулла алып бара. Ул әйткәс, бер ни ҙә эшләй алмайым , – тине.

– Икегеҙгә лә рәхмәт инде, – тип тороп ҡалды Ғәлимә еңгә. Үҙенең күҙҙәрендә йәштәр емелдәне. Ҡыҙыҡ: кешенең ҡыуаныстан илағанын шунда күрҙем.

**4 ноябрь, 1931 йыл».**

«Апрель баштарында Ғәбделбарый бабай тағы ла беҙгә килде. Үҙе ихлас йылмая.

– Йә, улым Сафиулла! Тағы ла көтөү алабыҙмы? Әле генә ауыл Советына саҡырып ҡуштылар. Һинең менән беҙ килешәбеҙ бит. Иҫәпхисапты дөрөҫ алып барғанға, үткән йыл көтөү хаҡын түләмәүселәр ҙә булманы, – тине.

– Алайыҡ, Ғәбделбарый бабай! Мин риза, – тинем. Үҙем Ғарифуллаға ҡарайым. Йәнәһе, ни әйтерһең? Ул, ризалығын белдереп, баш һелкеп ҡуйҙы.

Үткән йылғы дәфтәрҙе яңынан ҡарап сыҡтыҡ. Ял көнө ауыл буйынса йөрөнөк. Хәҙер мал иҫәбен алыуға өйрәнгәнбеҙ инде. Бер кем дә малын йәшереп ҡалдырмай. Мал иҫәбе үткән йылғынан кәм түгел. Ерҙәр ҡарҙан әрселеп бөтөр-бөтмәҫтән, көтөүҙе сығарҙыҡ. Ғәбделбарый бабай миңә бер тәрән калуш бүләк итте. Верхнеурал баҙарына барғанда алған икән. Ялан аяҡ йөрөгәнгә ҡарағанда, тәрән калуш бик уңайлы. Үҙе йомшаҡ ҡына.

Ғәҙәттә, Ғәбделбарый бабай түбәндә һыйырҙар артынан бара. Ә мин тау битләүендә һарыҡ-кәзә артынан ҡалмайым. Йөрөмтәл һарыҡ-кәзә бер яҡ ситкәрәк тайпылһа, теге тәрән калуштарҙың берәһен аяҡ менән осорам. Һарыҡ-кәзә пыр итеп ҡала ла кире үҙ урындарына ҡайта. Ә мин, китап уҡый-уҡый барып, калушты кейеп алам. Быйыл көтөүгә өйрәнеп китеү ҙә еңел булды. Ни тиһәң дә, бер йәшкә үҫкәнмен.  Тәжрибә лә бар.

Шулай итеп, икенсе йыл көтөүсе эшмәкәрлегем башланды. Ул уңышлы ғына дауам итһен инде.

**28 апрель, 1932 йыл».**

«Үткән йыл уҡ, ауылда ете йыллыҡ мәктәп асыла, тиһәләр ҙә, хәбәр дөрөҫ булмай сыҡты. Шуға көтөүҙе ҡар төшкәнсә үк үҙемә теүәлләргә тура киләсәк. Ләкин икенсе бер ҡыуанысым бар: Ғарифулла менән Гөлнәзифә беренсе класҡа уҡырға төшә. Ғәлимә еңгә риза булмағас, үҙем барып һөйләштем. Һеҙгә ярҙам итеп торормон, тип саҡ-саҡ ризаландырҙым. Ә Ғарифулла уҡырға барғанына ҡыуанды ғына, әсәйем дә ҡаршы төшмәне. Мин эшләгәнгә һәм ризыҡ тапҡанға ул ҡыуанып бөтә алмай ине.

Быйыл районда гәзит сыға башланы, уға яҙылдым. Беренсе юлдарынан аҙағынаса ҡалдырмай уҡып барам. Ул ғына түгел, гәзиттә шиғырҙар ҙа баҫыла башланы. Әбүс тигән шағирҙың әҫәрҙәре оҡшай. Уның һымаҡ, бына тигән шиғыр яҙһаң ине, тип хыялланам.

Атай тураһында бер хәбәр ҙә юҡ. Ҡасим ағай менән һыуға төшкән энә кеүек юҡ булдылар. «Төрмәләргә ике яҡтан да хат яҙырға рөхсәт ителмәй» тигәндәре шулдыр, ахырыһы.

Иртәгә 1 сентябрь. Уҡырға бик барғы килә лә ул. Ни эшләмәк кәрәк. Иң яҡын булған ете йыллыҡ мәктәп егерме биш саҡрымдағы Ярбаш ауылында. «Крәҫтиән йәштәре мәктәбе» тип йөрөтәләр үҙен. Ярай, ваҡыт булһа, миңә лә уҡырға тура килер әле. Ә хәҙергә эшкә – көтөүгә!

**31 август, 1932 йыл».**

«1933 йыл беҙҙҙең яҡтарҙа ҡоролоҡ булды. Үлән дә һирәк кенә ине. Малды көтөүҙә тотоу ауырға тура килде. Ярай, уныһына өйрәнгәнбеҙ ҙә, ти. Үҙебеҙҙең малға бесән эшләүе ауыр. Әсәйем менән Ғәлимә еңгә, ауылдан биш саҡрымға йәйәү йөрөп, ер ҡыртышын ҡыра. Ике көнгә бер мин барып, ярҙам иткән булам. Салғыларын тапайым, сабышам. Салғы тапау ҙа үҙенә күрә бер һөнәр икән дә ул. Кешегә инәлеп тормайбыҙ. Мин бесәндә булғанда, көтөүгә Ғарифулла ҡустым китә. Мин көтөүгә сыҡһам, ул бесәндә була. Бәләкәй генә булһа ла, эшкә ҡатынҡы ғына үҙе. Шәп эш кешеһе сығасаҡ унан. Шулай итеп, бер ай буйына бесән эшләнек тә ҡуйҙыҡ. Уныһы ла етерлек түгел. Бик ҡыҫып ҡына ашатырға тура килер инде. Әлеге кешенән алған картуф ярҙам итер, тип уйлайым.

Быйыл мәктәптә бишенсе класты асырға булғандар. Мин төшкә тиклем, Ғарифулла төштән һуң уҡыясаҡбыҙ. Ә ҡалған ваҡыт икебеҙҙең дә ҡар яуғансы көтөүҙә үтәсәк. Ни эшләйһең инде, башты ташҡа бәреп булмай. Әҙәм балаһы барыһына ла нисек тә булһа яраҡлашырға тырыша. Уҡыу ҙа бик кәрәк, киләсәк тик уҡыған кешеләр ҡулында буласаҡ. Әлегә ҡыйын булһа ла, түҙергә тура килә. Аҙаҡтан, белем алғас, хәлебеҙ яҡшырыр әле. Шулай хыялланған булам.

**29 август, 1933 йыл».**

«Йылдар – аҡҡан һыуҙар кеүек, үтеп кенә тора. Ваҡыт булмағанғамы, бер йыл көндәлегемде ҡулыма алманым. Иртәгә алтынсыға уҡырға барыр булғас, ул иҫемә килеп төштө. Башта элек яҙғандарымды уҡып сыҡтым. Көндәлек тигән нәмә шәп икән дә ул, уҡый башлауың була, бөтә үтелгәндәрең иҫкә килә лә төшә. Ҡустым менән Гөлнәзифә лә икенсегә уҡырға баралар. Гөлнәзифә шәп уҡый, ҡәһәрең, әсәһенә лә ярҙам итергә өлгөрә. Уҡыуҙа ла ал бирмәй: отличница.

Быйыл бесән эшләү еңелгә төштө. Үҙебеҙ ҙә үҫәбеҙ шул. Көтөү туҡтау менән ташып алынһа, ҡыш тыныс үтәсәк. Ә иртәгә – уҡырға!

**31 август, 1934 йыл».**

«Быйыл ҡар оҙаҡ яумай ыҙалатты. Көтөүсе өсөн ул ҙур бәлә. Ҡар төшмәй икән, теләйһеңме, юҡмы – көтөүгә сығырға тейешһең.

Көҙгө каникулдар ҙа башланды. Ә беҙ Ғәбделбарый бабай менән, оҙон сыбыртҡыларҙы һөйрәтеп, һаман көтөү артынан йөрөйбеҙ. Быйылға тиклем ҡарҙың былай оҙаҡ яумай торғанын күргәнем юҡ ине әле. Тик 7 ноябрҙә генә, бөтә ерҙе ябып, ап-аҡ ҡар төштө. Ҡар яуғанға былай бер ҡасан да ныҡ итеп ҡыуанғаным юҡ ине әле.

Ғарифулла ҡустым да үтә шатланған булды. Ни тиһәң дә, әле сабый ғына шул. Йәшәргә кәрәк, йәшәгәс, ашарға ла кәрәк. Шуның өсөн генә лә эшләү мөһим. Атайҙы алып китмәһәләр, билдәле, ул беҙҙе былай интектермәҫ ине. Бында кем ғәйепле? Уйлап-уйлап, осона сығырлыҡ түгел. Шулай ҙа атай йәл, бик йәл. Ғаиләһенән, тыуған еренән айырылып, әллә ҡайҙа ятҡан ер аҙағы ер башы булған Себергә һөрөлһөн әле!

Әллә байрам кәйефенән, әллә мул итеп ҡар яуғанға, күңелдәр нескәреп китте булһа кәрәк. Байрам байрам менән, әммә ошо өс көндә бесәнде ташып өлгөрөргә кәрәк. Гөлнәзифәләргә лә ярҙам итмәй булмай.

**7 ноябрь, 1934 йыл».**

«Мин быйыл етенсене тамамлайым. Рәсми тел менән әйткәндә, тулы булмаған урта белемле кеше инде. Ҡасан урта белем алырмын икән? Уныһын бер Хоҙай ғына белә. Ярай, хәҙергә шуныһына булһа ла ҡәнәғәт булып торайыҡ.

Ғәбделбарый бабай, ғәҙәттәгесә, апрель баштарында килгәс тә:

– Балам! Әйҙә, бер йылға тағы ла көтөү алайыҡ. Хәҙер һинең дә бауырың ҡалҡты. Аллаға шөкөр, егет булып үҫеп киләһең. Мин дә ҡартайҙым инде. Алтмышты уҙғас, мал артынан йүгереү еңел түгел шул. Шуныһы: быйыл көтөү хаҡы уртаҡҡа булыр, – тине.

– Юҡ инде, бабай! Быға тиклем нисек хаҡ бүлһәк, шулай ҡалһын. Былай ҙа һиңә ҙур рәхмәт инде. Беҙҙе аяҡ һуҙыуҙан ҡотҡарҙың, – тинем.

**1 апрель, 1934 йыл».**

«Үҙем көтөүсе генә булһам да, илдәге хәлдәрҙе белеп торам. Гәзиттәр яҡын дуҫыма әйләнгән, мин шулар менән йәшәйем. Өйҙәге эштәрҙе үҙем генә башҡарам. Ҡустымды уларҙан бушаттым. Әйҙә, уҡый ғына бирһен. Көтөүҙе туҡтатып, утын-бесән ташып алыуға, колхоз идараһына саҡырттылар. Ниңә тиһегеҙме? Ауыл көтөүенә кеше табылыр, һин хәҙер егет булғанһың. Колхозға ла эш күрһәтергә кәрәк, тиҙәр.

Иртәгәһенә фермаға быҙау ҡарарға сыҡтым. Атайҙы алып киткәс тә, һаман да беҙҙе ҡыйырһытырға, колхоз эшенән бушатмаҫҡа итәләр, күрәһең. Әммә эштән кеше үлмәй ул. Ана, гәзиттәрҙә оло-оло түрәләрҙең, юғары урын биләгәндәрҙең халыҡ дошманы булыуы тураһында яҙалар. Ысын булһа, хәтәр бит! Минең атай менән Ҡасим ағай ниндәй “халыҡ дошмандары” булды икән? Улар хатта үҙҙәрен яҡлап бер һүҙ ҙә әйтә белмәне. Үҙҙәренең дошман

түгеллеген дә иҫбат итә алманылар. Был хаҡта уйлаһаң, аптырашҡа ҡалаһың. Бында минең генә баш етмәй. Шулай ҙа киләсәктә беҙҙең урамда ла байрам булыр әле. Мин шуға ышанам.

**11 ноябрь, 1936 йыл».**

“1937 йыл. Минең өсөн дә, илебеҙ өсөн дә хәтәр булды ул. Илебеҙҙә бик күп халыҡ дошмандарын фашланылар. Шуға ҡарамаҫтан, ауылда тормош үҙ яйы менән барыуын дауам итә. Һөйәләр, һөйөләләр, өйләнәләр. Һирәкләп булһа ла, айырылышыуҙары ла бар.

Ауылыбыҙҙа бер ҡыҙыҡ хәл дә булып алды әле. 17 йәшлек бер ҡыҙ күрше ауылдың бер егетенә йәбешеп сыҡты. Бер-береһен бик яратып йөрөгәндәр, тиҙәр. Был хәбәр ауыл халҡын зыҡ ҡуптарҙы. Берәүҙәр ҡыҙҙы яҡланы, икенселәр уны яманланы. Ауыл йәштәре ҡыҙ яҡлы булды. Шул ваҡиға тураһында шиғыр яҙғайным, ауыл йәштәре уны бәйет итеп йырлап йөрөнө. Кемдер ҡыҙҙың атаһына шиғырҙы мин сығарғанды еткергән, ул мине туҡмарға аңдып йөрөй башланы. Был хаҡта ауыл Советына еткерҙем. Теге ағайҙы саҡыртҡандар ҙа, ул егеткә тырнаҡ менән генә сиртһәң дә, төрмәгә ултыртасаҡбыҙ, тип ҡурҡытҡандар. Шулай итеп, саҡ ҙур бәләнән ҡотолоп ҡалдым.

Ҡышым быҙау ҡарап үтте. Мәктәп һәм ауыл китапханаһында мин уҡымаған китап ҡалманы шикелле. Ауылдарҙағы китапханалар бигерәк ярлы шул. Килгән һәр гәзит-журналды көтөп алам. Ул көн миңә байрам була. Кистәрен клубҡа шуларҙы уҡырға ғына барам. Шиғыр яҙыуҙы ла ташламаным, яҙған береһен район гәзитенә ебәреп торам. Оҙаҡ тотмайҙар, баҫып сығаралар. Шиғырҙарымды өлкә гәзитенә ебәрергә генә баҙнат итмәйем.

Һаман да ике йорттағы ауыр эштәр – минең елкәлә. Өйҙәге эштәрҙе хәҙер ҡустым да башҡара ала. Үҙем, әҙ генә буш ваҡытым булһа, Гөлнәзифәләргә йүгереп барам, эштәрен эшләшәм. Тик һөйләшеп ултырырға ғына ла барып сығам. Мин барып керһәм, Ғәлимә еңгә, берәй эш тапҡан булып, өйҙән сығып китә. Ә беҙ икәү сутырлашабыҙ ғына. Ул һүҙ тигәнең ҡайҙан сығып торалыр? Уға ла 14 йәш тулды бит инде. Яратыу тигәне шул буламы икән?

Быҙауҙарымды имен-аман ҡара ергә баҫтырҙым, бер генә быҙау ҙа үлмәне. Ауыл көтөүен алыу тураһында ауыҙ ҙа астырманылар. Ғәбделбарый бабайҙы ауыл Советына саҡырып, ауыл көтөүен алырға өгөтләп ҡарағандар. Ул: «Сафиулла менән бергә булһа, бер йыл көтөргә мөмкин булыр ине. Унһыҙ был эшкә ике аяғымдың береһен дә баҫмайым», – тип яуаплаған. Тик мине колхоз бирмәне, быҙауҙар урынына һыйыр көтөүенә ҡушып ҡуйҙылар. Шулай итеп, 16 йәш тулыр-тулмаҫтан колхоз эшенә ныҡлап егелдем. Быҙау ҡарауҙы Ғарифуллаға бирергә теләгәйнеләр, ҡаршы төштөм. Үҙем көтөүгә башты тыҡҡас та еткән. Ҡустым өй эштәрендә булһын, тинем. Артыҡ ныҡышманылар. Көтөү эше еңел түгел.

Мин – мин инде. Ни эшләйһең, өйрәнелгән баш. Ғаиләлә иң олоһомон. Ҡустыларҙы ҡарарға бурыслымын. Уларға мин атай урынында ҡалған кешемен. Атай тигәндәй, ҡыш көнө уның ҡайҙалығын һорап хат яҙғайным. «Мәжбүри хеҙмәт лагерында (йәғни төрмәлә була инде) үпкәһенә һалҡын тейҙереп үлде» тигән яҙыу алдым. Был турала әсәйемә лә, ҡустыларыма ла әйтмәнем. Әйҙә, атай иҫән, ҡайтасаҡ, тигән өмөт менән йәшәһендәр.

Шулай итеп, мин – фермала көтөүсе. Әсәйем менән Ғәлимә еңгәләр – шунда һауынсылар. Ғарифулла менән Гөлнәзифә лә һауын ваҡыттарында әсәйҙәргә ярҙам итәләр. Эшем эйәһе кеүек, шунда мәж килгән булалар. Колхоз көтөүендә йөрөү ҙә – ауыр эш. Ҡулға гәзит, китап бик һирәк эләгә, әммә, яйы сығыу менән, шиғыр сыймаҡларға керешәм. Улар район гәзитендә баҫыла тора. Уҡыйһы, махсус урта һәм юғары белем алаһы килә. Әлегә был хыялдарым күктәге йондоҙҙар кеүек бик бейектәләр.

«Өмөтһөҙ – шайтан» тигән әйтемгә ышанып йәшәйһе генә ҡала.

**15 май, 1937 йыл».**

“Көндәлекте ҡулға алырға ваҡыт етмәй ҙә ҡуя. Көн буйы колхоз һыйырҙары артынан сабыу еңелдән түгел. Исмаһам, һыбай көтөргә ат та бирмәйҙәр. Ҡустыларҙы бер аҙ аяҡҡа баҫтырғас, мотлаҡ уҡыясаҡмын. Сафиуллаға ғүмере буйына көтөүсе булырға тимәгән бит. Быйыл Ғарифулла ла, Гөлнәзифә лә етенсегә уҡырға бара. Улар ҙа белем буйынса мине ҡыуып етә инде. Киләсәктә уҙып та китерҙәр әле. Уҙһындар әйҙә, йәштәр шулай булырға тейеш.

Быйылғы йәй ғәҙәттәгесә үтте, хәтерҙә ҡалырлыҡ ваҡиғалар булманы шикелле. Көн артынан көн уҙа. Ифрат эҫе. Арып-талып ҡайтаһың да йығылаһың. Иртәгәһенә тағы ла шул эш. Яҡындарым, Гөлнәзифә генә миңә йәшәргә өмөт уята, ынтылыш тыуҙыра. Әммә Гөлнәзифә менән генә тейешенсә аңлашҡаныбыҙ юҡ. Үҙем дә ҡыҙыҡ: баҙнатһыҙ, үтә оялсан инде. Уйлай китһәң, 17 йәшлек егетмен дә инде хәҙер. Һаман Гөлнәзифәгә үҙ тойғоларым, уны яратыуым тураһында ауыҙ асып әйтә алғаным юҡ. Уға ла хәҙер 15 йәш тулды. Йә, яҙған булһа, бер аңлашырбыҙ әле. Былай ҙа ул мине яҡын итә һәм үҙ күрә һымаҡ.

**25 август, 1938 йыл».**

“Гөлнәзифә менән Ғарифулла ла ете класты тамамланы. Был улар өсөн һәм минең өсөн дә оло ҡыуаныс булды. Әсәйҙәрҙең шатланғанын күрһәгеҙ ине. Эйе, һәр кем үҙ яҡындарының белемле булыуына кинәнә, әлбиттә. Ҡустымды ҡотланым да кисен Гөлнәзифәләргә керҙем. Ғәҙәттәгесә, әсәһе, ул-был йомош тапҡан булып, сығып китте. Шунан файҙаланып, бар ҡыйыулығымды туплап, йөрәгемде астым да һалдым.

– Әллә мин яратмай тиһеңме? Һинһеҙ киләсәк тормошомдо күҙ

алдыма ла килтерә алмайым, – тип ебәрҙе Гөлнәзифәм. Шунда уны тәү ҡат ҡосаҡлап үптем. Ул бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Мин ниндәй бәхетле! Минең һөйгәнем бар, ул да мине ярата. Ошо үҙе генә лә оло бәхет түгелме ни?!

Әсәһе өйгә кергәс, Гөлнәзифә унан бер аҙ йөрөп килергә рөхсәт һораны. Ул өнһөҙ генә баш ҡаҡты. Икәүләп эргәләге тау битенә сығып ултырҙыҡ. Киләсәктәге бәхетле тормошобоҙ тураһында хыялландыҡ. Эх, ул – бәхетле киләсәк.

**10 июнь, 1939 йыл».**

“Донъя тигәндәре бигерәк тә болғансыҡ. Шул турала уйлаһаң, сәстәр үрә тора. Ысынлап та, һуғыш башланырмы икән? Миңә лә унда ҡатнашырға тура килерме? Фашистар башҡа илдәрҙе баҫып ала башланы. Улар был хәлгә ниңә тыныс ҡына ҡарайҙар һуң? Аңламайым. Бәлки, минең кеүек көтөүселәр аңламай торған эштер ул.

Гөлнәзифәне лә фермаға эшкә килтереп тыҡтылар. Ул йәш быҙауҙарҙы ҡарай. Икебеҙ ҙә бер урында эшләү, бер яҡтан, яҡшы, көн һайын бер-беребеҙҙе күреп торабыҙ. Ҡараштарыбыҙ менән булһа ла бер-беребеҙгә булған тойғоларыбыҙҙы белдерәбеҙ. Кәрәк булғанда, әсәйҙәребеҙгә лә ярҙам итәбеҙ. Бөтәбеҙ ҙә эштә булғас, ике өйҙәге эштәрҙе Ғарифулла башҡара. Уның уңғанлығына, бөтмөрлөгөнә һоҡланып туя алмайым. Эх, уны артабан уҡытырға ине! Киләһе йыл был турала берәй нәмә хәл итергә кәрәк булыр. Уның да үҙ тормошо, киләсәге булырға тейеш бит.

Тышта һалҡын көҙ. Быйыл да ҡар яумай аптырата. Ул ғына түгел, һалҡын, әсе ел өрөп ҡаңғырта. Бындай саҡтарҙа малдарҙы көтөүгә сығарыу – уларҙы ябыҡтыра ғына. Сығармаҫ инең, бесән кәмей. Яҙҙың нисек килерен алдан белеп булмай. Бына шундай донъя мәшәҡәттәре башты ҡайната.

**10 ноябрь, 1939 йыл».**

“Көн артынан көн үтеп кенә тора, 1940 йылға ла аяҡ баҫтыҡ. Был йыл да әллә ни ҡыуаныстар килтермәҫ кеүек. Алыҫ Көнсығышта һуғыш бөтөүгә, финдар менән алыш башланды. Уларға тағы нимә етмәйҙер инде, аңламаҫһың.

Мине, алдынғы көтөүсе тигән булып, комсомолға алдылар. Ыңғай ҙа, ҡаршы ла һүҙ әйтеп торманым, Хәҙер инде «халыҡ дошманы улы» тигән һүҙ бөттө. Уны хәтергә лә алманылар, шуныһына ҡыуандым. Ярай, уларса булһын. Ғарифулла менән Гөлнәзифәнең документтарын Белорет аръяғындағы Сермән педагогия техникумына ебәрергә уйлап йөрөй инем, был хаҡта әйткәс, Ғарифулла тешетырнағы менән ҡаршы төштө. “Мин бала-саға менән мәшәҡәтләнергә ҡыҙ кеше түгелмен”, – тип кенә ебәрҙе. Гөлнәзифәм дә: «Һине ташлап бер ҡайҙа ла китмәйем. Икәү бергә барһаҡ ҡына ризамын”, – тине. Шунан кәңәшләштек тә киләһе йыл икебеҙ бергә китергә

булдыҡ. Ғарифулла ҡустым да беҙҙе уҡырға ебәрергә ризалашты. “Мин ике донъяны ла ҡарармын, һеҙгә лә ярҙам итермен”, – тип үк ебәрҙе. Ни тиһәң дә, ҡустым егет ҡорона тулып килә шул.

**5 май, 1940 йыл».**

«Гөлнәзифә менән ҡыш буйына имтихандарға әҙерләндек. Бер яҡтан, бик шәп булды. Һөйгәнең менән эштә лә, эштән һуң да бергә булыуға ни етә! Әммә ваҡыт яғы ғына аҙыраҡ. Етмәһә, мәктәптә өйрәнгәндәр ҙә онотола башлаған. Ярай, был йәһәттән Гөлнәзифәнең башы йомро. Ул ярҙам итә.

Иртәгә – Май байрамы. Инде икебеҙгә лә документтар юлларға ваҡыт. Сермәнгә хат яҙып, педтехникумға уҡырға инеү шарттарын алдыҡ. Документтарҙы алдан ебәрмәҫкә, имтихан алдынан үҙебеҙ барғас ҡына тапшырырға ҡарар иттек. Ни тиһәң дә, ике баш шәберәк эшләй шул. Алла ярҙам бирһен инде беҙгә! Үҙебеҙгә үҙебеҙ шуны теләйбеҙ.

**30 апрель, 1941 йыл».**

“Хыялдар селпәрәмә килде, 22 июндә һуғыш башланды. Миңә 20 йәш, тәүгеләрҙән булып армияға аласаҡтар. Ә Гөлнәзифәм, һинһеҙ уҡырға бармаясаҡмын, тип ҡарышты ла ҡуйҙы.

Июль башы. Ауыл Советына саҡырып, районға хәрби комиссариатҡа барырға ҡағыҙ (повестка) тотторҙолар. Шулай итеп, көтөүсе Сафиулла һалдат Сафиуллаға әйләнәсәк. Хәрби комиссариатта энәһенән ебенә тиклем ныҡлап тикшерҙеләр. Теп-теүәл бер аҙнанан һалдатҡа китәһең, тинеләр. Ҡулға документ та тотторҙолар. Һин бер төрлө уйлайһың, хыялланаһың, тормош һине үҙенсә йөрөтә.

Минең һалдатҡа китәсәгемде бөтәһе лә ҡайғырып ҡаршы алды, бигерәк тә Гөлнәзифәм ут йотто.

– Һинһеҙ ни эшләрмен икән? Әллә һинең менән һуғышҡа китәйемме икән? – тип һораулы ҡарашын миңә төбәне.

– Иҫәркәйем! Ҡыҙҙарҙы һуғышҡа алмайҙар. Һуғыш – ирҙәр эше. Һине хеҙмәткә алған хәлдә лә, беҙ бергә була алмаясаҡбыҙ. Һине бөтөнләй икенсе хәрби часҡа ебәрәсәктәр. Әсәйеңде лә уйла, – тип уны кире дүндерергә тырыштым.

– Ни эшләйем һуң?

– Ни эшләйем, тип ни, минең ҡайтҡанымды көтәсәкһең. Миңә хаттар яҙасаҡһың. Мөмкин булғанса, ике донъяға ла ярҙам итәсәкһең.

– Улай ғына булмай. Сапый, әйҙә өйләнешәйек! Моғайын, әсәйҙәр ҡаршы килмәҫ. Һине ысын һалдатҡа булып көтөрмөн. Хоҙай насип итһә, бәлки, икәүләп ҡаршы алырбыҙ һине. Балаң менән.

Гөлнәзифәнең был ҡарары мине аптыратты ла ҡуйҙы. Икенсе яҡтан, үтә ҡыуандырҙы ла. Ир булып һуғышҡа китеү үҙе ни тора! Әсәйҙәр ҡаршы килмәне. Шул кистә үк кескәй табын ҡорҙоҡ. Ижап

уҡыттыҡ, Гөлнәзифәм менән тәүге ҡауышыу төнөн үткәрҙек. Эй тормош, тормош! Бөгөндән мин – ир кеше. Ҡатыным, буласаҡ бәләкәстәрем өсөн яуаплы кеше. Ул төндө, бәхет төнөн, йоҡламай үткәрҙек, хыялландыҡ, киләсәккә пландар ҡорҙоҡ. Иртәгәһен ауыл Советына барып, яҙылышып та ҡуйҙыҡ. Теп-теүәл бер аҙна ирле-ҡатынлы булып йәшәнек, бәхет диңгеҙендә йөҙҙөк. Иртәгә мин һуғышҡа китәм. Көндәлегемә лә һуңғы юлдарҙы яҙам.

Гөлнәзифәм! Донъя хәлен белеп булмай. Был көндәлек дәфтәремде һаҡла! Һуғыштан ҡайтҡас, икәүләп уҡырбыҙ. Әгәр ҡайта алмаһам, балама, ейәндәремә уҡырға бирерһең. Мин йырҙа йырланғанса: "Ейәндәрем уҡыр берәй саҡ", – тип һуғышҡа китәм. Күңелем тыныс. Үлергә ашҡынып бармайым, әммә алдағыһын Алла белә, тиҙәр бит.

Кисә Гөлнәзифәм менән, кейәү-кәләш булып, клубка киске уйынға барҙыҡ. Шунда мин үҙем сығарған түбәндәге йырымды йәштәр алдында йырланым. Бер нисә егет уны шунда уҡ ятлап та алды. Бергәләп ике-өс ҡат йырланыҡ. Ҡағыҙға ла күсереп алдылар. Бына ул йыр! Минең Гөлнәзифәмә арнап сығарған оло бүләгем ул.

## *Гөлнәзифә йыры*

*Иртә генә тороп ҡаршы сығам*
*Һинең һыуҙан ҡайтыр һуҡмаҡҡа.*
*Гөлнәзифә һылыуым,*
*Йөрөгән юлың*
*Үҙенә тарта мине һәр саҡта.*

*Ер йөҙөндә матур ҡыҙҙар бик күп.*
*Тик аҙҙыр ул һиндәй гүзәлдәр!*
*Гөлнәзифә һылыуым,*
*Йөрөгән юлың*
*Сәскә-гөлгә генә биҙәлгән.*

*Ғашиҡ булдым һиңә, һөйөүемдең*
*Ошо йырым булыр уҡаһы.*
*Гөлнәзифә һылыуым,*
*Йөрөгән юлың –*
*Минең мөхәббәтем һуҡмағы.*

Һау бул! Ҡыуанысым, бәхетем, шатлығым, өмөтөм минең!

**15 июль, 1941 йыл».**

**Ишмөхәмәт ШАРАПОВ ҡағыҙға күсерҙе.**

### Рәми Ғарипов көндәре

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл тулыуы айҡанлы үткәрелгән әҙәби-музыкаль кисә ысын мәғәнәһендә рух тантанаһы һәм һүҙ сәнғәте балҡышы төҫөн алды. Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитовтың тәбрикләү телмәренән һуң Рәми Ғариповтың ҡәләмдәштәре: БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай комитеты рәйесе, халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, халыҡ шағирҙары Ҡәҙим Аралбаев, Абдулхаҡ Игебаев, Марат Кәримов, Тимер Йософов һәм башҡалар мәртәбәле сығыштары менән, ә сәхнә таланттары сағыу программа менән кисәнең бәҫен күтәрҙе. Юбилейҙа Рәми Ғариповтың балалары, ейәнсәрҙәре, яҡташтары, йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашты, күргәҙмәләр эшләне, китап сауҙаһы ойошторолдо.

***

Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл тулыуға арнап, З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте уникаль китап-альбом (төҙөүселәре – Ҡ. Аралбай, И. Кинйәбулатов) баҫтырып сығарҙы. Нәшриәттең фирма магазинында ошо китаптың һәм Р. Ғариповтың «Көндәлектәр» йыйынтығының исем туйында нәшриәт директоры Зөфәр Тимербулатов, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, профессор Фирҙәүес Хисаметдинова, «Шоңҡар» журналының баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев, БДУ профессоры Тимерғәле Килмөхәмәтов, «Киске Өфө» гәзите мөхәррире Гөлфиә Янбаева, шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Хәсән Назар, Зөһрә Ҡотлогилдина сығыш яһаны.

Америка-башҡорт интер-колледжы уҡытыусыһы Линдси Пигейҙың ҡатнашыуы һәм Р. Ғариповтың шиғырын башҡортса уҡыуы ла күңелле күренеш булды. Шағирҙың улы, рәссам Азамат Ғарипов, ҡыҙы Гөлнара Ғарипова, ейәнсәре Рәмилә Ғарипова рәхмәт һүҙҙәре әйтте. Халыҡ йырсылары Әлфиә Юлсурина, Фәнүнә Сиражетдинова Р. Ғарипов шиғырҙарына яҙылған популяр йырҙар башҡарҙы.

***

Стәрлебаштың 1-се урта мәктәбендә Рәми Ғарипов юбилейына арналған «Шағир иленә сәйәхәт» исемле асыҡ дәрес-композиция уҙғарылды. Шағирҙар Риф Мифтахов, Рәмил Йәнбәк, прозаик Сабир Шәрипов ҡатнашҡан сараны Розалия Шәмсетдинова, Гөлнара Бәхтиәрова, Әлфиә Шәрипова һәм башҡа маҡтаулы уҡытыусылар ойошторҙо, унда райондың йәш таланттары ла йәлеп ителде.

### Ҡотлайбыҙ!

Башҡортостан яҙыусыларының 16 мартта үткән сираттан тыш XVI съезында Яҙыусылар союзының идара рәйесе вазифаһына Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, шағир һәм прозаик Риф Ғәлим улы Тойғонов (Тойғон) һайланды.

***

Әҙәби-мәҙәни йәмәғәтселек Салауат Юлаев ордены кавалеры, бер нисә маҡтаулы исем һәм премиялар лауреаты, филология фәндәре докторы, профессор, 30-ға яҡын шиғри, публицистик китаптар һәм монографиялар авторы Рәшит Шәкүрҙе 75 йәш тулыу уңайынан ҡотланы. Зәки Вәлиди исемендәге республика милли китапханаһында юбилярҙы редакциялар вәкилдәре, ижадташ дуҫтары ихлас тәбрикләһә, Нефтселәр мәҙәниәт һарайында үткән күркәм тантанала республика етәкселеге исеменән мәғариф министры Әлфис Ғаязов, Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Рафаэль Зинуров, БР элемтә һәм киң

коммуникациялар министры урынбаҫары Марат Ғәзизов, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, яҡташтары ихлас тәбрикләне. Сараны аһәңле йырҙар, дәртле бейеүҙәр, ихлас ҡотлауҙар биҙәне.

***

Күгәрсен районы  хакимиәте Зәйнәб Биишева исемендәге премияның яңы лауреаттарын тәбрикләне. Тел белгесе, ғалим, яҙыусы Рәшит Шәкүр, шағирә Әнисә Таһирова, Мораҡтағы тыуған яҡ тарихын өйрәнеү һәм Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһындағы З. Биишева музейҙарын төҙөү һәм биҙәү эштәрен башҡарған Анфиса менән Наил Шакировтарҙы,  башҡа ҡунаҡтарҙы Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылы Төйөмбәттә ҡаршыланылар. Район хакимиәте башлығы Фәрит Мусин яңы лауреаттарға маҡтаулы премия тапшырҙы. Әҙиптәр һәм рәссамдар Мәҡсүт ауылында, Мораҡтағы З. Биишева исемендәге гимназияла осрашыуҙар уҙғарҙы.

***

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры Башҡорт дәүләт университеты менән берлектә, йәш авторҙар ижадын үҫтереү маҡсатында, «Өмөтлө ҡәләм» драма әҫәрҙәре конкурсын ойошторҙо. Абруйлы жюри ағзалары республиканың төрлө юғары уҡыу йорттары студенттары авторлығындағы 21 пьесаны тикшерҙе. Беренсе урын билдәләнмәне, икенсе урынға БДУ студенттары Фирүзә Мәжитова, Гүзәл Шәрипова, Сюзанна Мирзоян лайыҡ булды.  Еңеүселәр театр директоры Хөрмәтулла Үтәшев һәм театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахмановтың ҡулынан иҫтәлекле бүләктәр алды.

***

Кушнарен ауыл хужалығы техникумының зооветеринария бүлексәһендә 35 йыл һабаҡ биргән Радик Әхмәтовтың «Эй, ағыла болот...» китабының исем туйы ойошторолдо. Презентацияла «Ағиҙел»  журналының баш мөхәррире Әмир Әминев, уның урынбаҫары Рәмил Йәнбәков, бүлек мөхәррире Сабир Шәрипов, районДың мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Флида Мөхәмәтйәнова, Әхмәт ауылынан шағирә, әҙәбиәт уҡытыусыһы Нәжибә Әминева һәм башҡалар ҡатнашты. Автор һәм ҡунаҡтар уҡыу йортоноң һәүәҫкәр артистары сығышын һәм музейын ҡараны.

«Ағиҙел»селәрҙе район хакимиәте башлығы урынбаҫары Илдар Ахунов ҡабул итте.

**«Хазина» – Бөрөлә**

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, шағирҙар Зөфәр Вәлит һәм Хисмәт Юлдашев Бөрө социаль-педагогия академияһы ректоры, профессор Салауат Усмановтың саҡырыуы буйынса академияның уҡыу-уҡытыу һәм ғилми эштәре менән танышты, мәшһүр яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина музейында булды һәм Р. Бикбаевтың «Хазина» поэмаһы буйынса театрлаштырылған спектаклен ҡараны.  Спектаклдең режиссеры – Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисткаһы, профессор Таңсулпан Бабичева. Тауышты ҡуйыусы – Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы, доцент Зимфира Хөсәйенова. Спектаклдә Мостай Кәрим исемендәге милли йәштәр театры артистары һәм Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенттары уйнай.

***

Башҡорт дәүләт университетында «Хәҙерге башҡорт филологияһының актуаль проблемалары һәм профессор Р.Н. Байымовтың ижади мираҫы» тигән темаға Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли (сит ил ғалимдары ла ҡатнашлығында) конференция уҙҙы. Пленар ултырышта республика етәкселегенең тәбрикнамәһен Р. Вахитова еткерһә, ректорат исеменән БДУ проректоры  В. Захаров сыҡты. Конференцияла докладтар менән БР Фәндәр академияһы академигы М. Зәйнуллин, БДУ профессоры, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы социаль һәм гуманитар фәндәр бүлегенең академик-сәркәтибе Ғ. Ҡунафин, профессорҙар Т. Килмөхәмәтов, Ә. Сөләймәнов, З. Шәрипова сығыш яһаны, йәмәғәт эшмәкәре Т. Сәғитов, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Р. Тойғонов, Ҡырмыҫҡалынан делегация етәксеһе Р. Исхаҡов йылы иҫтәлектәр менән уртаҡлашты. Күренекле ғалим һәм яҙыусының тормош иптәше Й. Байымова конференцияны ойоштороусыларға оло рәхмәтен еткерҙе. Шәреҡ әҙәбиәттәрен өйрәнеү, башҡорт прозаһын үҫтереү, башҡорт

һәм башҡа төрки әҙәбиәт ғилемен, фольклорын, телдәрен өйрәнеү мәсьәләләре буйынса секцияларҙа Төркиә, Ҡаҙағстан, Мәскәү, Төмән, Яҡут, Силәбе, Өфө, Стәрлетамаҡ, Сибай, Нефтекама, Бөрө вуздарының, Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдарының ғилми тикшеренеүҙәре тыңланды.

***

«Башҡортостан Республикаһының индустриаль мираҫы: барлыҡҡа килеүе, яңырыуы, бөгөнгө хәле» – Рәсәйҙә 2012 йылды «Тарих йылы» тип иғлан итеүгә бәйле Башҡорт дәүләт университетында үткән төбәк-ара конференцияның темаһы шундай.

РФ Мәғариф һәм фән министрлығы, БДУ, БР Фәндәр академияһы ойоштороған был сарала республикабыҙ һәм Свердловск өлкәһе ғалимдары, аспиранттар, студенттар ҡатнашты.

«Цивилизация тарихында тәү сиратта етештереү көстәре һәм етештереү мөнәсәбәттәре үҫеше тарихы урын ала. Үткәнде белмәй, уның һабаҡтарын анализламай тороп, киләсәккә юл ярыуы ауыр, – тине пленар ултырышты асып, БДУның фәнни эштәр буйынса проректоры Вадим Захаров. – Башҡортостандың өс быуатлыҡ тарихы сәнәғәт үҫеше менән тығыҙ бәйләнгән. Бөгөн ул Рәсәйҙең иҡтисади яҡтан ныҡ үҫешкән төбәктәре исемлегенә инә».

– Тарих фәне ҡатмарлы осор кисерә, – тине БР Фәндәр академияһының вице-президенты Мансур Әйүпов. – Башҡорт йылъяҙмаһын марксистик-ленинсы ҡалыптарға һалып ҡына яҙыу мөмкин түгел. Беҙҙең ғилми көстәр аҙ, шуға күрә бик күп йәш көстәр әҙерләргә кәрәк.

Фекеренә дәлил итеп, оратор 30-сы йылдар башында Мәскәүҙә, илдең федератив ҡоролошо тураһында документ ҡабул иткәндә, Башҡортостандан да вәкилдәр ҡатнашыуын, тарихтың был бите беҙҙең тарафтан бөтөнләй өйрәнелмәүен белдерҙе.

Рәсәй Фәндәр академияһы Урал бүлексәһенең Тарих һәм археология институты директоры, академик Вениамин Алексеев тау сәнәғәте тармаҡтары Башҡортостандың артабанғы иҡтисади һәм мәҙәни үҫешен формалаштырасағын билдәләне. Уның фекеренсә, республика донъя сәнәғәтенең айырылғыһыҙ мөһим өлөшө булып тора.

Пленар ултырышта академик Нияз Мәжитов, тарих фәндәре кандидаты Нәзир Ҡолбахтин һәм башҡалар Башҡортостандың индустриаль мираҫын өйрәнеүҙең төп проблемаларына, архитектура һәм мәҙәниәт ҡомартҡыларына төрлө яҡтан байҡау яһаны.

***

Күренекле шағир һәм драматург Рафаэль Сафиндың тыуыуына 80 йыл тулыу айҡанлы, Өфө ҡалаһының Ғафури урамында шағир ғүмеренең һуңғы йылдарын йәшәгән йортҡа иҫтәлекле таҡташ ҡуйылды. Кисен Башҡорт дәүләт академия драма театрында ҙур әҙәби-музыкаль кисә уҙҙы. Сараларҙа мәҙәниәт министрлығы вәкилдәре, театр эшмәкәрҙәре, әҙиптең замандаштары, ҡәләмдәштәре, яҡташтары сығыш яһаны.

Хәтер кисәләре Ҡыйғы районында ла үтте.

***

Яҙыусылар союзы Ҡырмыҫҡалы районындағы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Шәриф Биҡҡол йорт-музейҙарына ике тиҫтәнән ашыу әҙип өсөн экскурсия ойошторҙо.

2012 йылдың 1 апрелендә,
54-се йәшендә, Башҡортостан
Республикаһының мәғариф
министры урынбаҫары,
журналыбыҙҙың редколлегия
ағзаһы, баҫмабыҙҙың яҡын дуҫы
**АРТУР ШӘЙХЕТДИН улы СУРИН**
вафат булды.

Һоҡланғыс шәхес, ярҙамсыл иптәш, аҡыллы кәңәшсе Артур Шәйхетдин улы хаҡында яҡты иҫтәлек редакция хеҙмәткәрҙәренең, меңәрләгән уҡыусыларыбыҙҙың йөрәгендә һаҡланыр.

«Ағиҙел»селәр.